# Ағиҙел

Өфө,
ноябрь
2009

11 (1040)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Зилә Йәнбәкова, Әлфиә Махийәнова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү
буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.11. 2009. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 100 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0158.09.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в ГУП РБ «Уфимский полиграфкомбинат»
(450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2009 (11, 1040)**

# БЫЛ ҺАНДА:


ШИҒРИӘТ

**Рауил Шаммас.** Тарих битен асып… Ш и ғ ы р ҙ а р. ...........................5
**Радик Хәкимйән.** «Эй, был тормош!..» Ш и ғ ы р ҙ а р. ...................10
**Лилиә Һаҡмар.** Өфөмә йыр. Ш и ғ ы р ҙ а р. ...................................15

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Ишғәли Нурғәлиев.** Ҡарабаш турғай. Я ҙ м ы ш н а м ә. *Башы.* ......20
**Камил Зиганшин**. Көләс Непал тупрағында.
С ә й ә х ә т н а м ә. *Аҙағы.* ...............................................................64

*«Күңелемдә – донъя сере»*

«АҒИҘЕЛ» КОНКУРСЫ

**Зөлфирә Ҡарағужина.** Бикембәткә. Ш и ғ ы р ҙ а р. .......................81
**Рита Хәсәнова**. Юғалтма. Ш и ғ ы р ҙ а р. .....................................83

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Әнғәм Хәбиров**. Яуланған үрҙәр баһаһы *(Нәжибә Әминева шиғриәтенә бер ҡараш)* ..................................................................85

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Ғәли Ибраһимов.** Кинйә. Т а р и х и р о м а н. III китап.
Бүгәсәү батша һанаты. *Дауамы.* ....................................................92

ПУБЛИЦИСТИКА

**Мәхмүт Хужин.** Насар ғәҙәт – төҫ түгел. .......................................146

РЕСПУБЛИКАНЫҢ ЮҒАРЫ УҠЫУ ЙОРТТАРЫНДА

*Башҡорт дәүләт университетына – 100 йыл*

**Марат Зәйнуллин.** Беҙ – бәхетле халыҡ. ......................................155
**Рәмзиә Бикәнәсова**. Университеттың беренсе проректоры. .......162
**Зәки Әлибаев.** Ғалим. Етәксе. Педагог. ........................................173
**Илшат Янбаев.** Фән һәм әҙәбиәт юлында. ..................................175

ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ

**Ильяс Вәлиев.** Мостай Кәрим ижадында тәбиғәт ........................179

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Равиль Шаммас, Радик Хакимьян, Лилия Сакмар** *(стихи).*

ПРОЗА

**И. Нургалиев.** Воробушка моя *(повесть). Начало.*
**К. Зиганшин**. В солнечном Непале *(записки путешественника). Окончание.*

КОНКУРС "АГИДЕЛИ"

*«В душе – тайна мира»*
**З. Карагужина, Р. Хасанова** *(стихи).*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**А. Хабиров.** К непокоренным высотам *(о творчестве поэтессы Н. Аминевой).*

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Г. Ибрагимов.** Кинзя. Послы Пугачева *(исторический роман. III книга). Продолжение.*

ПУБЛИЦИСТИКА

**М. Хужин.** Дурная привычка нам не чета.

***В вузах Республики***

***К 100-летию БГУ***

**М. Зайнуллин.** Мы – счастливый народ.
**Р. Биканачева.** Первый проректор университета.
**З. Алибаев.** Ученый. Руководитель. Педагог.
**И. Янбаев.** Тернистые пути науки и литературы.

ЛИЦА ДРУЗЕЙ

**И. Валиев.** Краски природы в творчестве М. Карима.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтер — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Рауил**
**ШАММАС**

## Тарих битен асып...

*«Икмәк, икмәк» тиеп ас көйөнсә*
*Йоҡлап киткән сабый саҡтарым*
*Иҫкә төшә икмәк күргән һайын,*
*Тарих битен ҡуям аҡтарып.*

*Күҙ алдыма баҫа ҡатҡан күлдәк,*
*Ҡатҡан итек кейгән игенсе —*
*Бөгөн таңдан тороп ҡара ергә*
*Йәшәү өсөн орлоҡ һибеүсе.*

*Оноттолар уны,*
*Һирәк-мирәк*
*Яҙын-көҙөн иҫкә алалар.*
*Ҡайҙа икмәккә һан?!*
*Конфет һурып*
*Йоҡлап китә бөгөн балалар.*

*Ҡатҡан икмәктәрҙе арба менән*
*Сүплектәргә түгә ҡалалар.*
*Аптырап китеп хатта, был күренеште*
*Күҙәтәләр ала ҡарғалар.*

*Ҡатҡан күлдәк, ҡатҡан итек кейгән*
*Игенселәр көн-төн тир түгә...*
*Йыуанайған ҡала бисәләре*
*Салбар ярата алмай интегә.*

---

*Рауил Шаммас (Рауил Сәхиулла улы Шаммасов) 1930 йылдың 9 ноябрендә Стәрлебаш районы Хәлекәй ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Байтаҡ шиғыр һәм проза китаптары авторы.*

*Рауил Шаммас — Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

*Ризыҡты уйлау ҡайҙа?!*
*Икмәк осһоҙ.*
*Оноттолар уны кешеләр.*
*Ҡатҡан итек кейгән игенселәр*
*Тир-ҡан ҡушып өйә көшөлдәр.*

*Алдынъылар, ана, бүләк ала*
*Баш ҡаланың мәрмәр залында.*
*Маҡтап һайрай артист, ъалим, түрә*
*Оло ил хужаһы алдында.*

*Ул һайраусы йөҙҙәр араһында*
*Бармы икән әлеге игенсе?*
*Бар икән дә — башы еткән кемдең —*
*Саҡырыъандар берҙе, икене.*

*Һайрамайҙар улар, тик уйлайҙар:*
*«Нисек шытар икән орлоҡтар?»*
*Татлы ризыҡ ашап ләззәтләнгән*
*Кешеләр, һеҙҙә, бәлки, оят бар?!*

*Ил туйҙырыъан ирҙе оноттоъоҙ.*
*Оноттоъоҙ икмәк ҡәҙерен.*
*Тарих битен асып аҡтарам да,*
*Әрнеп ҡуя йөрәк-бәъерем.*

## *Йәшәнем, тип...*

*Тау-таштарҙы ярып сыҡҡан*
*Шишмә булып яралһам,*
*Ете быуын ата-бабам*
*Затын һаҡлап баралһам;*

*Рухи шишмәм һуъаралһа*
*Халҡым күңеле баҡсаһын,*
*Еңә алһам замананың*
*Әҙәм һатыр аҡсаһын;*

*Намыҫ тигән оло аңды*
*Һаҡлаһам шул яуыздан,*
*Арындырһам кешеләрҙе*
*Мәкер сәскән ауыҙҙан;*

*Эҙҙәремдә үҫеп ҡалһа*
*Шифалы гөл-үләндәр,*
*Ижадымды яҡын күрһә*
*Шиъриәтте һөйгәндәр; —*

*Мин йәшәнем, тип әйтермен.*
*Йәшәү — сикһеҙ бәхет ул.*
*Ғүмер тигән батшалыҡта*
*Нур өләшер тәхет ул.*

## *Утын өҫтә...*

*Ҡартлыҡ, килдем, тиһең!*
*Юҡ, килмәй тор, —*
*Ғәфү ит, бөгөн һиңә бәйләнәм.*
*Бөтә хазинамды иңгә һалып*
*Йәшлегемә ҡайтып әйләнәм.*
*Минең йәшлек*
*Күндерәк буйын буйлап,*
*Оҙон сыбыртҡыһын шартлатып,*
*Көндөҙ көтөү көтә,*
*Ә кистәрен*
*Ҡыҙҙар бейетә, гармун һайратып.*

*Минең йәшлек Һаҡмар һыуы аша*
*Күтәрелеп Һабыр тауына,*
*Сабыйҙарға һабаҡ биреп йөрөй —*
*Ниҙер етә шундай сағыма.*

*Яңылышаһың, тиһең, килдем, тиһең,*
*Зинһар, тиһең, мине ҡабул ит.*
*Ғүмер буйы үҙең көтөп алған,*
*Килә торған шул мин — ҡартлыҡ бит.*

*Һин бейеткән ҡыҙҙар әбей инде,*
*Ейәнсәре бәпәй бәүетә.*
*Ҡартлығың бит матур, әбейең сибәр,*
*Ундай ҡартлыҡтарға ни етә!*

*Дөрөҫтөр һүҙең.*
*Барыбер, әй,*
*Йәшлектән бит килмәй китәһе.*
*Киске шәфәҡтәргә ҡарағанда,*
*Ҡәҙерлерәк көндөң иртәһе.*

*Рәхәтләнеп эшлә, түк тиреңде,*
*Сафландырып ғәзиз ереңде.*
*Уйлама ла хатта,*
*Һанлама ла*
*Ҡартлығыңда килер сиреңде.*

*Уйна, йырла, һикер, дыула, бейе —*
*Сәскә атһын йәшлек гөлдәрең.*
*Гармуныңдың телен бер ас әле,*
*Һайрат әле йәшлек көйҙәрен...*

*Шул ваҡытта мине һиҫкәндерә*
*Бер сабыйҙың наҙлы тауышы:*
*«Ҡартатай, — ти, — бер аҙ ял итеп ал...»*
*Эй, ғүмеркәй, ғүмер ағышы!*

*Ейәнем бит әйтә икән...*
*Тимәк, ҡартлыҡ*
*Килгән икән...*
*Ни хәл итәһең.*
*Ни арала кисем алмаштырған*
*Йырлы, нурлы көнөм иртәһен.*
*Ғәфү, ҡартлыҡ, бер аҙ шашып киттем,*
*Уйым барып килде йәш саҡҡа.*
*Тик, ҡартлығым, ашығып китә күрмә,*
*Утын өҫтә яныр усаҡҡа.*

## Таң һағышы

*Бөгөн таңда*
*Мин ғәжәпкә ҡалдым*
*Шишмә сылтырағанын ишетеп,*
*Шишмә моңо зыңлай тәҙрәләрҙә,*
*Шишмә шаҡый бүлмәм ишеген.*

*Ышанырһыңмы,*
*Бынау ҡышҡы көндә*
*Сылтыраймы һүң инде шишмәләр?*
*Гүйә, бер ҡыҙ бейей,*
*Тәңкәләре*
*Сылтырашып түгелеп китәләр.*

*Шишмә сылтырай.*
*Уның сылтырауҙары*
*Оҡшамаған башҡа шишмәгә.*
*Ҡушҡайыным был бит,*
*Миңә өндәшә!*
*Күҙҙе асайыммы, нишләргә?*

*Мин йоҡола, буғай.*
*Уянып ҡуйһам,*
*Өҙөлөп ҡалыр һымаҡ татлы моң.*
*Күкрәгемде бәреп сығыр булып*
*Йөрәк тибә, тибә атлығып.*

*Күҙҙе астым,*
*Бары ла шымып ҡалды.*
*Аһ, юғалттым шишмәм тауышын.*
*Шишмә булып минең ҡолағымда*
*Яңғыраған икән һағышым.*

## Борсомағыҙ...

*Тегеләй бул, былайыраҡ бул, тип*
*Борсомағыҙ минең йәндәремде.*
*Башҡаларҙа булған сифаттарҙан,*
*Башҡа күптәр үткән һуҡмаҡтарҙан*
*Эҙләмәгеҙ минең ғәмдәремде.*
*Тик әйткәнсә генә йәшәй китһәм,*
*Үҙемсәнән, дуҫтар, ниҙәр ҡалыр.*

*Үтелгән дә, алда үтәһе лә —*
*Үҙемдеке булһын һәммәһе лә,*
*Булһа ла ул ауыр, мең ҡат ауыр.*
*Тик йәшәүем яҡты эҙ ҡалдырһын*
*Яҡтылыҡты һөйгән еркәйемә.*
*Кәрәк түгел миңә һис тә ҙур дан,*
*Үҙем киткәс, әйтһен хатта дошман:*
*«Йәм өҫтәне, — тиеп, — ер йәменә».*

## Һандуғас та белә...

*«Ваучер» тип ил байлығын урланылар.*
*Бер зат үпты, ҡармап алды*
*Урманды ла.*
*«Минеке, — ти, — мин законлы*
*Урланым, — ти, —*
*Һәр бер ағас тамырында*
*Тырнағым», — ти.*
*Күпме түрә быны күрә,*
*Быны белә—*
*Бер ни ҡылмай,*
*Ә һандуғас*
*Шунан көлә:*
*— Сут-сут-сут-сут,*
*Сутла-сутла, аҡса таҫла,*
*Эй, бай әҙәм,*
*Һинең кеҫәк ҡап ҡорһаҡҡа*
*Моңом әрәм...»*
*Ҡош һанламай әфәнденең*
*Урман сиген.*
*Булды ни ҙә, булманы ни*
*Аҡса-бигең.*
*Ул урманды ҡалдырҙы ла*
*Осоп китте.*
*Бер ярлының йорт-ҡыуағын*
*Яҡын итте.*

## Йәй эҙләйем

*Ғүмер атлай елберҙәтеп*
*Көҙҙөң аҫыл шәлдәрен.*
*Күңел һаҡлай бик ҡәҙерләп*
*Яҙ-йәйҙәрҙең йәмдәрен.*

*Көҙгө аҫыл шәл урала*
*Һинең муйындарыңа.*
*Күңел керә яҙ-йәй эҙләп*
*Һинең ҡуйындарыңа.*

*Елберҙәһен көҙгө шәлдәр —*
*Һис үпкәм юҡ көҙҙәргә.*
*Беҙҙең йән бит яратылған*
*Көҙҙән йәйҙе эҙләргә.*



**Радик**
## ХӘКИМЙӘН

# ”ЭЙ, БЫЛ ТОРМОШ!..”

## *Минең яҙмыш*

*Эй, был тормош!.. Бер ҡараһаң — алдын,*
*Бер ҡараһаң, артын күрһәтә.*
*Селпәрәмә килә күп ҡиммәттәр,*
*Күпме һынау ала, киҫәтә!*

*Ғүмерем буйы изге маҡсатыма,*
*Тау-таштарҙы ярып, мин барҙым,*
*Ихтыярым көслө булғандыр шул —*
*Офоҡтарға ҡарап юл һалдым.*

*Ил хәстәре булды һәр саҡ йәндә,*
*Аҙмы йөктәр тарттым иңемдә,*
*Бар көсөмдө, йөрәк ялҡынымды*
*Бүләк иттем ғәзиз еремә.*

*Кешеләргә шатлыҡ, нур өләштем,*
*Һикәлтәле, урау юл үттем.*
*Ярһыу йәнем, йөрәк утым менән*
*Был донъяның боҙон ираттем.*

*Тәбиғәттән, моңло ҡоштарымдан*
*Күпме матур сихри йыр оттом,*
*Йыр-шоңҡарым менән кешеләрҙең*
*Күңелдәрен наҙлап йылыттым.*

*... Бөгөн тормош, тетрәнеүҙәр аша,*
*Кинәт ҡаршы яҡҡа боролдо,*
*Яҙмышыбыҙ хәтерләтә һымаҡ*
*Сәскәләрһеҙ ҡалған болондо!*

---

*Радик Хәкимйән 1941 йылда Үрге Ҡыйғы ауылында тыуған. Совет, партия, хужалыҡ органдарында эшләне. Яҙыусылар союзы ағзаһы. Күп популяр йыр текстары авторы. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

*Күгебеҙҙе болот ҡапланымы —*
*Ай-йондоҙҙар тоноҡ күренә,*
*«Ҡыраҕай баҙар» бәкәлдәргә һуҕа,*
*Йәшәүгә дәрт әллә һүрелә?!*

*Ғәҙелһеҙлек тулы был заманда,*
*Борсоу-мәшәҡәттәр етерлек,*
*Кеше ҡәҙерҙәре кәмей бара,*
*Шуҕа ҡайсаҡ һуштар китерлек!*

*Бөгөн тормош ҡырыҫ, ҡаршылыҡлы,*
*Кемдер хуплай, кемдер зарлана.*
*Йәнде телә меңә-мең төрлө һорау:*
*Ниндәй булыр килер замана?!*

## Эй, тыуҕан ер

*Ҡала шауы ялыҡтырҕан инде,*
*Күңел тарта тыуҕан яҡтарҕа.*
*Ҡалала бит киңлек, иркенлек юҡ,*
*Тын ҡыҫыла, янам уттарҙа!*

*Яҡташтарым ни хәлдәрҙә икән,*
*Уңҕан микән быйыл игендәр?*
*Күпме гөлдәр, һөйөү алмаларын*
*Алып ҡайтҡан икән килендәр?*

*Тыуҕан яҡты һаҕынып ҡайттым әле,*
*Йәнгә шифа ауыл һауаһы,*
*Ана, ҡоштар сихри моңдар һуҙа,*
*Мин һаман шул ерҙең балаһы!*

*Бында миңә һәр бер сәскә таныш,*
*Ҡайындары, талы, имәне;*
*Һәр һуҡмаҡта аяҡ эҙем ҡалҕан,*
*Сәләм бирә серҙәш тирәгем.*

*Тәбиғәттең бөтә гүзәллеге*
*Сихри көҙгө — Әйҙә саҕыла.*
*Изге алтын бишегемдә генә*
*Йәндә ҡояш, йондоҙ ҡабына!*

*Ярҕа баҫып оҙаҡ ҡарап торҙом*
*Әй һыуының ярһыу аҕышын,*
*Гүйә, шул саҡ ишетелде кеүек*
*Йыраҡ бала саҡтың тауышы.*

*Услап-услап шишмә һыуын эстем,*
*Тынысланһын, тиеп, йөрәгем,*
*Әрәмәне, туҕайҙарҙы гиҙҙем,*
*Ауыҙ иттем емеш-еләген.*

*Яҡташтарым бигерәк тырыш инде,*
*Өлгөргәндәр нисек барыһына:*
*Бесәндәре әҙер, баҫыу буйлап*
*Комбайндар елә ҡаршыға!*

*... Эй, тыуған ер! Тоғро яҡташтарым,*
*Һеҙҙең ҡөҙрәт мәңге һүнмәһен,*
*Һеҙгә ҡайтыр юлды бер ҡасан да*
*Ел-дауылдар ғына өҙмәһен!*

## Тайҙар саба

*Болондарҙа ярһыу тайҙар саба,*
*Наҙлап ҡына иҫә таң еле, —*
*Ошо тайҙар дәртле йәшлегемә,*
*Гүйә, алып ҡайттылар мине.*

*Болондарҙа ярһыу тайҙар саба,*
*Ҡыңғыраүҙар сыңы ҡолаҡта.*
*Әйтерһең дә, етеҙ йәш саҡтарым*
*Елеп үтеп китте шул саҡта.*

*Ярһыу тайҙар, дауыл-ел уйнатып,*
*Тояҡтарҙан уттар осорҙо,*
*Көмөш ялҡайҙарын емелдәтеп,*
*Ни ҡәҙәре шатлыҡ эсерҙе.*

*Болондарҙан тайҙар сабып үтте,*
*Көс-дәрт алдым ярһыу тайҙарҙан.*
*Бар донъямды онотоп, ҡанатланып*
*Урап ҡайттым әллә ҡайҙарҙан?!*

*Ниҙер эҙләп, йыраҡ офоҡтарға*
*Кешнәй-кешнәй сапты тайҙарым.*
*Минең инде көҙөм етһә лә бит,*
*Йәндә атты йәшлек таңдарым!*

## Менәһе бар үрҙәргә...

*Йөрөтә, тиҙәр бит, кешене*
*Ашайһы шул ризығы.*
*Юлда йөрөгән — күпте күрә,*
*Арта маңлай һыҙығы.*

*Донъя йөгөн байтаҡ тарттым,*
*Тәҡдир аҙмы һынаны?*
*Офоҡтарға артылғанда,*
*Ярай, рухым һынманы!*

*Ҡырағай заман! Аҙмы инде*
*Әрнетте ялғандарың,*
*Тетрәндерҙе, йәнде өттө*
*Халыҡты алдағаның!*

*Аҡ хыялдар, яҡты уйҙар*
*Өйөрмәлә юғалды.*
*Беҙҙең бәхеттәрҙе кинәт*
*Кемдәр икән урланы?!*

*Сәстәремә ҡарҙар ятты,*
*Иңбашыма — бураны.*
*Әллә ҡырыҫ, һалҡын заман*
*Аҡылын ул юйғанмы?!*

*Һәр көн һайын арта бара*
*Маңлайымда һыҙығым.*
*Өмөтөм әле һүнмәгән,*
*Күпме ҡалған ризығым?!*

*... Хәтәр замандың йөктәре*
*Әле һаман иңдәрҙә.*
*Әрнеп, һыҙлап атлап барам:*
*Менәһе бар үрҙәргә!*

## Донъя серле

*Был донъяны аңлап бөтмәҫлек шул,*
*Елеп-сабып ғүмер үтһә лә,*
*Ҡеше һис тә йәшәүҙәрҙән туймай,*
*Йәйҙәр үтеп, көҙҙәр етһә лә.*

*Был донъяны аңлап бөтмәҫлек шул,*
*Янып-янып йөрәк талһа ла,*
*Ғүмер ҡапҡалары ябылырға*
*Саҡ-саҡ ҡына ара ҡалһа ла.*

*Был донъяны аңлап бөтмәҫлек шул,*
*Үтелгән юл дөрөҫ, хаҡ һымаҡ.*
*Заманалар киҫкен үҙгәрһә лә,*
*Тыуар көндәр булыр аҡ һымаҡ!*

*Был донъяны аңлап бөтмәҫлек шул,*
*Мәңгелек серҙер ул, моғайын.*
*Шул серҙәрҙе сисеп ғүмер үтә,*
*Дөрөҫ яуап табыу бик ҡыйын...*

## Ваҡыт

*Ваҡыт саба, Ваҡыт аға,*
*Әйтерһең дә, ағым һыу.*
*Эшләнмәгән эштәр ҡала,*
*Шуныһы бер аҙ яманһыу!*

*Туҡтатып та булмай уны,*
*Йүгәнләп тә ҡабатлап.*
*Ваҡыт елдәй елә генә*
*Сәғәтләп һәм минутлап.*

*Ваҡыт — дуҫ та, дошман да ул,*
*Ваҡыт төҙөй, емерә.*
*Ваҡыт — яра, Ваҡыт — дауа,*
*Ваҡыт оса, елдерә.*

*Ашығабыҙ, ашҡынабыҙ,*
*Мәшәҡәттәр һис бөтмәй,*
*Мәңгегә килгән кеүекбеҙ:*
*Донъя етмәй, мал етмәй.*

*Ваҡыт бирә, Ваҡыт ала*
*Күп нәмәне донъяла.*
*Һоҡланып та өлгөрмәйбеҙ,—*
*Күҙгә ҡояш йылмая.*

*... Барыһына — Ваҡыт хужа,*
*Ғүмер уҙа — һиҙелмәй.*
*Мәңгелеккә күскәс инде,*
*Ваҡыт барын тигеҙләй...*

## Йырың ҡалһа...

*Мин ашыҡтым бер ғүмерҙә*
*Ике ғүмер йәшәргә,*
*Был тормошта тура килде*
*Йәшен булып йәшнәргә!*

*Күтәрҙем йөктөң ауырын,*
*Тарттым бер нисә арба,*
*Эш һәм йыр тип янып-көйөп*
*Ғүмерем үтеп бара.*

*Арыу-талыуҙы белмәнем,*
*Өлгөрөргә тырыштым.*
*Аҙмы һынауҙарын уҙҙым*
*Мәшәҡәтле тормоштоң?!*

*Нисек кенә йәшәһәң дә,*
*Ғүмер барыбер үтә;*
*Ерҙә кем генә булһаң да,*
*Һуңғы юл беҙҙе көтә.*

*Аҡыл менән аңлаһам да,*
*Күңел әммә моңая.*
*Бәхет бит ул — үҙеңдән һуң*
*Йырың ҡалһа донъяла!*



Лилиә
ҺАҠМАР

## Өфөмә йыр

*Айҡала, сайҡала Ағиҙел буйында*
*Аҡ болот елкәнле баш ҡала.*
*Алыҫтан саҡыра яҡтыға, яҡшыға*
*Башҡортом ҡуҙҙге — аҡ ҡала.*

*Бер кемдән еңелмәҫ саф күңел халҡы бар*
*Өфөмдә һаҡларлыҡ, яҡларлыҡ.*
*Рәсәйҙең иң нурлы, йондоҙло ҡалаһы —*
*Даны бар һәр кемгә маҡтарлыҡ.*

*Ағиҙел, Ҡариҙел йылғаһын буйлаған*
*Сал карап, Салауат төйҙге,*
*Һәр йортоң, һәр ағас, һәр урам, һуҡмағың —*
*Бер тарих һоҡланып һөйләрлек.*

*Гел шулай шат йәшә, баш ҡалам, салт ҡалам,*
*Йырсылар, шағирҙар төйҙге.*
*Эй, Өфөм, мәңгегә, быуаттан-быуатҡа*
*Ҡал булып яҡшылыҡ ҡуҙҙге.*

## Талма хыял

*Талма, йөрәк, минең әле*
*Осланмаған эштәрем күп,*
*Хәстәрем күп.*

---

*Лилиә Һаҡмар (Лилиә Ҡәйепова) 1962 йылдың 3 октябрендә Баймаҡ районы Йомаш ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Бер нисә шиғри китап авторы. БР Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Талма, күңел, донъя йәмен*
*Күреп, ҡарап туймағанмын,*
*Уйланғанмын...*

*Талма, ҡулым, биҙәлмәгән*
*Семәрҙәрем, нағышым бар,*
*Табышым бар.*

*Талма, йәнем, иҙерәтеп*
*Арыуымды алыр төндәр*
*Әкиәт һөйләр...*

*Талма, хыял, йәтим итмә,*
*Осор мәлдә атлап китмә,*
*Ташлап китмә!*

## Һағындым

*Япраҡтарын ҡойған урманыма*
*Сәскә еле булып ингән инең.*
*Һағындым да ҡуйҙым әле һине,*
*Бер ҙә уйламаҫмын тигән инем.*

*Ярғыланып ҡатҡан олоноma*
*Һут йүгерҙе наҙлы ҡарашыңдан,*
*Арығайным инде, алйығайным*
*Яратылыу, йәнә яратыуҙан.*

*һағындым да ҡуйҙым.*
*Һары көҙҙә*
*Яҙ килтерер һары һандуғасты.*
*Бөрөләрем япраҡ ярмаҡ тағын —*
*Һәр бер күҙәнәккә наҙ тулғастын.*

## Бәпес-шиғыр

*Өр-яңы бер бәпес-шиғыр тыуҙы!*
*Ете ағзаһы ла теп-теүәл.*
*Ҡарашында — зәңгәр йыһан ғына,*
*Йөрәгендә усаҡ елпенә.*

*Әсәһе — мин.*
*Атаһы — һин уның.*
*Боҙ менән Ут.*
*Ер һәм Һыу кеүек.*
*Уй талпынған саҡта бәбәгемдә*
*Киткән инең гөлгә хис өрөп.*

*Һеркәләнде күңел сәскәләре,*
*Тумаланды орлоҡ ҡыяҡта.*
*Һин инең бит йоҡомһорап торған*
*Хистәремде килеп уятҡан.*

*Өр-яңы был шиғыр — беҙҙең бәпес.*
*Ғүмер итһен оҙаҡ, бәхетле.*
*Йыһан булһын, әйҙә, уның өйө,*
*Ҡояш булһын алтын тәхете.*

## Керән һәм бал

*“Яңы заман килә, уҡыу кәрәк,*
*Элеккесә уйлау — торғонлоҡ.”*
*Шулай тигән инем юлдашыма,*
*Яуабынан — керән һоғондом.*
*Ауыҙ эсе уттай янғанда ла,*
*Ул керәнде тышҡа бөркмәнем...*
*Мине: “Иҫәр, — тиеп нарыҡланың, —*
*Хыялыйҙан аҡыл көтмәйем!”*
*Торғонлоҡтоң һаҙ еҫенән микән,*
*Керәндәнме күҙем йәшләнде,*
*Бер урында һаман тапанабыҙ,*
*Урабыҙҙыр, ахыры, сәскәнде.*
*Бөркөт булып саңҡылдаған өйрәк,*
*Күл өйрәге — һинең күңелең,*
*Белмәйһең дә: кәмә менән генә*
*Даръя иңләү мөмкин түгелен.*
*Ҡал күлеңдә, башҡа бер һүҙем юҡ,*
*Үпкәләргә түгел иҫәбем,*
*Ни эшләрһең, киләсәгең тыҡтап,*
*Иртәнсәк гел тыуһа кисәгең.*
*Ҡал күлеңдә, миңә үпкәләмә,*
*Йәшендәргә, өҫкә атылам,*
*Яңғыҙыма, беләм, ауыр булыр*
*Менеү күктең ете ҡатына.*
*Унда мине яҡты хыял көтә,*
*Мең үҙгәреш, мең-мең яңылыҡ,*
*Күңел ҡапҡаларын белем өсөн*
*Асҡан дуҫтарым да табылыр.*
*Яңы заман килә, уҡыу кәрәк,*
*Элеккесә йәшәү —ялҡытты,*
*Аң-белемгә һыуһаған был йәнем*
*Керән эҫелеген баҫыр өсөн*
*Хыял тигән татлы бал ҡапты!*

## Сәләм килгән

*Алыҫтарҙан сәләм килгән,*
*Етеҙ елдәй елеп-елгән,*
*Әллә “хәтеремдә” тигән,*
*Әллә “һине көтәм!” тигән.*

*Сәләм килгән.*
*Һинән?*
*Һинән!*
*Юлдар үтеп. Йылдар һүтеп.*
*Бына-бына таралырҙай*
*Беҙҙе тоташтырған күпер.*

*Йылдар туты — был күперҙә,*
*Абайламай баҫа күрмә,*
*Ярай әле, үҙең түгел,*
*Ә бары тик сәләм килгән.*

*Яуап көтә булыр елдәр*
*Сәләмеңә яуабымды,*
*Уңалманы, йыуанманы —*
*Йөрәгем тик яраланды...*

*Йәш көйөнсә күҙ алдымда*
*Мәңгегә ҡал, мөхәббәтем.*
*Сәләмеңде, үпкәләмә,*
*Һин кире ал, мөхәббәтем.*

*Сәләм генә ебәрептәр*
*Һөйөүемде аңлаталмам,*
*Өнһөҙ һағышымды яҙам*
*Яуап елдәр ҡанатына.*

## *Һыбай саба*

*Толпарына атланған да*
*Һыбай саба бер түрә,*
*Ярыш ҡыҙа, аттар уҙа,*
*Еңеүсене кем күрә?*
*Түрә ҡосағында сәскә —*
*Еңеүсегә бүләктәр,*
*Аты шәп, тип бер кем әйтмәй,*
*Эй маҡтайҙар: "Түрә шәп!"*

*Ә ат күндәм, саба ғына...*
*Түрә уйлай: мин етеҙ!*
*Мин һәләтле, мин егәрле,*
*Ҡарамағыҙ һис тә мине*
*Йәйәүлегә тиң итеп.*

*Аҡ күбеккә батты толпар,*
*Ҡан килә танауынан,*
*Әрнеүҙәре кибеп ҡатты*
*Сыбыртҡы яраһына,*
*Һәм һөрлөктө...*
*Атһыҙ түрә*
*Бөгөн йәйәү көн күрә.*
*Ат ҡәҙерен белмәүсегә*
*Кем бөгөн сәскә бирә?*

## *Хыял менән һөйләшеү*

*Гел саҡыр һин мине,*
*Ымһындыр ҙа*
*Ғәйрәт өҫтә ҡурҡаҡ күңелгә,*

*Селпәрәмә килгән өмөттәргә*
*Күпме һағыш, күз-йәш түгелгән.*
*Бөгөнгөмә усаҡ яғыр өсөн*
*Осҡон ғына ҡалдыр, йәлләмә!*
*Сасҡау буран кеүек әрнеүҙәрем*
*Тындарымды ҡура йәйҙәрҙә.*
*Үткәндәрем ҡалһын үткәндәрҙә,*
*Бөртөгө лә кире ҡайтмаһын!*
*Ә һин йәшен күңелем төпкөлөнә,*
*Бер кем, бер саҡ эҙләп тапмаһын.*
*Тик юғалма ғына,*
*барлығыңды*
*Бары үҙем генә белһәм дә,*
*Барлығыңа ҡай саҡ шикләнһәм дә,*
*Ҡайһы мәлдә хатта көлһәм дә...*
*Бар өмөтөм һиндә генә, һиндә —*
*Икәү бергә беҙ бит үлемһеҙ!*
*Берәй ҡасан барыбер осрашырбыҙ,*
*Ултырырбыҙ байрам түрендә.*
*Еңеү юлы еңел булмай, беләм,*
*Хоҙай ғына бирһен түҙемде,*
*Һиңә барыр юлда һис аҙашмам,*
*Көслө итеп тойһам үҙемде!*

## Бәхетһеҙмен, тимә

*Бәхетһеҙмен, тимә, һүҙең гонаһ.*
*Уйҙарыңдың емер тәртәһен,*
*Баш бирмәгән аҫау арғымаҡтың*
*Белмәнеңме ниҙәр әйтәһен?*

*Һиҙмәнеңме, елгән аҡбуҙ-уйҙың*
*Юлһыҙ-ниһеҙ шырлыҡ иңләүен.*
*Юлым ауыр, тимә, был урманға*
*Үҙ теләгең менән ингәнһең.*

*Аҙашҡанһың.*
*Тәүге яҙа уйың —*
*"Мин — бәхетһеҙ" тигән һуҡмаҡта.*
*"Үҙем түгел, башҡаларҙа ғәйеп"*
*Тигән уйың тартҡан һул яҡҡа.*

*Үҙең генә, үҙең риза булып*
*Шырлыҡтарҙа донъя гиҙәһең.*
*Уйҙар-арғымаҡты йүгәнләр көс —*
*"Мин бәхетле бөгөн!" тигәнең.*

# *Сәсмә әҫәрҙәр*



**Ишғәли**
**НУРҒӘЛИЕВ**

## ҠАРАБАШ ТУРҒАЙ

Яҙмышнамә

### *Бала күңеле*

*(Инеш һүҙ урынына)*

Бала күңеле — дала киңлеге. Бала сағымдың иң тәүге мәлен күҙ алдына килтерергә күп тапҡыр тырыштым, һәр саҡ ниндәй ҙә булһа шатлыҡлы йәки күңелле ваҡиғаны күҙ алдына килтергем килә. Нисек кенә тырышып ҡараһам да, шатлыҡлы ваҡиға урынына ҡурҡыныс күренештәр килеп баҫа, нишләйһең, үҙемде әрләп тә булаштым, юҡ, эш сыҡманы.

Шулай итеп, сабый саҡ. Минең тыуған өй янмағайны әле — өй эсендәге күренеште, урамды, ситәнде, ҡапҡаны иҫемдә һаҡлағанмын. Тимәк, хәтер яғынан тегәл булғанмын.

Йәйге көндө беләм. Мине үҙебеҙҙең ата ҡаҙ таланы, һаҡланыр өсөн ситәнгә менергә тырыштым, ә ҡаҙ мине суҡышы менән һөйрәп төшөрҙө, ҡанаттары менән һуҡты. Ҡысҡырғанымды, илағанымды беләм, ә кем мине ҡурсалап алған — уныһын хәтерләмәйем.

Ә ҡышҡы көндәрҙә тәҙрәнән ҡарап ултырыуымды күберәк иҫемдә ҡалдырғанмын. Тәҙрәнән күренгән күренештәр, күрәһең, мине ныҡ ҡыҙыҡһындырған, алыҫтағы сана юлдарын да күрә торғайным, сөнки ул юлдарҙан һирәкләп санаға егелгән аттар үтә, ә йышыраҡ йәйәүле кешеләр бәләкәй сана һөйрәй. Ололарға күп һорау биреүҙең файҙаһы аҙ булғандыр, моғайын, шул сағымдан уҡ юлсыларға үҙемә күрә генә фантазия менән анализ яһарға тырышҡанмын, күрәһең.

Минең менән мауыҡҡан кеше булмағас, урыным әлеге тәҙрә төбөндә, тәҙрәнән күренгән юлдар, урман-туғайҙар үҙемсә төрлө уйҙырмалар уйларға мөмкинселек

---

*Ишғәли Нурғәлиев 1939 йылдың 10 декабрендә Ишембай районының Әптек ауылында тыуған. 1946 йылда — урындағы башланғыс, 1950 йылда — Сәлих ете йыллыҡ мәктәбен, 1956 йылда Этҡол урта мәктәбен тамамлай. Салауат Юлаев исемендәге колхозда комсомол ойошмаһы секретары була, армия сафында хеҙмәт итә. Стәрлетамаҡ синтетик каучук заводында аппаратсынан башлап өлкән инженерға тиклем үрләй. Артабан — баш механик, һөт комбинатын төҙөшә. Ситтән тороп Өфө нефть институтын тамамлағандан һуң Нижневартовск ҡалаһында төҙөлөш-монтаж тармағында етәкселек эштәрен башҡара. Хәҙер хаҡлы ялда. Проза, публицистика өлкәһендә ҡәләмен һынай.*

бирҙе, эйе, оloларҙан ишеткән хәбәрҙәргә ҡолаҡ һалам да һөйләгәндәрен шул күренештәр менән тап килтерергә тырышам. Минеңсә, беҙҙең тәҙрә алдынан күрше ауылдарға, район үҙәгенә, ҡалаға юлдар үтә, ә урман артында... минең өсөн донъяның сиге.

Һәр кем бала сағын тыуған йортона бәйләй, шатлыҡлы ваҡиғаларын ихлас күңелдән ҡайтанан күҙ алдына килтереп, башҡаларға һөйләй. Ә үҙе хәтерендә ҡалдырмаған ваҡиғаны ата-әсәһенән, туған-тыумасанан һорашып, барыбер үҙенең күҙ алдына баҫтырырға тырыша.

Был йортта мин донъяға бишенсе бала булып килгәнмен, ике апайым, бер абзыйым сәсәк сиренән донъя ҡуйған, маҡтанырға яратҡан хөкүмәттең беҙҙең өсөн медицина хәстәре булмаған.

Үҙем белгәндә ҡулдарымда һәм тәнемдең башҡа урындарында күп яра эҙҙәре бар ине, ул эҙҙәргә башҡалар ҙа ымлай ине. Үҙем белмәгәс, өләсәйҙән һораштым, төпсөндөм. Асыҡланыуынса, минең тәнгә күп шешек сыҡҡан, бер ниндәй ҙә дарыу булмағас, был бала барыбер үлә, тип уйлағандар. Йәйге көндә, колхоз эштәре ҡыҙыу ваҡытта, мине алама сепрәккә төрөп, мейес башына һалып китер булғандар. «Һин иламай инең», — тинеләр, бәлки, иларлыҡ хәлем дә булмағандыр. Быныһы ҡараңғы.

Тыуған йорттағы һуңғы көн минең өсөн фажиғәле бөтөргә лә мөмкин булған. Беҙ, өс бала (мин — уртансы), өйҙә йоҡлағанбыҙ, оloлар яланда эштә булған. Беҙҙе уятып, өйҙән алып сыҡҡас, өй түбәһе ишелеп төшкән, бер-ике минутҡа һуңлаған булһалар, беҙ донъяла, фани донъяла булмаҫ инек. Йәйге янғын оҙаҡ булмай, көн эҫе ваҡыт... Өй һәм башҡа ҡаралты янып бөткәс, йәшәүебеҙ өләсәй йортонда, ғөмүмән балалыҡ күберәк өләсәй ҡарамағында үтте. Бала күңеле — дала киңлеге, һәр баланың күпте белгеһе килә. Мин дә күп һораштым. Шуныһы иҫемдә: һорауҙарым күп ваҡыт яуапһыҙ ҡалды йәки билгеле яуаптар алынды — күпте белһәң, тиҙ ҡартайырһың...

Яуапһыҙ ҡалған һорауҙарҙың береһе: донъяға килеүем ҡасан, нисек? Мин тыуған мәл сабыйҙар өсөн ышанмаҫлыҡ, бәғерһеҙ көндәр булған. Эйе, беҙҙең быуын әсә ҡарынында уҡ ыҙа сигә башлаған. Маҡтансыҡ совет етәкселеге кешелек донъяһы күрмәгән мөһабәт, ғәйрәтле, балҡып торған дәүләт төҙөй. Мәғлүм булыуынса, Рәсәй тарихында һәр күтәрелеш ауыл халҡы елкәһенә йөкмәтелгән. Шуныһы ла асыҡ: башҡорт ауылдары һәр саҡ икеләтә ауырлыҡ күтәрергә мәжбүр була, сөнки кешелек аҡылында һәр саҡ инерция хөкөм һөрә, башҡорттарҙың ере лә, малы ла һәр саҡ күберәк күренгән, һөҙөмтәлә, башҡорт ауылдарында күберәк бирер өсөн күберәк эшләргә лә тейеш булғандар. Шулай итеп, беҙҙең әсәйҙәр ҡарынындағы балалары тыуыр көнгә тиклем ялан эштәрендә эшләргә мәжбүр ине. Минең тыуған көн һайлау көнөнә тура килгән. Был «һайлау» көнө булмаһа, мин үҙемдең тыуған көнөмдө бер нисек тә белә алмаҫ инем. Грамотаһыҙ әсәй кеше ышанмаҫлыҡ хәтерле булды, минең тыуған йылды, айын, көнөн дә белмәй. Ә һайлау ҡумтаһын, әсәй бала табыпятҡас, өйгә килтергәндәр, әсәйҙең кемгә тауыш бирергә тейешлеген уҡып күрһәткәндәр, әсәй һайланаһы кешенең фамилияһын ғүмере буйы онотмаған, ул фамилия — Заликин. Бына ниндәй заман булған, Башҡортостандағы иң ҙур түрә ҡулға алына, атыла, ә яңы түрә килтерелә, йәғни тәғәйенләнә, һуңынан, имеш, халыҡ яңы түрәгә «тауыш» биреп, уны һайларға тейеш.

Бына шулай итеп мин «всякий демократия» илендә тыуғанмын: кемде тәғәйенләйҙәр, кемде «һайлайҙар», кемде көсләп эшкә ҡыуалар, кемде төрмәгә ябалар, кемде аталар, аҫҡа үлтерәләр. Сталиндың ышаныслы кешеһе Жданов, Өфөгә килеп, Башҡортостан етәкселәрен нығ тәнҡитләй. Тәнҡит һөҙөмтәһе иҫ китерлек ҡыҫымға килтерә. Мәскәү түрәһе Быкиндың атылыуы — был мажараның «билдәһе» генә, ысынбарлыҡта Башҡортостандың аҫыл ирҙәрен юҡ итеү маҡсаты ҡуйыла. Дөрөҫөн әйткәндә, сталинизм үҙ маҡсатына ирешә: Өфө генә түгел, һәр

район, һәр ҡала, биҫтә, ауыл юғалтыуҙар кисерә. Сталин «аҡылы» һәр ғаиләгә инде, бирәүҙәр «ысын сталинсы» булып донос яҙҙы, һүҙ йөрөттө, икенселәр «халыҡ дошманы»на әйләнде. Оҙаҡ уйлауҙың кәрәге юҡ, сталинизм хәҡиҡәте үтә ябай, йолҡош кейеме кеүек үтә күренерлек. Аҫтыртын, хәйләкәр, ялҡау, йәберсе, туймаҫ тамаҡлы кешеләр, аҡыл кимәленең нисек булыуына ҡарамаҫтан, «сталинсы» булдылар. Ныҡышмалы, тура һүҙле, эшкә мауығыусан, үҙ фекере булған кешеләр «халыҡ дошманы»на әүерелде.

Минең атай тура һүҙле булғанға күрә, мин ҡарында сағымда уҡ бәхеттең арт яғына тәғәйенләнгәнмен.

Әсе яҙмыш. Юҡ, нисек кенә әселек күрһәк тә, беҙ үҙебеҙҙе бер кемдән дә кәм итеп тойманыҡ, шатлыҡлы көндәребеҙ ҙә булды. Шуныһын әйтер инем: беҙҙең шатлыҡ һәр саҡ тосораҡ ине, өләсәй әйтмешләй, «кеше хаҡы ашап йәшәмәгәс», йоҡобоҙ ҙа тынысыраҡ булды.

Был турала яҙыусылар күп, ифрат күп, ә мин тик шуныһын ғына әйтер инем: күптәр ҡыйын йылдарҙа туйғансы ашап, аҙаҡ «ас йәшәнек» тип зарланды, үҙҙәре иҫтәре киткәнсе кеше ыҙалатып, һуңынан «беҙҙе ныҡ ҡыҫтылар» тип хәбәр таратты. Ә минең белеүемсә, ыҙа сиккән кеше күп һөйләргә яратмай, киреһенсә, үҙенең күргәнен башҡаларҙан йәшерергә тырыша.

Һәр кемгә аңлашыла: сабыйҙың һәр күренешкә бер нисә һорауы тыуа, ул һәр һорауға яуап көтә. Мин һорауҙарҙы башҡаларға ҡарағанда йышыраҡ биргәнмендер, эйе, хәтерләүемсә, ололар күп осраҡта мине яуапһыҙ ҡалдырҙы йәки «маҙама теймә» тип туҡтатып ҡуйҙы.

Эйе, тәүге һорауҙарыма яуап биреүсе өләсәй булды. Донъя этлектәренә бирешмәҫкә өләсәй өйрәтте, «ауыҙың тулы ҡан булһа ла, башҡа кеше белмәһен, кеше күрмәгән ергә төкөр» — был һүҙҙәрҙе мин оноторға тейеш түгел инем һәм онотманым. «Бер серенде лә кешегә һөйләмә» — былыһы ла өләсәй һүҙе, ә нисә йыл үтте, мин әле лә аптырау хәлендә: һөйләргәме, һөйләмәҫкәме, һөйләмәҫ инем, күптәр беҙҙең баштан үткәнде үҙҙәренеке итеп һөйләнеләр. Улай түгел дәһә. Мин бер генә фактты ла арттырмай һөйләргә булдым, өләсәйем ғәфү итер, тим.

## Мейес башында...

*Үлһәм сабый саҡтарымда,*
*Һағынып һөйләрҙәр ине...*

**Халыҡ йырынан**

Ҡышҡы оҙон төн. Мәһира туғаным менән мейес башында бер-беребеҙгә һыйынышып ятабыҙ. Башҡалар барыһы ла урындыҡта, кемдер ыңғыраша, сирләүселәр бар. Өләсәй әйтә: «Киҙеү йөрөй, Хоҙай һаҡлаһын, мин ауырып китһәм, һеҙҙе кем ҡарар». Ишетеп ятам, өләсәй йоҡо аралаш һаташа, нимәлер әйтергә тырыша. Мин өләсәй менән бергә йоҡлаһам, ул мине йоҡоға китер алдынан иҫкәртеп ҡуя: «Мин баҫлыға башлаһам, балам, һин мине уят», — ти. Эйе, ул һаташыуҙы баҫлығыу тип һөйләй, ә һаташҡан ваҡытында ҡулдары эшләгән кешенеке кеүек хәрәкәт яһай, өләсәй аңлатыуы буйынса, күп эшләгән кеше шулай һаташа.

Инде барыһы ла йоҡлай: олатай, өләсәй һәм башҡалар, мин йоҡлай алмайым, эстә ниндәйҙер ут яна, эсем ауырта. Мәһира туғаным устары менән мине ҡыҫып тота, ул да йоҡлай алмай:

— Абзый... — ти. Тауышы зәғиф.
— Әү, туғаным, әкрен әйт, уянһалар, әрләрҙәр, — тим.
— Атай ҡайтамы?
— Ҡайта, туғаным, ҡайта...
— Ә ул беҙгә нимә алып ҡайта?
— Ҡалас алып ҡайта.
— Ә ул ҡалас тәмле буламы?

– Эйе, туғаным, ҡалас тәмле була инде ул, йоҡла, туғаным.

– Йоҡом килмәй бит, абзый, эсем ауырта, бына тотоп ҡара, бына ошо ерем ауырта.

Бармаҡтарым менән туғанымдың эстәрен һыйпап ҡараным, ысынлап та, ут кеүек эҫе, туғаным минең ҡулдарҙы ебәрмәй тота.

–Туғаным, йоҡла инде, төн уртаһы етәлер бит.

– Юҡ шул, абзый, ныҡ ауырта, һыу эскем килә, һыу алып бир, һыу эсәм.

– Туғаным, һыуҙы төшөп алһам, өләсәй уяна, миңә эләгә.

Эйе, беҙ мейес башында ятҡас, беҙгә мендәр ҙә, юрған да кәрәкмәй, ә һыу эсергә төшә башлаһаң, өләсәй ишетә, өләсәй төшөп йөрөгәнде яратмай, өләсәй уҫал. Бер сүмес һыуҙы мейес башынан төшөп алып килеү минең өсөн бер ни түгел, әммә шуныһы: өләсәйҙең ялан аяҡ килеш соланға сығарып баҫтырыуы ла мөмкин. Инде урындыҡтағылар: олатай һәм өләсәй, Рәхилә еңгәй менән ике малайы, тағы ике апай – барыһы ла йоҡлай, тик Маһира туғаным миңә тынғы бирмәй, һыу һорай. Ни булһа ла булыр, ҡурҡышымды еңеп, өләсәйҙе уятырға булдым. Өләсәй тиҙ уяна.

– Өләсәй, һыу бир инде, Маһира һыу һорай.

– Төн убырҙары, төн уртаһында йоҡо юҡ, йоҡларға кәрәк, минең дә бит һаулығым юҡ, киҙеү тейгән.

Өләсәй әкрен генә торҙо, түрбаш яғынан бер сүмес һыу алып бирҙе, әрләмәне: «Бүтән һорама, барыһы ла сирләй, һыуға барырлыҡ кеше лә юҡ», – тине.

Мин сүместе һаҡлыҡ менән генә Маһира туғаныма һуҙҙым. Туғаным сүместе ике ҡуллап тотоп, йотлоғоп эсергә тотондо. Минең дә эскем килә, ҡабырға аҫтында ут янғандай. Һыу эсһәм, баҫылыр кеүек. «Маһира туғаным, миңә лә һыу ҡалдыр», – тип сүместе үҙемә тартып булашам, юҡ, ул сүместе шул тиклем ныҡ тотҡан – эсеп бөтөрмәйенсә ебәрмәне. Икенсе тапҡыр һыу һорарға мөмкин түгел. Эсем ныҡ ауырта, йоҡлай алмайым.

Мин уянғанда көн уртаһы етеп килә ине. Өйҙә ығы-зығы. Өләсәй һәр кемгә эш, йомош таба. Мине иртән уятмағандар... Маһира туғаным үлгән.

Өләсәй бик тынғыһыҙ кеше, бер эште лә оҙаҡҡа һуҙырға яратмай. Әле Маһира туғанымды ерләү сараһын күрә. Күрше-тирә яҡты, туғандарҙы йыйҙы, бер кемгә лә тик торорға бирмәне, һәр кемгә йомош тапты. Тик мин генә бер урында ҡуҙғалмай ултырҙым, мин туғанымдың үлгән икәнен аңламай инем әле. Илашыу ҙа булманы, һуғыш ваҡыты шул, тинеләр. «Был донъяла йәшәгәнсе, үлгәнең яҡшы», – тип әйтеүселәр ҙә булды. «Бала кеше – йәне ожмахта», – тинеләр.

Маһира туғанымды бәләкәй санаға һалып зыяратҡа алып киттеләр, мин – бала кеше, ялан аяҡ зыяратҡа бара алмайым, бер һүҙһеҙ өйҙә ултырҙым, кис булғансы миңә бер һүҙ ҡушыусы ла булманы.

Минең ике апайҙы ла өләсәйем ҡарап үҫтергән, икеһе лә өләсәй ҡулында сәсәк ауырыуынан үлгән. Һөйләүе буйынса, өләсәй минең оло апайымды нығыраҡ яратҡан, ҡәҙерләгән, ни эшләйһең, «ул ваҡытта сәсәк ауырыуына ҡаршы дарыу булмаған» тигән һүҙ беҙҙең ауыл халҡына ныҡ ҡағыла. Бик ихтимал, ҡайһы бер активист ғаиләһенә, Әптек ауылынан булыуына ҡарамаҫтан, дарыу эләгергә мөмкин булғандыр, беҙҙең ғаилә иһә дарыу алырға бер ниндәй ҙә өмөт итә алмаған. Беҙ донъяға килгәс, сәсәк ауырыуына ҡаршы көрәш башланған. Шуға беҙҙең беләктәргә, бер нисә урындан бәләкәй бысаҡ менән киҫеп, ниндәйҙер билдәләр яһанылар. Был ғәләмәтте «никер» тип атайҙар ине, аҙаҡ беләктәге билдәләр ҡыҙарып шешә, бер-ике аҙнанан төҙәлә, урыны ғына ҡала. Был никерҙы аҡ халат кейгән ҡатындар район үҙәгенән килеп яһай, һуңынан белеүемсә, был сара вакцинация тип атала. Шулай итеп, беҙҙең быуын сәсәк ауырыуынан ҡотҡарылған булып сыға.

Бәлә яңғыҙ йөрөмәй, тиҙәр: һуғыш башланып бер йылдан артыҡ ваҡыт үткәс, аслыҡ башланды. Эйе, колхоз баҫыуҙарында иген унды, колхозда, һәр хужалыҡта

мал да бар, ә ашарға – юҡ. Колхозда бушҡа эшләтәләр, һәр кемгә йыл әйләнәһенә нисә көн эшкә сығырға икәне юғарынан бойорола, ашарға табыу – һәр кемдең үҙ хәстәре. Ауылда туҡ йәшәүселәр булды, колхоз, сельсовет түрәләре, налог йыйыусылар, уҡытыусылар таҙа икмәк, ит ашаны – совет хәстәрен күрҙе. Һәр хужалыҡ мал-тыуар ҙа тотто, өләсәй ҙә һыйыр аҫраны, ә һыйырға килгән һалым... һыйыр биргән килемдән артығыраҡ. Минең өләсәй һыйырҙы килем өсөн аҫраманы, һыйыр өләсәй тормошоноң бик мөһим өлөшө булды.

Бына шулай иң ҡыйын хәлдә аталары фронтта булған сабыйҙар ҡалды, хәлбүки, Мәһира туғанымдың яҙмышы алдан билдәләнгән булып сыҡты. Беҙ ашаған аҙыҡ сабыйҙар өсөн түгел ине шул. Күп ғаиләләрҙән Мәһира туғаным йәшендәге балалар теге донъяға китте. Еңел булһын тупраҡтары. Беҙ һуғыш йылдарында таҙа икмәк күрмәнек, ашаған икмәгебеҙ алабута ононан, ашлыҡ ҡалдығынан булды. Мәһира туғаным менән һуңғы тапҡыр ашаған икмәк өләсәй тирмән стеналарынан һепереп, йыйып алып ҡайтҡан туҙандан бешерелгәйне, бына шунның өсөн эсебеҙ ауыртты ла инде.

Мәһира туғанымды ерләп ҡайтҡан кис өләсәй күршеләрҙе, туған-тыумаларҙы йыйып, ҙур ашъяулыҡ йәйеп, урындыҡҡа ултыртты. Мине лә ситкә ҡуйманылар, урын бирҙеләр, ҡөрьән уҡынылар.

Мин өндәшмәй генә ҡарап ултырҙым. Хәйер өләштеләр, миңә лә хәйер бирҙеләр, йәлләп, башымдан һыйпап: «Атайлы йәтим», – тинеләр. Нисек кенә булһа ла өндәшмәй ултырғым килмәй, тырыша торғас, һорауымды бирҙем: «Мәһира туғаным ҡайтмаймы ни?»

– Юҡ инде, – тинеләр, – унын йәне күбәләк кеүек осоп китте, ул ожмахта инде, – тинеләр. Бүтән һорау бирмәнем, миңә хәйергә бирелгән өс тәңкәлек йәшел ҡағыҙ аҡсаға ҡарап ултырҙым – мин бит аҡсаны тотоп ҡарағаным юҡ. Килгән кешеләр өйҙәренә ҡайтып киткәс, өләсәй минең ҡулдағы йәшел аҡсаны алды ла: «Был аҡсаға хәҙер бер нәмә лә алып булмай, – тине. – Хәҙер нәмә ҡиммәт, ярар, кәрәге тейер», – тип аҡсаны ҡайҙалыр йәшереп ҡуйҙы.

Көндөҙ минең урыным өй эсендә, билгеле. Өйҙөң түр башында һауыт-һаба, ашамлыҡтар, мейес алды. Минең түргә барырға хаҡым юҡ, «әрәмтамаҡ» һүҙен ишетеүҙән ҡурҡам, Рәхилә еңгәнең малайҙары түрҙә буталып, уйнап та алалар. Әсәләре – өйҙә, уларға һүҙ теймәй. Ә минең урыным тәҙрә төбөндә, йылы һүҙгә өмөтөм булмағас, тауышһыҙ ултырырға тырышам, үҙемә ниндәй ҙә булһа уйын тапҡан булам.

Мин ултырған тәҙрә төбөнә тәҙрә быялаларының боҙо иреп ағып төшә, һыу йыйыла, дөрөҫ формалы бер нисә ағас киҫәге, бер нисә тимер киҫәге, ватыҡ төймәләр бар. Ағып төшкән һыуҙа үҙем белгәнсә “тирмән” ҡорам, тирмәндең нисек ҡоролорға тейеш булыуын ололар һүҙенән үҙ аллы тасуирлап күҙ алдыма килтерәм. Минең һыу тирмәне, минең уйынсыҡтар бер кемгә лә кәрәк түгел, күп ваҡыт мине күреүсе лә юҡ, үҙ алдыма уйнайым. Тәҙрәнән ауылдың бер өлөшө күренә. Ололар һөйләгән һүҙҙе мин тәҙрәнән күренгән күренештәр менән бәйләргә тырышам. Ауыл осондағы теҙелеп ултырған ашлыҡ келәттәре – минең өсөн ҡала, ауылдан сығып киткән юл – минең өсөн һуғышҡа китә торған юл. Бар кеше һуғыш тураһында һөйләй. Юлды һәр саҡ күҙәтәм, шул юлдан атай ҡайтыр, тиеп өмөтләнәм. Һирәкләп ул юлда ат егелгән саналар күренә, мин уларҙы иғтибар менән ҡарайым. Минең өсөн улар Әптек ауылы юлсылары түгел, ә һуғышҡа китеүселәр йә һуғыштан ҡайтыусылар ине.

Шундай көндәрҙең береһендә, мин тәҙрәнән ҡарап ултырғанда, тәҙрә рамына ғәжәп матур бер ҡош  ҡунды. Мин ул ҡоштo тын да алмай ҡарап ултырҙым, осоп китмәһә ярар ине тип, ҡыбырҙаманым, бер тауыш та сығарманым. Ул ҡош туҡ-туҡ итеп тәҙрә ағасын суҡып та алды,  нимәлер эҙләгән кеүек күренде.

Эйе, шунда уҡ минең башыма бер уй төштө: был ҡош түгел, мине күрергә Мәһира туғаным килгән, унын йәне ҡош булып килгән. Эстән генә шатланып та,

көйөнөп тә өлгөрҙөм, ә ҡош үҙенә оҙаҡ ҡарарға бирмәне, осоп китте. Был турала һәр көн уйланым... Маһира туғаным мине һағынып килгән, тимәк, тағы килер. Ошо көндән башлап мин тәҙрә төбөндә шул ҡошто – Маһира туғанымды көттөм. Туғанымдың ҡош булып мине күрергә килгәнен бер кемгә лә әйтмәнем. Ваҡыт үтә биргәс, мин ул ҡоштоң ҡарабаш турғай икәнен дә белдем, тик барыбер минең өсөн ул ҡош Маһира туғанымдың йәне булып ҡалды. Ул ҡошто ҡайҙа ғына күрһәм дә, ҙур ихтирам менән ҡараным, һәр бер хәрәкәтен күҙәттем – ул ҡош минең өсөн иң ҡәҙерле йән эйәһе булып ҡалды.

Өләсәйҙең иң ҡәҙерле малы – һыйыр быҙаулай, ә ҡара һыйыр һәр саҡ ҡыш быҙаулай. Ҡышҡы көндә быҙауҙы өйҙән сығармайҙар, быҙау беҙҙең ғаилә ағзаһына әйләнә, һәр көн быҙауҙы имеҙергә һыйырҙы өйгә индерәләр, алдына бәрәңге ҡабығы һалып һыйлайҙар. Бер көн, һыйырҙы өйгә индергәндә, асыҡ ишектән өйгә ҡарабаш турғай осоп инде. Өйҙәгеләр зыҡ ҡубып турғайҙы тоторға тырышты, ҡыуҙылар, ә мин өй эсендә үҙемә урын таба алманым, Маһира туғаным килгән, тип уйлап, ни эшләргә лә белмәнем. Тегеләр, турғайҙы тотабыҙ тип, үлтереп ҡуйырҙар тип ҡурҡтым. «Теймәгеҙ!» тип ҡысҡырҙым, ярар әле, ишекте астылар. Бер нисә урынға бәрелгәс, турғай ишектән сығып осто, сырҡылдап ҡысҡырған тауышы ҡолаҡҡа салынды, ул миңә шатлыҡлы тауыш булып ишетелде. Ысынлап та, Маһира туғаным өйгә инеп сыҡҡан өсөн шатландымы икән әллә? Был турала мин бер кемгә лә һөйләмәнем, ул минең өсөн сер ине.

## Әптек

*Илде монар алғаны –*
*Батырһыҙ тороп ҡалғаны.*

**Ҡобайырҙан**

Шығыр. Шығыр. Ҡолаҡ төбөндә генә ҡарҙа шыуған сана тауышы ишетелә. Өләсәй мине балаҫҡа төрөп, бәләкәй санаға һалып совхоздың «беренсе ялан»ына алып китеп бара. Унда минең әсәй эшләй. Өләсәйҙең ҡарғанған, кемделер әрләгән тауышын ишетәм. Уның асыуланыуы сәбәбе – юл: ат юлы менән килгәндә юл тыныс, сана һөйрәү ҡыйын түгел, ә бына «беренсе ялан»ға яҡынлашҡас, юл боҙола. Сөнки нефтселәрҙең тракторҙары ат юлын йырғыслап бөткән, төрлө яҡҡа бороп ҡар өйөмдәре, соҡорҙар яһаған. Өләсәйем ана шул нефтселәрҙе әрләй. Мин сананан төшөп ҡалырлыҡ түгел, ҡушаһына бау менән ныҡлап бәйләнгәнмен. Үҙем атлап бара алмайым, сөнки кейемем юҡ. Беҙҙең ауылдан «беренсе ялан» дүрт саҡрым самаһы алыҫлыҡта. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, төшкө ашҡа тиклем барып еттек, сөнки өләсәй бик ныҡышмал кеше, туҡтап тора торған түгел.

Өләсәй туп-тура бүлексә ашханаһына инде, сөнки әсәйем дә төшкө ашҡа шунда килә. Өләсәй мине тиҙ генә әсәйгә тапшырып, ашхана эргәһендә ятҡан бәрәңге ҡабығын тоҡҡа тултырып, санаһына тейәп ҡайтып китте. Әсәйем мине үҙе йәшәгән баракка ҡалдырып, эшкә китә, кис еткәнсе мин шунда тауыштынһыҙ ғына ултырам. Барак эсендә бер әйбер юҡ, ике яҡ стена буйына тупаҫ таҡтанан эшләнгән урындыҡтар теҙелгән. Бер бүлмә эсендә егермеләп ҡатын йәшәй, һәр береһенең урыны билдәле, һәр кемеһенең үҙ балаҫы йәйеп ҡуйылған йәки төрөп һалынған. Кис булғансы мин бер генә урында – тәҙрә төбөндә ултырам. Кисен барак бүлмәһендә ығы-зығы ҡуба: ҡатындар эштән ҡайта, һәр кем үҙ хәбәрен һөйләй. Шатлыҡлы хәбәр юҡ тип әйтерлек, һуғыш ваҡыты, ниндәйҙер ҡурҡыныс нәмәләр тураһында һөйләйҙәр. Әсәй ашхананан үҙенең өлөшөн алып ҡайта, мине ашата, иптәш ҡатындары ла үҙҙәренең өлөштәрен миңә бирергә тырыша. Бигерәк тә әсәйҙең Нюра исемле мәрйә әхирәте мине ашата. Тик шуныһы насар: мин, ас урындан килгәс, күп ашай алмайым. Зарланам, ашаһам, эсем ауырта, тимен. Уларҙың ашханаһында бешкән бутҡа бик тәмле, таҙа икмәк бирәләр. Көнбағыш майы менән бешерелгән һоло бутҡаһының тәме

күп йылдар буйы минең иҫемдә ҡалған. Өләсәй өйөндә тәмле бутҡа булманы, ул ваҡытта таҙа икмәк тә күрмәнек, алабута икмәге лә беҙҙең өсөн ҡәҙерле ине.

Ашап туйғандан һуң баракта ҡыйын ваҡиға булып ала – киске тикшереү. Баракта йәшәүселәр эшкә үҙ ирке менән урынлашҡан, ә киске тикшереү баракта сит, совхозда эшләмәгән кешеләр булмаһын өсөн үткәрелә. Бер кеше лә баракка балаһын йәки башҡа туғанын килтерергә тейеш түгел. Былай аңлатыла: совхозда эшләгән кеше үҙ паегын үҙе ашап бөтөргә тейеш, әгәр ул паегын башҡа кешегә ашатһа, насар эшләй, имеш.

Киске тикшереүҙе үткәрергә ирҙәр килә, бигерәк тә Васька тигән сатан бәндә алама. Тикшереү алдынан мине йәшерәләр, Нюра түтәй мине итәге аҫтына алырға тырыша. Теге Васька килә башлаһа, ул: «Не подходи, козёл вонючий, убери руки», – тип ҡысҡыра. Эйе, Васька, сатан булһа ла, юбка аҫтын һәрмәргә тырышып ята торғайны.

Киске тикшереүҙән һуң мине икенсе ҡыйынлыҡ көтә, сөнки туйғансы ашау – минең өсөн бәлә: эс ауырта. Ауыртыуына түҙер инем, эсем китә, түҙерлек түгел. Бер нисә тапҡыр яланаяҡ тышҡа йүгерәм, яҡында ла эш бөтөрөргә ярамай, ҡурҡам, алыҫыраҡ барырға тырышам, ә алыҫ барырға тағы ҡурҡам. Минең төнгө урамға йүгереү әсәйемә оҡшамай. Кешеләргә йоҡларға ирек бирмәйем, ҡыйын. Шуның өсөн минең «беренсе ялан»да оҙаҡ тораһым килмәй, тиҙерәк өләсәй килһен, тип теләйем. Ә ул ике кис ҡунғандан һуң уҡ килә, тағы ашхана эргәһенән бәрәңге ҡабығы тултырып ала ла мине алып ҡайтып китә. Өйгә ҡайтҡас та минең хәл маҡтанырлыҡ түгел: туйып ҡайттың, тип өләсәй минең ашау өлөшөн кәметә, ә мин аңлатып бер һүҙ әйтә алмайым. Өләсәйҙең башҡа ейәндәре лә минә ҡырын ҡарай, йәнәһе, мин «тәмле ашап» ҡайтҡанмын. Беҙҙең өйҙә бәрәңге ҡабығы ла яҡшы аҙыҡ һанала, сөнки совхоз ашханаһында ҡабыҡты ҡалын итеп турайҙар, беҙ уларҙы тимер мейес өҫтөндә ҡыҙҙырып ашайбыҙ. Араһында ваҡ-төйәк бәрәңгеләре лә килеп сыға.

Сабый башым менән мин уйланырға мәжбүр: ниңә совхозда эшләгән кешеләр туйғансы ашай ала, ә беҙҙең Әптек ауылында асҡа шешенеүселәр, үлеүселәр бар? Һорауға яуап биреүсе юҡ. Өләсәй эштән бушаһа, һорашып күп нәмәләрҙе аңлап өлгөрә торғайным.

***

Совет власы кулактарға ҡаршы көрәш башлағас, Әптектә лә ҙур үҙгәрештәр булған. Ауылдың иң яҡшы ерҙәрен тартып алғандар, ә шул ерҙәргә Башҡортостандың икенсе яҡтарынан шул кулактарҙы килтергәндәр. Улар башта паекка эшләгәндәр, тора-бара йорт-ҡуралар төҙөп, үҙ аллы йәшәп, совхозда эшләгәндәр. Әлеге «беренсе ялан»да ситәндән үрелеп, балсыҡ менән һыланып эшләнгән (улар төҙөгән) бер нисә йорт бар ине. Ә ҡайһы берҙәре землянкаларҙа йәшәне. Кулак булып ҡыуылып килеүселәргә аҙыҡ карточкаһы бирҙеләр, ә ул һәр ғаилә ағзаһына айырым ине. Һәр кемгә бирелгән паек туйғансы ашарлыҡ булды, тимәк, кулак булып килеүселәрҙең береһе лә аслыҡ кисермәне.

Һуғыш башланғас, совхозға Волга буйы немецтарын ҡыуып килтерҙеләр, уларға ла шулай уҡ паек карточкалары таратылды, улар ҙа асыҡманылар, интекмәнеләр.

Минең әсәйем совхозға эшкә кергәс, аҙыҡ карточкаһы алды алыуын, әммә уның өс балаһының береһенә лә паек юҡ ине. Мин һәр ваҡытта ла ошо турала уйлайым. Былай нисек була ул?

Олатайым ул осорҙа ҡайһы бер кулактарға ҡарағанда байыраҡ булған: алты һыйыры, ун баш аты һәм башҡа ваҡ мал-тыуары. Мин уйлайым, әгәр олатай колхоздың беренсе председателе булмаһа, үҙен кулак итеп күрһәтеп, шул совхозға күскән булһа, ул да карточкалар алыр ине һәм, әлбиттә, астан үлмәҫ ине. Туғаным Маһира ла тере булыр ине. Совет власының мәкерлелеге: олатай кулак булһа, тағы ла иртәрәк донъя ҡуйыр ине, туғаным ғына түгел, мин дә үлер инем, сөнки беҙҙе ул совхозға урынлаштырмаҫтар ине.

Әптек ауылының һәләкәте күпкә иртәрәк, 1918 йылдарҙа уҡ, башлана. Йәйен күрше ауылдың «Красный партизан» отряды ауылға килеп инә. Ауыл халҡын тау башына сығаралар һәм иң күренекле кешеләрен, муллаларын теҙеп аталар. Утыҙға яҡын кеше үлтерелә, һөйләүҙәренсә, кешеләрҙе теҙә башлағас, Әптек муллаһы ҡаушамай, ҡалтырамай былай тип әйтә: «Доғаларығыҙҙы уҡығыҙ, тәҡдиребеҙ ошонда». Шулай, күрше урыҫ ауылының асарбаҡтары Әптек еренә көнләшеп ҡараған, һәр ваҡыт ҡара иҫәптә тотҡандар. Шул уҡ йылды Тимаш бандиттары маҡсаттарына ирешер ҙә ине, салғыға ҡаршы таш була шул. Әптек ауылында ла Ҡасим Яҡупов була, уның көсө «Красный партизан» ише генә түгел – яҡшы ҡоралланған һыбайлы ғәскәре була. Шуныһы билгеле: Ҡасим ҡыҙыл да, аҡ та түгел, быны аңлатыр өсөн ул бер үк төн эсендә Тимашевкалағы «Красный партизан» отрядының, Ҡашалаҡбаштағы аҡтар отрядының да ҡоттарын алған. Юҡ, Ҡасим ҡоралһыҙ халыҡты сығарып атып йөрөмәгән, ҡораллыларын ҡасырға мәжбүр иткән.

Шулай итеп, Әптек ауылы Граждандар һуғышы ваҡытында үҙенең етәкселәрен юғалта, ә Ҡасим Яҡупов Әптекте таланыуҙан, ерҙәрен тартып алыуҙан ҡотҡара. Әммә бынан һуң да әле ауылды ҙур бәләләр көтә. Тарихтан билдәле булыуынса, 1921 йылда ҡот осорлоҡ аслыҡ була, күп ғаиләләр аслыҡтан үлә. Был аслыҡтың сәбәбен Совет хөкүмәте тулыһынса һауа торошона япты, имеш, ҡаты ҡоролоҡ булды. «Бәлә яңғыҙ йөрөмәй» тиҙәр, әлбиттә, ҡоролоҡ аслыҡ килтерә. Әммә уның иң ҙур сәбәбе – Граждандар һуғышы мәлендә илдең рәхимһеҙ таланыуы. Ул заманда беҙҙең яҡта абруйлы һуғыш эшмәкәре Блюхер ғәскәре менән Башҡортостандың көнсығышында сәфәр ҡылған һәм, ни сәбәптәндер, ул үткән ауылдарҙа аслыҡ бигерәк тә ҡот осҡос күренеш алған, ҡайһы бер ауылдар бөтөнләй ҡырылған. Мин халыҡ хәтере теүәл ваҡытта Блюхер үткән юлдан уҙырға иҫәп тота инем, йәл, ниәт тормошҡа ашманы. Ул ваҡыттағы матбуғатҡа ла бик ышанып етмәнем, минең өсөн иң дөрөҫ һүҙ – өләсәй һүҙе ине. Уның һөйләүе буйынса, ниңәлер аҡтар менән ҡыҙылдар, һөйләшеп ҡуйған кеүек, Әптек араһында атышырға яратҡан һәм уға йыш ҡына дүрт малайы менән баҙҙа йәшенеп ултырырға тура килгән.

Эйе, рәхимһеҙ таланыуҙан һуң килгән ҡоролоҡ халыҡтың быуынын киҫкән. Аслыҡтан һуң кулактарға ҡаршы көрәш ҡуба, Әптек ерҙәрен тартып ала алмаған «пролетарийҙар» өсөн уңайлы мәл тыуа. Ергә барыбер халыҡ хужа түгел, колхоздыҡы, ә уның ерҙәрен тартып алыу өсөн ҙур аҡыл талап ителмәй. Ауылда ҡаршылыҡ күрһәтерлек кешеләр ҡалмай. Әлбиттә, партия әһелдәре Ҡасим Яҡуповтың талантлы кеше икәнлеген яҡшы беләләр, уға бик оҙаҡ теймәйҙәр. Ул отрядын таратып, тыныс эш менән шөғөлләнә, ә репрессиялар осоронда Яҡуповты алып китәләр, артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

Әгәр Әптек ауылының әйләнә-тирәһенә күҙ һалһаң, бер ниндәй китапһыҙ ҙа бөтә Рәсәй тарихын күҙалларға була. Бер нисә хутор бар, унда урыҫтың тәүге суҡыныусылары йәшәй: староверҙар йәки старообрядсылар, Петр Беренсе заманында нигеҙләнгән ауылдар бар, ҡайһы бер ауылдар Иван Грозныйҙан һуң барлыҡҡа килгән. Столыпин әфәнде тыуҙырған хуторҙар бар, ә һуңғы йылдар Әптек өсөн бигерәк әрнеүле булған. Ленинсылар Кронштадт ихтилалын баҫтырғас, баш күтәреүселәрҙең бер өлөшөн Әптек еренә һөрәләр, яңы хутор төҙөйҙәр. Сталин да буш ҡалмай: Әптек еренә кулактар килтерелә, Волга немецтары ла бында ҡыуыла, төрмә кешеләре совхоз ойоштора, һуғыш ваҡытында төрмә ҙурая төшә. Һуғыш бөткәс, пленда булған совет һалдаттары килтерелә. Мин белгәндә 25-әр йылға хөкөм ителгән тотҡондар бар ине әле.

...Минең сабый саҡ. Эҫе көн. Һыу эсерергә уйлап, ауыл уртаһында тотҡондар колоннаһын туҡтаттылар. Мыйыҡлы һалдаттар, уҫал эттәр уларға бер кемде лә яҡын ебәрмәй. Бәләкәй булғас, миңә иғтибар итмәнеләр. Шул саҡта бер таҙа кәүҙәле, ныҡ ҡарашлы (моғайын, офицер булғандыр) тотҡон мине иғтибар менән

ҡарап, ауыл өйҙәренә күҙе менән ымланы ла: «Как плохо вы живете», — тине. Хатта тотҡондар ҙа Әптек халҡына теләктәшлек белдерә ине. Тора-бара төрмә нигеҙләнеп алды, илленсе йылдарҙа уны икәү иттеләр (ирҙәр һәм ҡатындар өсөн). Күрәһең, илдәге бүтән төрмәләрҙә урын етмәй ине.

Хрущев заманы ла Әптекте урап үтмәне, төрмә кейем-һалымы тегеү эшенә йәлеп ителде. Ер эшкәртеү тотҡондар һөнәре түгел икәнлеген кемдер аңлап алды, буғай. Ауылдан тартып алынған ерҙе халыҡҡа ҡайтарып биреү бер кемдең дә башына килмәне, әйтәгүр, яңы хужалыҡ ойошторолдо. Ул хужалыҡ әлегә тиклем «Ағиҙел» совхозы тип атала, ә биҫтә Яңы Әптек исемен йөрөтә. Мин ауылға ҡайтҡан саҡта, мәҙәкләп, Һәләүектең төрмә булған уң яғын Лаврентьевка тимен — Берия заманында төҙөлдө, һул ярҙағы биҫтәне Никитовка тимен — Хрущев заманында төҙөлдө.

Әптек ауылы Башҡортостандың иң йәмле йылғаларының береһе булған Һәләүек буйында, Юрматы ырыуҙарының төп төйәгендә урынлашҡан. Юрматылар был ерҙәрҙе йәндәренән артыҡ күреп һаҡлағандар. Рәсәй батшалығына ҡушылған Һәләүек башҡорттары үҙаллығын һаҡларға тырышҡан, Рәсәйгә лә тоғролоҡ һаҡлаған. Әптек ауылы яугиры Бородино һуғышынан батша наградаһы алып ҡайтҡан. Тик шуныһы ҡыҙғаныс: башҡорт ни тиклем тоғролоҡ күрһәтһә, шул тиклем хоҡуғын юғалтҡан.

Әгәр Рәсәй батшалары совет заманындағы Әптек хоҡуҡтарын тартып алғанды күрһәләр, көнләшеүҙән аптырауҙа ҡалырҙар ине. Хәҙерге ваҡытта Әптек халҡы байғош хәлендә. Ғәфү үтенәм...

**Парсалар, йәғни ҡарабаш турғайға ҡағылышлы һынамыштарым**

*Ҡарабаш турғайҙар нисек кенә күмәк булмаһындар, бирелгән көнбағыш бөртөктәрен сиратлап килеп алалар, икенсе урында иркенләп ашайҙар.*

***

*Ҡарабаш турғайҙар ем алған урынға ябай турғай килеп ҡунһа, «тәртип» боҙола, сөнки ябай турғай «сират» төшөнсәһен белмәй. Етмәһә, ул көнбағышты алып китеп ярмай, ҡайҙа таба — шунда ярып ашай. Ябай турғайҙар йыйылған урындан ҡарабаш турғай осоп китеүҙе яҡшыраҡ күрә.*

## Олатай

*Һелтә ҡулды донъяһынан,*
*Кер әжәл баҙарына.*
*Ҙур йәнеңде хур итеп йөрөмә*
*Нәҙерһеҙ тән менән.*

**Шәйехзада Бабич**

Ҙур кешегә ҡыйындыр инде, тип уйлай инем. Олатай ишектән ингәндә нык эйелеп инә ине, өй эсендә лә башы түбәгә саҡ теймәй, аяҡтары бигерәк ҙур, сабатаһы эсенә мин кереп ултырырлыҡ. Аяҡ тырнаҡтары килбәтһеҙ булып йәнселгән. Минең өсөн ҡыҙыҡ булғандыр инде, күрәһең: «Олатай, ниңә һинең аяғыңдағы тырнаҡтарың ғәрип ул?» — тип һорай торғайным. «Улым, ул тырнаҡтарҙы шалун-поезд тапаны», — тиер ине. Шалун йәки поезд тигәне тимер юлдан йөрөй торған бер әкәмәт икән, шуға ултырып кешеләр һуғышҡа китәләр, ти. Мин, бала кеше, олатайҙың һәр һүҙенә ышандым.

Мин белгәндә, олатай күп кенә сәйер мәсьәләләргә ҡағылырға яратманы. Тормош тураһында һүҙ сыҡһа, ҡуй инде, тип ҙур ҡулын ғына һелтәп ҡуйыр ине. Үткән ғүмере тураһында ла бик һөйләп барманы.

Шулай ҙа олатай минең менән айырым ултырып һөйләшер ине һәм һәр ваҡытта ла: «Һин бүтәндәргә оҡшамағанһың, отҡорһоң, күпте белерһең. Хатта беҙ әйтмәгәндәрҙе лә әйтә алырһың», — тип ҡабатлар ине. «Бүтәндәр» тип ул

минән башҡа ейән-ейәнсәрҙәрен күҙ алдында тотҡандыр. Ысынлап та, унын һүҙе дөрөҫкә сыҡты: бөтә ейәндәре араһынан тик мин генә юғары белем ала алдым.

Ә инде йортта үҙебеҙ генә ҡалған ваҡытта олатайым миңә нәҫелебеҙ тураһында һөйләргә яратты. Сөнки, уның һүҙҙәре буйынса, һәр бер башҡорт үҙенең ете быуынын яҡшы белергә тейеш.

— Быларҙы һиңә генә һөйләйем, башҡа һөйләр кешем юҡ, иллә онотма, был мәғлүмәттәрҙе артабан тапшырыу һинең өҫтә ҡала, — тип башыма нығытып һеңдереп ҡуйҙы.

Олатай Беренсе донъя һуғышы башланғанда ғәскәри хеҙмәттә булған, Герман һуғышында ҡатнашҡан. Яуҙың икенсе яртыһында әсирлеккә эләккән һәм пленды Австро-Венгрия империяһының баш ҡалаһы Венанан алыҫ булмаған ерҙә үткәргән. Олатайым Австрия тураһында һөйләргә яратты. «Беҙҙең Башҡортостан кеүек таулы, таҙа һыулы, урманға бай, йәмле ил ул», — тип һөйләгәне хәтерҙә.

Рәсәй һалдаттарына ҡараш артыҡ насар булмаған, хатта әсир һалдат хәле окопта ятҡан һалдат тормошонан ҡайһы бер яҡтары менән һәйбәтерәк тә булған. Олатайымдың, мосолман булғас, һайлау мөмкинселеге лә булған: Төркиәнән вәкилдәр килгән һәм барлыҡ тотҡон мосолмандарҙы ла үҙҙәренә барып иректә йәшәргә саҡырғандар. Олатай риза булмаған: «Үҙ илемдә хужалығым, балаларым бар», — тигән.

Тотҡонда әсирҙәрҙе төрлө эшкә ҡушҡандар, һәр төрлө кешеләр килеп, үҙҙәренең хужалыҡтарына һайлап ала торған булғандар. Шундай көндәрҙең береһендә олатайҙы таҙа кәүҙәле немец хужабикәһе эшкә алып киткән, уның ире, Австрия армияһы офицеры, һуғышта баш һалған. Тора-бара олатайым фрауға бик оҡшаған, сөнки төҫкә-башҡа арыу, оҙон буйлы, таҙа кәүҙәле, эшкә тотона белә, тиҫкәре түгел, һәм немка уға гражданлыҡ алып, бөтә имениеға хужа булып ҡалырға тәҡдим яһаған. Әммә олатайым тағы ла риза булмай, үҙенең Башҡортостанын, Урал тауҙарын, Һәләүек буйын яҡынсыраҡ күргән — һуғыш бөткәс, олатайым ҙур ауырлыҡ менән тыуған яҡтарына ҡайтып етә. «Әсирлектән ҡайтканда, тимер юл михнәттәре ваҡытында, аяҡ бармаҡтарымды поездан тапаттым», — тип шаяртыр ине олатай, ә мин ышана инем.

Унын һуғыштан ҡайтыуы бик шаулы ваҡытҡа тура килгән: революция, үҙ-ара һуғыш һәм илгә — бола яратып, эш яратмаған халыҡ хужа. Ауылға аҡтар килһә, олатайға килгәндәр, аттар йүнлә, ашарға тап, тип; йөк ташырға ылаусылар, фураж талап иткәндәр. Улар китеп, ҡыҙылдар килһә — шул уҡ хәл, шул уҡ ҡурҡытыуҙар. Олатайым тиҫкәреләнергә тырышмаған, сөнки һуғыш заманы: хәрби кешеләр атып китергә лә күп һорамаҫ, шуға ла ул барыһының да ыңғайына торорға тырышҡан.

1921 йылғы аслыҡ Әптек ауылы өсөн дә бик ҡаты, йән әсеткес һынау була. Граждандар һуғышы ваҡытында күрше урыҫ ауылы Тимашевкала ауыл ярлылары «Красный партизан» отрядын ойоштора, һуңынан был ауылда барлыҡҡа килгән колхоз да ошо исемдә ҡалды, шул уҡ исем менән өсөнсө мең йыллыҡҡа аяҡ баҫты. Әлбиттә, ауыл асарбаҡтарынан, ялҡауҙарынан төҙөлгән отряд тик тормаған — күңел асҡан, һыйланған, ә бының өсөн, мал табыу өсөн винтовка — иң уңайлы ҡорал. Әйтәгүр, улар «Бей своих, чтоб чужие боялись» тигән ҡағиҙәләре менән бик күп ауылдарҙы бөлдөрәләр.

Ошо ауыр осорҙа ла олатай, ҙур тырышлыҡ күрһәтеп, дүрт малайын, ғаиләһен иҫән-һау һаҡлап ҡала, алты һыйырын да имен-аман йәшәтә. Үҙ көсө менән генә хужалыҡ итеүсе башҡорт ғаиләһендә алты һыйыр камиллыҡ билгеһен күрһәткән. Унан башҡа олатай, яҙға сыҡҡас, Тимашевкалағы Степан ызнакумынан өс һауын һыйыр, Бәрҙәшлеләге Иван ызнакумынан өс һыйыр арендаға алып, тауға — йәйләүгә күскән. Ә һөрөнтө ерҙәрен шул уҡ кешеләргә үҙе арендаға ҡалдырған. Был мәлдә өләсәй ун ике һыйыр һауған, һары май тоҙлаған, ҡорот киптергән.

Олатайҙың хужалығы йылдам ғына алға барған. Ул тимер һабан һатып алған (ул ваҡытта һабанды хәлле кешеләр генә ала алған) һәм ат көсө менән эшләй торған иген һуғыу машинаһы йүнләүҙе күҙ уңында тотҡан.

Бына шул ваҡытта коллективизация тигән нәмә ҡалҡып сыға. Олатайҙың күп уйларға ваҡыты булмай, сөнки болалы йылдарҙан һуң мал-тыуарһыҙ, эш һөймәгән кешеләр арта бара. Ә йүнһеҙ әҙәм, билгеле, зыҡ ҡубып тауыш сығарырға ярата. Олатай был эште яҡшы аңлай һәм колхозға керергә мәжбүр була. Шулай итеп, ул Әптек ауылының беренсе рәйесе булып китә, үҙе менән дөйөм хужалыҡҡа алты һыйырын, алты атын, тимер һабанын, ун ике йөк игенен һәм бер келәтен бирә. Шулай уҡ һөрөнтө ер, бесәнлек, болондар, тау уяһындағы йәйләү һәм көтөүлек тә колхозға күсә. Дөйөм хужалыҡтың үҙенсәлеген һөйләп тораһы юҡ: тәүге йылдарҙа ғына дәрт менән эшләйҙәр, һуңынан инде барыһы ла һүлпәнләнә.

Башҡорт ғәҙәте буйынса, олатайым дүрт улын да өйләндереп, йәнәшә өйҙәр һалып, башҡа сығара. Әммә бәхетле йәшәү оҙаҡҡа бармай, йәйге эҫе көндө бөтә дүрт өйгә лә бер юлы үрт һалыусылар табыла. Беҙҙе, атайҙың өс балаһын, ҡыйыҡ емерелеп төшөр алдынан ғына ҡотҡарып өлгөрәләр, донъя йыһаздары, йорт ҡаралтыһы янып юҡҡа сыға. Бына шулай, һуғыш алдынан беҙ, олатайҙың бөтә ейәндәре, уға килеп һыйынғанбыҙ. Колхоз ударнигы, район алдынғыһы Шәйәхмәт (олатайҙың оло улы) һуғыштың башында уҡ фронтта һәләк була, оло килене Ғәйшә дауаханала үлә, иҫән ҡалған дүрт балаһы балалар йорттарына таратыла. Олатайым үҙе лә һуғыш бөтөүен көтөп еткерә алманы – 1944 йылдың йәйендә астан үлде. Миңә иҫтәлеккә һөйләгәндәре генә тороп ҡалды.

**Парсалар**

*Ҡарабаш турғай кеүек (мәҙәни) ашау тәртибен белгән ҡошто күргәнем юҡ, ул ҡош аҙыҡтың ҡәҙерен белеп ашаған кешегә оҡшаған.*

***

*Иң ғәмһеҙ ашаған ҡош – күгәрсен: ашаған әйберенең өҫтөндә йөрөй, шунда уҡ «тиҙәк ташларға» ла булдыра. Ҡарабаш турғай – күгәрсендең ҡапма-ҡаршыһы.*

## Өләсәй

*Иманым – үҙем!*
*Көрьәндер – һүҙем!*

**Шәйехзада Бабич**

Минең уйлауымса, һәр сабыйҙың иң ышаныслы, иң яҡын кешеһе була. Минең дә балалыҡ йылдарымда шундай шәхес өләсәйем булғандыр. Юҡ, өләсәй татлы телле лә, йомарт та түгел ине, шулай ҙа сабый сағымда уҡ аңлағанмын, күрәһең: өләсәй булмаһа, минең өсөн яҡты донъяның ишеге ябылырға торалыр кеүек... Һәм ғүмерем буйына ҡолағым төбөндә уның һүҙҙәрен ишетеп йәшәйем. Мин белгәндә олатай исем өсөн генә ғаилә башлығы ине. Әлбиттә, ваҡытында бөтә йорт хужалығы уның ҡаты ҡулдарында була. Әммә бер һыйыр ғына ҡалғас, йорт дилбегәһе өләсәй ҡулына күсә. Бар мөлкәтен колхозға биргән өсөн өләсәй олатайҙы үҙенең беренсе дошманы итеп күрҙе, уға аҡланыу өсөн һүҙ ҡатырға ла ирек бирмәне.

Өй эсендәге көндәлек тәртип өләсәй ҡушҡанса ғына үтәлергә тейеш булды, әгәр ҙә берәйһе ул тәртипте боҙһа, шелтә алды, ә инде был ҡылығы икенсегә ҡабатланһа, язаға тарттырылды.

Барыһынан да элек шуныһы ҡыҙыҡ: өләсәй, үҙе әйтмешләй, шыр наҙан кеше, хәҙергесә әйткәндә, бер хәрефте лә танымаған, бер ҡасан да уҡып булашмаған, әммә, һәр кеше бар аҡылын тормоштан алырға тейеш, тиер ине. Эшләгән кеше өләсәй өсөн эш күрһәтеүсе йәки мал табыусы ғына түгел, ә уҡыусы ла, өйрәнеүсе лә, шул уҡ ваҡытта өйрәтеүсе лә булырға – ҡыҫҡаһы, әүлиә кеүек булырға тейеш ине.

Өләсәйҙең көн тәртибе бер ваҡытта ла үҙгәрмәне: ул ҡаты, ғәҙәти. Өләсәй ауырыһа ла, байрам булһа ла, фажиғәле хәлдәр килеп тыуһа ла – бер төрлө ине. Ул сәғәткә ҡарап йәшәмәне, дөрөҫөн әйткәндә, ул ваҡытта сәғәт тигән нәмә бик һирәк кешеләрҙә генә була торғайны, һәм үҙенә генә билдәле эске тойомлауы менән, урындыҡтың билдәле генә бер урынына бер кем дә ҡағылырға тейеш булмаған ашъяулыҡ ҙурлығы таҙа сепрәген йәйеп, намаҙ уҡыр ине. Йәйге эш ваҡытында өләсәй өс рәкәғәт намаҙға күсә. «Хоҙай ярлыҡар мине, Алла үҙе белә... ниңә өс намаҙға күсеүемде». Ул бер кемде лә намаҙға өндәмәне, ә беҙ ул ғибәҙәт ҡылғанда бары тыныс һәм тәртипле ултырырға бурыслыбыҙ. Әммә хәмер эсеүселәр, уйнашсылар был ваҡытта янында торһа – ҙур харамлыҡ кисерҙе... Өләсәйем һәр үткән көнгә шатланды: «Тағы бер көн йәшәнек, үлмәнек, иртәгә лә Алла шулай ҡушһын, шөкөр, балалар, Хоҙайға рәхмәт уҡығыҙ», – тиер ине. Уның йоҡларға яткас уҡый торған доғаһы булды, һәр кис ул шул доғаһын уҡымайынса йоҡламаны. Уҡый башлар алдынан беҙгә ишетелерлек итеп: «Ошо ятыуҙан да тора алмаһам», – тип башлар ине.

Йоҡо доғаһын уҡыр алдынан өләсәйем иҫәп-хисап алып барҙы: баҙҙағы бәрәңге күпмегә етергә тейеш, башҡа ашамлыҡ күпме, етмәгәнен нисек табырға? Һәр ваҡыт: «Мин ҡара иҫәпте яҡшы беләм, һис кемдән оттормам», – тиер булды. Ул ваҡытта ла һалым йыйыусылар ябай кешеләрҙе оторға бик яратты, недоимка өсөн тип йә һыйырһыҙ, йә самауырһыҙ, йә башҡа кәрәк-яраҡһыҙ торғоҙоп ҡалдырырҙар ине. Ауыл Советы депутаттары килеп, әйберҙәр исемлеген яҙа ла тейәп алып китә, ә «мин ваҡытында түләнем» тигән кешене тыңлаусы ла юҡ. Өләсәй ул йәһәттән ҡара иҫәбен һәр көн алып барҙы, ваҡытында түләп, недоимка һораусыларҙы өйгә лә индермәне.

Өләсәйҙең колхозға булған мөнәсәбәте мине ҙур үҫкәнсе аптыраашта ҡалдырҙы. Олатай башҡа мөлкәт менән бергә алты еген атын колхозға тапшырған, әммә баҡсабыҙға ат йөгө менән бер нәмә лә кермәне. Ул ваҡытта ат колхоз ҡулында ине, колхозсылар нисек булһа ла ат көсө менән файҙаланалар. Ә өләсәй: «Колхоздыҡы кәрәкмәй, ҡаҙалһындар», – тине. Бик ҡыҙғаныс хәл, колхозға кергәндә ат түгел, бер ус әйбер ҙә бирмәгән кешеләр активист булып, колхоз мөлкәтенән файҙа күрҙе, утын, бесән, һалам килтерҙе, һәр төрлө башҡа эштәрен башҡарҙы, ә олатайға, тәүге колхоз рәйесенә, асҡа үлер алдынан аҙ ғына он бирергә лә теләмәнеләр. Колхозға малһыҙ кереүселәр был хәлгә тантана итте шикелле. Йәнәһе, бына ниндәй ул Совет власы, ярлыларҙы ҡарай. Шул уҡ активистар колхоз икмәген тыныс ҡына ашай алманы, нисек тә төртмә һүҙ менән өләсәйҙе ирештерергә тырышырҙар ине. Әммә өләсәйем дә һүҙһеҙ ҡалмай: «Туҡта, һин, колхозға тоҡсай тотоп кереүсе! Донъя ул – ҡуласа, килтерә лә бер баҫа»,– тиер ине. Ысынлап та, уның һүҙҙәре хаҡҡа сыҡты, донъя барыһын да тигеҙләне: йә күтәреп алды, йә атып бәрҙе, кеше хаҡы уларҙы барыбер ебәрмәне.

Өләсәйҙең иң ҙур ҡағиҙәһе – харамды ашамаҫҡа. Харам сусҡа ите генә түгел, ул – кешегә тейеш булмаған аш, һәр ризыҡты ашар өсөн кешенең уға хаҡы булырға, аҙыҡ хәләл көс менән табылырға тейеш. Ә башҡа аҙыҡты ейгәндә кеше уның ҡайҙан, кем тарафынан табылғанын белергә, Алланан ғәфү үтенеп ашарға тейеш. Өләсәйем өсөн совет етәкселәре, һалым йыйыусылар һәм башҡа шундай бәндәләр кәсепһеҙ, харам ашаусылар иҫәпләнде.

Төшөнкөлөккә бирелеүселәр, ҡул ҡаушырып ултырыусылар өләсәйгә дуҫ түгел: һәр кем йәшәр өсөн ашарға тейеш, ә ашар өсөн эшләргә тейеш. Мине өләсәй биш йәштән өйрәтә башланы, ул «йомош» тип атала ине. Әгәр йомош үтәлмәһә, шелтә эләгә, ә ҡайһы ваҡыт ул шелтә берәй тәмле нәмәнән мәхрүм булыу менән барып бөтөргә мөмкин. Әммә, хәтерләүемсә, уларҙы үтәмәгән сағым бик һирәк булды, күрәһең, сөнки өләсәй мине һәр саҡ маҡтай ине. Ә уның маҡтауы миңә һары майҙай яғыла. Уның ҡарауы, мин алты йәштә эш-көшкә өйрәндем. Өләсәйем миңә йәйге бесән, утын әҙерләү ваҡытында: «Һин эшләп ашайһың», – тип әйтә торғайны.

Һөнәрселек яғынан да өләсәй кешенән ҡалышыуҙы яратманы. Мәҫәлән, ул киндер иләп, балаҫ һуға белде, был шөғөл өсөн уның бөтә ҡорамалдары ла бар ине. Беҙҙең өйҙә бүтән кеше һуҡҡан балаҫ йәйелмәне. «Буйлыҡ» киндерҙе ул күрше урыҫ ауылында йәшәгән ызнакумдарынан барып ала, ә «арҡырыһы»на өйҙәге бер генә сепрәкте лә әрәм итмәй файҙалана.

Үҙ кейемдәрен дә, беҙҙең кейемдәрҙе лә үҙе текте. Әлбиттә, ул ваҡыттағы беҙ кейгән ыштандарҙы күрһәң, көлөп үлерлек, нишләйһең, заманаһы шундай булды.

Мин, ғәҙәттә, мейес башында йоҡлай инем, унда минән башҡа тағы ла бер нисә бала һыйырлыҡ урын була торғайны әле. Өләсәйем сығарған мейес шулай тыштан килбәтһеҙ генә булһа ла, кешеләр әйтеүенә ҡарағанда, йылыны ла һәйбәт тота, һәйбәт тарта ла ине. Ул ваҡытта матурлыҡ ҡайғыһы юҡ, файҙалы һәм уңайлы булһа, шул етә.

Өләсәйемдең бөтә һөнәрҙәренән тыш иң мөһиме — табиплыҡ һәләте булды. Кемдәр генә килмәй ине уға өшкөрттөрөргә. Бигерәк тә күҙ ауырыуҙары менән килеүселәр күп. Ниңәлер, ул ваҡытта күҙҙәренә сүп төшөп этләнеүселәр байтаҡ ине. Улар араһында урыҫ кешеләре лә була торғайны. Ҡайһы ваҡытта өләсәй өшкөргәндә беҙ, түҙә алмай, көлөшә инек. Әлбиттә, аҙаҡтан ныҡ ҡына эләгә торғайны. Ҡайсаҡ кешеләр өләсәйемә рәхмәт әйтер өсөн генә лә килә торғайны, тимәк, ысынлап та уның ярҙамы тейгән. Әммә өшкөрөү бер өләсәйҙең генә һөнәре булмаған. Мәҫәлән, күрше Ибраһим бабайҙың олатайы ла дауалау менән шөғөлләнгән, уға һирәкләп урыҫтар ҙа килгән. Ибраһим бабай ҙа, бала булғанлыҡтан, көлөп ултырған, һәм, әлбиттә, олатаһына ҡамасаулаған. Олатайы, урыҫтарҙың үҙен аңламауҙарынан файҙаланып, ғәрәпсә һүҙҙәрҙән башҡортсаға күскән һәм:

*Исеме — нарыш, хаҡы — бер бот арыш,*
*Ибраһим, көлдөрәһең, бөлдөрәһең,*
*Көлкөң килһә, тышҡа сыҡ,*

— тип һамаҡларға мәжбүр булған.

...Ул ваҡытта Әптек ауылы ҡатындарына бала табырға больница кеүек үҙәктәр булмаған. Бала таптырыу — кендек инәләренең эше. Минең өләсәйем дә шундай әбейҙәрҙең береһе ине. Миңә шуныһы билдәле: кендек әбейенең исеме яңы тыуған сабыйҙың ҡушаматына әүерелә. Бына шул хәл инде минең өсөн шаҡтай борсоулы булып сыҡты. Мин йәй көнө тыуғанмын. Ҡыҙыу мәл. Эш ваҡыты. Күрәһең, өләсәй өйҙә булмаған. Беҙ әле үҙебеҙҙең өйҙә йәшәгәнбеҙ. Мине донъяға килтерер өсөн күрше Хәҙисә әбейҙе саҡырғандар, шуға минең ҡушаматым «Хәҙисә әбей» ине. Ә ике туғандарым Иҡсан менән Әҡсән өләсәй ҡарамағында тыуғандар, уларҙың ҡушаматтары ла — «Көмөш әбей». Был хәл миңә бик отолошло. Сөнки улар мине «Хәҙисә әбей» тип үсекләй торғайны, ә мин «Көмөш әбей» тип әйтә алманым.

Өләсәйем бер тапҡыр ҙа табиптарға мөрәжәғәт итмәне, дарыуҙарын да үҙе таба ине. Уның дарыуҙары — үләндәр: әрем, дегәнәк япрағы, тамыры, юл япрағы, мәтрүшкә һәм башҡа төрлө тәбиғәт бүләктәре.

— Мин бер генә ауырырмын, — тине өләсәй. Шулай булып сыҡты ла. Ул 86 йәшендә ауырып китте һәм, беҙҙе ҡалдырып, «ысын донъя»ға күсте.

**Парсалар**

*Аҙыҡ табырға ҡарабаш турғайҙан да оҫта ҡош юҡ. Эйе, ҡышын һыуыҡ көндәрҙә аҙыҡ табыу еңел түгел.*

***

*Ҡарабаш турғай ҡурҡыу белмәй. Был сифат — аслыҡтан...*

# Яҙмыш ҡосағы

*Күч элден кирсә, төрү төнлүктин чыкар*
*(Күс (күмәк кеше) алдан керһә, түрә*
*төнлөктән сығыр).*

**Мәхмүт Ҡашғари**

Һәр кемдең яҙмышы үҙ ҡулында. Эйе, «яҙмыш» тигән һүҙ минең ҡолаҡта сабый саҡтан яңғыраны, тынғы бирмәне, маҙаға тейҙе, иҫәпһеҙ һорауҙар тыуҙырҙы. Тәбиғи, бала һәр саҡ ололарҙан яуап көтә. Баланың биргән һорауҙары ябай. Был нимә? Ниңә шулай? Ни өсөн? Ашығырға түгел. Бала бер ҡасан да өҫтән-мөҫтән бирелгән яуапҡа риза түгел, етмәһә, бала көткән яуаптың тәрәнлеге һәр саҡ артыу өҫтөндә.

Бала үҙенең зирәклеге менән һәр саҡ «селекция» алып бара. Һорауына яуап бирмәгән олоно күңеленән генә һыҙып ташлай, еңелсә яуап биреүсене артҡараҡ ҡуя. Һөҙөмтәлә һәр бала үҙе менән ихлас һөйләшкән кешеләрен, йә булмаһа бер кешеһен таба. Шуныһы үкенесле: бала һорауҙарына тулыһынса яуап биреүсе кеше юҡ. Булыуы ла мөмкин түгел, сөнки донъя, көндәлек тормош бар һорауға яуап бирә алмай.

Һәр кемдең яҙмышы үҙенең ҡулында. Был аксиома — совет мәктәбенең иң беренсе һүҙе. Ысынлап та, тырышып уҡыған кеше, ҡыйынлыҡтарҙы түҙемлек менән ҡаршы ала белгән кеше үҙ киләсәген ыңғай юлға һала. Әйтерһең, һәр кемдең, әкиәттәге кеүек, һайлап алырлыҡ юлдары алдында асыҡ күренеп ята.

Донъялағы бер генә кешенең дә яҙмышы үҙ ҡулында түгел. Ысынбарлыҡта былай мөмкинселек юҡ, сөнки һәр бер һорауҙың яуабы тағы бер нисә һорау тыуҙыра. Шулай уҡ һәр заттың теләгән бер хәрәкәте киләһе мәлгә бер нисә яңы хәрәкәт тәрән билдәләй. Дөрөҫөн әйткәндә, тормош һәр кемгә һәр саҡ хата яһау-яһамау шартын ҡуя. Йәнә һәр хата — бер күҙлектән хатаһыҙлыҡ, ә икенсе күҙлектән хата. Етмәһә, ҡараштар икәү-өсәү түгел, күп.

Шулай, һәр кемдең ғүмере — хаталар теҙмәһе. Бер үк ваҡытта шул уҡ ғүмер — берҙән-бер хатаһыҙлыҡ күрһәтмәһе, сөнки һуңғы мәлдә кеше тере икән, тимәк, хаталары юҡ.

Үҙем тыуған дәүер... Яңы дәүләт ҡороусылар, һис шикһеҙ, берҙән-бер яҡты юл табыуҙарына ышаналар. Ышанмағандарҙы ышандыралар, теләмәгәндәрҙе ҡыҫалар, ҡурҡыталар. Ә болғаныш яңы шарттар тыуҙыра. Әйтәйек, ышанмаған зат ышаныусылар сафында икән, ышаныусыларҙың күптәре үҙҙәрен ышанмаусылар исемлегендә күрә. Буталсыҡ ваҡыт...

Минең донъяға килеү бына шул буйраҡ һыуҙа аҡҡан тапҡа оҡшаған. Эйе, шулай, тыуған көндән бәлиғ булғансы яҙмышыма үҙгәртеү хәрәкәте яһарлыҡ бәләкәй генә лә форсатым булманы. Эйе, яҙмышым үҙ ҡулымда булманы.

Әйттем дә: мин сабый саҡта өйөбөҙ, барлыҡ ҡаралтылары менән, утта янған. Беҙҙе, өс баланы, ут эсенән йолоп өлгөргәндәр. Бик шомло янғын. Олатайҙың дүрт улының да донъялары бергә янған, йәй уртаһы, ҡыҙыу эш ваҡыты, бар зат ялан эшендә. Ә беҙ, сабыйҙар, йоҡлағанбыҙ.

Бәлә бер үҙе йөрөмәй, тиҙәр, күп тә үтмәй, атай төрмәгә китә.

...Эйе, бер кис ауыл ирҙәре колхоз канцелярияһы алдында ләкәпкә бирелгән. Тәмәкеһеҙ һүҙ һүҙ түгел, тартырға уйлағандар. Кемдер тәмәке кисеты сығарған. Тәмәке төрөргә гәзит кәрәк, гәзит сығарыусы ла табылған. Ә өсөнсөһө, был гәзитте йыртырға ярамай, күрәһегеҙ, унда Сталин һүрәте төшөрөлгән, ти. Йәнәһе, атай, Сталинһыҙ гәзит юҡ, тигән. Гәзитте алған, йыртып тәмәке төргән, ҡабыҙған. Ә иртәнсәк «халыҡ дошманы»на әйләнгән, алып та киткәндәр — ун йылға.

Эйе, кулактарға ҡаршы көрәш заманаһында Әптегебеҙҙә ГУЛАГ киҫәге асылды, ауыл ерен тартып алып, төрмә ҡорҙолар.

Төрмә булған урында — ҡаты тәртип, ә ауылда махсус уполномоченный йәшәй.

Колхоз иҫәбенә. Сабый булһам да, фамилияһын иҫемдә ҡалдырғанмын — Яппаров. Бик әшәке зат ине.

Әлбиттә, минең атайҙан «халыҡ дошманы» килеп сыҡмай, алып китеүҙең башҡа сәбәптәре лә бар.

Беренсенән, төҙөлөштәрҙә бушҡа эшләүселәр кәрәк, шуға атай Һамар эргәһендәге Безымянка биҫтәһендә тотҡонлоҡта эшләгән. Икенсе сәбәп – олатай беренсе булып колхозға инергә мәжбүр булған. Ул, колхоздың тәүге рәйесе булараҡ, күптәргә оҡшамаған. Әйтәйек, ауылдың атаҡлы байы Ильяс ярты мең самаһы йылҡы малы аҫрап, бер нисә кибет тотҡан. Ә Граждандар һуғышы мәлендә барса мөлкәтен тараткан. Эйе, бер көршәк алтын, хазина таштар тураһындағы легенда бөгөн дә онотолмаған. Ә Ильяс байҙың ейәндәре колхозға тоҡсай тотоп, ярлыларса ингән. Бәй, атай төрмәгә киткәс, улар ауылда өҫтөнлөк алды.

Бына нисек...

Әгәр ҙә был тәмәке «тәнәфесе» булмаһа?

Ул ваҡытта тракторсылар һөнәре үтә һиммәтле һаналған. Атай тракторсылыҡка уҡып ҡайтып, ике йыл тракторҙа эшләп өлгөргән. Ҡышҡы курстарҙа уҡыу-яҙыуға, иҫәп-хисапҡа өйрәнгән. Эйе ләһә, алдағы көндәрҙә колхозда етәксе булырлығы күренеп тора. Етмәһә, ул – актив уйын ҡуйыусы, бейеүсе, һабантуйҙарҙа танылған көрәшсе.

Көнсөллөк зыянһыҙ бөтмәй. Бына шулай, етәкселәр араһында ла системаны аҫтан кимереүселәр бихисап булған.

Тағы ла бәлә: һуғыш башланған, ә беҙҙең өсөн был хәл үлем хөкөмөнә тиң.

Хәлбүки, Сталинград һуғышы түрәләрҙең тәкәбберлеген кәметкән, шуға атайҙы ла төрмәнән сығарғандар. Сталинградҡа ебәрер алдынан, ғаиләһен күрһен өсөн, бер аҙнаға өйгә ҡайтырға ла рөхсәт биргәндәр. Атай төндә ҡайтҡан, таң алдынан киткән. Беҙҙе, өс баланы, уятып тормағандар. Ваҡыты шулай булған.

Атайҙың һуғыш юлы аптырашта ҡалдыра. Хәтеремдә, фронттан фотоһүрәт килде. Һүрәттә – бер төркөм һалдат, береһендә лә ҡорал юҡ. Ҡулдарында – бысҡылар, балталар, багорҙар. Һүлпән ҡараштар. Атай ҡулында – ике тотҡалы бысҡы. Эйе, был сапер батальоны алғы һыҙыҡта, пуля ямғыры, бомбалар аҫтында күпер батальондың барыһын тиерлек теге донъяға оҙата. Яңылар килә. Шулай итеп, Сталинград, Курск дуғаһы, Днепр, Карпат тауҙары, Венгрия, Прага, иң аҙаҡ Вена, йәғни Австрия. Югославиялағы һуңғы бәрелештәрҙә лә ҡатнашып өлгөрә.

Яҙмыш һәр саҡ аптырата. Өләсәйҙең дүрт улы һуғышҡа китә, ә өсәүһе һуғыштың башында уҡ һәләк була.

Иң олоһо – Шәйәхмәт. Күргәҙмәләргә йөрөгән колхоз алдынғыһы фронтта ятып ҡалғас, ҡатыны Ғәйшә инәй сирләп үлгәс, дүрт бала йәтим ҡала. Өләсәйҙең өсөнсө улы Миңлеғәле, ысын патриот, Ленинград фронтында һәләк була. Дүртенсеһе, иң кесеһе Хәсән фронтта бер ай ғына була. Тәҡдир... Ә атай? Һуғыштың тәүге көндәрендә ул һаҡ аҫтында күпер һала. Эйе, ул ваҡытта «заградотрядтар» булған. Ут аҫтында күпер төҙөү меңгә бер ышаныс ҡалдырырға теләмәгән. Атай бер нисә тапҡыр ҡаты контузия алған, күп тапҡыр һыуға аҡҡан, бигерәк тә Карпат йылғалары уҫал, ҡаты ағышлы икән.

Атай фронттан ҡайтҡас, башындағы аҡ сәстәрен минән сүпләтергә ярата торғайны. Ә мин: «Атай, нишләп һинең башың Ташлығыр тауының башына оҡшаған?» – тип һорап аптырата инем.

Эйе шул, өс ҡаланың һуғыштан һуңғы йылдарҙа төҙөлгән йорттарының нигеҙҙәре беҙҙең Әптек ауылы эргәһендәге Ташлығыр тауынан табылған таштарҙан төҙөлгән. Ташлығыр түбәһе хәҙер ҙә йәмһеҙ, йырыҡ-йыртыҡ.

Атайҙың баш яраһы хәтәр ине, бомба соҡоронан алғас, барыбер үлә тип, яраны

тегеп маташмағандар. Бинт менән урағандар — эш бөткән. Атайҙың һуғыш эпизодтары иҫ китерлек.

Бына, бер нисә көн ашамаған батальонды йылға ярына килтергәндәр. Асыҡ урын. Ялан кухняһы килгән. Атай, ниҙер һиҙенеп, яңғыҙ тирәк ҡыуышына инеп, ашатыу сиратын күҙәтергә булған. Теге яҡ ярҙан асылған көслө ут батальонды тулыһынса юҡ иткән. Тере ҡалыусы булмаған, ҡасыр урын да юҡ. Заградотряд әҙер генә тора.

Бына Австрия. Атай — повар. Ат егелгән ялан кухняһы менән урман юлынан килә. Үҙе арттан йәйәүләп атлай. Ә үҙе ултыраһы урынға шинель-фәләндән муляж (ҡараҫҡы) яһап ултыртҡан. Снайпер муляжға атҡан, ә атай — снайперға. Снайпер ағас башынан ҡолап төшкән. Ә атайға ҡоралды Курск дуғаһында ышанып биргәндәр. Эйе, ул, ниһайәт, «халыҡ дошманы» түгел. Тәүге тотҡан ҡоралы — танкыға ҡаршы ата торған мылтыҡ — ПТР.

Карпат тауҙарындағы бер ҡаты бәрелештән һуң Брежнев атайҙың ҡулын ҡыҫҡан: «Һиңә герой бирергә лә бит, ярамай». Бына шулай, атай тере ҡайтты. Ҡайтыу шатлығы оҙаҡҡа һуҙылманы. Төрмә һәм һуғыш атайҙы икенсе кешегә әйләндергәйне. Эйе, атайҙы колхоз бригадиры итеп ҡуйҙылар. Ә был ул ваҡытта — иң тынғыһыҙ эш, сөнки колхоз эше — мәжбүри эш. Бушлай. Тауыш-тынһыҙ бер кем дә эшләргә теләмәй. Икенсе яҡтан, бригадир эскелектә ғәйепләнә. Эйе, һәр һалдатка буйҙаҡлығына риза түгел, һәр береһе бригадирҙы эсереп, үҙ яғына ауҙарырға тырыша.

Күп йылдар үткәс, атайҙың ниндәй бәләгә осрағанын аңланым. Атайҙың контузиялары менән бригадир эше һыйыша алмай, баш яраһы — өҫтәмә. Ындай контузиялар менән эсеү ҡәтғи тыйыла.

Айныҡ килеш атай — ғәҙәти хәлдә, ә эсеп алһа, үҙен-үҙе белештермәй, тулыһынса аҡылһыҙ хәлендә ҡала. Бына ниндәй яҙмыш! Уҡып белдем: атайға беренсе йәки икенсе группа инвалидлыҡ танытмаһы бирергә тейеш булғандар. Бирмәгәндәр. Исмаһам, эсергә ярамай, тип әйтеүсе лә булмаған. Бына нисек.

Атайҙы бер генә табип та күрмәгән? Аптыраш! Уның ҡарауы, атайҙың был хәленән элекке дошмандары оҫта файҙаланған.

Ялған донос яҙылғандан һуң байтаҡ ваҡыт үткәс, беҙҙең өйгә атай менән следователь килде. Күршенән үтескә ит алып бешерелде. Эйе, атай ҡушҡас, мин магазиндан үҙ аҡсама (ололар бушҡа эшләһә, беҙ, балалар, әҙ-мәҙ аҡсаға эшләнек) бер литр араҡы алып килдем. Следователь атай менән бик ихлас һөйләште. Эсеп алғас, бик яҡын дуҫлыҡ күренде. Ҡосаҡлашыу, хатта үбешеп алыу. Бына нисек, следователь атайҙы иң яҡын дуҫына тиңләне.

— Һинең ғәйебең раҫланмай, һиңә ялған ғәйеп япҡандар. Бына, был ҡағыҙға ҡултамғанды ҡуй ҙа «эш» тураһында онот, — тине.

Атай үҙенең ҡайҙалығын, кемлеген онотҡан — ҡултамғаһын ҡуйҙы.

Ә мин эҙәрмәндең бер һүҙен дә ситтә ҡалдырманым. Быны ул аҙаҡ ни әйтте: «Мин башта кешенең ашын ашайым, ә аҙаҡ... башын ашайым».

Ул ҡайтып китте, Петровскиға, ә атай был «эш» тураһында онота башланы. Ярты йыл самаһы уҙғас, үҙен алып киттеләр. Биш йылға.

Сталин үлеп, амнистия сыҡҡас ҡына атай ҡайтты. Ул Ногинскиҙа, Томскиҙа хәрби объекттар төҙөлөшөнә йөлеп ителгән икән.

Ә беҙ? Беҙ, балалар, үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күрҙек. Эйе, тере ҡалыр өсөн беҙ ололарҙан күберәк эшләнек. Алдашмайым. Мәрхәмәтлеләр беҙҙе «атайлы йәтимдәр» тине. Ә ҡалғандар? Әйтеп тормайым.

Типкеләүселәр ҙә булды. Типкеләндек. Яуап бирергә лә өйрәндек. Эләкте. Уларға ла.

Эйе, яҙмыш — ҡуласа, бер алдын, бер артын аса.

# Ғәйшә

Яҙғы матур көндәр килде. Ҡар ирегәнен түҙемһеҙлек менән көтөп алдыҡ. Көндәр йәмле. Тик өләсәйҙең өйөндә генә күңелһеҙ, сөнки ҡорһағыбыҙ ас. Ошо көндәрҙең береһендә беҙгә канцелярияға саҡыртып йөрөүсе апай килеп инде. Барыбыҙ ҙа һағайып ҡалдыҡ. Сөнки колхоз канцелярияһынан яҡшы хәбәр менән бик һирәк йөрөйҙәр: йә заем таратыусылар тураһында хәбәр була, йә түләнелмәгән налог ҡағыҙы килтерелә, йә булмаһа фронттан “ҡара ҡағыҙ” ебәрәләр. Өләсәйемдең былай ҙа бер улының – минең атайымдың ғына тере хәбәре бар әлегә. Килгән апай, хәлде аңлай һалып: «Мин һеҙгә яҡшы хәбәр алып килдем», – тип аңлатты.

– Һеҙҙең өйҙән биш йәше тулмаған бер фронтовик малайын списыкка индерҙеләр, ә ул исемлек Шаһырбан апайға бирелгән. Малайығыҙ һәр көн бер тапҡыр, унда барып, ашап ҡайта ала. Тик шуныһы: биргән ашты, икмәкте малай шунда ғына ашап бөтөргә тейеш, алып ҡайтырға ярамай.

Был малай мин инем. Шаһырбан инәйҙең өйө өләсәйемдең өйөнә яҡын. Беҙҙең тыҡрыҡтан төшкәс, ҙур урамда, өләсәйҙең бәрәңге баҡсаһынан һуң Шаһырбан инәйҙеке башлана. Минең өсөн унда барыуы бик анһат. Икенсе көн әйткән ваҡытҡа Шаһырбан инәйҙең өйөнә барып индем, ул мине шунда уҡ өҫтәл артына ултыртты, алдыма туҫтаҡ тултырып ҡул туҡмасы менән бешерелгән аш ҡуйҙы. Ашта хатта ит киҫәге лә бар ине. Таҙа ондан бешерелгән бер телем икмәк тә телеп биргәс, түбәм күккә тейгәндәй булды. Әммә ҡорһағым әҙ ашарға өйрәнгәс, ашымды ғына ашап бөтә алдым. Ә икмәк киҫәген, өләсәйемә күстәнәскә бирергә тип, йәшереп кенә ҡуйыныма тыҡтым. Юғиһә, ул көн һайын: «Мин булмаһам, һеҙ ни эшләрһегеҙ, сәүит хөкүмәте һеҙҙе аҫҡа үлтерәсәк», – ти. Мин дә уға изгелек эшләйем әле.

Минең былдай «ҡорһаҡ байрамдары» оҙаҡҡа барманы. Бер көндө, мин шым ғына өҫтәл артында ашап ултырғанда, был өйгә бер апай килеп инде. Шаһырбан инәй ҡайҙалыр сыҡҡайны. Шуға ул ҡаҙанлыҡҡа үҙе барып, ҙур сеүәтәгә тултырып аш һалды, ике-өс кеше ашарлыҡ ит киҫәге лә өҫтәне. Ике киҫәк икмәк телеп алғас, минең яныма ултырып йыпырырға кереште. Үҙе уҫал итеп миңә ҡарай. Мин, ашауымдан туҡтап, ни эшләргә белмәй аптырап ултырам. Был урта йәштәрҙәге бисә өҫтәлдә ятҡан дәфтәрҙе алып ниҙер уҡыны ла былай тине:

– Һинең атайың фронтҡа төрмәнән китте. Шуға ла мин һине буш ашаусылар исемлегенән һыҙам. Башҡаса килеп йөрөмә.

Мин бер һүҙ ҙә әйтә алманым. Шулай ҙа алдымдағын ашап бөтөп, икмәгемде алырға хәлем етте. Ҡайтҡас был турала өләсәйемә һөйләгәйнем, ул асыуланды, хатта ҡарғаны: «Ярай, ҡаҙалһындар, бушлай ашарға яратыусы кешеләр бит улар. Ғәйшә уның исеме. Шулар бит инде, күрше Сәлих ауылының ярлы-ябағаһы, колхозға буш тоҡсай тотоп килделәр. Хәҙер кеше булғандар! Үҙҙәренең малдары булмаһа ла, кешенекен ҡарарға яраталар»,– тине.

Һуғыш алдынан Ғәйшә активистка булып ала, колхоз түрәләренә яҡын йөрөй башлай... Аҙаҡ, белеүемсә, минең атай менән бергә үҙешмәкәр түңәрәк ойоштороп, театрҙа уйнаған. Бәлки, Ғәйшәнең атайыма үпкәһе лә булғандыр. Әммә аслыҡтан интеккән баланың ни ғәйебе бар инде?! Мин бәләкәй саҡта ауыл мәсетенең өҫкө ҡатында клуб ине. Кешеләрҙең һөйләүенсә, минең атай бейеп, сәхнәһенең иҙәнен дә һындырған. Ғәйшәнең баш-баштаҡлығына ҡаршы бер ни ҙә эшләй алманыҡ. Теләһә ҡайҙан килеп колхоз менән идара итеүсе кешеләр араһынан да беҙгә ҡолаҡ һалыусы булманы.

Мин һәр саҡ был ҡатынды күҙәттем һәм, үҫә төшөүгә, уның ниндәй кеше икәнлеген үҙем өсөн бер аҙ асыҡлай төштөм. Ул һәр ваҡыт тип әйтерлек ферма мөдире булып эшләне. Ә һуғыш ваҡытында уға ауыҙ асып бер кем бер һүҙ әйтә алманы.

Сөнки ул сельсовет рәйесе Чуркиндың яратҡан һөйәркәләренең береһе һанала ине. Ә инде ире фронтта һәләк булғас, ул үҙен азат ҡатын һанап, һөйәре менән мөнәсәбәтен бер кемдән дә йәшермәй башланы, хатта унан бала табып алды. Улар бер-береһенә тап килеп, «силәгенә күрә ҡапҡасы» кеүек ярап торалар ине.

Тормош барыбер үҙенекен итә. Күпме генә ҡасып йөрөһәм дә, күп тапҡыр миңә лә Ғәйшә менән осрашырға тура килгеләне. Унынсы класты тамамлағанда, мине Салауат Юлаев исемендәге колхоздың комсомол ойошмаһы секретары итеп һайланылар. Ул ваҡытта колхоз Әптек һәм Сәлих ауылдарын берләштерә ине, район үҙәге иһә — Стәрлетамаҡ ҡалаһында. 1957 йыл. Хрущевтың «эреләштереү» мәле. Миңә прокуратуранан повестка килеп төштө. Саҡырыу ҡағыҙы Ғәйшәгә лә бар икән. Кемдер «ферма мөдире һәр көн колхоз һарығын һуя, йәмәғәт милкен әләф-тәләф итә» тип ялыу яҙған, ә аҙағына «комсомолецтар» тип имза ҡуйған. Әлбиттә, мин кис көнө үк асыҡлап ҡуйыуымса, уны комсомол ағзаларының береһе лә яҙмаған һәм, белеүемсә, яҙырға йыйыныусы ла юҡ. Атайым да: «Улым, үткәндәрҙе иҫеңә төшөрөп, иҫәпләшәм тип, бер-бер хәл ҡылаһы булма, уларҙы барыбер төҙәтеп булмай. Ә Ғәйшәне төрмәгә ултыртып ҡына һиңә еңеллек килмәйәсәк. Эт менән эт булмайҙар», — тине.

Күрһәтелгән көндө колхоз тырантасына ултырып, Ғәйшә менән Стәрлетамаҡҡа килеп төштөк. Прокурор бүлмәһенә мине беренсе индерҙеләр. Теге ялыуҙы уҡырға бирҙеләр. Ысынлап та, унда яҙылғанса, ферма мөдире һарыҡтарҙы йыш һуйҙырта, иҫәбен үҙе генә белә. Ә һуңынан һуйылған йәндәрҙе «үлгән» итеп күрһәтә лә ҡуя.

— Дөрөҫ яҙғандармы? Кем яҙған? — Прокурорҙың һорауҙары шул булды.

— Был яҙмаларға комсомол ағзаларының ҡатнашы юҡ, ә иҫәпләнмәгән мал һуйыу эштәре миңә ҡараңғы, — тинем.

Мине оҙаҡ тотманылар. Ғәйшә ингәс, уның менән оҙағыраҡ һөйләштеләр, әммә ул эргәләренән күңеле күтәрелеп, борсолоулы йөҙө асылып килеп сыҡты.

Ҡайтыу юлына төштөк. Стәрле беҙҙән байтаҡ ҡына алыҫлыҡта урынлашҡан. Шуға ла Торатау үрен менгәс, Мәлгәштелә атты туғарып, һыу эсереп алдым да үлән ашарға ебәрҙем. Үҙем ағас төбөндәге үләнгә һуҙылып төштөм дә уйҙарға сумдым. Ҡараһам, эргәмә Ғәйшә лә килеп ятты. Күңеле күтәренке.

— Матур ғына егет булып үҫеп еткәнһең икән. Хәҙер һиңә ҡатын-ҡыҙ менән уйнарға ла ваҡыт. Әйҙә, өйрәтәйем, — тип үрелә башланы. Аптырамай ғына:

— Юҡ әле, миңә әлегә иртәрәк, тип уйлайым, — тип яуапланым.

Ул ваҡытта миңә армияға китергә бер нисә ай ғына ҡалғайны.

Әлбиттә, ул осорҙа Ғәйшә кеүек ҡатындар ауыл һайын булды. Әммә мин уларҙы ғәйепләмәйем. Бары руссалап: «Бог вам судья», — тип кенә әйтер инем. Ғәйшә тураһында хатта ҙур бер китап яҙып та булыр ине. Әммә был минең төп маҡсатым түгел.

Өләсәй әйтмешләй, ҡарап йөрөргә кәрәк, сөнки донъя бер алдын, бер артын күрһәтә. Шул уҡ йәй беҙ, ферма эшселәре, алыҫ болонда колхоз малдарына бесән әҙерләйбеҙ. Ҡунып йөрөр өсөн ҙур ҡыуыш ҡорғанбыҙ. Көнөнә өс тапҡыр ашарға ла яланда ғына әҙерләйҙәр. Беҙҙең етәксе — әлеге ферма мөдире Ғәйшә. Эшләнәһе эштең һөҙөмтәһен унан талап итәсәктәр. Шуның өсөн ул һәр төрлө юлдар менән йәштәрҙе бесәндә тоторға тырыша. Күңел асыу кәрәклеген дә аңлай. Юғиһә, егеттәр ауыл яғына ҡайыра башлай. Бына шуның өсөн дә Ғәйшә колхоз эшселәренә сәйгә тип биргән шәкәрҙән ҡыуыш эсендә бал әсетә. Шул һый әҙер булыуғараҡ беҙ аҙнаһына бер тапҡыр күмәкләп мәжлес яһайбыҙ. Бал эсеп баш әйләнгәс, мин дә үҙемде ысын мәғәнәһендә егет итеп тоя башлайым. Йоҡларға ваҡыт еткәс, бер ҡыҙ минең ҡуйынға эләгә. Бәлки, киреһенсә, мин эләккәнмендер. Әммә һәр кем үҙ урынын табып бөткәс кенә, ҡыуышҡа үҙ күңелен күптән күреп өлгөргән Ғәйшә килеп инә һәм, ирҙәр ҡыуышында ҡатын-ҡыҙ булырға

тейеш түгел тип, уларҙы ҡыуып сығара. Әлеге ваҡытта уйлап ҡуям: әгәр ҙә шул ваҡытта ул минең ҡуйындағы ҡыҙҙы ҡыуып сығармаһа, тормош юлым ниндәйерәк йүнәлеш алыр ине икән? Уныһын бер Хоҙай ғына белә. Күренмәгән эш һәр саҡ ҡараңғы.

**Парсалар**

*Иң оятһыҙ ҡош — сәүкә. Сәүкә балаһы туҡтауһыҙ ашарға һорай. Балконға сығарып ҡуйҙыҡ, китмәй, нимәлер талап итә. Ҡыуып ебәрҙем. Иң рәхмәтле ҡош — ҡарабаш турғай.*

## Чуркин

*Сәнсел инде, ҡанға тонсоҡ, ул, ҡаҙал:*
*Ҡиммәтең юҡ бит һинең нуль ҡәҙәр.*

**Шәйехзада Бабич**

Тирә-яҡҡа ҡарай-ҡарай башаҡ йыябыҙ. Бойҙай башаҡтары. Өләсәй менән. Тирә-яҡты ҡарау мөһим, сөнки башаҡ — колхоздыҡы, ә колхоз — хөкүмәттеке. Әгәр күреп ҡалһалар, йыйған башаҡтарың менән һауытыңды тартып алалар, акт яҙалар һәм канцелярияға саҡырталар. Ә халыҡ барыбер йөрөй, башҡа сара юҡ, тамаҡ йөрөтә. Өләсәй әйтмешләй, ҡышын ҡар аҡ, ләкин ҡарҙы ашап булмай.

Беҙҙең башаҡ йыйған яландағы бойҙайҙы комбайн йөрөп һуҡҡан. Төшкән һаламдары өйөлөп ята, уларҙы эҫкертләп өлгөрмәгәндәр. Шул өйөмдәрҙең береһенә мине өләсәй саҡырып алды. Өйөмдөң бер башында йәнселгән бойҙай башаҡтарының ҡалдыҡтары бар. Өләсәй шунан бер ус ала ла өрә: «Күрәһеңме, — ти, — был өйөмдә, ашъяулыҡ һалып елгәрһәң, бер бот бойҙай сыға. Хәҙер елгәрә башлаһаҡ, берәйһе күреп ҡалыр, шуға ла ҡараңғы төшә башлағас ҡына килеп эш итеп алырмын», — тип миңә ҡарап торорға ҡуша. Өләсәй үҙе әйтмешләй, мин — тыңлаусан малай, шунда уҡ риза булам. Ул ҡайтып китә, ә мин шул тирәлә эҙләп башаҡ йыям, кис етеүен көтәм. Әңер ҡуйыра башлаған һайын мине борсолоу биләй. Яҡындағы яңғыҙ ҡайын япраҡтарының шаулауы ла көндөҙгөгә ҡарағанда шомлораҡ, етмәһә, зыярат та алыҫ түгел. Мин бигерәк тә шул зыяратынан ҡурҡам. Тик бер нәмә лә эшләп булмай, үҙем теләп риза булғас, кемделер ғәйепләй алмайым, шөрләңкерәһәм дә, ултыра бирәм. Көндөҙ ябай ғына күренгән нәмәләр хәүефле, ҡурҡыныс ҡиәфәт ала башланы, ә өләсәй һаман да юҡ. Әлбиттә, ул онота торған кеше түгел, әйтә икән, тимәк, килә. Тамам ҡараңғы төштө. Миңә йүгереп ҡайтып китеүҙән башҡа әмәл ҡалманы. Ҡайтып кереүемә өй эсендә ығы-зығы киләләр ине. Ауыл Советы депутатын да килтергәндәр. Ә сельсовет рәйесе Ғариф, «пүнәтәй» тигән кешеләргә күрһәтеп, мейес эсенән тәртешкә менән эләктереп, бөгөн беҙ иртән йыйған бойҙай башаҡтарын сығара бара, бер һауытҡа һалып, бизмән менән үлсәй бара. Имеш, өләсәй күпме колхоз милкен урлап, киптерергә һалған. Ғариф үҙе беҙгә күрше йәшәй. Уның иң яратҡан эше — колхоз милкен тәләфләүселәргә ҡаршы көрәш ойоштороу, быныһы — үҙе әйткәнсә. Ә дөрөҫөндә — колхозды юҡҡа сығарыусыларҙың алдынғыһы. Бына әле ул, ҡулына тотҡан тәртешкәһен болғап:

— Колхоз башағын урлағанһың, хәҙер акт яҙабыҙ, районға ебәрәбеҙ, хатта «за вредительство» судҡа бирәбеҙ, — тип ҡысҡырына, тик ниңәлер тауышы бер ҙә көр түгел. Ә өләсәйҙең тауышы көслөрәк:

— Беҙ башаҡ йыйған ерҙе күптән инде һөрә башлағандар, өс көндән ҡара ер генә тороп ҡаласаҡ. Ул ваҡытта беҙҙең балаларға дарыу булаһы башаҡтар сереп бөтәсәк. Колхозды мин түгел, һин ашайһың. Колхозға ингәндә йыртыҡ сабаталы инең, әле, ана, ниндәй итеп кейенеп алғанһың. Уға ҡайҙан аҡса таптың? Кешеләр асҡа тилмергәндә! Нисә ғаиләне асҡа үлтерҙең!

Депутат әкренләп өйҙән шылыу яғын ҡарай. Ғариф та башаҡ тултырылған ҡапсыҡты тотоп һыпырта. Пүнәтәйҙәрҙән дә елдәр иҫә. Күп тә үтмәй, өйҙә сит кеше ҡалмай. Өләсәйем дә шаулауынан туҡтап, тынысланып, киске намаҙын башлай. Иртәгә лә көн бар әле.

Минең өләсәйгә Ғарифтың да, йәғни Чуркиндың да теше үтмәне. Әммә өләсәйҙең бирешмәүенә бик һыҙланды, күрәһең. Бүре лә бит йыртҡыс, усал хайуан, әммә күп ваҡытын олоп, зарланып үткәрә. Ғарифтың да өләсәйем янынан үткәндә ҡараштары ергә төбәлә ине. Әйттеләр, Ғариф, имеш, – ҡайҙандыр Баймаҡ яғынан килеп сыҡҡан байғош. Алама сәкмәненән ҡиммәт милке булмаған, теләһә кемдә ялсылыҡта йөрөгән. Чуркин тигән тирмәнсе урыҫҡа ла эш эшләшеп йөрөгән, бәхетенә ҡаршы, уның кейәү сыҡмаҫлыҡ ҡыҙы булған. Шул саҡта Ғариф өсөн күктә тәүге бәхет йондоҙо йылмая ла инде. Тирмәнсе ҡыҙы уға был бәндәнең киләсәктә иң яратасаҡ юл йүнәлешен күрһәтә. Ул – бисәләр яратыу, бисәләр артынан ҡыуыу юлы. Ғарифты ошо көндән бик һирәктәр үҙ исеме менән атай, күберәк ул «Чуркин» ҡушаматы менән йәшәй башлай.

Ә кулактарға ҡаршы көрәш, мөлкәтлеләрҙе талау Ғариф-Чуркин өсөн күктә икенсе йондоҙ яндыра. Был мәлдә иһә Чуркинда иң кәрәкле сифаттар бар: байғош, наҙан, ҡара күңел, кеше мөлкәтенә ынтылыу. Ысынбарлыҡта иһә ул – ябай енәйәтсе, төшөп ҡалғанды эҙләүсе, хәлһеҙҙәрҙе тапаусы, әхлаҡи яҡтан иң һуңғы кеше. Күрәһең, ошондай типтағы кешеләр бик кәрәк мәл килгән. Бөйөк Ватан һуғышынан алда, бигерәк тә ауыл ерендә, урындағы власть башына ултыртыу өсөн үҙенсәлекле кешеләр кәрәк булған. Тап ошо һәләт Чуркинда булған да инде. Ә иң мөһиме: беҙҙең ауылда һәр кем уға ерәнеп ҡараған.

Минең аңлауымса, район етәкселәренең ҡуйған маҡсаттары асыҡ: ауыл ерендә яһалма рәүештә аслыҡ ойоштороу. Йәнәһе лә, ас кешене тыңлатыуы, ауылда тотороҡло ҡурҡытыу атмосфераһы урынлаштырыуы еңел. Был Әптек өсөн бигерәк тә мөһим, сөнки бында Гулаг бүлексәһе асыла. Ә район етәкселәре был лагерға ҙур иғтибар биргән. Маҡар районы етәкселәре шул ваҡытта Башҡортостан күләмендә күренекле урындарҙы биләй башлай, Өфөгә үрләүселәр ҙә күбәйеп китә.

Ғарифтың енәйәттәрен һанап бөтөрөү мөмкин түгел. Әлбиттә, ул – иң бәләкәй власть, Сәлих сельсоветы рәйесе. Күрәһең, ул үҙе һәр көн, һәр сәғәттә үҙен енәйәтсе итеп тотоуҙы һайлаған. Ул Совет власы өсөн ниндәй ҙә булһа яҡшылыҡ (ә был йәмәғәт күҙлегенән сығып ҡарағанда – насарлыҡ) эшләмәй тора алмай. Бер заман ул атына ултырып өлгөргән арыш баҫыуҙарын байҡап йөрөгәндә, ялан ситендә арыш ҡыбырҙағанын күреп ҡала. Яҡын килһә, күрә: ирле-ҡатынлы Әптек ауылы кешеләре арыш башағы ыуып, ашап ултыра. Ғариф өсөн үҙен түрәләр алдында һәйбәт күрһәтергә, район күләмендә иң актив рәйес булып алырға тағы ла уңайлы мәл тыуа – яңы дан йондоҙо балҡып китә. Уларҙы ҡамсы менән тотолған урындарында туҡмай-туҡмай ҙа, ирен ат ҡойроғона бәйләп, Әптек ауылындағы правление алдына һөйрәтеп килтерә. Теге абзый шул урында донъя ҡуя. Ҡатыны ла оҙаҡ йәшәй алмай, ә өс малайы етем ҡала. Эйе, уларҙың береһе минең йәштәш ине, балалар йортона алып киттеләр. Күп тә үтмәй, Әптек ауылы уларҙы бөтөнләйгә онотто.

Шулай ҙа Чуркинға тәүге йондоҙо тынғылыҡ бирмәне. Ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡайғыртҡан йондоҙ яҡтыһы. Юҡ, ҡайғы түгел, һуғыш ваҡыты бит. Ә ҡыйын ваҡытҡа дусар ҡатындарҙы төрлө юл менән ҡурҡытып, ризалаштырып була.

Ғарифтың иң камиллаштырған “эше” – ырҙында эшләгән ҡатындарға тентеү яһау. Ябай эш. Әммә оҡшаған ҡатындың кеҫәһенән берәй ус иген табылһа, Ғариф өсөн ҙур табыш, һөйөнөс: кисен ул ҡатындың өйөнә килергә була. Минең нәҫелгә лә ҡағылды был эш. Әсәйҙең бер туған ағаһы Хәйбулла фронтта һәләк булды, ҡатыны Фәғилә инәй ике бала менән яңғыҙы ҡалды. Бер көн ул да Ғариф

тентеүенә дусар була. Инәйем төҫкә-башҡа сибәр, кәүҙәһе лә мауыҡтырырлыҡ. Шуға күрә Чуркин, тентеү башлағас, уның ярамаған ерҙәрен һәрмәргә тырыша. Әммә Фәғилә инәйем дә баҙап ҡалмай (ул характеры менән дә башҡаларҙан айырыла ине) – күмәк кеше алдында «теге» ерен асып күрһәткән, йәнәһе лә, шунда бер ус бойҙай йәшерҙем. Ул ваҡиға тиҙ сиселә: инәйем бер аҙна эсендә бер йылға төрмәгә оҙатыла. Ошо бер йыл ғүмер Сәлих ауылында бер нәҫелдең бөтөүенә сәбәп була. Фәғилә инәй төрмәлә ваҡытта Хәйбулла бабайҙың берҙән-бер улы астан үлә. Шулай итеп, Сәлих ауылының йылъяҙмаһынан Латиповтар фамилияһы мәңгегә юйыла. Эйе, аҙған эт үҙ урамындағы себеште лә йолҡоп ырғытырға мөмкин. Чуркин – ул эттән дә ерәнгесерәк бәндә. Мине икенсе кешеләр аптыраштa ҡалдырҙы: Фәғилә инәйгә приговор яҙған судья, ғәйепләүсе прокурор. Күрһәң ине шул бәндәләрҙе, бер күҙ менән генә ҡараһаң ине. Ә улар бит Маҡар районы үҙәге Петровскиҙан «яҡшы» эшләгәндәре өсөн үрләп киттеләр, уларҙың да балалары булды, нәҫелдәре бөгөн дә дауам итә. Ә Чуркиндың бисәләр менән ҡыланыштарын ғына яҙһаң да, үҙе бер роман булыр ине – ерәнгес, имәнес сюжетлы әҫәр. Ундай әҫәрҙең кәрәге юҡ, Чуркиндың үҙенең дә кәрәге юҡ ине. Уның кәрәкмәгәнлеге һуғыш бөткәс тә асыҡланды. Әптеккә фронтовиктар ҡайта башланылар, ә берәүһе офицер булып ҡайтҡан. Өйөнә ҡайтып керһә, ҡатыны ныҡ ярлылыҡта икән: һыйыр ҙа юҡ, самауыр ҙа, мендәр-юрғандар ҙа юҡ, тик әле төҫөн юғалтмаған ҡатыны ғына ҡалған. Чуркин уға ла «тентеү» яһаған, кисен өйөнә лә килгән, тик ҡатын индермәгән. Шуға ла рәйес Чуркин налог йыйыусыны, депутатты килтереп, ул ҡатындан «недоимкалар» һауған, ә һыйыр, һауыт-һаба, кейем, мендәр-юрғандар бүлешеп алынған.

Ғәҙел Совет власы Чуркинды биш йылға ултыртты, бары тик шул эше өсөн генә. Ә Ғарифтың бар ғүмере енәйәт икәнен Әптектең «кәзәһе» лә аңлар ине, тик унан һораусы булманы, ул үҙе лә недоимка ҡорбаны булып ҡалды. Шуныһы ҡыҙыҡлы: күп кешеләр, бер ауылда йәшәп, Чуркин-Ғарифтың фамилияһын белмәй, шул иҫәптән мин дә. Белмәгәнемә шатланам. Ысынлап та, ул ваҡытта сельсовет рәйестәренә бик тиҙ ҡушамат тағыла ине. Рәйес ҡуйғанда (һайлағанда), ҡуяһы кешене маҡтап алалар ине, наҙанды – уҡымышлы тип, һантыйҙы – аҡыл эйәһе, һаҡауҙы тел оҫтаһы тип көлмәйенсә маҡтайҙар ине.

Ғариф киткәс, Сәлих сельсоветына беҙҙең ауыл ҡатыны Миңзифаны ҡуйғандар. Аҡыллы ла, тел оҫтаһы ла булмаған, аптырағас, уҡымышлы кеше булып күренергә тырышҡан. Кеше килеп керһә, һәр саҡ алдында гәзит ятҡан, тик шуныһы көлкөлө: һүрәте булмаһа, гәзит йыш ҡына баштүбән булған. Сөнки Миңзифа хәреф танымаған, ә ауылда уҡый-яҙа белеүселәр байтаҡ. Райондан Миңзифаны ҡуйырға килеүселәр, уның бик яҡшы сифаттары бар, тип йыйында маҡтап һөйләгәндәр, «она башковитая» тигәндәр. Шул көндән башлап ауыл халҡы Миңзифаның фамилияһын онота, ул Башкаматыйға әйләнә, эйе, «Башковитый» сәйерерәк яңғырай, ә Башкаматый башҡортса еңелерәк әйтелә, ләкин оҙон. Шуға ла оҙаҡламай ҡушамат тиҙ арала «баш»ын төшөрөп, Каматыйға әйләнде, ә ҡатын халыҡ хәтерендә Каматый Миңзифа булып ҡалды. Тик рәйес булып оҙаҡ эшләй алманы, балаларын ташлап, ҡайҙалыр сығып китте лә ғәйеп булды.

Күп йылдар үтте, әммә сельсовет рәйестәренең беҙҙең тормошта тотҡан урыны минең башымдан сыҡманы. Башҡортостандың ниндәй генә мөйөшөндә булманым, ҡайҙа ғына барманым, был турала һәр кемдең һөйләгәнен тыңларға тырыштым. Ысынлап та, Ғариф – минең өсөн фашистан да аламараҡ кеше, ә Совет власы бындай кешеләрҙе етәксе урындарға маҡсатлы рәүештә ҡуйҙымы икән, бик белгем килә ине. Әммә һорашып, төпсөнөп йөрөмәнем, бары иғтибарлы булдым һәм хәтеремдә тоттом.

Стәрлетамаҡ синтетик каучук заводында эшләп йөрөгәндә, бер егет менән таныштым. Тора-бара ул минең яҡын дуҫыма әйләнде. Беҙ уның менән бик оҙаҡ

татыу һәм күңелле йәшәнек, ашаған ашыбыҙ уртаҡ булды. Минең уйымса, уның киң күңеллеге ҡанынан, нәҫеленән ине. Тыуған яғы – Ғафури районы. Атаһы бер үк осорҙа Ғариф кеүек рәйес булып эшләгән, Ленин орденына лайыҡ булған кеше. «Сельсовет рәйесе» тигән төшөнсә миндә һәр саҡ насар уй ҡалдырғас, мин дуҫымдың атаһының алып барған эше тураһында һорашманым. Ысынлап та, мин төпсөнөргә яратмайым. Тағы ла күп йылдар үтте, оло йәшкә еттем. Юлда автобуста китеп барам. Минең менән йәнәш оло ғына йәштәрҙәге кеше һөйләшергә әүәҫ булып сыҡты. Шуныһы асыҡланды: ул – минең дуҫымдың ауылдашы. Иптәшем тураһында әйткәс, был кеше мине ҡыҙыҡһындырған темаға күсте, ентекләп барыһын да һөйләне. Бына шунда инде мин ғүмерем буйы эҙләгән һорауға яуап таптым.

Бына нисек килеп сыға: дуҫымдың атаһы – Чуркинға ҡапма-ҡаршы кеше. Ҡыҫҡаһы, Ғариф кешене астан үлтереүҙе мәҙәк күрһә, был кеше асығыусыларға ярҙам итеүҙе беренсе маҡсат итеп ҡуйған.

Мин шул тиклем шатландым. Эйе, дуҫ кешенән сетерекле һорауҙарға яуап эҙләмәйҙәр. Аллаға шөкөр, мин ул турала дуҫыма бер һорау ҙа бирмәнем.

Шулай итеп, Совет власының «кешеләрҙе астан ҡырҙырырға» тигән маҡсат ҡуймауын асыҡланым. Аңлашыла: был хәҡиҡәт кешенең үҙенән тора.

Ғүмер буйы мин Ғариф кеүектәр тураһында бик күп бәхәстәргә индем. Күптәр бер фекерҙе яҡланы: «Ни эшләһен, ҡушҡас – үтәгән» тинеләр. Юҡ шул, ҡушҡанды ла төрлө юл менән үтәргә була. Күрәһегеҙ, миктәгән кешеләргә ярҙам итеп иң ҙур орден алып булған, ә миктәгәндәрҙең үлгәнен ҡарап тороп, үлмәҫ борон тибеп ҡалайым, тип уйлағандар халыҡ нәфрәтенә юлыҡҡан.

## Хәйерселәр

*Бутәгәле аулаҡ буҙ ялан*
*Кемгә генә түшәк булмаған.*

**Шалғыҙ йырау**

– Эй, Хоҙай! Беҙҙән дә ярлы кешеләр бар, – былай тип өләсәй бик әрнеп, үкенескә ҡаршы, йыш әйтте.

Был һүҙ хәйерселәр тураһында ине. Эйе, өйгә хәйерсе килеп инһә, беҙ, балалар, тып-тын булабыҙ, бирер нәмәбеҙ юҡ. Икмәкте үҙебеҙ күрмәйбеҙ, ә өләсәйҙең һәр нәмәһе иҫәпле. Шулай ҙа ул хәйерселәрҙе йәлләй, бер дана бәрәңге булһа ла биреп сығара. Әгәр берәүһе артынан икенсеһе килеп керһә, күр ҙә тор, уныһы мотлаҡ буш сығып китә. Был урында ла өләсәйҙең күп әйтелгән һүҙе булды:

– Әле генә берегеҙ сығып китте. Күрәһегеҙ бит беҙҙең хәлде, ашарға табыуы ҡыйын. Ниңә байыраҡ кешеләргә кермәйһегеҙ?

– Байҙар беҙҙе өйҙәренә керетмәй шул, ҡыуалар, эттәрен һөсләтәләр, әшәке һүҙ әйтәләр, – ти хәйерселәр.

– Шулай инде, хәҙерге байҙар эсе ҡара булғанға бай. Улар арҡаһында донъяны хәйерсе баҫты. Беҙ хәлле йәшәгәндә хәйер һорашыусыны күрмәнек, – тип зарланды өләсәй.

– Хәйерселәр ҡайҙан килә ул? – мин һорауһыҙ ҡала торған бала түгел.

– Күпте белһәң, тиҙ ҡартаяһың, балам, – өләсәй үҙенә оҡшамаған һорауҙарға яуап бирергә яратмай. Хәйерселәрҙе ул ысын күңелдән йәлләй, хәл-әхүәлдәрен һораша, һүҙҙәрен тыңлап ултыра. Улар иһә был турала һөйләргә бик яраталар, ентекләп керешәләр. Мин һәр саҡ был кешеләрҙең күргән-кисергәндәрен өндәшмәй, иғтибар менән тыңланым. Хәйерселәр иң башта үҙҙәренең ниндәй ауылдан икәнлектәрен, быға тиклем нисек донъя көткәнлектәрен, ҡайһылайтып бөлгөнлөккә төшөүҙәрен, хәйерсе хәленә ҡалыуҙарын ентекләп һөйләргә тырыштылар, һәм уларҙың һәр береһенең үҙенә генә хас булған ғәҙәте, һөнәре

бар. Уларҙың ҡайһы береһе робағи йәки бәйет көйләп йөрөй, доға уҡып маташа. Өндәшмәгән, меҫкен генә ҡиәфәттәгеләре лә осраны. Мин тәүгеләренән ишеткәндәремде тыңлап, отоп алырға тырыша торғайным. Дөрөҫөн әйткәндә, был йәһәттән миндә һәләтлек юҡ түгел ине, әммә өләсәй был мауығыуыма сик ҡуйҙы, хәйерселек теләйһең, тип бик ҡаты шелтәләне. Ни эшләйһең, бәйетте оноторға тура килде. Ә ҡайһы бер бик үҙенсәлекле хәйерселәр барыбер иҫемдә ҡалды. Уларҙың береһе Мөхәррәм исемле оло ғына ир кеше ине. Мөңгөрәк тауышы менән әллә йыр, әллә бәйет, әллә таҡмаҡ, ғөмүмән, танып булмаҫлыҡ көй көйләп йөрөнө. Үҙе һүҙгә һаран булды, өндәшмәҫ кеше, хәйер биреүсегә рәхмәтен әйтергә лә онота торғайны. Ул беҙҙең ауылда бер-ике йыл йөрөнө лә башҡаса күренмәне, икенсе ауылға киттеме, әллә үлеп ҡалдымы — белмәҫһең. Һуңғыһы ла бик мөмкин. Сөнки, билдәле сәбәптәр арҡаһында, хәйерселәр оҙаҡ йәшәмәй.

Сәлиха исемле өндәшмәҫ ҡатын йыр йырламаны, бары күҙ ҡарашы ғына өмөтһөҙлөктө аңлата ине. Ысынлап та, өмөтһөҙлөк уның яҙмышы булып сыҡты. Ҡышҡы һыуыҡ көндө ул ҡатындың Тимаш — Әптек юлында имгәкләп аяғына баҫырға тырышып ятҡанын ике кеше күргән, әммә уларҙың береһе лә уға ярҙам ҡулы һуҙырлыҡ әҙәмдәр булмаған: береһе — ауыл Советы рәйесе Ғариф, икенсеһе — ташландыҡ йыйып, ярты тиндән бер тин яһаусы Туҡыт ҡушаматлы бәндә. Сәлиха шунда, тора алмайынса, хәле бөтөп, аслыҡтан үлгән, ауыл халҡы йыйылышып, уны зыяратҡа алып барып күмде.

Хәйерселәрҙең күпселеге тау яғы ауылдарынан булды. «Беҙ Ташбүкән ауылынан», «Һәйеттекемен», «Ҡалыу Айырынан» тиерҙәр ине. Билгеле булыуынса, ул яҡ ауылдар колхоз төҙөлөшө башланыр алдынан иркен йәшәгән. Ат, һыйыр малын күп аҫырағандар, кәзә-һарыҡтары иҫәпһеҙ булған. Оло йәштәге хәйерселәр үҙҙәре һөйләне был турала. Шулай уҡ умарта тотҡандар, сайыр ағыҙғандар, урман киҫкәндәр. Әммә колхозға берләштереү башланғас, шәхси хужалыҡтарға налог ҡырҡа арттырылған. Хатта мал башына төшкән һалым шул уҡ мал биргән килемдән арта башлай. Бына шунда инде тау башҡорттарына ысын һынау килә.

— Өләсәй, ниңә ул хәйерселәр тау яғынан беҙҙең яҡҡа сыға? — Минең һорау өләсәйемә оҡшаманы.

— Белмәгәнең яҡшы, — тип ҡырт киҫте.

Тик ул һорау минең баштан бер ҡасан да китмәне, һәм мин сабый сағымда уҡ үҙемә, шул һорауға яуап табам, тип маҡсат ҡуйҙым.

Өләсәйем ҡайһы ваҡыт бик үтенеп һораған кешене фатирға ла индерә ине. Шулай бер заман Ташбүкән ауылынан килгән ҡатынды ике малайы менән бер айға фатирға индерҙе. Килешелгән ваҡыт үткәс, был ғаилә күрше Нәғимә апайҙарға күсте, ул апайҙың да өйө ҙур ине. Шулай итеп, был кешеләр һуғыш һуңынаса беҙҙең ауылда көн итте. Шунан инде улар Стәрлетамаҡҡа төҙөлөш эшенә күстеләр. Хәтерләүемсә, ул апайҙың исеме Хөмәйрә ине, бер малайының исеме — Зиннәт, һуғыштан һуң мин шул уҡ ҡаланың Содовый биҫтәһенә ҡунаҡҡа бара торғайным, сөнки минең дә бер апайым, әсәйемдең һеңлеһе, төҙөлөштә эшләп, баракта йәшәне. Шул ваҡытта ул ғаиләне мин тағы ла бер күрҙем, күрше баракта йәшәйҙәр ине, тик мине таныманылар, мин дә үҙемде танытырға тырышманым.

Бер ваҡыт, әлеге һуғыш ваҡытында, ғинуарҙың һыуыҡ, бүрәнәләр шартлап торған мәлендә, беҙҙең өйгә, өшөп үләбеҙ, тип ҡысҡырып илап бер сиған ҡатыны килеп инде. Кеше ҡайғыһын уртаҡлашыусан өләсәйем уны йәлләне, күмәкһегеҙме, нисә кешеһегеҙ, тип белеште.

Сиған ҡатыны, ирем менән икәү генәбеҙ, бер төнгә генә индерегеҙ инде, тип ялбарҙы ла, ризалыҡ алғас, өйөбөҙҙөң иҙәненә бысраҡ ике ҡалын юрған, бер нисә ҙур мендәр ырғытыуға, улар аҫтына барыһы ла бер төҫтә биш бала кереп тә сумды. Мин өләсәйҙең иң яраткан ейәне булһам да, түр башына, янған мейес алдына ултырырға баҙнат итмәй инем. Ә был сиған балалары күпмелер ваҡыттан һуң, бер ҙә аптырап тормайынса, янған мейес алдына — түрбашҡа барып та тулдылар.

Әммә өләсәйем тыштан ингәс, был сиған балаларына усал ғына ҡарап, бер һүҙ әйтеүе етте – тегеләр тиҙ генә юрғандары аҫтына сумды. Шуныһы: был сиған ғаиләһе беҙгә егелгән ат менән килгән. Сиғандар атҡа налог түләмәй, хөкүмәткә эшләмәйҙәр, аттарына ниндәй аҙыҡ ашаталарҙыр – Хоҙай ғына белә. Ә Совет власы уларҙы күрмәй ҙә. Беҙҙең ауылда хатта бер ус иген өсөн төрмәгә ултырталар, ат аҫраған өсөн атынан ҙур налог алалар, хөкүмәткә эшләмәгән өсөн төрмәгә ябалар. Бына шул тигеҙһеҙлек тураһында баш ваттым. Әлбиттә, ололар был турала һүҙ алып барҙы, тик уларға минең ҙурҙар әңгәмәһенә ҡолаҡ һалыуым оҡшаманы. Юҡ, минең сиған халҡында эшем юҡ. Тюркология фәнен, төрки халыҡтары тарихын өйрәнеүсе булараҡ, әлбиттә, мин «сиған», «цыган» һүҙҙәренең ҡайҙан, нисек килеп сыҡҡанын яҡшы беләм. Совет власы, бигерәк тә Сталин заманында, башҡорт халҡын сиғандың бер төрөнә әйләндерергә уйланы ла инде, сиған итмәһә лә, сиған хәленә ҡалдырырға тырышты.

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, Кремль хужалары был эште, үҙҙәренең уйынса, бик уңышлы алып барҙы. Тау араларындағы ауылдарҙа йәшәгән башҡорттарҙың төп һөнәре малсылыҡ ине. Шуның өсөн Мәскәү был хужалыҡ өлкәһенә, бигерәк тә шәхси малға, күтәрә алмаҫлыҡ һалым һәм башҡа өҫтәлмә йөкләмәләр һалды. Ит, май, тире һалымдары булды, әммә аптыратырлыҡтары ла аҙ булманы. Мәҫәлән, тауыҡ аҫрамаған хужалыҡҡа ла, хөкүмәткә тапшырыу өсөн мотлаҡ йомортҡа йыйырға, тигән закон сығарылды. Бына шундай һәр төрлө сәбәптәрҙең йыйылмаһы арҡаһында, бигерәк тә һуғыш осоронда, хәйерселәр күбәйҙе. Ә уларҙың тау яғында күп булыуының тағы ла бер сәбәбе: иген игелмәгән ерҙә йыла ағасы ҡабығынан яһалған ондан әҙерләнгән икмәк менән кеше оҙаҡ йәшәй алмай, өйөн ташлап сығып китергә мәжбүр була. Күптәр был эште һуғышҡа япһарҙы, имеш, шулай кәрәк булған. Юҡ, туғандар, һуғыш ваҡыты тип, бер грузин да өйөн ташлап сығып китмәгән, сөнки уның алма баҡсаһына көс етмәҫлек һалым һалыусы булмаған. Ә башҡорттарҙы һуғыш ваҡытында ҡыҫыу электән – Петр I заманынан килгән йола, дөрөҫөрәге, ул сығарған закон. Борон-борондан башҡорт халҡы хәйерселеккә ҡаршы иммунитет һаналған. Совет власы уны юҡ итер өсөн яңы вирус уйлап табыусы булды. Йә, Хоҙай! Беҙҙе тағы ниндәй вирустар көтә? Амин.

**Парсалар**

*Күп тапҡыр фатирға осоп ингән ҡарабаш турғайҙы тотҡаным бар. "Һуғыш"та бирешергә теләге юҡ. Ярайһы ғына суҡый йәки тешләй. Саялыҡ өлгөһө.*

***

*Ҡарабаш турғай тәҙрә аша өй эсен күҙәтә белә, минең өйҙә икәнде белһә, тауыш бирә.*

# Посылка

*Бүренең – уртаҡ,*
*Ҡоҙғондоң – ағас башында.*

**Мәхмүт Ҡашғари**

Юғары ос Ғәбиттән посылка килгән... Быны өләсәйгә килеп һөйләнеләр. Ҡыҙҙарына күлдәклек тауар, тағы әллә ниндәй матур әйберҙәр ебәргән, тисе.

– Өсәүһе ятып ҡалды, исмаһам, береһе иҫән ҡайтһын ине. Ә посылкаһы булмаһа ла ярар. Хоҙайым башын ғына һаҡлаһын. – Өләсәй быны атайым тураһында әйтә.

Посылка тураһында ишеткәс, мин дә йәнләнеп киттем. Ана бит, күрше Мәғиә апайҙың иренән инде әллә нисә посылка килде, һуңғыһында өҫтәлгә ҡуймалы музыка уйнай торған матур сәғәт тә ебәргән. Үҙем барып күрҙем. Иҫ китмәле, күҙҙең яуын алырлыҡ ҡупшы.

Мин дә: «Атайым бер генә тапҡыр булһа ла посылка ебәрһә, һәйбәт булыр, малайҙарға һөйләр инем», – тип теләк теләй инем. Күрәһең, Хоҙай ишеткәндер. Бер көн «һеҙгә посылка бар» тигән хәбәр килде. Шатлығым эсемә һыймай, тик өләсәйгә генә белдерергә ярамай, әрләп ташларға ла күп һорамаҫ. Ул юлға әҙерләнде, һине лә алып барам, тигәс, түбәм күккә тейгәндәй булды. Өләсәй:

– Хәлең насар, балам, арырһың, барып ҡайта алырһыңмы икән? – тип борсолоп та алды.

– Юҡ, өләсәй, мин арымам, йүгереп барырмын да һин килеп еткәнсе ултырып ял итеп алырмын, – тип уны тынысландырырға ашыҡтым.

Әҙерләндек тә иртән иртүк үк юлға сыҡтыҡ. Мин үҙем әйткәнсә эшләнем: өләсәй ашыҡмай ғына атлай, ә мин шәп итеп йүгерәм дә ул килеп еткәнсе ял итеп ултырам. Йәйге көн, мин яланаяҡ, арыманым. Күпмелер шулай бара торғас, беҙҙән ун саҡрым алыҫлыҡтағы Бәрҙәшле тигән ауылға еттек. Урыҫ ауылы. Өләсәй таҡтанан эшләнгән ҙур ҡапҡалы өйгә кереп китте лә, оҙаҡ та үтмәй, сығып, мине лә алып инде. Бик матур ҙур өй. «Бына, балам, беҙҙең ызнакум Ивандың өйө», – тине өләсәй. Ярлы түгелдәр икән, беҙҙе ҡәҙерле ҡунаҡ кеүек итеп һыйланылар, кисен мунса яғып та индерҙеләр. Иртән инде тағы ла һәйбәтләп ашатып, юлға табала майҙа бешкән әпәк биреп, район үҙәге Петровскиға, күрше ауылға, оҙаттылар.

Бала кешенең көн дә асыш. Бәрҙәшлелә мин тағы ла бер асыш яһаным. Мунсанан сыҡҡас, хужа беҙгә кеүәҫ тигән эсемлек эсерҙе, һай, һәйбәт икән. Өләсәй әйтә, уны икмәктән яһайҙар һәм һыуыҡ булһын өсөн мөгәрәптә тоталар, ти. Беҙҙә кеүәҫ яһамайҙар. Унын өсөн икмәк тә юҡ. Хужабикә өләсәйемдең минә, һыуһаһаң эсерһең, тип һыу тултырып алған, әммә хәҙер инде бушаған шешәгә шул тәмле һыуҙы тултырып бирҙе. Беҙ Петровскиға тиҙ барып еттек, тик, ни өсөндөр, был ауылды өләсәйем һәр ваҡытта ла Кинйәкәү тип атаны.

– Олатайың менән Кинйәкәүгә баҙарға килеп еткәнде һиҙмәй ҙә ҡала инем. Ул ваҡытта беҙҙең аттар бар ине, уйнаҡлап торорҙар ине, – тип хәтерләп алды.

Район үҙәгендәге почта йортона килеп еттек. Мине өләсәй документ урынына алып килгән икән. Әгәр ҙә мәгәр берәй ҡағыҙ-фәлән һорай ҡалһалар, беҙҙең документ юҡ, бына посылка ебәргән улымдың улы, тип әйтергә. Әммә был артыҡ борсолоу булып сыҡты. Ауыл кешеһендә ул ваҡытта паспорт булмай торғайны. Посылканы өләсәйгә тотторҙолар. Беҙ кире ҡайтыр юлға сыҡтыҡ. Был юлы Бәрҙәшлелә туҡтап торманыҡ, уҙып киттек һәм үҙебеҙҙең ауылға яҡыныраҡ булған Тимашевка ауылының тағы ла ҙур урыҫ ҡапҡаһы алдына килеп туҡтаныҡ. Ул бейек, бесән тейәлгән арба кererлек итеп таҡтанан эшләнгән. Ямғырҙан һыуланып сереməһен өсөн шулай уҡ таҡтанан ябылған ҡыйығы ла бар. Өләсәй шунда кереп китеүгә, мине үҙемдән ҙурыраҡ бер нисә малай уратып алды. Мин уларҙың әйткәнен аңламайым, сөнки урыҫса белмәйем. Улар мине төрлө яҡтан төрткөләгәнгә, ҡурҡышымдан ҡысҡыра башланым. Шул ваҡыт өләсәйем килеп сығып бер екергәс, малайҙар ҡасышып бөттө. Ул уҫал итеп бармаҡ янап алды ла мине шул ҡапҡаның бәләкәйерәгенән эскә алып инде. Өйгә уҙҙыҡ. Бәрҙәшлеләге кеүек ҙур өй, матур итеп йыйыштырылған, иҙәндәре буяулы. Хужабикә беҙҙе өҫтәл артына ултыртты, тик үҙе ниңәлер бер туҡтауһыҙ үкһеп-үкһеп илай, ҡулдарын болғай-болғай өләсәйемә ниҙер һөйләй. Мин, аңламағас, шым ғына ултырам. Ҡатын ҙур туҫтаҡтарға тултырып аш һалып, алдыбыҙға ҡуйҙы, аҡ икмәк, майҙа бешкән пирожки тигән нәмә, тағы әллә ниндәй тәмле-татлы ризыҡ ултыртты. Аш борщ тип атала икән, миңә бик оҡшаны. Өләсәйем, харам була, тигәс, итен генә тәмләп ҡарай алманым. Ярай инде. Хуш еҫле икмәк ҡушып ашағас, былай ҙа ныҡ туйҙым. Оҙаҡ ултырманыҡ, илай-илай оҙатырға сыҡҡан йомарт хужабикәне ҡалдырып, үҙебеҙҙең ауылға – Әптеккә ҡарай юл тоттоҡ. Һорауҙарым күп булһа ла, түҙеп киләм, өләсәйем һорау биргәнде яратмай. Күпмелер ваҡыт атлағас, үҙе һөйләй башланы.

– Бына нисек, бер беҙгә килгән бәлә түгел, илгә килгән бәлә. Кисә был йортҡа ауыр хәбәр килгән – фронттан «ҡара ҡағыҙ» алғандар, иламай ни эшләһен инде?..

Хужабикәнең ире Степан, Бәрҙәшлеләге Иван кеүек, олатайҙың ызнакумы. Яҙ булғас, олатай уларҙың да өс һыйырын быҙауҙары менән тауға көтөүлеккә алып киткән. Ғөмүмән, олатайым улар менән бик татыу, килешеп йәшәгән. Ун ике һыйыр һауҙым, тип өләсәй йыш һөйләр ине: беҙҙең – алтау, урыҫтарҙың – өсәр. Арығансы эшләгәндәр, әммә иркен һәм туҡ йәшәгәндәр. Әлеге лә баяғы хәҡиҡәт – колхоздың эше лә юҡ, ашы ла юҡ.

Посылканы алып ҡайтып, сисеп ебәргәс, эй, шатландыҡ. Унда кейем тегер өсөн тауарҙар бар икән, мин дә үҙемә берәй күлдәк өмөт иткәйнем дә, ул турала ауыҙ ҙа асып булманы. Өләсәйҙән шөрләнем. Ә ул тауарҙарҙың яҙмышын тиҙ хәл итте:

– Һеҙ кейә торған нәмә түгел. Матур шаҡмаҡ биҙәкле, йомшаҡ тауар. Затлы күлдәктәр тегеп булыр ине. Түләүҙәр күп, – тине лә уларҙы уҡытыусыға һатырға алып китте.

Шулай ҙа был посылка минең өсөн ҙур ваҡиға булды, һинең атайың посылка һаламы ни ул, ҡайҙан һалһын, тип малайҙар бүтәнсә әйтә алмаҫ. Имеш, минең атайым өсмөйөшлө хаттар ғына ебәрә ала. Хәҙер инде аптырап ҡалмаҫмын, нимә әйтергә беләм. Тимәк, был хәл миңә яңы күлдәк кейеүҙән дә һөйөнөслөрәк.

Йылдар үткәс, барыһы ла асыҡланды. Һуғыш бөтә кеше өсөн дә бер тигеҙ түгел икән. Атай өсөн ул алғы һыҙыҡта, пуля ямғыры, снаряд ярсыҡтары аҫтында күпер һалыу булған. Ҡайҙа унда посылка ҡайғыһы, снаряд ярсыҡтарын ебәрһенме ни! Ә бик йыш посылка алып, маҡтанып йөрөгән малайҙарҙың атаһы минең атайымдың артынан мылтыҡ тотоп йөрөгән. Минең атай сигенергә мәжбүр булһа, атып үлтереү маҡсаты менән; һуғыш башын «йоҡлап» ҡалған Сталин шундай ҡағиҙәгә күсеүҙе хуп күргән. Шулай итеп, минең атай нисек тә булһа дошман менән көрәшергә һәм шул уҡ ваҡытта үҙ ғүмерен һаҡлап ҡалырға тырышҡан, ә посылка тураһында уй уның башына ла инеп сыҡмаған. Посылканы беҙ ул СССР сиген уҙып, сит ил еренә сыҡҡас алдыҡ, сөнки был ваҡытта инде уларҙың табанына баҫып ҡыуалаусы заградотрядтар булмаған. Күп посылкалар алып маҡтанған малайҙың атаһы шул төркөмдә хеҙмәт иткән дә инде. Шуныһын да әйтер инем: атай саперлыҡҡа үҙе теләп бармаған, шулай ҡушҡандар. Ә теге әҙәм һөнәрен үҙе һайлаған, йәнәһе, фашист ҡына дошман түгел, эске дошман да бар. Минең эшем бик мөһим, тип күкрәк һуҡҡан. Пуля аҫтында йөрөмәгәс, Берлинға ла барып еткән. Тик барыбер яҙмыштан уҙмыш юҡ. Һуғыштан һуң да уның хәрби һөнәре кәрәк һаналып, өйөнә ҡайтармайҙар. Германияла артабан хеҙмәт итергә ҡалдыралар. Ул, тыныс осорға сыҡҡас, үлемгә дусар була. Ауылдың «әсе теллеләре»нең һөйләүҙәре буйынса, әлеге посылка һалыуы башына еткән дә инде: затлы тауар эҙләп хәүефле урындарҙа күп йөрөгән һәм пуляға осраған. Ғәләмәт инде, шундай кешеләр бар: улар өсөн һуғыш та бөтмәй, табыш та бөтмәй, дошман һәр саҡ бар, һәр ҡайҙа бар.

Минең атай совет төҙөлөшөнә бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ уйламаған, агитация алып бармаған, бары тура һүҙлелеге арҡаһында күп михнәттәргә дусар булған һәм төрмә юлынан һаҡлана алмаған. Сөнки ул заманда, совет етәкселәренең уйлауы буйынса, социализмды һаҡ аҫтындағы кешеләрҙән төҙөтөү унайлыраҡ күренгән. Нисек кенә булмаһын, мин һуғыш ваҡытында күп посылка алған ғаиләне иғтибар менән күҙәттем. Алма ағасынан алыҫ төшмәй, тигәндәй, ул бәндәнең малайы ла, атаһына оҡшап, һәр кемдең тырнаҡ аҫтынан кер эҙләргә тырышты. Улай ғына ла түгел, үҙенең был өлкәлә оҫта булыуы менән ғорурланды. Дөрөҫөн әйткәндә, ул йөҙ процентлы шымсы булды, шымсылыҡты профессия итеп һайланы.

Һөнәр һайлау минең өсөн дә бик киҫкен мәсьәлә булды. Урта мәктәпте тамамлағас, тарих-филология факультетына уҡырға инергә хыялландым, тик

килеп сыҡманы, сөнки матди яҡтан мөмкинлек булманы. Армия сафында хеҙмәт итә башлағас инде, командирҙар мине зирәк егет һанап, уҡырға ебәреү хәстәрлеген күрә башланы. Бәлки, мин дә КГБ системаһындағы радиоэлектроник разведкаға эләгер инем. Партияға алғанда рекомендация биргән старшина Пастольник: «Ты способный, до полковника дойдешь. Только знай, партия может поднять на небеса, может и бросить в бездну», — тине. Унын нимә әйтергә теләгәнен мин, әлбиттә, аңланым, тик яҙмыштан уҙмыш юҡ, атайға оҡшаған тура һүҙлелек миңә ул юлды япты. Шулай инде, тура һүҙлеләрҙе яратманылар, ә ике йөҙлөләр теләгән ерҙәренә керә алды. КГБ-ла Калугиндар, Голембиовскийҙар булғанға һис тә аптырамайым. Әлбиттә, шундай кешеләр социализмдың еңелеүенә сәбәпсе булдылар ҙа инде. Ярар, уныһы — икенсе тема.

**Парсалар**

*Йәйге көндә ихластан ҡарабаш турғайҙы күрергә тырышам, күрә алмайым. Ҡарабаш турғайҙың эше күп, күрешергә ятмай. Ҡарабаш турғай — иң егәрле ҡош.*

## Тауыҡ буры

*Беҙ эсәбеҙ балдарҙы,*
*Бал бөтөрмәй малдарҙы.*
*Аҡ өҫтөнә ҡара төшһә,*
*Шул бөтөрә баштарҙы.*

**Мәжлес көйө**

Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин ғүмерем буйы аптыраштa: нисек инде өс-дүрт йәшлек баланан һорау алалар һәм шул һүҙҙәрҙе ҡарағa күсереп, йәнәһе, «протокол» төҙөйҙәр. Бер ваҡыт шундай хәл булды. Рәхилә еңгә мине саҡырып алды ла оҙаҡ итеп, ентекләп яуап бирергә әҙерләне. Имеш, мин Зәйнулланың беҙҙең өй тирәһендә ярты көн «һағалап» йөрөгәнен күргәнмен. Был турала ҡат-ҡат ҡабатлағас, мин «ярар» тип әйтергә мәжбүр булдым. Шулай һөйләрмен, тип һүҙ ҙә биргәс, мине колхоз канцелярияһына алып килделәр. Унда иһә уҫал ҡарашлы, таҙа кейенгән бер ят кеше ултыра. Ишектән ингәс тә, ул һорауҙарын яуҙыра ла башланы. Мин, сабый кеше, ҡаушай төштөм. Уның һорауҙары гел Зәйнулла тураһында ғына булды.

— Зәйнулла һеҙгә тауыҡ урларға килдеме? Дөрөҫөн әйт, әйтмәһәң, күрәһеңме анау нәмәне? — тип стенала эленеп торған әйберҙәргә күрһәтте. Хәтерләүемсә, ул нәмә ҡыҙыл төҫтәрәк, ҡыҙыл йондоҙло милиция фуражкаһы ине шикелле. Минең иғтибарым шуға ныҕыраҡ төштө. Бары һуңынан ғына аңланым: ул кеше милиционер булып сыға, ә күрһәткән әйбере фуражка түгел, икенсе сөйҙә элентән «кәзә бото», йәғни кобуралы атыу ҡоралы — пистолет. Мин ул ваҡытта, ғөмүмән, ул нәмәләрҙең нимә икәнлеген дә белмәй инем, ҡурҡытыр өсөн күрһәткән икән. Бына ниндәй ахмаҡ кеше. Мине ғүмерҙә лә күрмәгән-белмәгән нәмәләр менән ҡурҡытмаҡсы булған. Ул кешенең тауышы ныҕыраҡ ҡурҡытты, ныҡ алама ине. Стеналағы әйберҙәргә ҡарап мин:

— Эйе, күрәм, — тинем.

— Күргәс, әйт: Зәйнулла ниңә килде, нисә көн һеҙҙең өй эргәһендә йөрөнө?

— Эйе, йөрөнө, тауыҡ урларға һағалап йөрөнө, — тинем мин, Рәхилә еңгә шулай өйрәткәйне. Теге фуражкалы бәндә район үҙәге Петровскиҙан килгән следователь булған икән. Ул һәр саҡ, кешеләрҙән һорау алыр алдынан, кобуралы наганын стенаға элеп ҡуйырға ятҡан. Имеш, күрһендәр, ҡурҡһындар, сөнки ҡурҡҡан кешенән һорау алыу уңайлыраҡ.

Нисек кенә булмаһын, минең ниндәй яуап биреүемә ҡарамаҫтан, милициянан килгән кеше үҙенә кәрәк протоколын төҙөнө. Ә ул булғас инде, ҡарар сығарыуы

ҡыйын түгел. Зәйнулланы Петровскиға алып киттеләр. Уны социализмдың бөйөк төҙөлөштәре көтә ине. Сөнки төҙөләһе нәмә бихисап, ә эшсе ҡулдар етешмәй. Шуға ла ауыл малайҙарын көсләп ФЗО-ға алып китәләр, ә улар ҡасып ҡайтырға тырышып ята. Сөнки унда һөнәр генә түгел, битеңә, арҡа һабағыңа биреүселәр ҙә күп. Ауылдан килгәндәрҙең ҡулындағы икмәген, кеҫәһендәге аҡсаһын да “таҙартып” торғандар. Үҙ ирке менән төҙөлөшкә барыусылар аҙ булғас, көсләп алып китеү ысулын эҙләгәндәр. Ғәйепһеҙ кешегә ғәйеп тағыу совет осороноң иң яратҡан кәсебе булды. Ауылдарҙан йыйған халыҡты эшләтеү еңелерәк. Сталинсы НКВД был кимәлдә күп көс һалды: ҡолдарса бушҡа эшләтеү хөкүмәттең иң ҙур маҡсатына әйләнде.

Уйлап ҡараһаң, әкәмәт килеп сыға. Ниндәйҙер бер аҡыл эйәһе социализм төҙөргә саҡыра, ғәҙеллек донъяһы кәрәк икән. Икенсе аҡыл эйәһе ғәҙел булмаған ҡоролошто емереп, ғәҙел социализм төҙөргә юл аса; өсөнсөһө иһә үҙенең аҡыллыраҡ булыуына ышана, һис тә шикләнмәй, бар көсөн, дәртен, мәкерлелеген, талантын түгеп шул ғәҙел социализмды төҙөй башлай. Тик ғәжәп: күптәрҙең төҙөлөштә ең һыҙғанып эшләгеләре килмәй, ә төҙөүселәрҙең эшләгәнен күҙәтеп, иҫәпләп, рәхәтлектә, иркенлектә йәшәгеләре килә. Боронғо Вавилон башняһын төҙөгән халыҡтар уртаҡ тел таба алмаған, имеш. Шуға ла ул төҙөлөп бөтмәгән. Уртаҡ тел табыу еңел бурыс түгел, әммә социализм төҙөү өсөн уртаҡ тел табылды, уның бар халыҡҡа ла аңлайышлы булыуына ла шикләнеүсе юҡ ине, буғай. Тик төҙөүселәр менән ситтән күҙәтеүселәр араһында ғына аңлашылмаусанлыҡ арта барҙы. Эшләгәндәрҙең ҡулында эш ҡоралы булһа, ҡарауылсылар ҡулында ҡоралдың ниндәйе генә юҡ ине: наган, винтовка ғына түгел, ә гәзит, китап, радио, һәр төрлө йыйылыштар, наградалар һәм киҫәтеү системалары. Был системаларҙы яҙыу өсөн үҙенә тағы бер Маркс етмәйәсәк, һай, әкәмәт! Уртаҡ тел, уртаҡ маҡсат, ә халыҡ икегә бүленгән. Береһе туйғансы эшләй – туйғансы ашай алмай, икенсеһе туйғансы ашай, әммә ризаһыҙлығы көслөрәк, имеш, эш шәберәк барырға тейеш, ә ул тағы ла тәмлерәк ашарға тейеш.

– Кәзә ботон миңә бында булған өсөн биргәндәр,– минән һорау алған милиция әһеле наганын күрһәтә, – ә бында бар, – тип башына төртә. Ғәйепһеҙ кешене төрмәгә оҙатырға аҡыллы баш кәрәкме икән ни? Белмәйем, минеңсә, оятһыҙ булыу ҙа етә, ә кәзә бото – аҡылһыҙҙар атрибуты. Ысынлап уйлаһаң, тауыҡ урламаған кешегә бур исеме тағып төрмәгә оҙатыу – ахмаҡтар эше, ә бала кешенән көсләп шаһит яһау... ахмаҡлыҡ ҡына түгел, ҡаты сир. Күрәһең, ул сир бик йоғошло булған, бөтә илгә таралған. Зәйнулланы «тауыҡ буры» итеүҙең сере лә өҫтә генә ята. Сельсовет рәйесенә задание бирелә: төрмәгә, эшкә кеше табырға, енәйәтсе тотолорға, ул йәш кеше булырға тейеш. Рәйес үҙенең улы Хөснөтдинде ебәрә алмай, активист балаларына ла тейергә ҡурҡа. Ә Зәйнулланың атаһы һуғышта һәләк булған, яҡлар кешеһе юҡ, вот һиңә бур. Рәхилә еңгәнең был «тикшеренеү» эшендәге урынын да асыҡланым, был осраҡ миңә икенсе енәйәтте асыҡларға мөмкинлек бирҙе.

Шул уҡ йылда йәйге эҫе көндө бар халыҡ яланда эштә ваҡытта беҙ, өс бала, йоҡлап ятҡанда, дүрт йорт янып китә. Шул иҫәптән – беҙ йоҡлаған йорт. Улар дүрт бер туғандыҡылар, минең олатайҙың улдарыныҡы. Янғынды Шәрифулла тигән йәш малайға япһарҙылар. Ә минеңсә, янғын – әлеге лә баяғы төрмәгә кеше эҙләүҙән килеп сыҡҡан бәлә. Ут төрткән кеше дүрт ғаилә ҡаралтыһын яндырырға иҫәп тотмаған, буғай, ләкин янғын ул кешегә ҡарағанда дыуамалыраҡ булып сыҡты. Беҙҙе ут алған өйҙән иң һуңғы сиктә, ни сәбәптәндер, яҡын-тирәлә йөрөгән Рәхилә еңгә алып сыҡҡас та, түбәләр емерелеп төшкән. Шулай итеп, әллә ҡайҙа хакимлыҡ иткән түрәнең ҡорған һыҙмалары төпкөлдәге Әптек ауылына күтәрә алмаҫлыҡ бәлә булып төшә. Күҙ йәштәре, ҡыҫҡартылған ғүмерҙәр, кәмһетелгән шәхестәр, тапалған намыҫтар...

Зәйнулла күп йылдар «ситтә» йөрөп ҡайтты. Хоҙай ярлыҡаған, күрәһең: боҙоҡлоҡ юлында булманы, сәмләнеп донъя ҡорҙо, балалар үҫтерҙе. Күп тапҡыр беҙ уның менән бергә «төшөрөп», тәүге бит башында яҙылған йырҙы ла йырлап ултырҙыҡ.

Беҙҙең бөгөнгө көндәлек тормоштағы күренештәргә был йырҙың да ҡоласы етмәй. Аҡ өҫтөнә ҡара төшөү шул милиция яҙған протокол була ла инде. Шулай булғас, ул протокол Зәйнулланың малын ғына бөтөрөүҙе уйламаған, ә уның үҙен донъянан юйып ташларға иҫәп тотҡан. Бирһен Хоҙай иҫәнлек Зәйнуллаға, балаларына!

**Парсалар**

*Нисек был бүлмәгә ҡарабаш турғай килеп эләккәндер, бында асыҡ тәҙрә юҡ?! Тимәк, бер нисә бүлмә, коридор аша ингән. Тәҙрә аша сығарып ебәрергә форсат юҡ. Нисек тә имгәтмәҫкә тырышып уны тотоп алдым. Ҡарабаш турғай ҡурҡыу белмәй, ҡулымды суҡый, ысҡынырға ынтыла. Тышҡа алып сығып, ireккә ебәрҙем. Ҡышҡы һыуыҡта ҡарабаш турғай, аҙыҡ эҙләп, кеше йәшәгән урынға бик йыш осоп инә.*

## Тирмән

— Балам, тор, бөгөн һине тирмәнгә алып барам.

Һикереп торҙом. Мин һис ҡасан да өләсәйҙең һүҙенә ҡарышманым. Әйтһә, бер һүҙҙән үтәнем. Өләсәй иртәнге намаҙын уҡып торғас та, артынан өйҙән сыҡтым. Тирмән беҙҙең ауылдан алыҫ түгел, Һәләүектең бик матур ярында урынлашкан. Әкиәти урын. Йылғаның боролоп аҡкан урындарын үтәһең дә, ҡыуаҡлыҡтар башлана, улар эсендә бер нисә бина тора. Иң ҙуры, иң бейеге — тирмән. Алдында — аттар егелгән ылауҙар. Төрлө кешеләр ығы-зығы килә. Ә арыраҡ бүрәнәнән һалынған икенсе бер йорт — тирмәнгә килгәндәргә көтөү урыны. Ситтәге өсөнсөһө — тирмәнсе өйө. Өләсәйем мине шул өйгә алып инде. Мин аҙ ғына соланда көтөп торҙом. Ҙур бүлмәгә ингәс, тирмәнсе ҡатыны беҙҙе таҙа итеп йыйыштырылған өҫтәл артына ултыртты, туҫтаҡтарға һалып аш бирҙе, йылтыр ҡалаҡтар ҡуйҙы, икмәк киҫеп һалды. Мин тын да алырға ҡурҡып ултыра инем, өләсәйем, төртөп, ашарға ҡушты. Ә мин ундай ҡалаҡ менән ашағаным юҡ. Тирмәнсе Николай ҡарттың ҡарсығы Әнүтә әбейҙең ашы бик тәмле булды. “Щи” тип атала икән, ҡаймаҡ һалып ашайҙар. Өләсәй ашаған ваҡытта мине ни өсөн алып килгәнен аңлатты.

— Әбейҙең ике оя ҡаҙы бәпкә сығарған, һин шуларҙы ҡарауылларһың, сөнки туғайҙа эт-ҡош күп, — тине. — Хәҙер ҙур малайһың инде. Биш йәшең тулды, шуҡ булһаң да, тыңлаусан малайһың, түҙерһең, — тип өҫтәне. Мин бер һүҙ ҙә әйтмәнем, сөнки ул әйткән барыбер үтәлергә тейеш.

Мине ҡаҙҙар яратманы, бигерәк тә ата ҡаҙ. Күрәһең, өләсәй минең хәлде белеп тора:

— Ата ҡаҙҙары уҫал, сыбыҡ тотоп йөрө, — тине. Ашап сыҡҡас, тал һындырып, сыбыҡ та тотторҙо. Ысынлап та, ата ҡаҙ бик уҫал булып сыҡты. Ярай әле, миңә ситтән генә ҡарап торорға ҡуштылар.

Ҡаҙ бәпкәләре ҡарау анһат эш түгел, әммә мин ниңәлер һәр көн иртүк тороп тирмәнгә йүгерә инем. Ата ҡаҙ миңә өйрәнде, ахырыһы, ҡанатын һелкеп ҡыумай башланы. Ҡайһы ваҡыт бәпкәләрҙе бикләп тә ҡуялар. Был ваҡытта инде миңә яңы донъя ишеге асыла. Тирмәндең эсенә кереп, нисек эшләгәнен ҡарайым, туғайҙа йөрөйөм, сиңерткә тотам, тик һыуға ғына яҡын бармайым — өләсәй ҡушмай. Бында булған һәр ваҡиғаны күҙәтәм, минең өсөн барыһы ла ҡыҙыҡлы,

барыһын да белгем килә. Бер көндө, тирмәндең тирә-яғын «өйрәнеп» йөрөгәндә, тауыҡ ҡыҫҡылдаған тауышҡа кереп, уның хужаһынан йәшереп күкәй һалған ояһын эҙләп таптым. Оло бер өйөм ине. Был турала өләсәйгә әйткәс, ул бөтәһен дә итәгенә йыйып, Әнүтә әбейгә алып инде һәм минең тапҡанлыҡты әйтте. Шул ваҡытта мин беренсе тапҡыр «молодец» тигән һүҙ ишеттем.

– Харап икән, ҡаҙ бәпкәләре көтә. – Был һүҙ күп көттөрмәне, әйтелде. Әммә мин ул һүҙгә һыңар ҡолағымды ла ҡушманым, һәр көн ашығып тирмәнгә барҙым. Йәй көнө бит, ҡайһы берҙә ҡунырға ла ҡала торғайным. Минең өсөн һалам өйөмө лә йоҡларға яраҡлы.

Минеңсә, тирмәндә күп нәмәгә өйрәнеп була, шуныһы ғына ауыр: урыҫ телен белмәйем. Урыҫ ауылынан килгәндәрҙе иғтибар менән тыңлайым, аңламайым. Эстән генә рус телен өйрәнергә үҙемә һүҙ бирҙем. Бер көн ҡараһам, ниндәйҙер урыҫ малайы епкә аҫҡан суртанды иңбашы аша тотҡан, үҙе ҡып-ҡыҙыл булған, ашыға-ашыға ниҙер һөйләй. Уны биш-алты урыҫ уратып алған, иҫтәре китеп ҡарайҙар. Баҡһаң, теге малай ҡармағы менән Һәләүектән ҙур ғына суртан тотҡан икән. Мин ул малайҙың һөйләгәнен оҙаҡ ҡына тыңлап, ҡайһы бер һүҙҙәрен ятлап алдым, онотмаҫ өсөн ҡабатлап йөрөнөм һәм күп ваҡыттар үткәс кенә уларҙы башҡортсаға әйләндерә алдым.

Малай суртан тотҡанына сикһеҙ шат ине. Күрәһең, ундай балыҡты беренсе күреүе. Үҙенең һөйләүе буйынса, тәүге ҡапҡан суртан ҙурыраҡ булған, тик ҡармағын өҙөп ҡасҡан. Ә икенсеһе ҡапҡанында малай һаҡ булған – ваҡытында тартҡан. Тартып сығарғас та суртанды еңеүе еңел булмаған. Ул малайҙың әйтеүе буйынса, быға тиклем ҡармаҡ менән яҡын-тирәлә былдай ҙур суртан тотоусы булмаған икән. Тирмәнгә йөрөп, мин урыҫтарҙың һөйләшеүҙәре менән генә түгел, башҡа ғәҙәттәре менән дә беҙгә оҡшамағанын күрҙем. Мәҫәлән, мәрйәләренең еңел ярауҙарын үтәүҙәре миңә бик көлкө күренде. Улар ыштан киймәй икән, итәктәрен генә күтәрәләр ҙә аяҡ өҫтө торған килеш... шы-ый.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, минең өсөн тирмән бик фәһемле урын булып сыҡты. Мин күҙәтеүсәнмен: аңлашылмаған нәмәләрҙе лә үҙем аңларға тырыштым.

Шулай ҙа тирмәндә мине ныҡ аптыратҡан һорау башымдан китмәне. Беҙҙең ауыл кешеләре тирмәнгә ярты тоҡ, бик һирәк тулы тоҡ иген алып киләләр. Ә урыҫ ауылдарынан һәр ғаилә тип әйтерлек пар ат егелгән арбаға ундан артыҡ тулы тоҡ тейәгән, йөктәрен аттары көскә һөйрәй. Беҙҙең ауылдыҡылар күбеһе ҡул арбаһы менән, ҡайһы саҡта арҡаһына һалып күтәреп тә килә. Мин был хәлде оҙаҡ күҙәттем дә, аптырағас, өләсәйҙән һорарға булдым. Тик ул тағы ла тура яуап бирмәне: «Эй, бала, – тине, – беләһеңме, беҙ элек нисек йәшәй инек...» Өләсәй икенсе нәмәләр тураһында һөйләп алып китә ине. Мин был һорауға бер нисек тә яуап таба алманым. Ярай, әйтмәһәләр, ҙурайғас барыбер был турала беләсәкмен, тип үҙемә һүҙ бирҙем. Һуғыш ваҡыты, беҙҙең ауылда халыҡ астан интегә, ә күрше урыҫ ауылдарынан тирмәнгә килгәндәрҙең береһе лә аслыҡ кисергәнгә оҡшамаған. Тирмәнсенең дә иркен йәшәүен аңларға мөмкин: һәр килгән кешенән өлөш алына, күп мал аҫрай, йәшелсәһен дә үҫтерә. Уның ғаиләһе лә ҙур. Еткән малайҙары бар, әммә уларҙы бер кем дә мәжбүри эшкә ҡушмай. Тирмәнсе бисәһенә лә хеҙмәт көндәре кәрәкмәй, ә беҙҙең ауылда эш көнөн 220 труддингә тултырмаған бисәләрҙе суд хөкөмө көтә.

Урыҫ ауылынан килгән кешеләр икмәк менән сусҡа итен, сусҡа салоһын иркенләп ашай, ондары етерлек, хатта унан самогон да ҡыуалар икән. Ә Әптек халҡының оно ыумасҡа ла юҡ. Бына көрәк һаҡаллы бер ирекәй ап-аҡ салоға ҡушып икмәк көйшәп тора. Мин, онотолоп китеп, яҡыныраҡ килеп ташлағанмын икән, ул миңә икмәген бүлеп, ҙур бер киҫәк һуҙҙы. Мин алманым, сөнки өләсәйем шулай ҡуша. Был ҡарт һөйләргә ярата икән. Мин уның бер һүҙен дә ситкә ебәрмәйенсә оторға тырыштым. Ул үҙҙәренең ни өсөн башҡаларға

ҡарағанда иркенерәк йәшәүен аңлатырға тырышты, күрәһең: «Мы держали власть, власть держал я. Кого надо – мы расстреляли, расстреливал я».

Тимаш партизандары араһында Вася тигән йылғыр кеше бигерәк тә рәхимһеҙ булған. Беҙҙең ауылдың утыҙҙан артыҡ ирҙәрен аттырғанда ул бигерәк тә ҙур оҫталыҡ һәм тырышлыҡ күрһәткән. Минә икмәк һонған көрәк һаҡал шул Вася булған да инде. Мин быны һуңынан ғына белдем. Уның аңлатыуы буйынса, власты улар ҡулына алған, тимәк, улар туҡ йәшәргә тейеш. Ярай, аңлашылды, бала булһам да, барыһын да төшөндөм.

**Парсалар**

*Мин ҡуйған көнбағыш өйөмөнән бер юлы ике ҡарабаш турғай ем алмай, һәр ваҡыт сират һаҡлана. Ә ябай турғайҙар килеп тулһалар, көнбағыш алып кителмәй, шунда уҡ, урынында ашала. Бер генә һоро турғай ҙа емен күтәреп осмай, ҡабыҡтары урынында ҡала. Уларҙың көнбағыш ярыуы кешеләрҙекенә оҡшаған. Ябай турғайҙар ашаған урында ҡарабаш турғайҙар тора алмай, осоп китә.*

## Шарик

*Ит әсирмәс, ат тепмәс, тимә*
*(Эт тешләмәҫ, ат типмәҫ, тимә).*

**Мәхмүт Ҡашғари**

– Балам, тиҙ генә магазинға барып кил, һин бит тиҙ йөрөйһөң.

Өләсәйҙең йомоштарын йүгереп үтәйем, башҡаса булмай, етмәһә, әле ҡушҡан йомошо минә ҡыҙыҡ күренде: магазиндан одеколон һатып алып килергә. Магазинда күргәнем бар минең ул шешәләрҙе. Тыштарында матур һүрәттәре лә бар, ә береһендә сибәр ҡатын төшөрөлгән, «Кармен» тип яҙылған. Мәктәпкә йөрөмәһәм дә, уҡый беләм инде, үҙем өйрәндем, шулай уҡ һанарға ла булдырам. Маҡтанмай әйткәндә, икенсе класс уҡыусыһына ҡарағанда күберәк беләм мин. Үҙемдән олораҡтарҙың мәктәптән ҡайтыуын көтөп торам да барыһын да һорашам, шулай итеп, уларға өйрәтеп ҡайтарғанды мин өйҙә уҡып ултырам.

Икенсе шешәнең тышына тау һүрәттәре төшөрөлгән, «Жигули» тип яҙылған. Әлбиттә, ғәжәп тойолдо, беҙҙең өйҙә одеколондың булғаны ла юҡ, әле ниңә кәрәк булғандыр. Ярай, өләсәйҙең аҡсаһын алдым да магазинға һыпырттым. Былдай эшкә ул үҙенең быймаһын да кейҙерә. Мин бер нисә шешә «Жигули» алып ҡайттым.

– Өләсәй, ҡара әле, һүрәттәре ниндәй матур!

– Һүрәт ҡайғыһы юҡ, ул һиңә кәрәкмәй. Быйманы һалма. Бына шешәләрҙе сепрәккә төрөп тоҡсайға һалдым, вата күрмә. Дүрт шешәне лә тирмәнгә алып барып, Әнүтә әбейгә тапшыр, ыштубы кеше күрмәгәндә генә бир. Аңланыңмы, ҡолағыңды бороармон, ишет. Биргәс, йүгереп ҡайтып китмә, Әнүтә әбей һиңә он бирер, алып ҡайтырһың, йәме.

Өләсәйҙең әйткәнен ҙур тырышлыҡ менән үтәргә тотондом. Күҙгә-башҡа нәмә күренмәне, тирмәнгә тиҙ барып еттем. Әбейҙе табыу ҡыйын булманы, ул һәр ваҡыт өйҙә аш-һыу менән булаша. Ул күп эшләй, ҡулдары бер ваҡытта ла буш тормай. Мине күргәс, бер һүҙ ҙә әйтмәне, иңбашымдан тотоп өйгә алып инде. Одеколондарҙы тиҙ генә алып йәшерҙе лә мине өҫтәл артына ашарға ултыртты. Әнүтә әбейҙең бешергән аштарының ни тиклем тәмле икәнен һәйбәт беләм, шуға ла, тартынып ҡына ултырһам да, эстән бик шатмын. Тик ҡыуанысты һиҙҙерергә ярамай, өләсәй шулай ҡуша. Һәр кем үҙ ҡәҙерен белергә тейеш. Бына әбей минең алға аш ҡуйҙы. Мин хәҙер беләм инде: ул «борщ» тип атала. Нисек кенә тәмле булмаһын, туҫтаҡты бушатыр өсөн көсләп ашарға тура килде. Ә икенсе тәрилкә менән ҡуйылған тары бутҡаһына тотоноп та ҡарай алманым. Эх, өйҙә булһа ул

бутҡа! Етмәһә, өҫтөнә “кәтлит” тигән ит тә һалынған. Юҡ шул, ҡорһаҡ берәү генә. Әнүтә әбей өҫтәлгә майҙа бешкән, ҡамырҙан яһалған ашамлыҡтар ҡуйҙы ла ҡайҙалыр сығып китте. Бер-икеһен кеҫәгә һалырға мөмкин дә, тик өләсәйем һорамай алырға ярамағанлығын ныҡлап иҫкәртте. Әнүтә әбей үҙе әйтһә, алған булыр инем дә, ул ҡайҙалыр сығып китте лә юғалды, эше күптер, моғайын.

Өҫтәл артында оҙаҡ ултырыу ярамай, мин ҡунаҡ түгел дәһә. Тышҡа сыҡтым, тирмәндең эшләгәнен ҡарап торҙом. Гөрләп эшләй, туҡтамай, халыҡ та күп, сират, һәр кемгә лә он кәрәк. Тирмәндән сығып, Һәләүек боҙонда йөрөнөм, тирмәнсе өйөнә бер нисә тапҡыр инеп сыҡтым, маҡсатым – Әнүтә әбейгә йышыраҡ күренеү. Ә ул юҡ та юҡ. Ә осрай ҡалһа, миңә иғтибар итмәй, күңелле ҡиәфәт менән ҡайҙалыр үтеп китә. Мин өләсәйҙең йомошон тулыһынса үтәмәй булдыра алмайым. Ә өләсәй он алып ҡайтырға ҡушты, тимәк, мин буш ҡайтырға тейеш түгел. Тирмән тирәләй күп тапҡырҙар әйләндем, юҡ шул, мин уйлағанса килеп сыҡмай. Кис булды, һуңға ҡалам. Ҡыйын булһа ла, ҡабат өйгә индем, бер кем дә юҡ, сыҡтым. Ҡаршыма Әнүтә әбей килә .

– Ты еще не ушел? – Әбей миңә ғәжәпләнеп ҡараны.

– Да,– тинем мин, – бабушка, мука, – тинем.

– Пусть завтра сама придёт. Ты иди, уже поздно, – был һүҙҙәр миңә еңеллек килтерҙе, сөнки өләсәй алдында яуапһыҙ ҡалып булмай. Тиҙерәк юлға ашыҡтым, ҡараңғы төшә. Төнгә ҡалыуҙан ҡурҡам, сөнки Һәләүек буйлап тураға ат юлы ҡар менән күмелгән, оло юл аша ҡайтырға кәрәк. Ә ул зыярат эргәһенән үтә, мин иһә зыяраттан ҡурҡам. Ул ерҙе үткәнсе йүгереп барырға уйланым, булмай шул. Етмәһә, өләсәйҙең төпләнгән ҡыймаһы минең өсөн ҙурыраҡ, нисек тә булһа аяғымдан төшөп ҡалырға тырышалар. Зыяратты үткәндә тирә-яҡҡа, артҡа ҡарамаҫҡа тырышам, өләсәй шулай ҡуша: «Тештәренде күрһәтмә, ауыҙыңды яп», – тип тә өҫтәй. Үҙе һәр саҡ доғалар уҡый. Нисек кенә булмаһын, был ҡурҡыныс урынды үттем, ауылға ла яҡынайҙым. Яҡында ферма ҡарауылсылары һабан дөрәненә һуҡҡан, ҡысҡырған тауыштар ишетелә. Быларҙы ишеткәс, минең аяҡтарым тыңламай башланы, атларға ла теләмәйҙәр, мин йүгерергә тырышам. Ололар һәр көн бүреләр тураһында һөйләй: күрше ауылда фермаһының һалам башын тишеп, төндә бүреләр ингән, һарыҡтың күбеһен тамаҡлағандар. Унан бигерәк, күмәк һарыҡ араһына ингәс, артыҡ ҡомһоҙлоҡ күрһәтә башлайҙар икән: һарыҡ итен ашауҙы ташлайҙар ҙа муйынын тешләп ҡанын ғына эсәләр, унан икенсе һарыҡҡа ташланалар һәм тағы ла... Шуның өсөн ферма ҡарауылсыларына ҡараңғы төшкәс бүреләрҙе ҡыуып ҡурҡытып торорға ҡәтғи талап ҡуйылған. Тауыш алыҫҡараҡ ишетелһен өсөн, ҡарауылсы өйө эргәһендәге бағанаға һабан дөрәне элеп ҡуйылған. Уға тимер һуҡһаң, яңғырауыҡлы тауыш сыға, бүреләр бындай тауыштан ҡурҡа икән. Ишетеүем буйынса, былтыр беҙҙең ауыл фермаһында ла бүреләр күп кенә һарыҡты тамаҡлап киткән. Эйе, һуңғы йылдарҙа улар һуғыш барған яҡтарҙан ҡасып, беҙҙең ауылдар тирәһендә күбәйеп китте.

Ҡарауылсылар тимер һуға, ҡысҡыра, ә мин нисек кенә тырышһам да, йүгерә алмайым, ҡурҡыуҙан йөрәгем сығып китерҙәй булып тибә, етмәһә, ҡыймаларым төшөп ҡалырға самалай. Яланаяҡ йүгерә лә алыр инем, тороп ҡалған ҡыймам өсөн өләсәйемдән ҡурҡам. Ниндәй генә уйҙар баштан үтмәй: һөйләүҙәренсә, бер йәш ҡыҙ күрше ауылдан уҡыуҙан ҡайтып килгән, һуңлап төнгә ҡалған. Ауылына бер-ике саҡрым самаһы ҡалғас, уны бүреләр ҡыуып тотҡан һәм тамаҡлаған. Был хәлде икенсе төрлө һөйләүселәр ҙә табылды. Имеш, ҡыҙҙың шырпыһы булған, һәм ул бесән кәбәнен яндырып ебәргән. Уттан ҡурҡҡан бүреләр кәбән янып бөткәс кенә бисараны ашаған, имеш. Ҡыҙыҡай ҡыйма кейгән булған икән. Эсендәге аяҡ өлөштәре генә ҡалған, ҡыйма эсендә шунда уҡ ҡыҙҙың хушлашыу хаты ла булған, ти.

Үҙем дә һиҙмәҫтән артыма әйләнеп ҡараным һәм ҡотом осто, аяҡтарым

атлауҙан баш тартты. Артымдан бүре килә! Йүгерә алмағас, ҡысҡырырға тырышам, ауыҙымдан тауыш сыҡмай. Ни эшләргә? Шырпым да юҡ, кәбән түгел, бәләкәй һалам өйөмө лә күренмәй. Ә ауыл яп-яҡын. Ситтәге өй ҙә күренә. Ә мин хәҙер бүре тешенә эләгәм. Ферма ҡарауылсылары ҡысҡыра, тимергә һуғалар, ә бүре бына килеп етәсәк. Хәл юҡ, мин туҡтайым, буғай. Бүре килеп етте лә миңә һикерҙе, тауышы сыҡты... Шарик! Шарик! Мин ҡар өҫтөнә тәгәрәп төштөм, Шарик минең менән буталанды. Эйе, тирмәнсе эте, йөндәре һорғолт төҫтә, бүрегә бик оҡшамаған да. Ҡурҡҡанға ҡуш күренә, тиҙәр, ҡараңғыла эт тә бүре булып күренә икән. Ҡурҡыуҙың эҙе лә ҡалманы. Беҙ Шарик менән оҙаҡ ҡына ҡар өҫтөндә аунаныҡ, ул миңә бөтә хайуандарҙан да ҡәҙерлерәк булып тойолдо. Аунашып туйғас, ҡайтырға кәрәк икәнлеге иҫкә төштө. Төрлөсә юхалап, тирмәнсе этен өйөнә ҡайтарып ебәрҙем. Шарик ҙур кәүҙәле, көслө эт, туҡ йәшәй, бүреләрҙән ҡурҡа торған зат түгел.

Мин өйгә тиҙ ҡайтып еттем, булған хәлде бер кемгә лә һөйләмәнем, шелтә эләгер, тип ҡурҡтым. Ә шулай ҙа бер нисә төн йоҡом йоҡо булманы, һаташтым. Өләсәйем иһә минең һуңлап ҡайтҡанды үҙенсә аңланы, бәлки, миңә ҡарап һиҙенгәндер ҙә.

— Юҡҡа һине ебәргәнмен, юлда йөрөү хәҙер ҡурҡыныс. Алама хәбәрҙәр ҙә йөрөй, — тине.

Юҡҡа түгел шул. Хәбәрҙәр бүреләр тураһында һәм бөтәһен дә ҡурҡытырлыҡ. Әптек ауылында данлыҡлы һунарсы ла бар, йыш ҡына бүре аулай, әммә барыбер уларҙың һаны кәмергә уйламай икән. Ул Ғарифулла бабай яҡшы аусы, һунарсы булған өсөн Мәскәүгә барып орден да алып ҡайтты, гәзиттә лә маҡтап яҙып сыҡҡандар. Тик бынан ғына беҙгә рәхәтлек килмәй.

Бүреләр беҙҙең өйҙәргә лә яҡын килделәр. Күрше Ибраһим бабайҙың Күкбүре исемле этен үлтереп, ҡарға күмеп киттеләр. Бик яҡшы, ҡурҡыу белмәҫ эт ине. Бүреләрҙең килерен һиҙеп, һәр саҡ алдан хәбәр итер булды.

Мин дә шул көндән һуң артыма ҡарамай йөрөүҙе ташланым. Өләсәйем әйтмешләй, һәр ваҡытта ла алдынды-артынды ҡарап йөрөргә кәрәк. Ә тирмәнгә барған һайын Шарик менән уйнарға яраттым. Эт булһа ла, минең бик яҡшы дуҫыма әйләнде мәхлүк.

**Парсалар**

*Ҡышҡы көн. Көн һайын тәҙрәгә көнбағыш ҡуям. Ҡарабаш турғайҙар, сиратлап көнбағыш бөртөктәрен алып китеп, ағас ботағында ашайҙар. Ҡарабаш турғайҙың тәпәйе шул тиклем етеҙ, көнбағыш бөртөгөн ысҡындырғанын күреп булмай.*

## Медицина, имеш...

Ҡышҡы һыуыҡ көндәрҙең береһендә беҙҙең өйгә канцелярия хәбәрсеһе килде. Ул ваҡытта «кеше саҡырыусы» вазифаһын үтәүсе айырым штат булдырылғайны, һәм был урынды, хәтерләүемсә, Сания апай биләй ине. Өйө булмағанлыҡтан, был апай шунда уҡ, канцелярияның бер бүлмәһендә, йәшәне. Уны һәр саҡ борсолоу менән ҡаршы алалар, сөнки яҡшы хәбәр башҡа юлдан, икенсе кешеләр аша килергә ярата.

Өләсәй иң башта ни өсөн саҡыртыуҙарын белергә тырышты. Налог та, заем да ҡайғыһы түгел икән, ауылға комиссия килгән. Врачтар бала-сағаларҙы ҡарай, аталары фронттағыларҙы детдомға алып китәләр. Һәр көн беҙҙең өсөн өҙгөләнгән өләсәй күп уйлап торманы, хөкүмәт балаларҙы ҡарарға теләй икән, бик яҡшы, тине лә беҙҙе канцелярияға алып китте. Минең өсөн был ваҡиға — ҙур яңылыҡ, күңелемдә ҡурҡыу ҙа, ҡыҙыҡһыныу ҙа етерлек. Иң мөһиме, мин беренсе тапҡыр совет медицинаһы менән танышам. Электән үк минең «доктор», «больница» тигән һүҙҙәрҙе ишеткәнем бар, тик нимә икәнен һорашыр кешем юҡ. Беҙҙе ап-аҡ

кейем кейгән ике һимеҙ ҡатын ҡаршыланы, сиртһәң ҡандары сығырлыҡ ҡыҙыл битлеләр. Петровскиҙан килгәндәр икән. Ҡараштары бик тәкәббер, миненсә, доктор кеше яғымлы, йомшаҡ һүҙле булыр кеүек ине. Ишектән инеү менән улар миңә күҙ ташлап алдылар ҙа, кейемемә, битемә бармаҡ менән төртөп күрһәтеп, ниҙер һөйләштеләр, унан мине онотоп, күҙҙәре лә, һүҙҙәре лә өләсәйгә күсте. Русса белмәһәм дә, аңлап алдым: был ике һимеҙ мәрйә өләсәйҙе әрләй, уға ауыҙ асырға ла ирек бирмәй, ҡысҡыралар, нимәлер аңлаталар, бармаҡ янайҙар. Шунан беҙҙе ҡайтарып ебәрҙеләр. Ни өсөн саҡыртылыуыбыҙҙы ҡайтҡас ҡына һорайһы ҡалды. Өләсәйем өйҙә үҙ алдына һөйләнде, ҡарғанды; һуң, беҙҙе алып барыуҙың бер генә лә кәрәге юҡ ине бит. Шулай инде, астың хәлен туҡ белмәй, ә ул ике ҡатын беҙҙең йәшәү рәүешен нисек аңлаһын? Беҙ бит икмәк күрмәйбеҙ. Ҡара ондан яһалған ыумас беҙҙең өсөн – байрам ашы. Ә тегеләр өләсәйемде: «Ниңә малайың ябыҡ? Миктәгән, ҡаймаҡ, ит ашатмағанһың», – тип әрләгән икән.

Шулай итеп, был комиссия беҙҙең өсөн ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырҙы. Өләсәй бер нисә көн ҡара янып йөрөнө, ҡарғанды, Совет власын әрләне. Килгән медицина «эшлеклеләре»н налог һалыусылар, бигерәк тә заемға яҙҙырыусылар менән сағыштырҙы. Улар бит аҡса һорамай, быуа һин яҙыл, ҡултамғанды ҡуй, тиҙәр, һуңынан аҡсаңды биреп, заемын алырһың. Аҡса килер урын юҡ, ҡара һыйыр биргән һөт, май налогтарға китеп тора, ә теге ике мәрйә миңә ит, май ашатырға ҡуша.

Булмағанды таптырыу ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Өләсәйҙең төн йоҡоһо ла үҙгәрҙе, төндә баҫлыға, һаташа, төшөндә һөйләшә башланы.

– Балам, мин төндә баҫлығам, тауышымды ишетһәң, йоҡомдан уят, – тип иҫкәртеп, өйрәтеп тә ҡуйҙы.

Был комиссиянан һуң өләсәй оҙаҡ тыныслана алманы. Атай – һуғышта, әсәй – совхоз эшендә, беҙҙе ҡарау уның елкәһенә төштө шул. Ә власть уға ҡаршы, хатта быны йәшермәй ҙә, асыҡтан-асыҡ әйтә килә. Хәҙер медицина килеп уға шелтә бирә, иҫкәртеү яһай. Хәлебеҙ ҡыл өҫтөндә ҡалды, ул да өҙөлөргә мөмкин. Иларлыҡ хәл. Тик өләсәйем иламаны, илап файҙа юҡ, тип һәр көн әйтә килде. Әптек ауылында:

– Ни эшләргә, уйларға баш етмәй? – тип төшөнкөлөккә бирелгән ғаиләләр ҙә байтаҡ булды.

Беҙҙән тыҡрыҡ аша ҙур урамға сыҡҡас, Сәғиҙә инәйҙең өйө тора. Йәйге көндә уның ҡыҙҙарын мин тыҡрыҡта йыш күрәм. Уларҙың аталары Лоҡман һуғыштың башында уҡ һәләк булды, өс ҡыҙ, бер малайы етем ҡалды. Уларҙы ла шул комиссияға саҡыртҡандар. Сәғиҙә инәйҙе лә ныҡ әрләгәндәрҙер, күрәһең, ҡыҙҙары аҫҡа шешенгәйне. Әлбиттә, әсәләре илап колхоздан ярҙам һорап та барҙы, зарланды, тик бушҡа ғына. Тора-бара ҡыҙҙары илауҙарын оноттолар, аҫҡа шешенеп, миктәп донъя ҡуйҙылар. Ә миңә йәштәш малайы үлмәне, күрәһең, Сәғиҙә инәй, исмаһам, был балам үлмәһен, тип аҡтыҡ көсөн һалғандыр. Һуғыш бөткәс, беҙ ул малай менән бергә уҡырға йөрөнөк, тик ете класс бөткәс, ул мәктәпте ташлап, колхозға эшкә сыҡты: яландағы тракторҙарға һыу ташыны. Әлбиттә, ат менән һыу ташыу ауыр түгел, тик яланға килеп еткәс, ҙур, һыулы мискәне ергә күтәреп төшөрөргә кәрәк, ә ул ауыр, бер кешенең генә көсө етерлек түгел. Шулай итеп, ул билен ҡаймыҡтыра, инвалид хәленә ҡала. Сәғиҙә инәй илауҙан туҡтай алманы. Берҙән-бер улы бик оҙаҡ төҙәлергә тырышты, бер нисә тапҡыр Өфөләге Республика дауаханаһында ла ятып сыҡты, тик файҙаһы булманы. Барыбер ул малай аяҡҡа баҫманы – Сәғиҙә инәй япа-яңғыҙы тороп ҡалды. Һуғыш ваҡытындағы ҡаты аслыҡтан ҡурсалап алып ҡалған улы туҡ ваҡытҡа сыҡҡас, колхоз эше тип, имгәнеп вафат булды. Шулай итеп, Әптек ауылында Нурдәүләтовтар ғаиләһе лә донъянан китте. Балалары өсөн бар көсөн һалып эшләп, күҙ йәштәре бөткәнсе илап, һөйөклө малайын ер ҡуйынына тапшырғас, Сәғиҙә инәй үҙе лә үлде.

Санкт-Петербург ҡалаһының Пискарев зыяратында Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында блокадала үлгәндәрҙең ҡәберлеге бар. Бына шуның бер урынында Рәсәйҙәге һәр кемгә билдәле ҡәберлеккә былай тип яҙылған: «Бабушка умерла 25 января. Дядя Алёша 10 мая. Мама 13 мая в 7.30 утра. Умерли все, осталась одна Таня. Таня Савичева погибла в 1945 г. в эвакуации» (*«Дневник Тани Савичевой»*).

Әптек ауылының да зыяраты бар, унда Нурдәүләтовтар ғаиләһе күмелгән, тик хәҙер Сәғиҙә инәйҙең дә, балаларының да ҡәберен табып булмай. Нурдәүләтовтар ҙа юҡ, уларҙың ҡәбере лә билдәһеҙ. Бына шулай. Савичевтар үлеме өсөн кем ғәйепле икәнен беләбеҙ. «Блокада китабы»ның 31-се битендә Геббельс: «Мы и в дальнейшем не будем утруждать себя требованиями капитуляции Ленинграда. Он должен быть уничтожен почти научно обоснованным методом, т.е. по профессору Пигильмайеру».

Әптек халҡын ҡырыуҙа кемдең ниндәй фәне ҡулланылды? Ҡыҙыҡ, ауылға медиктар ни өсөн килде, уларҙы ни өсөн ебәргәндәр?

**Парсалар**

*Быйылғы ҡыш бигерәк насар килде. Ҡаты һыуыҡтарҙы тиҙ генә йылы алмаштыра, кисен йылы булһа, иртән һалҡын. Күрәһең, ҡарабаш турғайҙар төнәгән урын еүеш, ә иртә менән аяҡтары туңда булып сыға. Аяҡтарын ала алмай интеккәндәрҙер, өсәүһенең һыңар бото ныҡ имгәнгән, ҡайһы бер тырнаҡтары һәлберәп тора, төптән һынғандар. Йәлләнес, тәпәйҙәренә ҡарап, йөрәгем әрней. Бер нисек тә ярҙам итә алмайым, ҡарабаш турғай кеше ҡулынан медицина ярҙамы ала алмай шул.*

## Вышкалар

*Беҙҙә ҡалын урмандар,*
*Беҙҙә данлы Урал бар;*
*Урал аҫты алтындыр.*

**Шәйехзада Бабич**

Ауыл яңғыратып көслө, ҙур, тиҙ йөрөшлө тракторҙар йөрөй башланы. Ҡышҡы һыуыҡ булыуға ҡарамаҫтан, малай-шалай уларҙы ҡарарға тырышты. Мин дә түҙемһеҙлек менәнололарҙың был турала нимә һөйләүҙәрен көттөм, сөнки туң тәҙрәнән бөтәһен дә күреп булмай. Хәбәрҙәр оҙаҡ көттөрмәне. Ауылға нефтселәр килгән һәм уларҙы күп өйҙәргә фатирға ҡуялар икән, тигән һүҙ таралды. Күп ваҡыт та үтмәне, ауыл тирәләй вышкалар үҫеп сыҡты. Әлегә бөтә был яңылыҡтарҙың да Әптек өсөн файҙағамы, зыянғамы икәнлеген берәү ҙә әйтә алманы.

Иң яҡын дуҫым Сынтимерҙәрҙең өйөнә лә нефтселәр ғаиләһе фатирға төштө. Өсәүҙәр: йәш тракторист, ҡатыны, бәләкәй балаһы. Беҙҙең өсөн иң ҡыҙығы — ят һөнәр кешеләренең ашамлыҡтары. Әлегә кейем-һалым тураһында фекер йөрөтә белмәйбеҙ, ә ашаған аҙыҡтарына иҫебеҙ китә. Минең уларҙы күреү түгел, ишеткәнем дә юҡ. Шулай ҙа барлыҡ балалыҡ ҡыҙыҡһыныуымды еңеп, ололарҙы бимазалап бер нәмә лә һорамайым, әммә уларҙың һөйләшкәндәрен иғтибар менән тыңларға тырышам. Әлдә лә мин ҡыҙыҡһынған нәмәләр тураһында күп һөйләшәләр. Шулай итеп, тиҙ арала нефтселәр ашаған аҙыҡтарҙың исемдәрен белдем; берәник, бишенйә, кәнфит, колбаса, алма тигән нәмәләрҙе күрҙем. Ауыл халҡының уларҙы ашарға мөмкинселектәре юҡ, беҙҙең өсөн ҡара икмәк тә ҡәҙерле аш. «Ҡара икмәк» тигәс тә, һүҙ арыш икмәге тураһында бармай, беҙгә эләккән алабута ҡатыш иген ҡалдығынан яһалған ондан бешерелгәнен дә яратып ашайбыҙ.

Нефтселәр ауылда үҙҙәрен бик эре тотто. Трактор менән урамда йөрөүҙәре генә ни тора: шәп итеп килеп, ҡапыл боролоп, кеше ҡурҡытып, урамда үтә алмаҫлыҡ һырынтылар яһап бөттөләр. Ҡайҙа барма — трактор юлы, ат менән йөрөүселәргә ҡыйынлыҡтар тыуҙы.

Нефтселәр араһында төрлө кешеләр бар. Ана, күрше Хәмиҙә инәйҙәргә әзербайжандар төштө. Ауыл халҡы был яңылыҡты тиҙ генә үҙенсә эләктереп алды, таҡмаҡтар ҙа сығарҙы. Шуныһы насар: уларҙы ҡағыҙға яҙырлыҡ түгел. Шулай булғас, халыҡ нефтселәрҙе бик яратып ҡаршы алды, тип әйтеп булмай, сөнки яғымлы таҡмаҡтар ишетелмәне. Нефтселәрҙең килеүе, һис шикһеҙ, ауылға күренерлек үҙгәрештәр индерҙе, һәр өйҙә лә улар тураһында ғына һүҙ барҙы. Ситтән килеүселәрҙең тәмле ашауы ауыл халҡы өсөн бигерәк тә ҙур ваҡиға булды. Ләкин был эштең башы ғына ине, татлырағы ла килеп етте. Ярай әле, беҙгә, сабыйҙарға, нефть бөләһе теймәне, ә бына беҙҙән олораҡ булған үҫмерҙәргә таяҡтың оло башы төштө. Уларҙы яңы төҙөлөштәр өсөн кәрәк булған урман эштәренә ҡыуҙылар. Уйлай күрмәгеҙ, колбаса, берәник ашау эләкмәне уларға, ашау яғын ауыл халҡы үҙе хәстәрләргә тейеш ине. Бына шулай, сағыштырыу өсөн: Әптек төрмәһендә тотҡондарҙы көнөнә өс тапҡыр ашаталар, таҙа икмәк бирәләр. Тотҡондар әйтмешләй, «тамаҡ туҡ, тик ирек кенә юҡ».

Беҙҙең ауылдан барған урман киҫеүселәрҙең һөйләүе буйынса, эш иҫ китмәле ҡаты, бер ниндәй ҙә эш шарттары тыуҙырылмаған, ашау насар, кейем алама. Ауылдан килтерелгән аттар тураһында әйтеп тораһы ла юҡ, астан интеккән малҡайҙар менән эшләүе — үҙе бер бәлә. Ул замандағы матбуғат биттәрен асып уҡыһаң, Өфө — Ишембай тимер юлы төҙөлөү тураһында тантаналы, маҡтансыҡ хәбәрҙәр яҙылған. Был юлды төҙөп бөтөү өсөн ЦК ВКП(б) бер йыл ваҡыт биргән. Ә кем төҙөргә тейеш һуң? Билдәле, ул ваҡытта механизация юҡ, ә ер эштәре ваҡытында меңәр-меңәр кубометр тупраҡ ҡаҙырға, ташырға һәм өйөргә кәрәк. Ҡала халҡына көрәк тоттороу ҡыйын, улар эш хаҡына аҡса һорай белә. Ә башҡорт ауылдарынан ҡушҡанды эшләтеү бер ни түгел. Шулай итеп, һәр ауылдан меңәрләгән колхозсыны юл эшенә ҡыуалар, ә аҡса түләнмәй, улар хатта ашарға ла үҙҙәре алып килергә тейеш була. Башҡорт нефте менән 70 йыл маҡтандылар, ә уның хаҡын белеүсе лә, белергә теләүсе лә булманы. Әүжәндә урман киҫеүсе Әптек ауылы малайҙарының ғүмерҙәре ҡыҫҡараҡ булды. Уларҙың шулай уҡ телдәрен дә ҡыҫҡарттылар, һорашһаң: «Ҡуштылар шул, эшләнек, нисек итәһең, үҙебеҙ теләп барманыҡ!» — тиҙәр.

Урман әҙерләгәндә лә, тимер юлы төҙөгәндә лә әрһеҙ башҡорт аттары эшләгән. Әгәр «Очерки истории Башкирской организации КПСС» тигән китапты уҡып ҡараһаң, Ҡырмыҫҡалы районынан ғына мең ярым егеүле ат эшкә килтерелгән, башҡа урындарҙан да кәм булмаған, тиелгән. Бына нисек төҙөлгән ул тимер юлы. Кемдер бушҡа эшләй, кемдер орден ала, рәхәт йәшәй. Бына шул була инде социализм. Хатта батшалар заманында ла түләү булған. Әгәр ҙә инде улар ленинизм осоронда бушлай эшләтеү ысулы асыласағы тураһында ишетһәләр, валлаһи-биллаһи, көнләшерҙәр ине.

Ә беҙҙә ошо «яңы ысул»ға нигеҙләнгән вышкалар үҫеүҙәрен дауам итте. Улар тураһында күп кенә уйҙырмалар ҙа йөрөнө. Имеш, вышкалар ҡорбан ярата, теләгәндәре ҡабул булмаһа, донъя ярып, үкереп һорайҙар, ти. Һорағаны ла мал түгел, ә тере кеше. Беҙҙе, бәләкәйҙәрҙе лә: «Ана, вышкаға һалырға бирәбеҙ», — тип ҡурҡыталар. Мин ысынлап та ҡурҡам, күренеп тора, унда, әлбиттә, минең кеүек әрәм тамаҡты һалалар инде. Етмәһә, был турала миңә бармаҡ төртөп күрһәтеүселәр ҙә булды.

Биш йәш тулғанда, әсәйем эшләгән «беренсе ялан»ға барырға өйрәнгәйнем. Йәй көнө. Ара алыҫ булһа ла, бер үҙем юлға сығам, Һәләүек күперенән һуң

Ҡашалаҡ йылғаһын үтергә кәрәк. Юл туғай эсенән үтә. Артабан инде Шыуаш йылғаһы яғына йүнәләм. Тап шунда, асыҡ урынға сыҡҡас, мине ҡурҡыу ала ла инде. Ҡайҙа ҡарама – вышкалар. «Аҙаштым» тигән уй ҙа кереп сыға башыма. Бармаҡтарымды бөгөп, вышкалар һанын иҫәпләп ҡарайым. Аптырарһың, улар үткән килгәндән артығыраҡ. Кем белгән инде яңылары ҡуйылыуын. Илай-илай Шыуаш йылғаһының ярына барып етәм. Һыйыр көтөүен күргәс кенә бер аҙ тыныслана төшәм, сөнки әсәйем – көтөүсе. Ул ҡышын конюх та булып эшләй, сәсеүсе лә булып китә, ғөмүмән, ҡайҙа ҡушалар, шунда бара.

Мин яланаяҡ, ҡыҫҡа йыртыҡ ыштандан, өҫтәге күлдәкте күлдәк тип әйтерлек тә түгел. Ә туғай кесерткән менән ҡапланған, шырлыҡ, һуҡмаҡ табыуы ҡыйын. Ярай әле, ҡысҡырған тауышҡа мине көтөү көткән әсәй күреп ҡала. Шатлығымдан ни эшләргә белмәйем, әсәйем мине туғай аша алып сыға, ул да килгәнемә шатлана.

Йәйге көндәрҙә мин «беренсе ялан»ға йыш килһәм дә, көтөүгә алып бармаҫҡа тырышалар, ә минең биҫтәлә ҡалырға теләгем юҡ. Ундағы совхоз ашханаһы ла Шыуашйылғаһы буйында урынлашҡан. Әсәй унда ла мине алып бара. Элегерәк кулак булған өсөн ҡыуылып килгәндәр йәшәү шарттарын рәтләп алғандар. Кемдер ғаиләләре менән землянка соҡоп йәшәй, берәүҙәр ситәндән ҡороп, балсыҡ менән һыланған өйҙә тора, ҡалғандары, әсәйем кеүек, баракта көн күрә. Волга буйынан килтерелгән немецтар ғаиләләре менән үҙҙәре башҡа йәшәй. Эшләгәндәрҙең барыһы ла төшкө ашҡа ашханаға килә. Унда бирелгән аҙыҡ мул, әсәйем менән икебеҙгә бер өлөш туйғансы етә. Ә нисек тәмле бешерәләр, көнбағыш майы менән һоло бутҡаһы телеңде йоторлоҡ! Һурпалы аш менән ит киҫәге лә бирәләр. Уны әсәйем һәр саҡ миңә ашатырға тырыша, ә мин бар көсөм менән баш тартам. Сөнки ул итте түгел, ашты ғына күберәк ашаһам да, эсем ауырта. Ҡайһы берәүҙәр биргән өлөштәрен дә ашап бөтмәй. Аш бешереүселәр иһә уларҙы йәшерен генә йылғаға ағыҙа. Юҡһа, бирелгән норманы киҫәсәктәр. «Беренсе ялан»дағы һәр ғаилә ағзаһына бынан тыш карточка менән сәй, шәкәр, икмәк һәм башҡа аҙыҡтар ҙа бирелә.

Минең әсәй ҙә шунда эшләһә лә, уның балаларына, йәғни беҙгә, карточка юҡ. Уның өсөн Өфөнән рөхсәт кәрәк икән. Немец балаларына ла, кулак балаларына ла бар, ә Әптектекеләргә юҡ. Ниһайәт, 1945 йыл башланғас, беҙгә лә карточка таратылды. Беҙҙең тамаҡтарға ла пәрәник, печенье, шәкәр, икмәк һәм башҡа затлы аҙыҡ эләгә башланы. Шулай итеп, беҙҙең өсөн аслыҡ бөттө.

Әсәй менән көтөүгә йөрөгәндә бер ҡурҡыныс ваҡиға булып алды. Көтөүҙә Вася ҡушаматлы бик уҫал бер үгеҙ була торғайны. Уны «племенной» тип тә йөрөттөләр. Шул, ниңәлер, мине бер ҙә хушһынманы. Бер ваҡыт, әсәйем күрмәгәндә, ул миңә ташланды ла мөгөҙө менән эләктереп алып, күккә сөйҙө. Ярай әле, ҡысҡырып өлгөрҙөм. Әсәйем килеп етеп, аралап алып ҡалды. Ошо ваҡиғанан һуң мине ҡурҡытып, биҫтәлә Лариса тигән кулак ҡыҙы менән уйнарға ҡалдырыр булып киттеләр. Ә мин уның менән уйнай белмәйем, ҡасам да китәм. Кулактар беҙҙең ауыл халҡына ҡарағанда күпкә иркенерәк йәшәне, асҡа интекмәне, налог-фәлән менән яфаланманы. Хәтерләүемсә, ситән өйҙә торған кулак ҡатыны һәр көн: «Зойка, Зойка», – тип кәзәһен саҡырыр ине. Башҡалары ла кәзә-һарыҡ тота башлағайнылар.

**Парсалар**

*Ҡарабаш турғай өсөн иң ҡыйын миҙгел – ҡышҡы ҡаты һыуыҡ. Йәнен һаҡлап ҡалыр өсөн бик күп калорийға мохтаж. Ашарға табыу ҡыйынлаша, кеше ярҙамы кәрәк.*

# Ҡара һыйыр

*Ҡәһәр һуҡҡан Николай*
*Алты һыйыр һауҙырҙы.*
*Молодец коммунистар,*
*Бер кәзәгә ҡалдырҙы.*

**Әптек халҡы йыры**

Ҡара һыйыр – өләсәйҙең иң ҡәҙерле малы. Ҡайһы ваҡыт ул мал иҫәбендә лә түгел, ғаилә ағзаһы булып китә. Был хәл, ғәҙәттә, ҡыш көндәре, һыйыр быҙаулағас, була. Быҙау яҙға тиклем өйҙә, мейес артында, бикле тора ла, һыйыр өйгә индерелеп, йылыла ғына имә. Һыйыр быҙаулар алдынан төндәрен өләсәй бик һаҡ йоҡлай, сөнки һыйыр өй эсендә быҙауларға тейеш. Шулай итеп, ҡара һыйыр өләсәйҙең тормошонда ярты хәстәре, ҡайғыһы, шатлығы булды. Бик йыш ҡына ул һүҙен: «Ҡара һыйыр иҫән булһын», – тип бөтөрөр булды.

Өләсәйҙең бар ғүмере һыйыр менән үткән. Өйгә килгән кешеләр менән һүҙ барһа, һәр саҡ бер һүҙе булды: «Ун ике һыйыр һауҙым». Эйе, ваҡытында ун ике һыйыр һауғаны өсөн ул бик ҡәнәғәт, сөнки ул ваҡытта бер көтөү мал – ялҡауҙар эше булмаған; һауылған һөттөң ҡаймағын айырып, май баҫып, уны эретеп тоҙларға кәрәк, айырған һөттө ҡайнатып, ҡатыҡ ойотоп, әсегән ҡатыҡтан ҡорот әүәләргә кәрәк. Бынан тыш көндәлек эштәрҙе башҡарырға, ғаиләне ашатырға, тәрбиәләргә лә кәрәк. Әлбиттә, өләсәй ҡара таңдан ҡара кискә тиклем эшләгән, зарланырға ваҡыты ла ҡалмаған.

Ул ваҡытта урта башҡорт ғаиләһе алты һыйыр тотоуҙы хуп күргән. Әммә улар, шул иҫәптән олатайым да, ялсылар тотмаған, бөтә эште үҙҙәре башҡарған. Йәйҙәрен тауға күскәндәр. Яҡшылап уйлап ҡараһаң, аңлашыла: тауҙағы бесәнде йәй көнө ашатыу экономик яҡтан файҙалы. Был – борондан уйлап эшләнгән ғәҙәт.

Олатайымдың һыйыры алтау булған. Әммә уларҙы ғына тауға ҡыуыу файҙалы түгел. Шуның өсөн ул Тимашевкалағы урыҫ ызнакумы Степандың, Бәрҙәшле ызнакумы Ивандың өсәр һыйыры менән бергә күсенгән. Ә һөрөнтө ерҙәрен олатайым шул уҡ урыҫтарға арендаға биргән. Көҙ еткәс, быҙаулы һыйырҙар тауҙан алып ҡайтылғас, иген йыйып алынғас, иҫәп-хисап яһалған. Бына был – ысын мәғәнәһендәге кооперация, унда һәр кем үҙ теләге менән эшләгән. Әгәр Совет власы колхозлаштырыуҙы көсләп таҡмаһа, күренеп тора, кооперация киң ҡолас алыр ине.

Шулай итеп, ғаилә йәйләүгә сыға, үҙҙәре менән бер көтөү мал: һыйырҙар менән башмаҡтар, быҙауҙар ала. Олатайымдың аттары ла алтау булған, тайҙар, ҡолондар, һарыҡ малын да аҙ тотмаған. Өләсәйсә әйткәндә, эш «ҡараңғынан-ҡараңғыға» тиклем эшләнгән, әммә ауыр эштән зарланыусы булмаған. «Иртә тороп һуң ятыу – үҙе ҙур шатлыҡ» – өләсәйҙең был фекере ҡайһы берәүҙәрҙе аптыратыр, моғайын.

Өләсәйҙең дүрт малайы үҫкән. Бала ҡараусы ла, табип та үҙе булған. Ә ниндәй генә сирҙәр йөрөмәгән ил өҫтөндә ул осорҙа: сәсәк, холера һ.б. Һәр кемдең яҙмышы Алла ҡулында ла үҙенең ҡулында. Әлбиттә, ул ваҡытта ла йәйҙе күләгәлә ятып үткәрергә яратыусылар булған, улар тураһында боронғоларҙың бер таҡмағы ла хәтеремдә ҡалған: «Ғыж-ғыж ҡурай тартаһың, тал төбөндә ятаһың. Йәйен бесән сапмайһың, ҡыш ашарға тапмайһың». Колхоз ойоштороу ҙур трагедия килтерҙе, сөнки шул «күләгәлә ятырға яратыусылар» үҙҙәренә тиң хоҡуҡ талап иттеләр һәм, астан интегеүселәр буларак, уны иң беренселәрҙән алдылар. Ялҡау кеше күп һөйләй. Ә колхозда күп һәм оҫта һөйләүселәр баш булып алды, һөҙөмтәлә, колхоз килеме шәхси хужалыҡтарҙыҡынан шаҡтай кәм булып сыҡты.

Совет власы шәхси хужалыҡта бер генә һыйыр аҫрарға рөхсәт биргән, ә был

еңел түгел. Әйтәйек, күрше Ғариф өсөн мал ҡарауҙың бер ҡыйынлығы ла юҡ. Ул – сельсовет рәйесе, эшен ҡурҡытып кешенән эшләтә, бесән әҙерләтә, колхоз атын файҙалана. Икенсе күрше – Ибраһим бабай тракторҙарға яғыулыҡ ташый. Ул да колхоз атын үҙ файҙаһына эшләтергә яйын таба, бесәнен, утынын килтерә. Уның өсөн мал аҫрауы еңелерәк, һыйыры, башмағы, бер нисә һарығы, ҡаҙтауығы бар, аслыҡ күрмәй. Ул иртә тора, һуң ята, арымай-талмай эшләй. Ибраһим бабай кеүек йәшәү – күптәрҙең теләге. Ә колхоз етәкселәренең маҡсаты төптө кире: ас кешене эшкә ҡушыу еңелерәк, тимәк, күпселек колхозсылар ас йәшәргә тейеш.

Өләсәй колхоз менән бәйләнеште тамам өҙгән, ә һыйыр аҫрауҙы үҙенең намыҫ эше итеп ҡарай. Шуның өсөн өйҙә ҡара һыйыр ҡәҙерен беләләр. Өләсәй уның менән кеше менән әңгәмәләшкән кеүек һөйләшеп тә ала. Һыйыр ҙа, күрәһең, барыһын да аңлаған кеүек, уға тулы ышаныс белдерә. Көтөүҙән дә тура өйгә генә ҡайта, һарайҙа ла үҙ урынын белә.

Ҡара һыйырҙан башҡа өләсәйҙең хужалығында тағы ла бер ҡәҙерле нәмә бар, ул – бәләкәй арба. Ҡасандыр ауылыбыҙҙың оҫтаһынан яһатып алынған ике тәгәрмәсле еңел генә ҡул арбаһы. Уның тимерҙән эшләнгән бер ҡаҙағы ла юҡ, ә иң ҡәҙерле өлөшө – ике тәгәрмәс, һәр көн кис, урманға барып ҡайтҡас, өләсәй уларҙы һурып ала ла төнгөләккә соланға индереп ҡуя, юғиһә, урлауҙары мөмкин. Өләсәйҙең ҡапҡаны бәйләй торған тимер сылбыры ла бар ине, юғалды, тик күп тә үтмәне, ул сылбыр менән Ғариф рәйестең ҡапҡаһы бәйләнә башланы. Улы Хөснөтдиндең этлеге булып сыға инде. Күрәһең, ул малай бөтәһен дә алдан уйлаған. Кем уның атаһына һүҙ әйтә һәм ғәйепләй ала?

Өләсәй һыйырҙы көтөүгә ҡыуып, иртәнге намаҙын уҡығас, тамаҡ ялғап алабыҙ ҙа, бәләкәй арбаны тартып, урманға китәбеҙ. Беҙҙең өсөн яҡын урман – Таплыҡ йәки Бүләк урманы. Ҙур урманға бер тапҡыр ҙа барманыҡ, алыҫ. Өләсәй ике тәртәгә бәйләнгән епте елкәһенә элеп уртанан һөйрәй. Минең өсөн дә арбаға бау беркетелгән, ҡулым менән тотоп, мин дә һөйрәшәм. Арбаға гелән балта менән ураҡ ҡыҫтырылған, бәйләнгән. Юғалтырға ярамай – ҡәҙерле ҡоралдар. Өләсәйгә бесәнде салғы менән сабыу яҙманы, сөнки ул бесәнде барыһынан да элек әҙерләй башлай. Үләнде ул ағас араһынан ураҡ менән көлтәләй. Ә, колхоз сабынынан алғанһың, тип бер кем дә әйтә алмай – өләсәй ҡайҙан урырға ярай икәнлеген яҡшы белә. Урманда һәр ваҡыт утын тейәйбеҙ. Күберәге йығылған йәки ҡороған ағастарҙы һалабыҙ ҙа өҫтөнә көлтәләрҙе өйәбеҙ. Өләсәй утын киҫкәндә, мин киҫелгән ағастарҙы арба эргәһенә ташыйым. Өләсәй көлтә бәйләгәс, уларҙы ла әлеге урынға килтерәм. Өләсәй мине һәр ваҡытта ла маҡтай: «Һин булмаһаң, ни эшләр инем икән», – ти. Шулай итеп, йәйҙең оҙон көндәрендә беҙ бәләкәй урманға көнөнә өс тапҡыр барабыҙ. Өләсәй шат: «Быйыл да асҡа үлмәбеҙ», – ти. Тик гел генә ыңғай булмай шул.

Бер көн таллыҡтан ҡайтып киләбеҙ. Оло юлға төштөк. Был юл район үҙәге Петровскиҙан Тимаш аша Әптеккә тоташа. Өләсәй ашыҡтыра: «Күрәһеңме, ҡибланан ҡара болот сыҡты – ямғыр килә. Шәберәк атлайыҡ. Бәлки, ямғырҙан алда ҡайтып өлгөрөрбөҙ». Ашығыуҙан күреп өлгөрмәгәнбеҙ: артыбыҙҙан тырантасҡа егелгән ат ҡыуып еткән. Сельсовет рәйесе Ғарифтың райондан ҡайтып килеше икән.

– Юл да бирә белмәйһең, – тип ҡысҡырҙы Чуркин өләсәйгә, сыбыртҡыһы менән һелтәнеп. Тырантас күсәре беҙҙең арбаны әләктерҙе, уныһының нимәһелер һынды. Көлтәләр ҡойолоп төштө. Чуркинды ҡарғап торорға ваҡыт юҡ. Көслө ел сыҡты. Беҙ арбалағы йөктө рәтләп бөткәнсе, ямғыр яуа ла башланы. Беҙ икәүләп арба аҫтына индек. Дәһшәтле ҡара болот килеп етте. Ел көсәйгәндән-

көсәйә. Ауылға ярты сағрымдан да аҙыраҡ ара ҡалған, әммә беҙ ҡайта алмайбыҙ. Арба аҫтында ул әйләнеп китмәһен өсөн тотоп ултырабыҙ. Бына ямғыр боҙға әйләнде. Эре борсаҡ яуа башланы, ергә төшкән бере кире өҫкә табан һикерә – ғәләмәт күренеш. Өләсәй доғаларын уҡый, мин болоттарҙы күҙәтергә тырышам. Йәшен атҡанда бар донъя яҡтырып китә лә, ҡолаҡ тондоророрлок тауыш йәндәрҙе һелкетә. Ер өҫтө ап-аҡ булды. Миңә, яланаяҡлыға, бигерәк тә мәрәкә. Үҙ ғүмеремдә ҡара болоттарҙың ергә тейә яҙып шул тиклем тиҙ үткәндәрен күргәнем булманы. Аллаға шөкөр, йәйге ямғыр оҙаҡ булмай – нисек тиҙ башланһа, шулай уҡ ҡапыл туҡтаны ла ҡуйҙы. Көн асылды, ҡояш күренде. Ап-аҡ ер өҫтөнән атлап беҙ ауылға килеп индек. Чуркиндың йорто алдынан үтәбеҙ: тырантасы тора, аты туғарылған. Өләсәй уларҙың тәҙрәләренә ҡарап ҡарғай, шул юлдан китһәң ярар ине, ти. Дауыл көслө булған. Боҙ ҡайһы берәүҙәрҙең тәҙрәләрен ватҡан, кемдәрҙеңдер өй баштары емерелгән. Беҙ ул көндө ҡабат урманға барманыҡ, йөктө бушаттыҡ та тәгәрмәстәрҙе соланға индереп ҡуйҙыҡ.

– Балам, һиңә ял кәрәк, – тине өләсәй. Ә уның үҙенең башҡа эштәре лә һәр саҡ етерлек була. Мин мәтәл уйнарға йүгерҙем. Өләсәй Чуркинды ҡарғаһа, ул да өләсәйемде онотманы, үтеп барғанда:

– Көмөш әбей! Һыйырыңды егеп, Шәһиҙә ейәнсәрең колхоз ерен тырматырға сыҡһын, – тип ҡысҡырҙы. Өләсәйем дә ҡурҡаҡ заттан түгел ине:

– Беҙ колхозға ингәндә алты һыйыр, алты ат бирҙек. Ә һин буш ҡулыңды һелтәп килеп индең. Хәҙер һинең сират, һыйырың менән ер тырматырға Миңлеямал ҡыҙыңды сығар, – тип яуапланы.

– Әбей, ҡара уны, башыңды төрмәлә серетермен. – Һүҙ башлағанына үкенә биреп, Чуркин китеү яғын ҡараны, тик өләсәй генә баҫылманы:

– Ҡара, мәлғүн! Ул төрмә һине көтәләр!

Өләсәйҙең һүҙе әүлиәнеке кеүек булды: һуғыш бөткәс, Ғариф-Чуркин төрмәгә китте. Әлеге юлдан алып киттеләр. Фронтовиктар ҡайта башлағас, кемгә кәрәк бәдбәхет, наҙан Чуркин?!

Шулай итеп, ҡара һыйыр өләсәй хужалығында ҡәҙерле ғаилә ағзаһы ине. Уның һарайы ситәндән үрелгән, тик унда һыйырҙың һалып ҡуйған тиҙәге бер ваҡытта ла оҙаҡ ятманы. Шуның менән үк, балсыҡ ҡатнаштырып, өләсәй һарайҙы һәр саҡ һылап торҙо, малдың үҙ йылыһы – үҙенә. Көлтәләп йыйған бесән дә иҫәпләнә, ғәҙел итеп айҙарға бүленә. Селлә һыуыҡтар өсөн арттырыу коэффициенты ла бар. Яҙғы йәшел үләнгә тиклем бесән етергә тейеш. Өләсәй әҙерләгән бесән иң яҡшы сифатлы – күләгәлә киптерелгән, һыу теймәгән. Бесән ашаған ваҡытта һыйыр ҙа шат кеүек күренә. Ул ваҡыттағы ололарҙың һөйләүе буйынса, һыйыр аҫрауҙың файҙаһы юҡ, налогы килеменән күберәк ине. Ә өләсәй был турала ҡапма-ҡаршы фекерҙә булды. Ул ваҡытта мал аҫрауға сыҡҡан налог тураһында бер нисә таҡмаҡ та йөрөнө. Беҙ, балалар, таҡмаҡланыҡ, әлбиттә, сөнки беҙгә ҡурҡаһы юҡ:

*Атың һат, һыйырың һат,*
*Алып ебәр кәзәкәй.*
*Һауһаң – һөтө, һуйһаң – ите,*
*Налогтары бәләкәй.*

Әлбиттә, башҡа (оятыраҡ) варианттары ла булды.

Өләсәй, киске намаҙҙан һуң, йоҡлар алдынан үҙенең «ҡара иҫәбе» менән хужалығына анализ яһап барҙы.

Ҡышҡы һыуыҡ көндәрҙә быҙау имеҙер өсөн һыйырҙы өйгә индергәндә, кәзә бәрәсе сығам тип ҡыҫылды ла артҡы аяҡтарын имгәтте. Ул башҡаса баҫа алманы. Мин уны нык йәлләнем һәм һәр төндө үҙем менән йоҡлата башланым. Оҙаҡламай тулыһынса миңә өйрәнеп китте.

**Парсалар**

*Өйгә һыйыр индергәндә, ишектән ҡарабаш турғай осоп килеп инде лә, өйҙәге кешеләрҙән ҡурҡып, сығырға урын эҙләп бәргеләнә башланы. Мин иһә бар көсөм менән: «Турғайға теймәгеҙ!» — тип ҡысҡырҙым һәм, ул асылған ишектән сығып осҡас ҡына, тынысландым. Мин һаман, Мәһира туғанымдың йәне шул турғайҙа, тип уйлай инем әле, мине күрергә килгәндер, тип уйланым. Был турала мин бер кемгә лә һөйләмәнем.*

## Крахмал

**Бәрәңге йыры**

*Башымды ла ҡыралар,*
*Артымды ла ҡыралар.*
*Совет сыҡҡанынан бирле*
*Минең менән торалар.*

**Әптек таҡмағы**

— Ярты ауыл бында. Хоҙай һаҡлаһын. Килеп сыҡһалар, ҡайҙа ҡасабыҙ? Ҡарабыраҡ йөрөгөҙ.

Әптек ауылының күп халҡы — ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡарт-ҡоро — совхоздың «беренсе ялан»ында серек бәрәңге, йәғни крахмал йыя. Көҙгө көндә бында яҡын килеп булмай, унда ятып ҡалған бәрәңгене йыйып алырға ла бер кемгә лә рөхсәт юҡ, ҡәтғи тыйыла. Бер нисә бөртөгө өсөн төрмәгә ултыртырға ла күп һорамаясаҡтар. Ә хәҙер инде яҙ, ҡар иреп бөтөп бара, трактор ҙа, ат та бында керә алмай. Ер һыу. Ҡышҡы һыуыҡта өшөгән, туңған, хәҙер инде йылыла крахмалы ғына ҡалған бәрәңгене йыйыу күптәрҙе ҡыҙыҡтыра. Кешеләрҙең ашау яғы насар, шуға ла күп ғаиләләр серек бәрәңге йыйыу кәсебенә сыҡҡан.

— Ана киләләр, ҡасығыҙ, — ауыл яғынан бер тырантас менән ике һыбайлы күренде. Халыҡ йүгерешә башланы. Күптәр Шыуашйылға яғына ҡасты. Тик ул яҡтан да өс һыбайлы ҡаршыларына юл баҫты.

— Ҡәһәр һуҡҡандар, ҡайҙа ҡасырға? Балам, һин йүгермә. Беҙҙән юҡ, теймәҫтәр.

Мин дә эстән генә шулай уйланым. Ниңә йүгерергә? Етмәһә, яланаяҡмын, төпһәгә бәреп йыртылырға мөмкин. Бер һыбайлы эргәмә сабып килеп тә етте, ҡамсыһы менән һелтәп тә ебәрҙе. Ҡулымды күтәреп, саҡ битемде ҡапларға өлгөрҙөм, ут тейгән кеүек булды, икенсе ҡулым менән тотоп алдым — ҡып-ҡыҙыл ҡан.

Һыбайлылар халыҡтан тартып алған биҙрәләрҙе, тоҡтарҙы тырантасҡа, арбаға тейәй. Кешеләр илаша, ҡысҡырыша. Аптыраш хәл. Был һорауға бер кем дә яуап белмәй. Ни өсөн яланда ҡалып туңған, серей башлаған бәрәңгене йыйыу тыйыла?

Ерҙе тапарға ярамай, имеш, ә трактор йәки тырантас осоп йөрөймө ни? Серегән бәрәңге сәләмәтлеккә зыян, тиҙәр, һуң, астан үлеү аҙ ғына эс ауыртҡандан яҡшымы ни? Хөкүмәт милкен һорамай алыу тыйыла икән, ҡалас ашаған түрәләр, активистар ҡайһылай итеп һорайҙар икән? Белергә ине.

Юҡ инде, был һорауҙар минең өсөн генә. Биш йәшлек малай өсөн. Ололар иртәгәһен барыбер шул яланға бара. Серек бәрәңге лә ятып ҡалмай. Ул — ас йәшәгән ғаиләләр өсөн берҙән-бер туйынсыҡ. Сөнки әле үлән сыҡмаған, йыйып ашарлыҡ башҡа нәмә юҡ.

Әптек халҡы был ҡәҙерле ризыҡты тамаҡ туйҙырыуҙа бик оҫта файҙаланырға өйрәнеп алды. Өләсәйем дә ялаңға барып, күп итеп йыйып алып ҡайта ла һайлап, таҙартып киптерә йәки ҡыҙҙыра. Һуңынан кипкәнен килелә төйөп, он яһай ҙа тәмле итеп икмәк бешерә. Серек бәрәңгенән аш та бешерергә ярай.

Минең башымда һаман да уйҙар ҡайнай. Әйтәйек, Совет власы башҡорт халҡының һанын кәметергә теләгән икән, был тәңгәлдә мал аҫраусыларға ҙур налог һала. Мәҫәлән, ат йәки һыйырҙың түләүҙәре үҙе биргән килемдән

артығыраҡ. Власть шул сараны урынлы ҡуллана. Имеш, башҡорт мал аҫрауҙы һөнәр итеп алған икән, малсылыҡҡа налог башҡорттоң башына һуға. Иген игеүҙә үлсәү-тикшереү һөҙөмтәһен һәр саҡ күҙ алдында тотоп була. Сөнки иген игеү фәҡәт колхоз-совхоз ҡарамағында. Һөҙөмтәлә ашау мәсьәләһе тикшерелеш аҫтында ҡала. Әйтәйек, был яман уй дөрөҫ булһа, налог — тикшереү системаһы — гениаль үтәлештә күренә.

Минең белеүемсә, Сталин үҙенең тыуған яғы Грузияла төп кәсеп баҡсасылыҡ икәнен яҡшы белгән. Ысынлап та, унда был йүнәлештең файҙаһы Башҡортостандағы йылҡысылыҡтан күп тапҡырға ҙур, ә эшсе ҡулдар аҙ талап итәлә. Шуны белеп тә эш иткәндәр булһа кәрәк. Күренеүенсә, саралар бик уңышлы булған. Бигерәк тә малсылыҡ менән шөғөлләнгән тау райондары халҡы ныҡлап төп башына ултырҙы. Күп кешеләрҙең әйтеүе буйынса, был эштә Сталин ғәйепле түгел булып сыға. Юҡ инде. Башы бар кеше налог, түләү системаһын аяҡтан йығырлыҡ итеп үҙгәртмәй, һуйылған һыйыр быҙауламағанын йәки һөт бирмәгәнен һәр кем белә. Шулай булғас, был — уйланып эшләнгән мәкер. Ул кешеләр сәбәптәрҙе һуғышҡа ла һылтап ҡаранылар. Әлбиттә, һуғыш күпте талап итә. Тик шуныһы: Рәсәйҙә һәр саҡ, һуғышҡа һылтанып, башҡортто ҡыҫтылар. Бәрәңге тураһында һөйләгәндә, әйтке киләː бәрәңге — ул сталинизм хатаһы, беҙҙең өсөн ҡыуанысла хата. Инде Сталин үҙе тере ваҡытта ауыл халҡы бәрәңге тураһында көлөшөп тә һөйләшә торғайны. Күп кенә көләмәстәр ижад ителде. Әлдә лә ул ваҡытта колорадо ҡуңыҙы беҙгә килеп етмәгәйне. Шулай итеп, яҙ серек бәрәңгенән төрләндереп ризыҡ йүнләү һәм шуның менән йән аҫрау Рәсәй хужаларының башына килмәгән. Юғиһә, көт тә тор, беҙҙең бәхеткә, картуф һалымын уйлап сығарған булырҙар ине. Эпиграфтағы дүрт юллыҡты Әптек ауылында һәр кем белә ине. Бигерәк тә беҙ, балалар, ул куплетты йыш ҡабатларға яраттыҡ.

**Парсалар**

*Быйылғы ҡыш насар килде, һыуыҡ көндәр кискә генә йылы менән алмашынып торҙо. Ҡарабаш турғайҙар өсөн был хәл ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырҙы, буғай. Минең тәҙрәгә аяҡтары һынған өсәүһе көн дә килеп ҡуна. Бахырҡайҙар, мин уларға бер нисек тә ярҙам итә алмайым, шуға күңелем әрней. Һыңар аяҡ баҫырға ла, көнбағыш бөртөгөн тоторға ла эшкинмәй. Был уларға үлем менән бәрәбәр. Тик уларҙың йәшәргә теләктәре көслө. Барыбер һәр көн ем ашар өсөн минең тәҙрәмә килеп ҡуналар.*

## Балтырған

*Рацион вымирания — 2000 калорий.*
**(Профессор Цигильмайер, «Блокадная книга»)**

Яҙғы оҙон көндәр килде. Яғымлы ҡояш урамға саҡыра. Көндәр матур, ә донъяның йәме юҡ. Һуғыш, аслыҡ. Һәр кем бер-беренә: «Балтырған сыҡтымы икән?» — тигән һорау бирә. Беҙ инде, малайҙар, күп тапҡыр йыуаға барҙыҡ. Йыуа тәмле, асығыуҙы ла баҫа. Беҙҙең тағы ла киткәнде күргән ҡарттар: «Тамыры менән йолҡмағыҙ, икенсе йыл да үҫһен»,– тип ҡала. Шулайҙыр ҙа ул, тик уның бит тамыры тәмлерәк тә, туҡлыҡлыраҡ та. Һәр кем йолҡоп алырға тырыша. Уны бешерергә лә кәрәкмәй. Шунда, тау башында уҡ, ашайбыҙ. Сөнки ул тау башында ғына үҫә: иртә яҙҙан, ашарға бөткән саҡта. Кәзә һаҡалы ла иртә сыға, ҡар ирегән ерҙә тәүге ҡояш нурҙарына баш ҡалҡыта. Сәскә ата, тәме шәкәрле, өҙгәс үк ашап була, уны ла йыуырға кәрәкмәй. Ә инде ас ҡорһаҡты тултырыу өсөн иң яҡшы үлән — балтырған. Ул туғайҙа, урман ситтәрендә киң япраҡтарын киреп-күпереп үҫергә ярата. Балтырғандың еҫе кеүек бер үләндең дә еҫе юҡ — иҫерткес хуш еҫ. Тәүге үҫентеләре ҡата башлаһа, уртанан йомшаҡ япраҡтары сыға тора, иң аҙаҡ бәпкәһе сыға. Бәпкәһе инде көпшә сығара. Көпшә оҙон булып үҫә лә, сәскә атҡас, орлоғо өлгөрә. Балтырған бәпкәһен йәки көпшәһен өҙгән ерҙә ашап була, бик тәмле, тоҙлап ашаһаң, теленде йоторлоҡ. Йәй башында күп өйҙәрҙә иң йыш

ашалған аш – балтырған ашы. Бындай ашҡа аҙ ғына бәрәңге лә кәрәк. Балтырған ваҡ ҡына итеп турап һалына, оҙаҡ ҡайнатыу кәрәкмәй.

Ул ваҡытта күптәр бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатланы: «Эх, әҙ генә он булһа, ниндәй тәмле аш булыр ине». Он булһа, ашҡа ыумас яһап һалалар: тәмлерәк тә, туҡлыҡлыраҡ та. Он әҙ булһа, уны ашҡа, һурпаһын бутай-бутай, тигеҙ итеп һибәләр – аш ҡуйырыбыраҡ китә. «Әҙ генә май ҙа булһа», – тип әйтеүселәр ҙә табылыр. Май һалһаң, әлбиттә, һис һүҙһеҙ, тәмләрәк тә, туйҙырмышлыраҡ та. Балтырған ашын ашар алдынан ҡатыҡлаһаң, аш тағы ла тәмлерәк була, ә иҙелгән ҡорот менән – түрәләр ашына әйләнә. Бына шулай, балтырған – Совет хөкүмәтенең байлығы түгел, Хоҙай биргән бүләк, ябай кешеләр ашы. Уны йыйыр өсөн бер кемдән дә рөхсәт кәрәкмәй. Беҙ өләсәй менән колхозда эшләмәйбеҙ, тимәк, беҙгә, эшкә сыҡмайһығыҙ, тип әйтеүсе юҡ. Беҙ иркенләп балтырған йыйырға барабыҙ. Өләсәй уның күп үҫкән урындарын белә. Таллыҡ урманында бигерәк тә күп. Йышырағын беҙ шунда йыябыҙ. Бигерәк тә Ҡарыу башында бер ҡыуаҡлыҡ бар, эсендә ус төбөндәй генә ялан, шунан һә тигәнсе бер тоҡ балтырған йыйып алабыҙ. Бәләкәй арбаға ҡоро утын тейәйбеҙ, өҫтөнә балтырғанлы тоҡто һалабыҙ ҙа, бәйләп, Аллаға тапшырып, ҡайтыр юлға сығабыҙ. Өләсәйем балтырған ашын ҡайтҡас та бешерә. Ҡатыҡлап, туйғансы ашағас, хәл кереп китә.

1944 йыл, йәй башы. Олатай хәлһеҙ, тора алмай. Буйы ике метрҙай кәүҙәле кешегә ашарға етешмәй. Өләсәйем зарлана:

– Белмәйем, кемде үлтерәйем – һеҙҙеме, әллә олатайыңдымы?...

Ҡатыҡлаған ашты өләсәй олатайым алдына ҡуйҙы, тик ул аш һалынған сеүәтәне иҙәнгә олаҡтырҙы. Балтырған ашы булған өсөн түгел, аҙ булған өсөн. Шул көндән һуң олатай оҙаҡ йәшәмәне. Төндә бер нисә тапҡыр һыу һораны. Өләсәй:

– Нисәмә тапҡыр бирҙем, һаман һорайһың, – тип һуҡранып та ҡараны.

–Түгелде бит, – тип алдашты олатай.

Өләсәй тағы тороп һыу бирҙе. Олатайым шунан һуң тынысланып йоҡлап киттеме – башҡаса өндәшмәне. Таңға табан ул был донъяны ҡалдырып, әхирәткә күсте.

Юл башында яҙылған профессорҙың күрһәткән калорийҙар нормаһы, күрәһең, Европа халҡын күҙ алдында тотҡан. Ә беҙ, ләғнәт ояһы – Рәсәйҙә йәшәгән башҡорт ауылдары халҡы, был норманы күрә лә алмаған ваҡыттарыбыҙ булды, һис шикһеҙ. Беҙҙең нимә менән туҡланғанды белергә теләүсе лә булманы, буғай. «Блокада китабы»н асып ҡарайым. 308-се бит: «Под Уфой хлеб стоит 2р. 50к., сколько угодно, без карточек. А там считается это дорого. Ничего себе. А? Ведь это же рай...» Ожмахта йәшәгәнбеҙ ҙә баһа! Бына нисек. Тағы ла бер китапты асып уҡыйбыҙ. Зыя Нуриевтың «От аула до Кремля» тигән китабы, 52-се бит: «Мы, Соболевы, были потрясены, когда увидели у дороги несколько трупов. Видно, эти люди упали обессилев от голода и замерзли (декабрь 1943 года его назначили секретарем Кигинского райкома ВКП (б)»; 54-се бит: «Особенно тяжело было в башкирских деревнях, население которых не занималось выращиванием картофеля и овощей».

Мин Кремлдә эшләгән етәкселәрҙең барыһын да тип әйтерлек ахмаҡтарға һананым. Әлбиттә, йүнлеләре лә булғыланы. Быңдайҙары халыҡты интектереүҙе үҙең ултырған ботаҡты киҫеү тип аңланы. Быңдай аҡыл менән эш итеүселәрҙең береһе, миненсә, Косыгин. Нуриевты ла мин шул уҡ рәткә ҡуйыр инем, ул да халыҡ өсөн ярайһы тырышты.

Ә Нуриевтың бәрәңге, йәшелсә тураһындағы һүҙе дөрөҫ түгел. Башҡорттарҙы ҡыҫыу – уйланып эшләнгән эш, ә налогты эскән һыуға ла һалырға мөмкин. Петр батша һаҡалға ла һалған. Нуриевтың Кремль йырын йырлауы ла аңлашыла. «Не русский я, но россиянин», – тип яҙмаһа, бөйөк шағирыбыҙ ҙа булмаҫ ине. Таш бәрә торған йәки таш йыя торған ваҡыттар була, ә Нуриевҡа Башҡортостанды,

Өфөнө күтәргән өсөн дан йырларға, рәхмәт уҡырға кәрәк.

Балтырғандан башҡа бер нисә төр үлән ашаныҡ, атҡолаҡ икмәген дә бешерҙеләр, кесерткән, дегәнәк тә ризыҡҡа һаналды. Ашалған үләнде һанаусылар ҙа булды, тик бынан ни файҙа? Йылы ағасының ҡабығынан да он яһап, «икмәк» бешерҙеләр. Көләһе урын түгел, көлдөрә лә, бөлдөрә лә торғайны. Сөнки йылы икмәге эсте ҡаталата. Иҡсан дуҫымдың, көсәнеп-көсәнеп тә үҙе с...а алмағас, арт һанын ойоҡ энәһе менән соҡоғандары ла хәтеремдә.

Айыу көпшәһен дә ашаусылар булды, ағыулы, тинеләр. Беҙҙең тыҡрыҡ буйында ла үҫте, тик беҙ ашамаиыҡ. Урманда шуға оҡшаған монар көпшәһе үҫә, бына ул ашарға яраҡлы, тәмле, калорияһы ла күп. Минең уйымса, монар – реликт үҫемлеге, хәҙерге ваҡытта урмандарҙа аҙ күренә.

Ҡуян тубығы тигән үләндең тамырын ашаныҡ: тәмле, туйҙыра. Тик йолҡорға оҫталыҡ кәрәк. Тамыры ҡалһа, ҡаҙып алаһың. Сусҡаның яратҡан аҙығы булған имән әкәләһен дә ашап маташыусылар булды. Бер нәмә лә булмағанда он яһаһаң, бара.

Минең иң яратҡан ризыҡтарымдың береһе – ҡымыҙлыҡ. Ҡуҙғалаҡ кеүек әскелт тәмле, япрағын ашайҙар, һуған урынына ашҡа һалырға була. Һабағын ҡабығынан айырып алғас ашайҙар, сей килеш тәмле. Ҡымыҙлыҡ – бик боронғо үлән, яланда үҫә, йомшаҡ тупраҡ ярата. Хәҙер ҡымыҙлыҡ һирәгәйә, сөнки ул химияны яратмай.

– Ҡырҡ төр үлән ашаныҡ. – Был һүҙҙе Әптек халҡы әйтте. Астан үлеүселәр ҙә күп булды, артығын ашаусылар ҙа аҙ булманы. Әптек ауылында һәр саҡ уполномоченный ятты, көнөнә өс тапҡыр колхоз иҫәбенән итле аш ашаны. Фамилияһы хәтеремдә – Яппаров. Шул бәндә – һыңар ус арыш өсөн биш йыл биреүсе.

Бына рәсми хәбәрҙәр. «В 1941-1942 годах государству было сдано 78,2 миллиона пудов зерна». Ә халыҡҡа ерҙе һөрөр алдынан да башаҡ йыйырға рөхсәт булманы: «Яппаров күрһә – бөттө баш».

«Несмотря на засуху, в 1943 году сдали государству 22,5 млн. пудов зерна. В 1943 году колхозы Башкирии в фонд Красной Армии внесли 53 тысячи центнеров мяса сверх обязательных поставок его государству». «Большая помощь оказывалась семьям фронтовиков. Выдавались деньги, одежда, обувь десяткам тысяч детей. Только за 10 месяцев 1945 года колхозы выдали семьям военнослужащих 1200 тонн хлеба, 9 тысяч голов скота, 56 тысяч метров тканей... Особую заботу проявили партийные органы для детей погибших воинов».

Бына шулай, туҙға яҙған түгел, ә официаль хроника. Белмәй әйтмәгәндәрҙер: алдағас, ныҡ алдарға кәрәк. Әптек ауылында фронтта үлгәндәрҙең ғаиләләренә һуҡыр бер тин дә биреүсе булманы. Был хроника Америка ярҙамын оноҡтан, ә мин хәтерләйем. Бына ул беҙгә лә килеп етте: беҙгә, ас фронтовик балаларына, түрә, активист балалары, үртәр өсөн, күрһәтеп ашаны. Ә беҙ балтырғанға ла шат булдыҡ.

**Парсалар**

*Ҡарабаш турғайға ҡышын аҙыҡ табыуы ҡыйын. Шулай ҙа үҫемлектә ниндәйҙер берәй орлоҡ ҡалһа, ул уны оҫта итеп соҡоп ашай белә. Балан орлоғон бигерәк тә һәләт ашай. Ә кеше турғайҙарға орлоҡтар ҡалдырмай: йыйып ала йәки әрәм итә. Ҡарабаш турғай кеше көнөнә ҡала.*

*(Аҙағы бар.)*

**Камил**
**ЗИГАНШИН**

# КӨЛӘС НЕПАЛ ТУПРАҒЫНДА

**СӘЙӘХӘТНАМӘ**

Бына минең күҙ алдымда, самолет ҡанаты аҫтында, серле Тибет менән тропик Һиндостан араһында, Гималай тауҙарының билендә ятҡан ғәжәйеп короллек – Непал пәйҙә була. Әйткәндәй, “Хималай” непал телендә “Ҡарҙар төйәге” тигәнде аңлата.

Төньяҡтан көньяҡҡа табан – 200, көнсығыштан көнбайышҡа 800 километрға һуҙылған был кескәй илдә Ер йөҙөндәге ун дүрт иң бейек (түбәләре һигеҙ мең метрға еткән) тауҙың һигеҙе һәм донъялағы иң тәрән Кали Гандаки тарлауығы урынлашҡан. Непалдың ярты майҙаны тиерлек диңгеҙҙән 3000 метр бейеклектә ята!

Донъя түбәһе Эверест та (8848 метр) ошо илдә, әлбиттә. Иң боронғо дингә – буддизмға нигеҙ һалыусы, изге нур һибеүсе Сиддхартха Гуатаманың[1] тыуған ере лә бында. Кешелектең рухи үҫешен тәьмин итеүсе энергетика хасил булған мөғжизәүи Шамбола ла ошо тарафтарҙа булырға тейеш, тип фараз ителә.

Непал һүҙенең мәғәнәһе төрлөсә аңлатыла. Боронғо санскритҡа нигеҙләнһәң, мәҫәлән, Непал – “Тауҙар итәгендә ятҡан ер”.

9000 метр бейеклектә осабыҙ. Ҡояш, байышына китеп барһа ла, әле ярайһы

---

*[1] Принц Сиддхартха Гуатама — Будда (уяу, яҡты) беҙҙең дәүергәсә 624 йылда тыуған һәм Непалдың Кирати династияһынан булған егерме һигеҙенсе хакимы тип тәҡсирләнгән. Әммә, кешеләрҙең ауыр тормошта ыҙа сигеүен күреп, үҙенең яҙмышын халыҡты ошо хәлдән азат итеү юлдарын эҙләүгә бағышлай. Ошо уйланыуҙар һөҙөмтәһендә мәғрур Бодхи ағасы (Аҡыл ағасы) күләгәһендә уның күңел күҙе, аңы асыла, яҡтыра, был иһә уға 35 йәшендә медитация, фекерләү мәҙәниәтен тәфсирләгән “Йәшәйеш ҡағиҙәләре", “Хәйерхаҡ ҡағиҙәләре" һәм “Һигеҙ үлсәмле юл ҡағиҙәләре" тәғлимәтен булдырырға ярҙам итә. Будда 80 йәшендә донъя ҡуя. Үлеме лә кешеләр хаҡына була: Чунда исемле мәкерле тимерсе Будданы һәм уның дуҫтарын ҡунаҡҡа саҡыра ла боҙолған ит менән һыйларға ниәтләнә. Быны белгәс (үтә күргәс), Будда дуҫтарына тигән өлөштө лә тотош үҙенең алдына ҡуйырға ҡуша... Үҙенең тәғлимәтен Будда инаныу дине тип иҫәпләмәй, ә тәжрибә дине тип атай — ул кешеләргә нимә ҡылырға түгел, ә нисек фекер йөрөтөргә өйрәтә.*

---

**Аҙағы. Башы 9-10-сы һандарҙа.*

уҡ юғарыла һәм ерҙе сағыу яҡтыһына йомарт ҡойондора. Дүрткел ямаулыҡ кеүек күренгән баҫыуҙар, шырпы ҡабындай йорттар, ҡан тамырындай һуҙылған йылғалар күҙгә салына. Тау түбәләрендә һауа салт аяҙ, ҡулыңды һуҙһаң, осоп барышлай ҡаяларҙың бүркен һыйпап булырҙай... Төньяҡҡараҡ бейектәрҙән-бейек Гималай һыртының һөңгөләй осло ҡаялары теҙелеп баҫҡан, улар мәңгелек ҡарҙар һәм саҡрым-саҡрым ятҡан боҙлоҡтар менән ҡапланған. Артабан Тибет һуҙылып китә. Һуш китерлек был күренештәр алдында минең күңелемде әлегәсә биләгән, тулҡынландырған тойғолар ҡайҙалыр сигенә, кесерәйә төҫлө.

Көньяҡтан, Һиндостан яғынан, был тарафҡа йәшел урмандар менән ҡапланған ҡалҡыулыҡтар һырыға, бейегәйгәндән-бейегәйә килеп, улар ҡөҙрәтле түбәләргә олғаша һәм Тибетҡа терәлеп үрә баҫҡан Гималайға әүерелә, әйтерһең дә, был бәһлеүән кешелектең изге төбәгендә һаҡта тора.

Тырым-тырағай йөҙгән болоттар, ниһайәт, бер көтөүгә ойошоп, беҙ осҡан лайнерҙың ҡорһаҡ аҫтына һыйынды. Күп тә үтмәй, ошо болоттар эсенә сумдыҡ һәм йомшаҡ, ҡуйы ҡаймаҡҡа төрөнгәндәй булдыҡ. Был оҙаҡҡа барманы, көтмәгәндә күк йөҙө ап-асыҡ, яп-яҡты булып китте, һәм беҙ Катманду үҙәненең ҡорама юрғандай төрлө төҫтәге яландарын, баҡсаларын байҡап кинәндек. Ҡап уртала – короллектең баш ҡалаһы Катманду. Архитектураһы сәйер уның: йорттары бер остан ҡараһаң – бер ҡатлы, икенсе остан — өс ҡатлы. Нишләптер, һуғыштан һуңғы Сталинград харабаларын иҫкә төшөрҙө был сәйерлек.

XX быуат урталарында ғына Непалға туристар йөрөй башлаған. Был илгә һуҡмаҡ асыусы тип одессит Лисаневич һанала, милләте буйынса – урыҫ. Шул осорҙа Лисаневич Калькуттала йәшәгән һәм был ҡалаға йыш ҡына килгеләгән Непал короле Махендра менән танышып, туризмдың етди килем сығанағы булыуына уның “күҙен асҡан”, сит илдән сәйәхәткә килеүселәр өсөн Катмандула ҡунаҡхана төҙөргә рөхсәт алған.

Баш ҡала аэропорты Трибхуван (Махендраға тиклем, 1951–1955 йылдарҙа хакимлыҡ иткән королдең исеме менән аталған) ҡыҙыл кирбестән һалынған әшәүәтһеҙерәк бер казарманы хәтерләтә. Мине йәш, интеллигент ҡиәфәтле Непал егете ҡаршы алды. Исеме... Камал булып сыҡты! Һөймәлекле кеше, йылмайһа, йөҙө яҡтырып китә. Биш тел белә, русса ла һөйләшә, был иһә – Непалда һирәк күренеш.

Камал ҡунаҡсыллыҡ билгеһе итеп муйыныма ебәк шарф һалды һәм:

– Намастэ! (Һаумыһығыҙ!) – тип өндәште.

Уның сәләме йыр һымаҡ яғымлы яңғыраны: “наа – маа – стээ”. Санскрит быны шулай аңлата: “Минең алланан булмышым һинең алланан булмышыңа сәләм бирә”.

Артабан 80-се йылдар ҡомартҡыһы булған аҡ лимузинға ултырып Тамель тип аталған туристик районда урынлашҡан отелгә йүнәлдек. Лимузиндың руле уң яҡта – инглиздар йоғонтоһо, һәм мин һул яҡлы хәрәкәт хөкөм һөргән урамдарҙан непалса елдереүҙе һәр күҙәнәгем менән тойҙом – ярты сәғәт эсендә башҡа илдә генә түгел, ә бөтөнләй ят донъяла икәнемде лә аңғарҙым.

Эйе, тәьҫорат көслө булды. Катманду урамдары тар, етмәһә, ташлы, соҡорсаҡырлы, көтмәгәндә киңәйеп тә киткеләй, бара торғас, тупикка барып төртөлөүең дә ихтимал, бейеклеге метр ярымлыҡ ҡына туннелгә лә барып кермәм тимә. Тротуар тигәндәре бөтөнләй юҡ бында. Урам буйлап кешеләр, машиналар, велосипед-мотоциклдар, мал-тыуар – бөтәһе бергә йөрөй. Туҡтауһыҙ һөйләшеү, ҡысҡырышыу, кәрәккән-кәрәкмәгәнгә лә – ҡыҙыҡ өсөн генә – сигнал бирешеү, ҡыңғырауға баҫыу...

Ҡаршыға килгән автомобиль, бына-бына килеп бәрелде тигәндә генә, ниндәйҙер мөғжизә арҡаһында, тиҙлеген дә кәметмәй эргәнән генә үтеп китә. Был берәүҙе лә аптыратмай, хәүефләндермәй. Минең ҡотом алынды баштараҡ, сәсем үрә тора, ә аяғым үҙенән-үҙе тормоз педален эҙләй... Иң ғәжәбе шул: ошо хәтлем мәхшәрҙә лә мин Непалда бер генә юл-транспорт ваҡиғаһын күрмәнем.

Көләс йөҙҙәренә ҡарап, непалдар өсөн был хәлдең тәбиғи икәнлеген аңлайһың һәм әкренләп тынысланаһың. Берәйһе юл уртаһында донъяһын онотоп ауыҙын асып торһа, уға берәү ҙә аҡырмай, тотҡарлайһың, тип әрләмәй, ә сигнал ғына бирә: нимәгә шаҡ ҡаттың, йәнәһе.

Ғөмүмән, Катмандула үҙенсәлекле, яҡшы энергетика һиҙелә һәм ул ситтән килгәндәрҙе лә күңел тыныслығына, шат халәткә юлыҡтыра. Бындағы "туҡ-туҡ" таксийы хаҡында ла әйтеп китмәй булдыра алмайым. Ғәмәлдә был – кеше ултырырлыҡ кузов таҡҡан motoроллер. Уны туҡтатыр өсөн кабинаға туҡылдатырға кәрәк, исеме лә шунандыр, моғайын.

Ҡала ныҡ тығыҙ итеп төҙөлгән. Бер нисә миллион кеше (теүәлен берәү ҙә белмәй) ҙур булмаған майҙанда һыйышып йәшәй. Йорттар бер-береһенә ек ҡалдырмай терәп һалынған, уларға урам исеме лә, йорт һаны ла яҙып ҡуйылмаған – һәр хәлдә минең күҙемә салынманы. Урындағы кешене эйәртмәйенсә бер ҡайҙа барып, бер ни күрерлек түгел, лабиринттар эсендә аҙашыуың көн кеүек асыҡ.

Ике-өс ҡатлы йорттар ғәләмәт төрлө төҫтәргә буялған. Өйҙәр ашыҡ-бошоҡ, әүеш-тәүеш һалынған, емерек тәҙрәләре быялаһыҙ өңшәйеп торған торлаҡтар ҙа бар. Арыу ғына йортҡа иҫке-моҫҡо таҡтанан йә тимер-томор киҫәгенән аласыҡ йә солан ишараты терәтеп, ишек урынына сепрәк элеп ҡуйырға ла күп һорамайҙар бында. Храм йәки һарайҙар хаҡында һүҙ башҡа, әлбиттә.

Халыҡ урамды үҙенең торлағының дауамы тип ҡабул итә, буғай: кеше йөрөп ятҡан ерҙә чили, кукуруз киптерәләр, аш бешерәләр, кер йыуалар һәм һыу түгәләр. Уның ҡарауы, һәр тәҙрә төбөндә, балконда гөлдәр күкрәп сәскә ата, төрлө төҫтәге флагтар елберҙәй.

Тирә-яҡ кескенә лавкалар, магазиндар, оҫтаханалар менән тулған. Алты квадрат метр майҙанлы магазин – иркен әле ул, ҙурҙары бик әҙ, ә супермаркетты мин бөтөнләй осратманым. Урамдар насар яҡтыртыла, унда-бында ғына фонарҙар мыҙлай.

Катманду үҙгәрмәгән, йөҙ йыл элек ниндәй булһа, бөгөн дә шундай: тар урамдар, майҙандарҙа йөҙҙәрсә храмдар һәм ступалар[2] , һауала – хуш еҫтәр, усаҡ ялҡыны, ризыҡ тәме, автомашина һаҫығы – бөтәһе бергә ҡушылып бөркөлә; һәр ҡайҙан милли музыка эркелә. Тәҙрә кәрниздәре һырлап эшләнгән боронғо биналар ҙа етерлек, һәр ихатала тиерлек Будда статуяһы ҡуйылған. Ҡыйығы алтын менән ялатылған бейек храмдарҙың стенаһына Будда күҙҙәре төшөрөлгән. Уның үтә күреүсе ҡарашы кешеләргә һәр тарафтан бағып тора.

Ҡатын-ҡыҙ өйҙә бикләнеп ултырмай, уларҙы урамда йыш осратырға була, һөйкөмлө, ҡара һөрөңкө йөҙлө, һоро күҙлеләр. Индуизм динендәге непалдар маңлайына "тика" тамғаһын баҫа – бәхет билгеһе, уны, ғәҙәттә, ҡыҙыл менән буяйҙар, сөнки ҡан төҫө – йәшәү символы. Тиканы маңлайҙың уртаһына ғына, йәғни Шиваның (алла) өсөнсө күҙе булған тәңгәлгә баҫалар. Был тик ҡатын-ҡыҙға ғына хас булһа ла, айырыуса тантаналы ваҡиғалар, ҙур дини байрамдар айҡанлы ир-ат та маңлайҙарына тика тамғаһын ҡуя.

Непал халҡы урта буйлы, ҡаҡса кәүҙәле, ҡарасман һәм бик теремек. Үҙҙәре көләс йөҙлө, итәғәтле, ихлас. Ҡараңғы сырайлы кешеләр осрамай тиерлек. "Эйе" тигәндә, болгарҙар һымаҡ, непалдар ҙа "юҡ" тигәндәгеләй баш бора һәм –

---

[2] *Ступа (санскриттан тәржемә иткәндә "түбә" тигәнде аңлата) – буддизмда йыһан кендеген кәүҙәләндереүсе Мера тауының символы булъан табыныу монументы, унда, ғәҙәттә, дини реликвиялар, мәҫәлән, изгеләрҙең һөйәген, кейем-һалымын ҡуялар.*

киреһенсә. Әгәр ҙә улар менән туған телдәрендә “намастэ” тип иҫәнләшһәң, “данъябат” тип рәхмәтеңде әйтеп тә ебәрһәң, һине күтәреп кенә йөрөтөрҙәй булып ҡыуаналар, биллаһи, түбәләре күккә тейә.

Катмандула, күҙәтеүемсә, маңлайына тика төртөлгәндәр, йәғни индуистар күберәк. Буддистар ҙа, хәйер, әҙ түгел. Ике дин вәкилдәре татыу йәшәй, индуистарҙың храмдары менән буддистарҙың ступалары йәнәш тора. Будда статуяларына (һындарына) ла индуистар ғәҙәтенсә ҡыҙыл буяу онтағы һибәләр.

Буддизм динен, нигеҙҙә, илдең төньяғында, таулы төбәктәрҙә, йәшәүселәр тота. Шуны ла әйтеп китәһе килә: Рәсәйҙән йөҙҙәрсә тапҡырға бәләкәйерәк Непал короллегендә 60-тан ашыу этнос йәшәй. Этник төркөмдәр араһында иң күп һанлыһы – тибеттар (белемле һәм эшлеклеләр), тхакалиҙар (ҡунаҡсылдар, ғәҙәттә, ҡунаҡхана тотоусылар), тау шерпылары (бейектә йәшәүгә ҡулайлашҡандары өсөн уларҙы “өс үпкәле кешеләр” тип тә йөрөтәләр).

Индуизм Һиндостан менән сиктәш көньяҡ провинцияларҙа йәшәүселәр араһында киң таралған. Илдең урта өлөшөндә был ике дин иһә күп быуаттар



һуҙымында шул дәрәжәлә бер-береһенә яҡынайған – хатта ки индуизм буддизмдың (һәм киреһенсә) бәғзе һыҙаттарын үҙенә ҡабул иткән. Буддистар башҡа дин вәкилдәренә индуистар һымаҡ уҡ ҡәтғи ҡағиҙәләргә һәм сикләүҙәргә нигеҙләнеп мөғәмәлә итмәй. Быға мин ҡыҫҡа ваҡытлы сәйәхәт осоронда ла инандым.

Непалда кешеләр үҙе теләгәнсә, сағыу төҫтәргә өҫтөнлөк биреп кейенә. Европа костюмындағы ир-ат һирәк осрай һәм уларға мөнәсәбәт ғәйәт ихтирамлы. Әгәр ул галстук та таҡҡан булһа, аллаға ҡарағандай ҡарайҙар, аэропортта бындай әфәндене өф итеп кенә торалар. Алдан белһәм, мин дә шулай кейенер инем...

Әйтергә кәрәк, хәрбиҙәр Непалда иң ихтирамлы һәм аҡсалы һөнәр эйәләре иҫәпләнә (ҡасандыр беҙҙә лә шулай ине). Хәрби хеҙмәткә эләгер өсөн физик яҡтан сынығҡан булыу ғына әҙ, юғары мәҙәниәтле булыу ҙа мотлаҡ. Англияла, мәҫәлән, махсус тәғәйенле батальондарҙа ялланма хәрби хеҙмәткә алынған

непал һалдаттарының һәм офицерҙарының ҡаһарман рухлы булыуҙары юғары баһалана, икенсе Бөтә Донъя һуғышында Бөйөк Британия армияһында 200 меңләп непал һалдаты булған һәм яуҙа батырлыҡтар күрһәткән.

Мине биш ҡатлы ҡунаҡханаға урынлаштырҙылар, унда көнкүреш уңайлыҡтарына күнеккән Европа кешеләре өсөн бөтә шарттар булдырылған: бассейн, душ, фонтан, бар, ике ресторан, күркәм итеп йыһазландырылған бүлмәләр, итәғәтле персонал. Мин, ихлас әйтәм, ябайыраҡ шарттарҙа үҙемде иркенерәк тоям.

Иртәгәнән һуңға төнгө сәғәт өстә Лосар-тибет Яңы йылы – 2133 йыл башлана. Ут төҫөндәге эт (огненная собака) йылы. Корольлек астрологтары иҫәпләүе буйынса, был – Яңы йылды ҡаршылау өсөн иң уңайлы ваҡыт, сөнки тап ошо сәғәттә Камдо тауында яҙ миҙгеленең тәүге сәскәләре таждарын аса.

Камалдың кәңәшен тотоп, кискеһен ҡалаға сыҡманым. Юл ныҡ ҡына йонсотҡан, мендәргә баш терәү менән йоҡлап та киткәнмен. Иртәнсәк, еңелсә тамаҡ ялғап алғас, отелдең ихатаһына сыҡтым, унда мине Камал машина янында көтөп тора ине инде. Мине күргәс, шундай алсаҡ итеп йылмайҙы, әйтерһең, был – уның иң бәхетле минуты. Мин дә ихластан көләмһерәп ҡуйҙым.

Бөгөнгө сәфәрем буддистарҙың иң абруйлы монастырҙарының береһенә – Шеченға. Унда көн буйына Яңы йыл ҡаршылау алдынан уҙғарыла торған саралар атҡарыласаҡ. Монастырь ҡаланың көнсығышында урынлашҡан, кирбес стена менән уратып алынған. Комплекстың үҙәгендә – дүрт мөйөшлө храм-пагода урынлашҡан, ул ҡупшы итеп семәрләнгән ағас һәм таштар менән биҙәлгән. Храм эсендә Будданың алтын ялатылған ҙур статуяһы, настоятелдең (монастырь башлығының) тәхете тора. Стеналарға нағышлы туҡымалар эленгән, түшәмгә ҡыҙыл шарҙар тағылған, иҙәндә – бәрхәт мендәрҙәр теҙелгән тәпәш кенә эскәмйәләр. Бөтә йыһаз, гүйә, алтынға сумырып алынған, сағыу төҫтәре менән күҙҙең яуын ала, хайран итә.

Храмдың тыш яғында, нигеҙгә уйымдар эшләнгән, һәм унда цилиндр формаһындағы йөҙҙәрсә барабандар күсәргә ултыртып ҡуйылған, уларҙың һәр береһенә доғалар – серле яңғырашлы мантралар соҡоп яҙылған. Шул доғаларҙың береһе “Ом-мани-падме-хум” рәүешендә ауаз итеlә, тәржемәһе “О, изге лотос сәскәһендәге бәхеттәге алмас” тигән мәғәнәлә. Санскритта барлығы дүрт һүҙ, ә ниндәй образ тыуҙырыла!

Буддистар, хәрәкәт доғаны Будданың ҡолағына тиҙерәк алып барып еткерә, тип ышана, шуға күрә барабандарҙы уң ҡулы менән (һул ҡул таҙа түгел тип иҫәпләнә) әйләндерә-әйләндерә, храмды өс ҡат урап сыға. Быны йыш һәм саф күңелдән, Буддаға ысын инаныу, һөйөү менән атҡарһа, ғүмергә бәхетле һәм сәләмәт буласағына берәү ҙә шикләнмәй.

Үҙенсәлекле ҡыйыҡтары менән айырылып торған пагодалар иң тәүҙә Ҡытайҙа һәм Японияла һалынған, тигән фекер дөрөҫ түгел. Беренсе пагоданы XII быуатта архитектор Арнике тап Непалда төҙөгән, шунан һуң ғына, был короллектә тағы бер нисә ғәжәйеп бина ҡалҡып сыҡҡас, оҫтаны Ҡытайға саҡырып алғандар. Артабан инде яңы архитектура формаһы Японияға ла барып еткән.

Храм майҙаны тирәләй послушниктар (монах булырға әҙерләнеүселәр) һәм ламалар (будда дине руханиҙары) өсөн тәғәйенләнгән хөжрәләр (кельялар) урынлашҡан өсәр ҡатлы биналар теҙелгән. Шунда уҡ – буддистар университетының уҡыу корпустары һәм уҡыусылар өсөн дөйөм ятаҡ. Уҡыусылар барыһы ла баштарын ялтас ҡалдырып ҡырған. Йәштәре төрлөсә, бурҙат төҫтәге тога (махсус кейем) кейгәндәр. Ғибәҙәт ҡылғанда улар алтын йүгертелгән туҡыманан

тегелгән торҡа кейә. Был матур баш кейемдәре Александр Македонский яугирҙарының торҡаһына оҡшап тора.

Беҙ монастырға килеп еткәндә, бер рухани урҙаға эленгән ҙур Гонг-бубенға һуғып ғибәҙәткә саҡыра ине. Оҙаҡламай уға башҡа музыканттар ҡушылды, тетрәндергес көслө тауыш менән торбалар иңрәне. Ул торбалар шундай оҙон, остары бөгөлөп иҙәнгә терәлеп тора. Ауыр ҙа икән үҙҙәре – монахтар уларҙы икәүләшеп саҡ күсереп йөрөтә. Был торбаларҙың эсенән һығылып сыҡҡан көйҡөҙрәттән хатта храмдың стеналары тирбәлеп ҡуйғандай була.

Ул арала майҙан тирәһендәге сирәмгә Яңы йыл алдынан уҙғарыла торған ғибәҙәт тантанаһына йыйылған диндар непалдар теҙелеп ултырыша башланы. Кейемдәренә һәм төҫ-баштарына ҡарағанда, уларҙың күпселеге таулы төбәктәрҙән ғаиләләре менән килгән. Тантаналы ҡиәфәттә ултыралар: был – улар өсөн изге ваҡиға.

Дүрт монах храм эсенән тәхетте күтәреп сығарҙы һәм киң таҡта өҫтөндә тештәрен ыржайтып ятҡан ҡот осҡос ҡыҙыл аждаһа эргәһенәрәк алып барып ҡуйҙы. Был аждаһаны ҡамырҙан әүәләп яһайҙар ҙа эсенә ҡан тултыралар икән. Тәхет артынса настоятель күренде һәм нағышлап биҙәлгән, ҡарағусҡыл күк төҫтәге байрам кейемен елпелдәтеп урынына килеп ултырҙы. Шул минутта храм ишегенән сылбырҙай теҙелеп барабан һуғыусылар, литаврала, торбала уйнаусылар сыҡты. Барыһы ла һарғылт-бурҙат төҫтәге кейемдә. Настоятель артына ҡара һәм алтын ялтырауыҡлы туҡымаларҙан ҡатмарлы фасонда тегелгән костюмдар кейгән ламалар теҙелеп баҫты.

Ниһайәт, барабан ритмына, литавралар һәм торбаларҙың сихри-йыһани моңона күмелеп мантралар уҡыу, ритуаль бейеүҙәр башҡарыу мәле етте. Паузалар араһында настоятелдең ҡулындағы ҡыңғырау зыңғырлап ҡуя. Ғәжәйеп музыка, ике йөҙ ламаның йырлауы әкренләп тыңлаусыларҙың да эске халәтен үҙгәртә һәм, әйтерһең дә, ҡанат ҡуя, юғары рухи даирәләргә күтәрә.

Монахтар башҡарған бейеү үҙенсә бер сәйерлеге менән иғтибарҙы тарта... Ахырҙа наставник имәнес аждаһаны ҡылыс менән тураҡланы, һәм ламалар уның "мәйет"ен асыҡ майҙанға сығарып һалды. Артабан наставник ҡулына уҡһаҙаҡ алып, башағына ут төртөлгән уҡты Ямараджа[5] башына оҡшатып, убалай өйөлгән ҡоро-һары ботаҡтарға атты һәм усаҡ тоҡандырҙы. Буддистар, Ямараджа тамағындағы ялҡын барлыҡ ҡара энергияны һәм үтеп барған йылдың кире яҡтарын көлгә әйләндереп, юҡҡа сығара, тип ышана. Монахтар күккә олғашҡан ут ауыҙына тураҡланған аждаһа мәйетенең киҫәктәрен ырғыта, ялҡын телдәренә үҙҙәренең ваҡ-төйәк әйберҙәрен дә ҡорбан итә. (Ул әйберҙәрҙе алдан уҡ ҙур бронза батмустарға йыйып һалалар.)

Яңы йылды ҡаршылау алдынан гонаһтан таҙарыныу церемонияһы тамамланды. Беҙ монастырға терәлеп торған кафеға индек, йәшелсә билмәне (иттән дә эшләйҙәр) "момо" менән һыйландыҡ, тоҙло, майлы непал сәйе эстек. Был сәй миңә оҡшаны, һыуһынды ҡандырҙы. Непал кухняһы аш-һыуға ярлы түгел. Иң киң таралған блюдо – "дасаль бхаат", уны дөгөнән әҙерләйҙәр. Ғәҙәти дөгө бутҡаһына чечевица, быҡтырылған йәшелсә тәмләткестәр өҫтәһәң, телеңде йоторлоҡ тәмле була икән. Тағы шуға ғәжәп иттем: дасаль бхаттың бер порцияһына түләһәң, әллә нисә тапҡыр өҫтәтеп бушлай алып ашарға мөмкин. Бындағы рестарандарҙа ғәҙәт шундай: һорамаһаң да, килтереп өҫтәйҙәр ризыҡты. Ә бит порциялары былай ҙа мул, бер тапҡыр алдыңдан ҡалғансы

[5] *Ямараджа – кешенең киләһе ғүмерендә, ҡабаттан тыуғас кем булырын билдәләүсе алла.*

ашаһаң, көнө буйы туҡ йөрөйһөң. Үрҙә телгә алып киткән момо ашхана менюһында бар, уны, манты һымаҡ, ҡайнар быуҙа бешерәләр. Ракша тигән араҡы, чанг-папод (һыра) артынан момо ашап ҡуйһаң, донъяң түңәрәк инде.

Һыйыр итенән әҙерләнгән ризыҡты бында осратмаҫһың, сөнки һыйыр, Һиндостандағы кеүек, Непалда ла изге хайуан иҫәпләнә, уны үлтергән өсөн был илдә оло йылға төрмәгә ултырталар. "Кеше үлтереүселәргә һеҙҙә яза йомшағыраҡ, нишләп улай?" – тип һорағайным, беҙҙең гид ҡыҫҡа ғына итеп аңлатты: "Кешеләр күп, һыйырҙар әҙ".

Отелгә үҙәк майҙан аша ҡайттыҡ, Непалдағы иң ҙур ступа – Тибет буддизмы символы булған Боудднатх ступаһын күреп китмәксебеҙ. Майҙанға барып еткәнсе теремек, ҡарасман малайҙар биш тапҡыр юлыбыҙҙы бүлде: арҡырыға бау тарта ла туҡтаталар. Камал бер ҙә аптырамай быға, асыуланмай ҙа, туҡтаған һайын йылмайып берәр рупий (40 тин) биреп китә. Баҡһаң, был да – бары тик байрам көндәрендә генә була торған бер йола, имеш.

Боудднатх ступаһы V быуатта төҙөлгән. Уның өс ҡат дүрткел ташҡа нигеҙләнгән архитектураһында күкте һынландырған ҙур ярымшар, Ерҙе һынландырған куб формалары бар, уларға Будданың ғәжәйеп күҙҙәре төшөрөлгән. Был күркәм ҡоролма 13 баҫҡыстан (рухи уяныуға, яҡтырыуға алып барған аҙымдар һаны) хасил ителгән алтын шпиль (манара) менән барып ослана. Манара түбәһендә шар – Ҡояш һәм Ай символы. Ступа нигеҙендәге уйымдарҙа ламалар мантра уҡып ултыра, мәңгелек хаҡында уйҙар уятҡан ауаздар күңелдә биләй: "Омнамо-пара-яна" – "Минең кешене аңлауым, ҡабул итмешем ваҡыт һәм арауыҡ (пространство) менән бәйләнмәгән". Был – буддизм фәлсәфәһенең нигеҙ ташы. Ступа тирәһендә меңәрләгән майшәм яна, һауаға хуш еҫтәр тарала. Бәләкәйерәк уйымдарға ғибәҙәт барабандары ҡуйылған. Бында ла, храмдағы кеүек үк, өс тапҡыр урап сығырға, бер ыңғайҙа барабандарҙы әйләндерә барырға кәрәк.

Төрлө төҫтәге кескәй флагтар тағылған гирляндалар манара түбәһенән ергә тиклем һуҙылып төшкән, һәр ҡайһыһына мантра текстары яҙылған. Гирляндалар елгә бәүелә, мантра уҡыусыларҙың тауыштары күккә – барыһын да күреп тороусы Буддаға барып олғаша.

Ступа эргәһендә ике ғибәҙәтхана бар, улар янында цистерна дәүмәллек ҙур барабандар тора. Паломниктар (хажиҙар), ламалар бер-бер артлы барып, шул барабандарҙы әйләндереп китә. Боронғо иероглифтар күҙҙе арбай, доғалар зиһенде биләй. Был серле йола бағланған Будданың бейек, мөһабәт скульптураһы ошо ваҡиғаларҙы күрә, ишетә генә түгел, үҙе лә ҡатнаша кеүек. Майҙандағы ступа тирәһендәге бөтә ҡоролмалар ҙа әкиәти аждаһалар, ҡапландар һүрәттәре, уларҙың ҡағыҙҙан, балсыҡтан, ағастан яһалған фигуралары менән биҙәлгән. Был ҡоролмалар араһында бутан храмы ла бар. Ҡыйығына өс алтын шпиль ҡуйылғанғалыр, ул йөҙөп барған карапҡа оҡшап ҡалған. Храм алдында алтын боландар баҫып тора, ишек башына дхарма[6] тәгәрмәсе элеп ҡуйылған. Храмдар араһына тыңҡыслап лавкалар төҙөлгән, уларҙа ҡулдан эшләнгән затлы әйберҙәр һатыла: еҙ сувенирҙар, йыһан ҡоролошон һүрәтләгән иҫтәлекле картиналар...

Катмандула тағы ла бер данлыҡлы ступа бар – Сваямбуднатх ступаһы. Янында – храм һәм Харати мәмерйәһе, унда боронғо фрескалар менән биҙәлгән ете ишек аша үтәһең. Етенсе ишек артында Юғары Зат – серле бер асыл медитация халәтендә ултыра. Камалдың аңлатыуынса, был асыл "тән (кәүҙә) түгел,

---

*[6] Дхарма (һүҙмә-һүҙ – ҡанун, закон) – йәшәйеш һәм тәртип (әҙәп) ҡағиҙәһе. Һәр кастаның үҙенең махсус дхармаһы бар.*

ә күҙҙәр” икән. Беренсе ишекте – көн һайын, ә икенсеһен йылына бер асалар. Ҡалған ишектәрҙе бер ҡасан да асмайҙар. Тәүге “бүлмә”гә ингәндә үк кеше ҡеүәтле энергетиканы тоя, артабанғылары хаҡында әйтеп тораһы ла түгелдер...

Күренекле тибет табибының йорто ла ошо тирәлә икәнен белгәс, уны күрмәй, уға күренмәй үтеп китеп булмай, әлбиттә. Катманду урамдарында ҡайҙа ҡарама – арка, шуларҙың береһе аша үтеп, бөхтә генә ихатаға барып юлыҡтыҡ. Ҙур булмаған майҙанда сәскә түтәленә лә, ике буйвол аҫыралған аҙбарға ла, бесән күбәһенә лә, әтәс менән тауыҡтар ҡытҡылдаған ситлек-ояға ла урын табылған. Бер ниндәй еҫ-ҡоҫ һиҙелмәй, ҡайҙа ҡарама – таҙалыҡ. Ишек шаҡыныҡ. Өҫкө ҡаттан төшөп, табип үҙе ҡаршыға сыҡты – ҡаҡса ғына, пеләш башлы ҡарт икән, күҙ ҡараштары үткер, аҡыллы. Ул беҙҙе беренсе ҡаттағы бүлмәгә – пациенттарҙы ҡабул итә торған кабинетына саҡырып индерҙе. Ике стенаны китапхана картотекаһындағы кеүек кескәй тартмалы шкафтар биләй. Тик был тартмаларҙа карточкалар түгел, ә төрлө төҫтәге, төрлө ҙурлыҡтағы дарыу төймәләре, борсаҡтары һалынған (дарыуҙы шифалы үләндәрҙән үҙе әҙерләй). Өҫтәл артына ҡара-ҡаршы ултырыштыҡ. Табип ике ҡулымды ла алмаш-тилмәш тотоп, өнһөҙ-тынһыҙ халәттә пульсымды һәрмәне. Төрлө урындан бармағы менән баҫып тыңлай, үҙе һынап, иғтибарлы итеп күҙҙәремә ҡарай. Ахырҙа телгә килде: “Тәнең йәшәү өсөн уңайлы. Рухың ныҡ, әммә умыртҡа һөйәгеңде көсөргәндерергә ярамай, һаҡла – бил тирәһендә проблема бар”,– тине.

Табип миңә өс төрлө дарыу бирҙе. Ҡабул итеү һәм дарыуҙар өсөн ул 20 доллар аҡса алды (Мәскәүҙә ошондайыраҡ хеҙмәткә 400–600 доллар түләтәләр).

Билдәле булыуынса, Тибет медицинаһы тән һәм рух бәйләнешен айырылғыһыҙ тип ҡарай, сирҙең үҙенә түгел, ә уға дусар иткән сәбәпкә йоғонто яһауҙы маҡсат итеп ҡуя. Моғайын, шуғалыр ҙа был үҙенсәлекле дауалау системаһына иғтибар һүрелмәй.

Непалда ҡараңғы иртә һәм тиҙ төшә. Табип менән хушлашҡанда ҡояш байымағайны әле, машинаға барып ултырып ҡуҙғалғансы донъяны ҡуйы эңер ҡапланы, фараларҙы яҡтыртырға тура килде. Ҡала үҙәгенә етәрәк беҙҙе полицейский туҡтатты, артабан юл бикле, ике сәғәттән һуң ғына асыласаҡ, тип иҫкәртте.

Ҡараһаҡ, урамдар халыҡ менән шығырым тулған. Беҙ ҙә ошо ағымға ҡушылдыҡ, бара-бара, оло бер ҡапҡанан индуистар храмы торған майҙанға килеп индек. Был майҙанға бер нисә урам тоташа, уларҙан мөһабәт храм янына меңдәрсә кешеләр эркелә. Йыйылған халыҡтың күҙе храм ишектәренә төбәлгән. Бына ул ишектәр асылып китте лә, майҙанға парад формаһындағы офицерҙар һәм ҡупшы кейенгән ҡатын-ҡыҙҙар килеп сыҡты, ә уртала – генерал мундирындағы король менән ҡыҙыл күлдәк кейгән королева. Артабан улар махсус машинаға инеп ултырҙы һәм барлыҡ процессияны эйәртеп урамға сыҡты. Непал элитаһының машиналары халыҡ даръяһы уртаһына төшөп, әкрен генә хәрәкәт итә башланы. Баҡһаң, беҙ тағы ла бер тантана эсенә барып сумғанбыҙ икән – индуистарҙың Шива аллаһының тыуған көнө айҡанлы байрамға. (Индуистарҙың аллалары берәү генә түгел, ә, Боронғо Грециялағы кеүек, әллә нисәү.)

Камал йылмайып әйтеп ҡуйҙы: “Королде үҙ күҙең менән күреү һирәктәргә генә эләгә. 28 йыл эсендә миңә был бәхет ике тапҡыр ғына тәтене. Ә һин, Камил, Непалда икенсе генә көн йәшәйһең, ә королде күреп тә өлгөрҙөң”.

Әлеге король Гьянендры Бир Бикрама 2001 йылда, оло фажиғәнән һуң,

тәхеткә ултыра: ул саҡтағы королде (бер туған ағаһын) тотош ғаиләһе менән дошмандары атып үлтерә.

Король менән королева үтеп киткәс, халыҡ геү килеп храмдың семәрле ишектәре яғына ҡуҙғалды, унда иҙән уртаһында изге үгеҙ статуяһы ята. Әммә храмға бөтәһе бер юлы һыя алмай, шуға полицейскийҙар утыҙ-ҡырҡ кешене төркөмләп индереп тора.

Халыҡ араһына тығылырға баҙнат итмәнем. Мине, ят кешене, моғайын, храмға индермәҫтәр ҙә ине. Бейек, оҙонса постаментта ғорур ҡиәфәт менән ултырған аҡ һаҡаллы ҡарттарҙы фотоға төшөрөү менән сикләндем. Улар – саддху, изге кешеләр, ҡыҙыл һәм аҡ туҡыманан тегелгән ябай ғына кейемдәләр. Саддхуҙар донъяуи мәшәҡәттәрҙән азат дәрүишлектә ғүмер кисерә. Улар фотоға төшөргә ҡарышып торманы, аҡса ла һораманы. Артабан, храмдан сыҡҡан индуистар үрнәгенә эйәреп, беҙ ҙә таш бөркөт суҡышынан аҡҡан һыу менән бит-ҡулыбыҙҙы сайҡап алдыҡ.

Баштараҡ, танмайым, мин бөтә ғәжәйеп сараларҙы әкиәт һымаҡ күрә, ниндәйҙер бер тылсымлы спектакль итеп ҡабул итә инем. Икенсе-өсөнсө көнгә аңыма барып етте: былар – яһалма түгел, ысынбарлыҡ һәм мин ошо ысынбарлыҡта туранан-тура ҡатнашам. Аңлағас, Непалда шаһит булған ваҡиғалар тәрән йөкмәткегә эйә булды, донъя сағыуыраҡ, гүзәлерәк төҫтәргә сорналды.

Иртәнге сәғәт биштә беҙ Шечен монастырында, килеп еткән Яңы йыл айҡанлы ғибәҙәт ҡылыу тантанаһында, инек инде. Саралар төнгө өстә үк башланған, беҙ йоҡо туйғасыраҡ барҙыҡ. Беҙ килеүгә һары торҡа кейгән ламалар алтын менән нағышланған ҡабарынҡы миндәрҙәргә менеп ҡунаҡлаған һәм бәүелә-бәүелә мантра йырлай ине. Ҡунаҡтар стена буйлап, ябайыраҡ миндәрҙәргә ултырған. Ламаларҙың урынын биләргә ярамай, был – изгеләр урынын хурлау, уларҙың кармаһын бысратыу тип һанала.

Наставник һәм уның йәш кәүҙәләнеше (наставник үлгәс, уның санын ҡабул итәсәк кеше) аяҡ бөкләп бейек тәхеттәрҙә – алтарҙа (михрапта) ултыра. Бер сәғәт самаһы мантра доғалары уҡыла, нәҙек һәм ҡалын тауыштар аһәңе тирәяҡҡа моңло йыр булып тарала. Ламаларҙы ирекһеҙҙән йәлләп тә ҡуйҙым: шундай ҡатмарлы, оҙон текстарҙы нисек иҫтә ҡалдырмаҡ кәрәк?

Артабан паломниктар һәм туристар Наставник менән уның киләсәктәге кәүҙәләнеше ҡаршыһынан үтте, улар һәр кемде фатиха биреп, яурынына доғалы аҡ ебәк шарф һалып оҙатты. Хеҙмәтселәр иһә кешеләрҙең устарына өшкөрөлгән ярма һалып һәм нәҙек ҡыҙыл таҫма өләшеп торҙо. Ярманы аҙаҡ бешереп ашарға кәрәк, ә ҡыҙыл таҫманы өс көн муйыныңа тағып йөрөһәң, һине ул йыл буйына ҡара көстәрҙән һаҡлаясаҡ. Барлыҡ халыҡ фатиха алғас, ламалар ҡағыҙ тоҡсайҙарға һалынған тәм-том һәм емештәр таратты.

Һәүетемсә аҡҡарылған боронғо церемонияға шаһитлыҡ ҡылып ҡарап торғанда, мин непалдарҙың күп быуаттар һуҙымында изоляцияла йәшәүе һәм шул арҡала үҙҙәренең уникаль, үҙенсәлекле мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын тәүге сафлығында һаҡлап ҡала алыуы хаҡында уйландым.

Гималайға сәйәхәткә йыйындыҡ. Аэропортҡа барышлай король һарайы янынан үтеп киттек. Семәрле тимер рәшәткә менән уратып алынған парк эсендә алһыу төҫкә буялған, ҡыйығы пагода стилендә ябылған, кескәй манараһы булған күркәм бина күренә. Ҡапҡа төбөндә һәм тотош рәшәткә буйлап ҡара төҫтәге милли форма кейгән автоматсылар баҫып тора: улар монархты урындағы демократия ҡотҡосоларынан һәм маоистарҙан һаҡлай.

Егерме урынлыҡ самолетҡа ултырып Покхара ҡалаһына осор алдынан

ентекле тикшереү аша үттек. Был сара маоистар менән барған өҙләкһеҙ граждандар һуғышы менән бәйле. 1949 йылда Тибетты баҫып алған ҡытайҙар һаман да үҙҙәренең сиктәрен ошо ил иҫәбенә киңәйтергә хыял итә шикелле. Маоистар Непалда коммунистик режим урынлаштырыу идеяһы менән яна.

Самолетта иллюминаторҙан күҙемде алманым. Тәҙрә эргәһендә генә күк тойолған ҡарлы түбәләргә һоҡланып туйғыһыҙ. Тәпәш күренгән “лилипут” тауҙар ҙа өсәр-дүртәр километр бейеклектә... Ни тиһәң дә – Непал! Бында 6000 метрҙан да юғарыраҡ 1310 тау бар. Ә беҙҙең Рәсәйҙең иң бейек тауы Эльбрустың бейеклеге 5642 метр. Көнбайыш Европа маҡтанған Монблан түбәһе лә 5000 метрға барып етмәй.

Йылға ярҙарында һирәк-һаяҡ усаҡтар яна, ялҡындары һауаға үрләй – мәрхүмдәрҙең кәүҙәләрен, кейемдәрен яндыралар. Непалдар, бары тик ут аша уҙғарып ҡына үлгәндәрҙең йәнен азат итергә һәм яңынан тыуыуға – реинкарнацияға әҙерләргә мөмкин, тип инана. Усаҡтың төтөнө аҡ төҫтә булһа, мәрхүм әҙәпле йәшәгән, ә ҡара булһа, гонаһҡа батҡан, тип юрала. Көлдө ағын һыуға һибәләр, уның изге Ганг тулҡындарына барып етәсәгенә ышаналар (Непалдың бөтә йылғалары ла Гангҡа барып ҡушыла).

Ниһайәт, короллектең көнсығышындағы гүзәл Покхара ҡалаһына аяҡ баҫтыҡ. Ул тауҙар ҡосағында, Пхева Тал күле буйында урынлашҡан. Был төбәктә гуркхиҙар – ҡурҡыу белмәҫ яугирҙар йәшәй, улар төрлө илдәрҙең армияһында ялланып хеҙмәт итә. Данлыҡлы кукри – гуркхиҙарҙың һуғыш ҡоралы булған бысаҡ та ошонда эшләнә. Был бысаҡтың йөҙө ҡыйғыр ыласын ҡанатына оҡшатып сүкелгән.

Покхара борон-борондан Һиндостан менән Тибет араһында сауҙа итешеүҙең төп үҙәге булып торған. Хәҙер инде ул – күркәм отелдәр төҙөлгән курорт, туристик үҙәк. Отель тәҙрәләренән һоҡланғыс тау пейзаждары күренә, улар күңелде елкендерә, уйландыра... Был ҡала – тыныс ял итергә теләүселәр өсөн үҙе бер ожмах. Европанан килеүселәр бындағы һиллектә, әкиәти матур тәбиғәт бәлләүендә, әйтерһең, бар донъяһын онота, мәшәҡәттән арына һәм рәхәткә сума.

Кали Гандаки тарлауығы аръяғында Дхаулагири тауы (8167 м) һерәйеп күренә. Уң яҡта – ун ике осло түбәһен күккә сөйгән Аннапурна теҙмәһе, Покхараға йыраҡ түгел – Мачхапучаре тауы («Балыҡ ҡойроғо» тигән мәғәнәлә, уның түбәһе иң оста икегә айырылып киткән). Мачхапучаре, минеңсә, донъялағы иң матур тауҙарҙың береһе. Непалда ул изге һанала, һәм уға үрләү тыйыла. Арыраҡ, тау аръяғында – серле Тибет платоһы, уның майҙаны бер нисә километр, ә бейеклеге – дүрт-биш мең метр!

Киске ашты күл ярында ойошторҙолар. Бынан күҙ күреме алыҫлыҡта кескәй утрау ята, ундағы зәңгәр һарай – Непал короленең йәйге резиденцияһы яҡшы күренә. Ул ғәҙәти дачаға оҡшаған. Ә эргәлә, ябай ғына сәхнәлә, урындағы артистар моңло итеп йырлай һәм дәртләнеп бейей, милли көйҙәр ағыла, ахшам сәғәтендә асылған сәскәләрҙән хуш еҫ бөркөлә.

Ҡайтҡас, Камал менән тағы бер ҡат сәйәхәт хаҡында кәңәшләштек. “Джомсом треккинг” маршрутын һайланыҡ, ул беҙҙе Муктинатх ғибәҙәтханаһына – һуҡмаҡтарында меңдәрсә йылдар һуҙымында меңәр-меңәр хажиҙарҙың аяҡ эҙҙәре ҡалған изге урынға алып барасаҡ. Юл Кали Гандаки тарлауығы төбөндә ята, эргәлә – иҫ киткес бейек тауҙар үрә баҫып тора! Был тарлауыҡ эсенә Кавказ һыртын йәшерергә булалыр. Эйе, Гималайҙа дәүмәлдәр шундай – әкиәти, мөғжизәүи!

Төн тынысһыҙ башланды. Күрше бүлмәләге непалдар – әллә марихуана

тартҡандар – тамаҡ ярып һөйләшеп бөтә әҙәмдең йоҡоһон осорҙолар. Күпмелер түҙҙем дә ахырҙа, барып, ишектәрен шаҡыным. Бармағымды иренемә ҡуйып: “Тс-ссс”,– тип ишараланым, телдәрен белмәйем бит инде. Дүртәү икәндәр, ҡарышып торманылар, аңлап, шымдылар. Беҙ тынысланып йоҡлап киттек.

Иртүк билет һатып алдыҡ, Аннапурна милли паркына пропуск өсөн түләнек һәм, тикшереү үткәс, ун ике урынлыҡ самолетҡа йүнәлдек. Пассажирҙар ун бер кеше: дүртәүһе – непалдар, етәүһе – сит ил туристары: мин, бер йәш немец, ирле-ҡатынлы поляктар, ҡыҙы менән улын эйәрткән урта йәштәрҙәге ир – Австриянан.

Шуға ҡыуандым: бөтә урындар ҙа – иллюминатор ҡырында, һәр кем тарлауыҡ эсендә осоп барышлай тирә-яҡтағы хайран ҡалырлыҡ күренештәрҙе күрә, кисерә. Ә кисерештәрҙе һүҙ менән генә тасуир итерлек тә түгел. Самолет бер километр бейеклектә оса, ҡая таштарға ҡанаттары саҡ-саҡ теймәй ҡала кеүек. Бына-бына барып бәрелербеҙ ҙә селпәрәмә килербеҙ, тигән уйҙан тетрәнеп, күҙҙе йомоп алаһың хатта, әммә бер секундҡа ғына – һушыңды алырлыҡ тәьҫораттарҙы яҙмыш тағы ҡасан бүләк итә әле, тиһең дә иллюминаторға ҡапланаһың! Беҙҙең бәхеткә, штурвал артында ла виртуоз летчик ултыра ине, ахыры. Тауҙарҙағы ҡарҙар һәм боҙ ҡатламдары биш мең метр бейеклектә башлана икән. Ә беҙҙең тауҙарҙа өс мең метрлы үрҙәрҙә лә ҡар ята – июль айында ла. Баштараҡ ярайһы иркен күренгән тарлауыҡ тора-бара тарая, ҡараңғылана төштө. Аҫта, төпкөлдә, ятҡан йылға аҡ күбеккә сумған, ағышы ныҡ шәп, тимәк. Йылғаның ике яғында ла баҫҡыслап террасалар эшләнгән – сәсеүлек өсөн. Һирәкләп йорттар ҙа күренгеләй. Джомсом ҡаласығы тарлауыҡтың ҡапыл киңәйеп киткән ерендә, йылға ярында урынлашҡан. Покхарала 25-26 градус йылы ине, ә бында һалҡынса – 12-13 градус тирәһе. Берҙән-бер урам буйлап лоджа тип аталған икешәр ҡатлы приюттар теҙелеп киткән, аҫҡы ҡатында – магазиндар һәм лавкалар, ҡыйыҡ башында – асыҡ террасалар.

Камалдың бында булғаны бар икән, ул мине туп-тура бер танышына алып китте. Таши исемле хужабикә беҙҙе көләс йөҙ менән ҡаршы алды. Цампи сәйе менән һыйланы: был сәй ғәмәлдә шыйыҡ бутҡа – ҡайнар һыуға арпа оно һалып болғайһың да – цампи әҙер.

Тамаҡ ялғап алғас, Таши беҙҙе ихатаға алып сыҡты. Унда Дордже исемле портер (юл күрһәтеп, йөк күтәрешеп йөрөүсе кеше шулай атала) ике ат эргәһендә мәш килеп йөрөй ине. Ҡураныс кәүҙәле, утыҙ йәштәр тирәһендәге ир. Дордже беҙҙең йөктөң бер өлөшөн аттарҙың һыртына артмаҡлап һалды, иң ауырын үҙе күтәрҙе. Ағас эйәр өҫтөнә махсус мендәр һалып ултырһаҡ та, миңә бик йәпһеҙ ине. Портер аттарҙың муйынына ашлыҡ тултырылған тоҡсай элеп сыҡҡас, юлға ҡуҙғалдыҡ.

Джомсомдан сәғәт 9-ҙа сығып киттек тауҙарға сәйәхәткә!

Тар ғына күпер аша сыҡҡас, йылға ярында ятҡан һуйыр таштар араһынан йырмаслап үткән беленер-беленмәҫ һуҡмаҡҡа төштөк тә Муктинатх монастырына йүнәлдек. Хәл етһә, 5416 метр бейеклектә ятҡан Горунг артылышына ла күтәрелергә иҫәп тотабыҙ. Ә унан Аннапурнаның көнсығыш һырты буйлап туп-тура Покхараға төшөргә мөмкин.

Тарлауыҡ һаман киңәйә бара. Һай ғына тар йылға эре һуйыр таштар араһына инеп күҙҙән яҙҙырҙы. Аттарыбыҙ ярышып алға уҡтала. Ете саҡрым самаһы уҙғас, ярлауҙағы мәмерйәләргә иғтибар иттек. Дордже, унда саддху дәрүиштәре көн күрә, тип аңлатты. Улар был мәмерйәләргә нисек менеп етә икән? Тау үренә берәй һуҡмаҡ һалынғанмы, әллә бау баҫҡыслап хитланалармы йә башҡа

берәй ысулдары бармы? Быны Дордже ла белмәй. Эре таштар араһынан барыу ҡатмарлы булһа ла, юлыбыҙ ыраны. Өс сәғәттән беҙ ике рестораны булған ауылға барып еттек. Тали тигән милли блюдо алып ашаныҡ: йәшелсә, картуф менән дөгөнө өйөп һалып бирҙеләр. Борсаҡ ононан бешерелгән икмәктән ауыҙ иттек.

Әҙерәк ял итеп алғас, тағы ҡуҙғалдыҡ. Ярты саҡрым үтеүгә, тарлауыҡ икегә айырылып китте, киңерәк айырсаһы – төньяҡҡа, серле Тибет яғына, ә икенсеһе – көнбайышҡа, беҙ барып күрергә ниәтләнгән монастырға алып китә. Муктинатх храмдары V быуатта төҙөлгән, улар изге шишмәне һәм таштар араһында бер ҡасан да һүнмәй янып торған зәңгәр утты ҡурсалай. Храмда монастырға нигеҙ һалыусы гуру Римпоченың ҡалыбы (слепок) һаҡлана. Тап ул медитацияға бирелергә ятаҡҡан урындан бәреп сыҡҡан да инде изге шишмә. Буддистар инаныуынса, күккә веер булып һибелеп урғыған һыуҙа башын сылатҡан кешенең кармаһы, йәшәү ҡеүәһе арта.

Тарлауыҡтың беҙ бараһы айырмаһында юл ҡапыл ярты километрлап өҫкә менеп китә. Аттар хәлдән тайҙы, әммә портер уларҙы алға ҡыуыуын белә. Бер килке ике метр тирәһе киңлектәге кәрниздән барырға тура килде, аҫта – йәһәннәм төпкөлө. Мин унда ҡарамаҫҡа тырыштым – бөтә өмөт атымда, иҫән-һау алып сыҡһа ярар ине!?

Ҡаршыға йөк артмаҡлаған ишәктәрҙе һәм аттарҙы ҡыуып барған каруандар ҙа осрағыланы. Ҡыңғырау зыңлағанын ишетеп ҡалыу менән, киңерәк урын эҙләп ҡаяға һырыға һалабыҙ, юғиһә, кәрнизгә һыйышмайынса ҡолап төшмәм тимә. Һирәкләп үҙенән дәү тоҡ күтәргән яңғыҙ портер ҙа килеп сыға юлда, уны ирекһеҙҙән егәрле ҡырмыҫҡаға оҡшатып ҡуяһың. Йөгөн ҡаялағы берәй “кәштә”гә терәтеп саҡ ҡына хәл йыя ла, ул тағы алға ынтыла, нәҙек балтырҙарында, ҡаҡса кәүҙәһендә күпме көс, һерелек бар – һоҡланмай мөмкин түгел.

Тауҙар бында төрлө-төрлө төҫтә, формалары менән дә бер-береһенә һис оҡшамаған: берәүҙәре һөҙәк, йомро, икенселәре ҡаялы, башняға оҡшап осло, бәғзе урында һикәлтәле. Ана шул ҡаялар берсә һары, берсә бурҙат төҫкә инә, һоро, мәле менән хатта ҡара булып та күренә. Гималай тауҙары, минеңсә, вулкан һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән тауҙар түгел. Ҡарар күҙгә шулай төҫмөрләнә: әйтерһең, ике яҡтан ике уба маңлайға-маңлай килеп бәрелешкән дә, артҡа сигенмәҫтән, ирәйешеп үргә үрәпсегән һәм ете-һигеҙ метр бейеклектә туҡтап ҡалған. Улар, гүйә, ҡолас етмәҫ таштарҙы, тонна-тонна тупраҡ һәм ҡомдо бергә юғарыға күтәреп менгән... Ә инде тауҙарҙың йомшағыраҡ, эзбиз йәки ҡом тоҡомо күберәк урындарын шишмә-йылғасыҡтар йыуа, йырғыслай торғас, быуаттар һуҙымында ғәйәт ҙур, тәрән тарлауыҡтар, каньондар, мәмерйәләр хасил булған. Был тәбиғи процесс бөгөн дә, иртәгә лә – мәңге дауам итә.

Был тауҙарҙан непалдар төҙөлөш материалдары ла ташый. Мәҫәлән, ҡараһоро төҫтәге яңы таштарҙы (таш түгел?) утын һымаҡ итеп балта менән киҫкеләп, ихаталарын кәртәләйҙәр.

Монастырға етәрәк бер нисә ауылды үтеп киттек. Был тирәлә тауҙар ифрат та бейек, йорттар улар эргәһендә ҡом бөртөгө ҙурлыҡ ҡына. Тау һикәлтәләрендә кешеләр картуф, арпа үҫтерә. Был хеҙмәт күпме ныҡышмалылыҡ, көс талап итәлер, уйлап ҡараһаң. Һәр терраса таш кәртә менән уратып алынған. Ә һыу тау башынан ағып төшкән шишмәнән алына, ваҡыт-ваҡыт уның ағышын террасаларға һалынған улаҡтарға бороп торалар. Һыуҙы террасаларға сиратлап тотоналар.

Бында баҫыуҙарҙы тимер менән йөҙләнгән ағас һуҡа менән һөрәләр, ул һуҡаларҙы һәр ихатала күрергә була.

Йорт алдарына ҡуйылған туҡыу станоктары артында ҡатын-ҡыҙҙар як йөнөнән, кәзә мамығынан кофталар, шарфтар һуға. Төрлө төҫкә буялған ептәрҙән буй һалып һуғылған кейемдәр йылы һәм уңайлы, тиҙәр, ә матурлығын үҙем дә күрҙем.

Непалдарҙың буйволдары, һыйырҙары ла бәләкәй кәүҙәле. Мал хужаһына оҡшай, тигәндәй, ҡара йөнлө яктар ҙа ҙур түгел. Һөтө тәмле һәм шифалы икән яктың, тиреһенән тун тегәләр, тиҙәген мейескә яғырға тотоналар.

Муктинатх монастыры тарлауыҡтың осонда урынлашҡан һәм алыҫтан уҡ күҙгә ташланып тора. Уның бинаһы аҡ стена аша һонолоп ҡарап тора кеүек. Храмдары, ступалары ла күренә. Тарлауыҡтан өҫкә килеп сығыуға, монастырь артындағы тау кинәт бейегәйә һәм, түбәһенә ҡарлы аҡ кәпәс кейеп, буддистар өсөн изге был төбәкте һаҡлар өсөн посҡа баҫҡан һымаҡ. Монастырға етерҙән өс саҡрымда, боронғо Аҡ ҡала ҡәлғәһе харабаларын уҙғас, юлыбыҙ тағы ҡатмарланды: бер үрләскә, бер түбәнләскә. Аттарыбыҙ тәнтерәкләп саҡ атлай, ә Дордженың иҫе лә китмәй, моңрап кенә үҙ көйөн көйләп алға йыбырлауын белә. Һуҡмаҡ ҡырындағы таштарға мантралар соҡоп яҙылғанына иғтибар иттем. Күпме ваҡыт, тәҡүәлек, тырышлыҡ талап итә был эш һәм, әлбиттә, – Буддаға ҡарата оло хөрмәт!

Сираттағы армытты артылғас, алда, түбәнләс үҙәндә, ялтырап ятҡан күл пәйҙә булды. Шул күлдән бер йылға ағып сыға һәм беҙгә ҡаршы, артылышҡа табан “йүгерә”, биллаһи, үргә аға йылға, күпмелер шулай, физика закондарын һанға һуҡмай, юғарыға үрмәләй ҙә, ҡырҡа боролоп, түбәнгә тәгәрәй... Ысынмы был, әллә күҙ бәйләү, иллюзиямы икәнлеген аҙаҡ тыныслап ҡарар, уйланыр өсөн тип, ошо мөғжизәне фотоға һәм видеоға төшөрөп алдым.

Бер ауылда өс ҡатлы ҡунаҡхана тотҡан Чен исемле кешелә төнгөлөккә туҡталдыҡ. Уның да, минеке һымаҡ, биш балаһы бар икән. Бинаның өсөнсө ҡатында ҡунаҡтар өсөн алты бүлмә йыһазландырылған. Террасала һыуҙы ҡояш энергияһы менән йылытыусы ҡоролма тора, ул баштүбән ятҡан зонтҡа оҡшаған, эсенә көҙгө-рефлектор ҡуйылған. Ҡояш нурҙары киҫешкән тәңгәлдә һыу һауыты ултыра – ябай, осһоҙ һәм йәпле.

Ҡояш байыны. Ныҡ һалҡынайтты. Икенсе ҡаттағы ашханала ултырам, өшөп-ҡалтыранып. Кислород етмәүе лә үҙен һиҙҙерәлер, бейек тауҙа бит көнөбөҙ, ни тиһәң дә. Чен, минең хәлемде һиҙеп, ҡорһағы тишекле бер сөгөнгә тере күмер һалып, ҡалын эскәтер ябылған өҫтәл аҫтына ҡуйҙы. Шундуҡ аяҡ йылынды, тән имшене, миңә “йән керҙе”. Камал менән хужа үҙе лә эргәмә килеп ултырҙы: йылыға, яҡтыраҡҡа. Камалдан тәржемә иттереп, хужанан баяғы кескәй йылға хаҡында һорай ҡуйҙым: нисек инде, үргә аҡмай ҙа йылғалар, тип. Чен тыныс ҡына яуапланы:

– Ә нишләмәк һуң, уға бит ҙур йылғаға барып ҡушылырға кәрәк, ә ҙур йылға ҡалҡыулыҡ аръяғында.

– Һыуҙар үргә аға алмай ҙаһа?

– Ә нишләмәк? – тине хужа тағы, үҙе миңә ғәжәпләнеп ҡараны. – Әйтәм дәһә... Ул йылғасыҡ мәңге шулай аға. Нимәһе аңлашылмай?

Киске ашты илке-һалҡы ғына ҡапҡыланым. Йоҡом да тынысһыҙ булды. Әллә ниндәй шом биләне күңелде. Баш ауырта, күңел болғана. “Тау сире” касафатылыр, моғайын. Иртәнсәк, Камалдың кәңәшен тотоп, һарымһаҡ һурпаһы һемерҙем, бер нисә стакан сәй эстем – хәлем апаруҡ еңеләйҙе. Тауҙа тән тиҙ ҡорғаҡһый икән, һыуҙы күп эсергә кәрәк. Юғиһә, тын алғанда үпкә сатнама һыуыҡта аяҡ аҫтында шығырлаған ҡар тауышын сығара башлаһа, эш харап –

кисекмәҫтән тауҙан төшөргә тура киләсәк. Ултырып ҡалһаң, тәүлек эсендә яҡты донъя менән хушлашаһың. Был хәүеф 6000 метр бейеклектән һуң ғына янай-янауын. Әммә өйрәнмәгән кешегә шунан түбәнерәктә лә һаҡ булыу фарыз.

Ауыл кешеләренең бөхтәлек яратыуҙары күңелгә хуш килде. Таң менән боҙло таштар араһынан аҡҡан тау шишмәһенә барып йыуыналар, тештәрен таҙарталар. Шунан ҡәҙимге тормош башлана: кемдер баҫыуҙа эшләй, кемдер туристарҙы хеҙмәтләндерә, кемдер сувенирҙар яһай, туҡыу станогы артына ултыра...

Ә беҙ юлыбыҙҙы дауам иттек һәм төш етеүгә монастырға барып еттек. Монахтар ихлас ҡаршыланы. Сәй эсеп алғас, монастырҙы ҡарап сыҡтыҡ. Ер аҫтынан ялпылдап өҫкә үрләгән ялҡын телдәрен күреп һиҫкәнеп киттем бер мәл. “Ҡөҙрәт урыны” тип аталған сираттағы тәбиғәт мөғжизәһе икән. Был утты Будда үҙе тоҡандырған, тиелә риүәйәттә. Ошонда уҡ таш араһынан сылтыр шишмә урғылып сыға. Эйе, бында дүрт стихия – Һыу, Ут, Һауа, Ер – бергә ҡушылып, күрше йәшәй...

Икенсе төндә рәхәтләнеп йоҡланым – тау һауаһына күнегеп килеүемдер. Горунг артылышына барырға тип ашҡынғайным да, Дордже һүрҙе, тағы берәй тәүлек бындағы климатҡа эйәләшергә кәрәк, тине.

Көнөмдө тирә-яҡты ентекләп ҡарап сығыуға сарыф иттем. Был төбәктә йәшәгән непалдар – монголоид, ә Катманду халҡы һинд-европа тибына тартҡан. Муктинатх ҡатын-ҡыҙҙары ҡара сәсле, йөҙҙәренән сәләмәтлек бөркөлә. Ябай ғына кейенәләр, ялан аяҡҡа ҡата кейеп йөрөйҙәр. Йорттарҙың ишеген йоҙаҡламайҙар, берәүгә лә шик тотмайҙар. Мейесте аш-һыу әҙерләр өсөн генә яғалар, утын бында алтынға бәрәбәр. Ҡышын да, сатнама һалҡында ғына тотоналар утынды, өшөмәҫ өсөн, уларса, йылы кейенеү ҙә етә.

Тағы бер кис етте. Иртәгә 5000 метр бейеклекте “буйһондора” алырмын һымаҡ. Алла бирһә, Горунгҡа ла күтәрелермен.

Аттарға һаман да әүәлге кәрҙәре ҡайтмаған әле, Дордже уларҙы ашарға ебәрҙе. Үҙебеҙ йәйәү менәсәкбеҙ тауға. Кистән рюкзактарҙы тикшереп, иң кәрәкле әйберҙәрҙе генә тултырып ҡуйҙыҡ. Йоҡом йоҡо булманы, әммә баш әйләнеү, күңел болғаныу һиҙелмәне. Хужа беҙгә юлға тип өс литрлы термосҡа непал сәйе яһап ҡуйҙы, бешкән бәрәңге, көлсә төрөп бирҙе.

Таң ҡыйылыу менән, ике ҡая араһындағы һелкәүес кеүек бөгөлгән юлдан өҫкә үрмәләй башланыҡ. Дордже, мине хәстәрләп, йыш ҡына туҡтатып, сәй эсереп мәж килде. Шуға ҡарамаҫтан, башымда тотош бушлыҡ тоям, ә йөрәгем йыш һәм ҡаты итеп ҡаға, ҡорһаҡһыған мискәгә ҙур сүкеш менән бәрәләрме ни: организм кислород даулай. Ҡарлы түбәләр яҡыная, уларҙың һалҡын тыны айырым-асыҡ һиҙелә. Ҡаялар, гүйә, беҙгә боҙло телдәрен һуҙа, үсекләй, ымһындыра. Боҙ ҡатламынан теремек шишмәләр бәреп сыға ла дәртле сылтырап азатлыҡҡа ашҡына һәм, күп тә үтмәй, тағы таш араһына, ҡар аҫтына инеп шымая.

Ете сәғәт самаһы артылдыҡ тауға. Юл ырамай, ун саҡрымды саҡ-саҡ үттек. Билемде яҙып, тирә-яҡты байҡаным. Ошондай ҙа ҡырыҫ, шул ҡырыҫлығы менән гүзәл урындар булһа була икән донъяла! Горунг артылышының арҡа үҙәге шыма, ап-асыҡ. Унда күтәрелгән кешегә дүрт тараф та ус төбөндәй күренеп тора, һәм иң мөһиме – инде үргә тырмашырға түгел, ә түбәнгә, ҡайтыу яғына, ыңғайларға һәм һөйөнөс, еңеү тойғолары кисерергә!

Тау башында өшәнес, әсе ел, әллә ҡайҙан юлын табып, ҡуйынға кереп бара. Ләкин яуланған үрҙә ул хаҡта уйларғамы ни? Ана, таштан юнып яһалған кескәй пирамидалар, доғалы флажоктар гирляндаһы. Ҡайҙа ҡарама, мантра һүҙҙәре

соҡоп яҙылған таштар күренә, улар бында – боронғо хәтер, рухи сафлыҡ һаҡсылары һымаҡ. Ҡар юҡ, тиһәң дә була. Беҙҙе түбәләре 6000 метр бейеклеккә еткән ундарса тауҙар уратып алған. Унда, егерме саҡрымлап арауыҡта, башы болоттарға тейеп, күккә олғашып үҙәк Гималайҙың ғорурлығы Аннапурна тора. Эйе, Владимир Высоцкий әйткәнсә: “Тауҙарҙан тик тауҙар ғына мәғрур...” (“Выше гор могут быть только горы”).

Һуҡмаҡ ситендәге һуйырташтарға арҡа терәп тамаҡ ялғарға ултырҙыҡ. Ҡыңғырау зыңлағаны ҡолаҡҡа салынды. Ул да булмай, йөк артмаҡлаған ике як һәм ике портер күренде: ҡара күҙлек кейгән туристарҙы оҙатып киләләр икән. Улары беҙҙең “Намастэ!” тип сәләмләүебеҙгә лә иғтибар итмәй үтеп китте. Ныҡ арығандарҙыр. Непалдар ҡулдарын күкрәктәренә ҡуйып, баш эйеп яуап бирҙе, исмаһам. Әлдә алдан һиҙеп ҡалдыҡ, йоҡомһорап ултырһаҡ, быларҙың эре һөйәкле, ялбыр йөнлө яктары беҙҙе тапап китмәҫ, тимә...

Непал сәйен эсеп алғас, теремекләнеп киттем. Аяғыма тороп баҫтым да ҡоласымды кирҙем: “Һаумы, Гималай! Йәшә, ҡөҙрәтле матурлыҡ! Ишет мине, мәңгелек!” Күңелемдәге һоҡланыу ауазы, рухым болоҡһоуҙары барып етһен ине ошо минутта мине уратып алған сихри тарафҡа, анау гранит ҡаяларға, аҡ бүрекле бәһлеүән тауҙарға, әкиәти аҡ караптар кеүек йөҙөп барған мамыҡ болоттарға... Ер үҙе түгелдер был, ә икенсе бер ят, илаһи планеталыр?! Мин бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла ошондағылай, гүйә, ҡул һуҙымында ғына торған көмөш түбәләрҙе күргәнем булманы.

Горунг иҫ киткес көслө энергетикаға эйә, күрәһең. Ярты көн эсендә 15 саҡрым үр юлы үтеүемә, кислород етешмәүгә ҡарамаҫтан, үҙемде ярайһы яҡшы тоям. Көс-ҡеүәтебеҙҙе йәүкәләп ебәрәйек тип, виски йотоп алдыҡ. Былай ҙа көләкәс Камал бигерәк шуҡланып китте. Шул арала минең ҡотомдо осороп, аҙаҡтан шул сәбәптән тәгәрәп ятып көлөргә лә өлгөрҙө.

– Йети, ана, йети килә! – тип шыбырланы был минең ҡолаҡҡа, ҡара таштар менән сыбарланған тау һыртына ымлап. Кеше ҡиәфәтендәге бер дәү зат беҙҙең яҡҡа килә ята һымаҡ? Ҡап-ҡара үҙе. Арҡа үҙәгенән һалҡын тир йыбырлағанын тойҙом... Шул саҡ артыҡ ҡыланғанын аңлап алған Камал әйтә һалды:

– Ҡурҡма, Камил, йети һинең менән минең кеүек ябай кешеләрҙе ашамай ул! – Үҙе тағы иҫе китеп көлә...

Тауҙан төшөп барғанда ҡая ташында бөркөт күреп ҡалдым. Ошондай бейектә лә бөркөттәр оя ҡора икән, ана бит, батшалай ғорур ултыра! Фотоға төшөрәйем тиһәм, һиҙеп ҡалды, ахырыһы: миңә ҡырын ғына ҡараны ла осоп китте, ҡеүәтле ҡанаттарҙың ҡапылдағаны ҡолаҡта салынып ҡалды.

Муктинатхҡа аяғымды саҡ һөйрәп ҡайтып индем, иҫ белмәй йоҡлармын инде, тип уйлағайным да, киреһенсә килеп сыҡты. Зиһенем хайрани тәьҫораттарҙы үҙләштерәлер, ә тәнемә кислород етмәйҙер, моғайын.

Төш еткәс кенә ҡайтырға ҡуҙғалдыҡ. Минең арҡала шулай һуҙланыҡ. Дордже һарымһаҡ өйрәһе эсереп тә ҡарай – юҡ, тағы түшәккә ауам, ни йоҡламайым, ни уянмайым: тышта уйнаған бала-сағаның сыр-сыуын, һауыт-һаба шалтырағанын, ишектәр асылып-ябылғанын ишетәм, ә барыбер ойоп тик ятам. Кисәге тауҙар ҡосағындағы мәңгелек сихри тынлыҡтан һуң был тауыштар ысын да түгел кеүек...

Хушлаштыҡ. Мухтинатх монастырын, был изге, гүзәл яҡтарҙы, зәп-зәңгәр күк көмбәҙен тағы бер ҡат күҙҙән үткәрҙем, йөрәк хәтеренә һалдым. Көндәр беҙгә ыңғай торҙо, рәхмәт төшкөрө. Ел-дауыл булманы, ҡар-ямғыр яуманы. Камал әйтеүенсә, Непалға сәйәхәт итеү өсөн иң уңайлы ваҡыт – март йәки октябрь

айҙары. Ҡышын һалҡын, ә йәйен ҡойма ямғырҙар, етмәһә утыҙ градус эҫелек. Бында февраль аҙағында – март башында килеп, мин отҡанмын икән шул. Тибеттағы Яңы йыл һәм Шива алланың тыуған көнө айҡанлы тантаналарға юлығыуым иһә – үҙе бер һирәк бәхет.

Аттарыбыҙ арыу уҡ хәлләнгән, мин дә, ун ике сәғәт йоҡлап алғас, үҙемде һәйбәт тоям. Күпмелер юлды йәйәүләп үтергә булдым, үҙ аяғыңда йөрөһәң, тирәйүнде яҡшыраҡ тояһың. Малҡайҙарға йөктө артмаҡлағас та рәхмәт, бер уйлаһаң.

Бәй, мин шәп атлайым икән, каруаным әллә ҡайҙа артта ҡалған даһа. Теге аномаль йылғасыҡҡа ла алдан барып еттем, ул һаман да тау үркәсенә ағып ята! Антигравитация күренешеме был, әллә әҙәм балаһына аңлашылмаҫ берәй көс әмәлеме? Бығаса күргәнем генә түгел, уҡығаным да юҡ ине ошондай хәлдәр тураһында. Ә бит был тирәнән донъяның төрлө илдәренән килгән йөҙҙәрсә туристар үтә, ә береһе лә яҙып сыҡмай, хәбәр итмәй, ғәжәпләнмәй?

Тарлауыҡҡа олғашып барғанда тағы бер нисә портерҙы осраттыҡ, арҡаларына 60–90 килолы кәрзиндәр һалып киләләр. Кәрзиндәренең бауын маңлайҙарына элгәндәр.

Кали Гандаки беҙҙе елләп, дауыллап ҡаршылаңы. Әсе һалҡын ел елеккә үтә. Иренеп, йылы кейемемде алып киймәй килә инем дә, һыуыҡ үҙәккә үткәс, кейенергә мәжбүр булдым. Ныҡ өшөгәнмен икән, атларлыҡ хәлем дә ҡалмағас, Дордже ярҙамында атҡа менеп ултырҙым. Йылынып булмай, ҡалын пуховик-курткамдың да файҙаһы юҡ, эйәрҙә туң ағас шикелле һерәйеп ултырам. Ә йоҡаҡ ҡына куртка кейгән Дордже моңгор-моңгор көйләп килә, өшөмәй ҙә. Әммә минең Непал пейзаждарына сикһеҙ һоҡланыуым туңмағайны, тирәйүндәге күренештәрҙе күҙ яҙҙырмай ҡарап барырға хәлем бар. Тарлауыҡ үҙенең ҡабатланмаҫ төҫө, ҡырыҫ, хатта ки шомло матурлығы менән мине онотолмаҫ тәьҫораттарға күмә...

Джомсомға барып ингәндә эңер төшкәйне. Урамда, ҡом осортоп иҫкән көслө елгә иҫтәре лә китмәй, бала-саға уйнап йөрөй, уларҙың шат тауыштары күңелде йылыта, һәм ҡорошоп, өшөп бөткән йөҙөңдә йылмайыу ишаратын тояһың. Ә ишектәре йоҙаҡ күрмәгән өйҙәр электр лампаларының һүрән яҡтыһына сумған, унда киске аш әҙерләнә, телевизор эшләй, бишектә сабый тирбәлә.

Йылы көсәп, өйгә ашыҡтым. Үҙемде робот итеп тоям, аяҡ-ҡулымды саҡ ҡуҙғатам. Әммә өй эсендә лә тыштағы кеүек һалҡын, ярай ҙа, исмаһам, ел юҡ. Өшөүҙе белмәгән ниндәй сыҙам халыҡ икән был непалдар? Мин дер-дер ҡалтырап бөркәнеп ултырам, улар рәхәтләнеп көлдәксән йөрөй.

Ашханала ҡайнар непал сәйен эсеп алғас, ниһайәт, тәнемә йылы йүгерҙе. Террасаға сығып баҫтым. Торомбаштай ҡап-ҡара күк йөҙөндә утлы күмерҙәй йондоҙҙар яна, шул йондоҙҙарҙан ергә көмөш яҡты һибелә. Бында Йыһандан төшкән яҡтыны һауа "йотмай", йондоҙҙар төндәрен күҙ яуын алып сағыу яналар – тауҙарҙың тағы бер үҙенсәлеге.

Иртәнге сәғәт һигеҙҙә үк Покхарала инек. Камал беҙҙең самолеттарҙың расписание буйынса теүәл осоуҙарына ғәжәпләнеп бер була. Был һирәк хәл, имеш. Самолеттың ике-өс сәғәткә һуңлауы – Гималайҙа ғәҙәти ваҡиға, ти. Бына Катмандуға ла ваҡытында килеп төштөк.

Непал бер осорҙа өс короллектән торған, уларҙа бер туған өс король хакимлыҡ иткән. Һәр ҡайһыһының үҙенең баш ҡалаһы булған: Катманду, Патан, Бхактапур. Королдәр бер-береһенән уҙҙырырға, күркәмерәк һарайҙар, храмдар төҙөргә, байлыҡтары менән фәстерергә ынтылған. Патан ҡалаһындағы храмдар иң матур, затлы йыһазландырылған тип танылған. Әлеге көндә лә улар

яҡшы һаҡланған. Патан, әйткәндәй, “гүзәл ҡала” тигәнде аңлата. Ул Катмандунан биш саҡрымда ята, ғәмәлдә уларҙың сиктәре ҡушылып та бөткән инде. Патан үҙенең оҫта тимерселәре, бронза ҡойоусылары менән дан тота.

Берсә айырылып, берсә берләшеп, тағы тарҡалып, Непал короллектәре тарихи тетрәнеүҙәрҙе күп кисергән. Ниһайәт, 1768 йылда король Притви Нараян Шаг тотош илде яулап алған һәм бөгөнгө көндә лә дауам иткән Шах династияһына нигеҙ һалған.

XVII – XIX быуаттарҙа Британия Непалды үҙенең колонияһы итергә күп тапҡырҙар ынтылып ҡарай, әммә тауҙар иленә үтеп инә алмай.

... Баш ҡала беҙҙе таныш шау-шыуы менән ҡаршы алды. Отелдә шул уҡ бүлмәмә урынлаштым. Көпләнмәгән ҡыйыҡ башына менеп Катманду тормошона күҙ һалдым, ҡолаҡ һалдым... Борон замандарҙа был урындарҙа тәрән, оло күл ятҡан, тиҙәр. Әммә йөҙ мең йыл элек ҡаршылағы тау ишелеп, күл ирекkә сыҡҡан да Ганг йылғаһына ағып киткән. Ә мин тигеҙ урынға одеял йәйеп ял итергә яттым, ҡояштың йылы, иркә нурҙарында кинәнеп, рәхәтлеккә сумдым.

Непалдағы һуңғы көнөмдө яҡындарыма бүләк эҙләп уҙғарҙым. Бындағы рәссамдарҙың маһирлығы хайран ҡалдырҙы, оҙаҡ ҡына һайланырға тура килде, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөтә картиналарҙы ла алып ҡайтып булмай шул. Лавкаларҙа һатыулашырға өйрәнеп алдым: непалдар, сувенирға күҙең төшкәнен белһә, хаҡты төшөрөргә риза ғына торалар. Һатып алыусы битараф булһа, бәхәсләшмәһә, уларҙың кәйефе төшә. Камал да алдан әйтеп ҡуйҙы: “Һатыулашмаһаң, һин, тимәк, алйот, тәрбиәһеҙ кеше һаналаһың”,– тип. Сауҙа араһында йөрөп тиҙ үк йышылып китәһең икән, ҡыҙып-ҡыҙып һатыулаша башлағаныңды һиҙмәй ҙә ҡалаһың, торғаны бер артисҡа, психологҡа әйләнәһең. Ләкин артыҡ мауығып китергә лә ярамай, сама тойғоһо кәрәк. Хаҡты ныҡ төшөрөп ебәрһәң, сувенирҙан ҡолаҡ ҡағыуың да бар. Ә барыбер непалдар һатып алыусыға хөрмәт, итәғәт менән ҡарай. Ҡабатлап әйтмәй булдыра алмайым: улар һәр саҡ, һәр ҡайҙа ла көләс йөҙлө. Әйтерһең дә, уларҙан бәхетле кеше юҡ донъяла. Ә бит күпселеге фәҡирлектә көн күрә. Әммә бай йәшәгәндәргә көнләшмәйҙәр, асыу тотмайҙар, сөнки улар бәхетте үҙҙәренсә күҙаллай, ғүмерҙең һәр мәлен ҡыуанып ҡабул итә, барыһына ҡәнәғәт була, һөйөнә белә. Их, беҙгә лә шулай йәшәргә өйрәнергә ине, тим.

Непал – ысынлап та, ғәжәйеп ил. Йомарт йөрәкле, саф күңелле ил. Бәлки, донъяның иң бейек Гималай тауҙарының изге йоғонтоһолор был? Бындай ыңғай энергетика һауала эленеп тора һәм кешеләргә Хоҙай тарафынан бирелгән иң яҡшы сифаттарын асырға ярҙам итә, бөтә әҙәм балаларының да донъяға тиң итеп яратылғанына инандыра. Матди әйберҙәр уйҙы биләмәй, карьеранан, аҡсанан ҡәҙерлерәк ҡиммәттәр барлығын аңлайһың. Ни генә тимә, Гималай тауҙары – Аллаға яҡынайтылған, үҙенсәлекле батшалыҡ.

Был сәйәхәт, Непал менән танышыу, тулҡынландырғыс тәьҫораттар хәтеремдән ғүмергә юйылмаҫтыр. Ваҡыт үтеү менән ул хәтирәләр яҡтылығы һүнмәй, киреһенсә, балҡыуыраҡ була бара һәм тауҙар ҡосағындағы көләс илгә саҡыра. Беҙ яңынан күрешербеҙ һымаҡ. Ышанам: Непал менән ҡайтанан осрашыу миңә бәхетле йәшәү сәнғәтен бүләк итер, моғайын.

**Руссанан Гөлнур ЯҠУПОВА тәржемәһе.**

# «Күңелемдә - донъя серe»





Зөлфирә ҠАРАҒУЖИНА

## Бикембәткә

Бикембәтем* — бик ҡиммәтле йылғам,
Бик ҡиммәтле тауым, урманым.
Ҡиммәтемдең еләк-емештәрен
Тирә-тирә күпме ураным.
Баландары тирелеп,
Бөрлөгәне бөрөлөп,
Өҙөлөп төшөп тора әберсә*.
Кәкүк саҡыра, түк-түк килеп,
Урман хәлен баҫа «хәбәрсе».
Абайыраҡ, ябайыраҡ булһаң,
Бала саҡтан һаман иҫемдә әле, —
Япраҡ ышығынан сәләм бирер
Эшләпәле бик шәп әфәнделәр.
Ҡиммәте лә, өммәте лә — һыуы,
Бар һиммәтте һыуы йыуата.
Мине өләсәйем менән ялғай,
Быуаттарҙы ялғай быуатҡа.
Бикембәтем — улым юрғаны,
Бикембәтем — ҡыҙым ҡорғаны.
Ата-бабаларҙы күргән шаһит,
Ата-бабаларҙың ҡурғаны.

---

* Бикембәт — Әбйәлил районы Күсем ауылы аша аҡҡан йылға.
* Әберсә — (диал.) ҡурай еләге.

---

Зөлфирә Ҡарағужина 1974 йылдың 10 мартында Әбйәлил районы Күсем ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт университетын тамамлай. Әлеге көндә «Башҡорт энциклопедияһы» ғилми нәшриәтендә мөхәррир булып эшләй.

## *Көртмәле*

*Көртмәле лә үҫер урманым бар,*
*Белгән генә кеше үтмәле.*
*Көртмәле лә тигән шул емеште*
*Йыйыр мәлем әле етмәне.*
*Көртмәле лә түшәлеп, ай, үҫәлер,*
*Ҡараңғы ла ерҙә бешәлер.*
*Көртмәле лә тигән татлы емеш*
*Урман дымын ғына эсәлер.*
*Көртмәле лә емеш, эй, көртмәле,*
*Тиҙҙән үтер бынау көрт мәле.*
*Белгән генә кеше һине тәмләр,*
*Йәйҙәреңә мине көтмә әле.*

## *Донъясығым*

*Иртәләрем башланалар «һәү-һәү» менән,*
*Башланалар «һаумы»нан.*
*Көтөү ҡаршылайым һәү-һәү һәүләп,*
*Көтөү ҡыуалайым «һаумы»лап.*
*«Һаумы, һаумы!» Бөтә ауыл менән*
*Һаулыҡ һорашабыҙ таң менән.*
*Имен, шөкөр, һау булайыҡ, тиеп*
*Һаулыҡ өләшәбеҙ аң менән.*
*«Һаумы»нан, саф һауанан торған иртә*
*Насарлыҡтарға бер кәртәлер.*
*Кешеләргә тәрбиә биреүсе лә*
*Мал бикләнер ябай кәртәлер.*
*Ана, һыҙылып, ҡыҙарып*
*таңым ата:*
*— Һаумы, һауам, — һау, һау!*
*Һәү-һәү, һәүкәш, һауайым.*
*Бына-бына кирелеп-һуҙылып*
*төнөм етер:*
*— Әү-әү, балам,*
*Бәү-бәү, малайым.*
*Донъясығым өйөрөлә дәү тирмәлә,*
*Дәү тирмәлә әүҙәр тирәләп.*

## *Дауа*

*Өмөтһөҙлөк йолоп барған мәлдә,*
*Ҙур упҡынға убып барған мәлдә*
*Кинәт кенә тағы пәйҙә булдың,*
*Ҡулың һуҙҙың, наҙлап үбеп алдың.*
*Һин дә минең кеүек ҡайғыраһың,*
*Берсә көләң — мине әләкләйһең.*

Моңһоу күңел пыран-заран килә —
Хәс тә онмон, хәс тә иләктәмен.
Күңелемдең түрге ишеге лә
Һил асыла, шағыр-шоғор ине.
Үпкәләп тә, хатта шелтәләп тә
Миңә шиғыр килде.
Килде сығырымдан сығыр мәлдә,
Һығылып та йығылырҙай мәлдә.
Был тормоштоң ҡаты төйөндәре
Алҡымыма тығылырҙай мәлдә.
Килде һулар һауа булып,
Дауа булып.

---



## Рита ХӘСӘНОВА

### Юғалтма

Тәҙ(е)рәңдә үҫһәм гөлдәр булып,
Һыуҙар ҡой һин, берүк һулытма.
Күктә янған шаян йондоҙ бит мин,—
Серле ҡараш ташла — онотма.
Алтын булып һиңә мин табылһам,
Һаҡла, зинһар, берүк юғалтма.
Устарыңа тамһам тамсы булып,
Ҡояш нурҙарынан урлатма.
Ҡарурманлы, бик ҡатмарлы булған
Үҙ хисеңдә үҙең аҙашма;
Башҡаларҙы минән яҡшы күреп,
Бүтәндәргә мине алмашма,
Һөйөүеңде бер үк юғалтма!

---

*Рита Хәсәнова 1989 йылдың 11 ғинуарында Бөрйән районының Мәһәҙи ауылында тыуған. Ауыл мәктәбендә 6-сы синыфҡа тиклем уҡығас, 7-се синыфҡа Байназар урта мәктәбенә бара. Тап ошо осорҙа шиғырҙар яҙа башлай.*

*Әлеге ваҡытта БДУ-ның Сибай институтында башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегенең 4-се курсында белем ала. Институтта эшләп килгән «Инеш» әҙәби түңәрәгенең етәксеһе.*

## Илтерһеңме?!

*Һиңә киләм таңғы елдәр менән,*
*Ҡалҡҡан саҡта ҡояш офоҡтан.*
*Үпкәләмә, төштәреңде бүлеп,*
*Сәстәреңдән наҙлап уятһам.*
*Һиңә киләм толпар болоттарҙа –*
*Аҡбуҙатың менән мине көт.*
*Бейек ҡаяларҙа ҡаршы ал һин,*
*Аҡ болоттар бигерәк бейек бит.*
*Һиңә киләм ябай бер ҡыҙ булып*
*Күҙең асыр өсөн бәхеткә,*
*Ҡулдарымды алып ҡулдарыңа*
*Илтерһеңме һөйөү-тәхеткә?!*

## Һине эҙләп

*Аҡ ҡауырһын болоттарҙа икәү*
*Йөҙгәйнек беҙ хыял күгендә,*
*Ҡойонъайныҡ ҡояш нурҙарында –*
*Бәхет донъяһының түрендә.*
*Пар күгәрсен булып осҡан саҡта*
*Бөтмәҫ шатлыҡ ине күңелдә.*
*Хушлашҡайныҡ, осрашырбыҙ, тиеп,*
*Икәү гиҙгән йыһан сигендә.*
*Хушлаштыҡ та, беҙ аҙаштыҡ, ахыры,*
*Табабыҙ тип йыһан сиктәрен.*
*Һине эҙләп көн дә урап ҡайтам*
*Хыялымдың серле күктәрен.*

## Яраттыммы?!

*«Яраттыңмы мине?» – Һорауыңдан*
*Әллә ҡурҡтым, әллә баҙаным.*
*Үткәндәрҙе бермә барлаһам да,*
*Аныҡ яуап таба алманым.*
*Яраттыммы? Барлап үткәндәрҙе,*
*Һәр минуттан яуап эҙләйем.*
*Бергә саҡта бәхетле булыуым*
*Яратыуҙы? – хатта белмәйем...*
*Яраттыммы һине? Шул һорауҙы*
*Ҡат-ҡат бирәм хәҙер үҙемә.*
*Юлдар айырылғанда бер йөк итеп*
*Ҡалдырғандай уны һин миңә...*

## ЯУЛАНҒАН ҮРҘӘР БАҺАҺЫ

*(Нәжибә Әминева шиғриәтенә бер ҡараш)*

Нәжибә Әминева — ауылда тыуып, ауылда үҫкән һәм ғүмере буйы шунда уҡытыусылыҡ итҡән шағирә. Ауылда тороп, төп эшенән тыш ижад менән дә шөғөлләнергә ваҡыт тапҡан ҡатын бөйөк таланттар бейеклегенә күтәрелергә ынтылып йәшәй икән, тимәк, тәбиғәт уға тылсымлы көскә эйә булған күңел нескәлеген мул итеп биргән. Тимәк, башҡортса ла, русса ла бер төрлө яңғыраған һәм цивилизация тип йөрөтөлгән мөхиттең үҙәгендә ҡайнамайынса ла мәҙәни үҫештең юғары кимәленә үрләргә мөмкин. Был — асыш түгел, бары тик күптәнге хәҡиҡәтте раҫлаусы бер факт ҡына. Сөнки донъя мәҙәниәте тарихында ҡаҙына башлаһаң, ҡала шау-шыуынан алыҫта — тәбиғәт ҡосағында йәшәп, сәнғәт өлгөһөнә торорлоҡ әҫәрҙәр ижад иткән байтаҡ авторҙың (яҙыусыларҙың да, шағирҙарҙың да, рәссамдарҙың да, хатта композиторҙарҙың да) исемен иҫкә төшөрөргә булыр ине. Ошонан сығып, ауыл ерендә быуаттан-быуатҡа тәбиғи рәүештә формалашып килгән рухи цивилизация ҡала тормошона яһалма рәүештә индерелгән матди цивилизациянан юғары тормаһа ла, һис тә кәм түгелдер, тимәксемен.

Н.Әминеваны «төп эшенән тыш ижад менән дә шөғөлләнергә ваҡыт тапҡан шағирә» тинем дә тағы уйға ҡалдым. Уның төп эше лә ифрат яуаплы һәм ифрат күп көс һалыуҙы талап итә торған хеҙмәт бит. Айырма шунда ғына: тәүгеһе уҡытыусы Әминеваның тамағын туйҙырһа, икенсеһе шағирә Әминева өсөн йән аҙығы булып тора. Был — мин уйлап сығарған уйҙырма түгел. Уны йөпләү өсөн шағирәнең үҙенә мөрәжәғәт итергә мөмкин. «Шиғыр яҙғанда» тигән әҫәрендә ул бына нимә ти:

*Шиғырымдан*
*Йән риза мәл*
*Һирәк була.*
*Уны нисә үҙгәртергә*
*Кәрәк була.*

*Шәберәк әйтәм*
*Тип, моғайын,*
*Яҙған яҙа...*
*Йә минең кеүек —*
*Кисерер өсөн*
*Татлы яза...*

Заман һәм шиғриәт темаһын күтәргән «Ышанам» тигән икенсе бер шиғырҙа «татлы яза»ның баһаһы бөтә тәрәнлегендә асып һалынған. Ҡарап тороуға шиғыр йомшаҡ, әсерәк тел менән яҙылған һымаҡ:

*Ташҡа баҫылды шиғырым,*
*Хаҡы —*
*Аҙ ғына аҡса...*
*(Шиғыр тип йәшәйем, тиһәң,*
*Тәүбә, үлерһең аҫҡа...)*

Ләкин йөкмәткеһе менән ул бөтөнләй икенсе тәьҫир ҡалдыра. «Үҙем өсөн түгел, миңә шиғриәт өсөн ғәрлек!» , «Бер һинең генә баһаң юҡ, бер хаҡың юҡ, әй, шиғыр» тигән юлдар айырыуса көслө яңғырай. Ә бына быныһы инде:

*Байҙарынан замананың*
*Шиғриәт ҡасҡан инде.*
*Шиғыр үтмәҫ —*
*Улар күңелен*
*Күптән май баҫҡан инде, —*

эстетик зауыҡтың беҙҙең дәүергә хас кимәлен күрһәтеп тороусы факт. Бәхеткә күрә, һуңғы ике строфаға һалынған фекер шиғриәткә булған һөйөүҙе тамам һүндермәй әле:

*Туҡта, күңел, замананы*
*Тиргәгән ниндәй йыр был?!*
*Шундай икән заман,*
*Тимәк,*
*Шиғыр кәрәк осор был!*

*...Үтмәй шул донъяға һүҙең,*
*Әллә ни һөйлә, ни әйт...*
*Тик ышанам: һиндә ул һүҙ —*
*Донъя тетрәнерлек ҙур һүҙ*
*Бер табылыр, шиғриәт!*

Шиғриәткә, ижад серҙәренә бәйле уйланыуҙар Н.Әминеваның «Ышандырһаң әгәр», «Беләм», «Бөтәбеҙҙең дә була», «Йән йылыһы һаҡлана әле бында», «Риза булыр ине...», «Бер һыҙланыу йәшәй йәндә...» тигән шиғырҙарына ла хас. Быуаттар ҡауышҡанда ижад ителгән «Ышандырһаң әгәр»ҙә шиғриәткә генә түгел, беҙҙең бөтә булмышыбыҙға философик ҡараш төбәлгән. Автор фекеренсә, кеше ғүмере — мәңгелектә тарих һалған эҙгә барып тоташа торған бәләкәй генә бер мәл. Беҙгә хәтлем дә ул тигеҙ, матур тормош тураһында хыялланып йәшәгән. Алыҫ киләсәктә беҙҙең хаҡта ла шулай уйлаясаҡтар. Әлегә иһә хаҡтар үҫә, тик баһаһы төшә һаман шиғри һүҙҙең. Киләсәк көндәрҙең яҡшырыуына әллә ни ышаныс булмаһа ла, автор барыбер өмөтөн өҙмәй:

*Их, ышаныр инем,*
*Заман, шуға*
*Ышандырһаң әгәр,*
*Шул көндәргә*
*Аҙ булһа ла үҙең*
*Оҡшап торһаң әгәр.*

Ҡайһы бер өлкән быуын ҡәләмдәштәренә эйәреп, Н.Әминева шиғриәткә, шағирлыҡҡа ифрат ҙур яуаплылыҡ менән ҡарай, хатта уларға табына, тиергә мөмкин. Халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең «Һатылырға әҙермен бөгөн, минән Туҡай сыҡһа иртәгә» тигән һүҙҙәренә таянып ижад иткән «Риза булыр ине...» исемле шиғырында, мәҫәлән, ул, һүнергә иртәрәк булһа ла, ун ете, ун һигеҙ йәшендә дөрләп янған бөйөк Рәшит Назаров кеүек ҡабынырға ризалығын белдерә.

Йә иһә «Бер һыҙланыу йәшәй йәндә...» тигән шиғырҙы алып ҡарайыҡ. Ул — өр-яңы әҫәр, тәүләп донъя күрҙе. Шиғырҙың төп идеяһы түбәндәге юлдарға төрөлгән:

*Ҙур донъяны йоҙроҡ ҡәҙәр*
*Йөрәгеңдә тойоу ул.*
*Бөтә бәхетле, бәхетһеҙ*
*Йыйылып йәнеңә һыйыу ул.*

Бына шулай аңлай лирик герой үҙенең ерҙәге билдәләнешен һәм бурысын. Шиғырҙың авторы ла уға бәрәбәр, тиһәк, һис тә арттырыу булмаҫ.

Үкенескә күрә, тиергә микән, быға тиклем Нәжибә Әминева тураһында әҙәби тәнҡит мәҡәләһе уҡырға тура килмәне миңә. Ярай әле, уҙған йылда «Писатели земли башкирской» тигән библиографик белешмә донъя күрҙе. Унда, Н.Әминеваның поэтик ижады фекерҙәрҙең һәм образдарҙың фәлсәфәүилеге менән айырылып тора, шағирә кешенең нескә күңел

ҡылдарын оҫта итеп һүрәтләй белә, тиелгән. Бәләкәйҙәрҙән дә бәләкәй был мини-очерктың авторы кемдер, әммә, кем булыуына ҡарамаҫтан, ул шағирәнең ижадына хас төп сифатты һәм йүнәлеште бик дөрөҫ төҫмөрләгән. Һәм, әйтергә кәрәк, Н.Әминева һуңғы йылдарҙағы ижадында ла ошо йүнәлешкә тоғро ҡалған. Быны раҫлау өсөн уның байтаҡ шиғырҙырына («Ҡояш тотолғанда», «Уҡып барам...», «Күңелдә бит...», «Ғорурлығыма тейҙе», «Әрем», «Мин риза», «Уйлат, донъя», «Туғандар кәмегәндә», «Ҡанатланһаң — икенсе», «Һүҙҙәр», «Кисер, Донъя!..», «Президент киләһе көн», «Бына ҡасан айырылаһың...», «Маяҡ», «Минор шиғыр», «Ҡала урамы. Ел, ямғыр...», «Нисек әйтә алдым...», «Күҙәтһәң...», «Йәшәге килә!», «Көтөүе рәхәт») туҡталырға булыр ине. Ләкин журнал мәҡәләһе сиктәрендә уларҙың ҡайһы берҙәре менән генә ҡәнәғәтләнергә тура килер.

Н. Әминеваның яңы быуат башында уҡыусы иғтибарына тәҡдим иткән тәүге шиғыры «Ҡояш тотолғанда» тип атала. Йыһан киңлектәрендә һирәк-мирәк ҡабатланып торған астрономик күренеште шағирә тәрән мәғәнәгә эйә булған фекер әйтеү өсөн ифрат оҫта файҙаланған: әгәр кешелек ғәҙәттә ҡояш тотолғанда кисерелә торған шомло уйҙарҙы онотмайса, яҡты донъяның ҡәҙерен белеп йәшәһә, Ерҙә юҡҡа ҡан да ҡойолмаҫ, көс тә түгелмәҫ ине:

*... Кешелек юҡҡа*
*Түкмәҫ ине, бәлки,*
*Бөгөн ҡанын, көсөн,*
*Берҙәм янһа кинәт*
*«Йәшәү» тигән*
*Оло бер йәм өсөн,*
*Бөтөнөбөҙ бергә*
*тетрәнһәк, тим,*
*Яҡты донъя өсөн!..*

Ысынлап та, Н.Әминеваның лирик геройы, Ер йөҙөндә ғәҙелһеҙлек, миһырбанһыҙлыҡ, шәфҡәтһеҙлек, әхлаҡһыҙлыҡ кеүек күренештәрҙең һиҙелеп артыуына ҡарамаҫтан, фани донъяның һәр көнөнән йәм табып йәшәргә тырыша. Һәм был тема, шиғырҙан шиғырға көсәйә төшә, торған һайын киңәйә, тәрәнәйә һәм үткерләнә бара. «Мин риза» тигән шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, башта яңылыҡһыҙ, мөғжизәһеҙ, бары ла бер төҫлө уҙған көндәре менән ҡәнәғәтһеҙлеген белдерә, бер көнгә генә үлеп ҡарауҙы күҙ алдына килтерә һәм тәүбә итә. Шиғырҙың һуңғы строфаһында ул үҙенең баштағы уйынан кире ҡайта:

*Бына булыр бер яңылыҡ,*
*Бына булыр мөғжизә...*
*Туҡтай күрмә, ғүмеркәйем,*
*Һәр көнөңдән мин риза,*
*Мең риза!*

Донъянан йәм табып йәшәргә тырышыу теләге Н.Әминева шиғырҙарының хатта исемдәрендә лә сағыла. Дөрөҫ, ҡайһы берҙә моңһоуыраҡ, яманһыуыраҡ хистәр уятҡан юлдар ҙа осрап ҡуя. «Йәшәйһем килә» тигән шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, үҙенең киләсәген бына нисегерәк күҙаллай:

*Их! Үлгәс тә Ерҙең өҫтөн*
*Аҙыраҡ күреп торһаң ине.*
*Яңылыштарҙа*
*Ейәндәрҙе*
*Дөрөҫләккә борһаң ине...*

*Улар бәхетенә аҙ ғына*
*Һөйөнөп тә ҡуйһаң ине...*
*Майҙарҙа йәшел үләндең*
*Йәп-йәш еҫен тойһаң ине.*

Шуныһы мөһим: моңһоу хистәр яңғырап киткән хәлдә лә, яҡты донъяла йәшәү йәмен тойорға өндәгән был шиғырҙарҙың төбөндә ҙур фәлсәфә ята — көндәлек тормош фәлсәфәһе: беҙҙе сорнап алған ысын-

барлыҡ ваҡыты-ваҡыты менән ниндәй генә сюрприздар килтереп тыуҙырмаһын, ул барыбер ҡыҙыҡлыраҡ та, йөкмәткелерәк тә. Әгәр кеше гел үлем тураһында ғына уйланып йөрөһә, уның тормошо үтә лә күңелһеҙ һәм төҫһөҙ булыр ине. Өгөт-нәсихәткә ҡоролған «Йәшәү — ышаныу» тигән шиғырҙа ошо фекер оҫта әйтеп бирелгән. Шиғырҙың тәүге ике строфаһында (уларҙың һәр ҡайһыһы дүртәр юлдан тора) лирик герой үҙен ҡайғыларға бирешмәҫкә, шатлыҡтан бик шашмаҫҡа өндәй. Ун юлдан торған икенсе строфала иһә ошо сифаттарҙы тәрбиәләй алмағанына үкенә, сөнки уға ҡайғы — үтмәҫ, шатлыҡ — бөтмәҫ, ә ғүмер мәңгелек кеүек тойолған. Авторҙың әйтергә теләгәне һуңғы биш юлға һыйған:

*Их, йәшәү тип аталмай шул инде*
*Ҡайғы-шатлыктарҙан бушаныу.*
*Йәшәү бит ул —*
*Донъя — мәңгелек, тип,*
*Үҙең үлемһеҙ, тип ышаныу.*

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең заманда был хәҡиҡәттән ситкә тайпылыусылар ҙа аҙ түгел. Өгөт-нәсихтҡә нигеҙләнгән «Йәшәйек» тигән шиғыр — тап ана шул хаҡта. Ун һигеҙҙә үҙе теләп донъянан киткән егеттең йыназаһы таусирланған унда. Күләме һәм яңғырашы менән бәйеткә оҡшап тора. Әлбиттә, юғары мотивтар, рух күтәренкелеге, алдынғы идеялар менән һуғарылырға саҡырылған шиғриәт өсөн был тема бик ҡулай ҙа түгелдер. Әммә тормош уны үҙе көсләп таҡҡас, нишләмәк кәрәк? Шиғырҙа ике быуын сағыштырылған (ләкин бер-береһенә ҡаршы ҡуйылмаған!): үҙенә ҡул һалған йәштәр һәм «ятып үлер саҡтарҙы ла түҙем» үткәргән ҡарттар:

*Арҡаларынан күренә:*
*Йөктәр булған ауырҙан.*
*Теҙ өҫтөндәге ҡулдары*
*Тора тотош тамырҙан.*

*Һаҡ булһаҡсы ашығыуҙан,*
*Төҙәлмәҫ яңылышыуҙан.*
*Тамырланып бөтһөн ҡулдар*
*Йәшәүгә йәбешеүҙән.*

2007 йылда донъя күргән «Йәшәге килә!» тигән шиғыр ҙа — ошо сериянан. Ябай тормош фәлсәфәһе унда, бәлки, уғата ла көслөрәк янғырайҙыр әле:

*Тыуған өйҙәге кеүек үк*
*Булмай икән бар донъя.*
*Һиңә оло һөйөү менән*
*Тулмай икән был донъя.*

Ошо хәҡиҡәтте асҡан һәм аңлаған лирик герой артабан үҙенең хыялытеләге менән уртаҡлаша:

*Ә килә, килә йәшәге*
*Бар донъяны ҡаратып.*
*Бөтәгеҙҙән яратылып,*
*Бөтәгеҙҙе яратып.*

Әйткәндәй, «Йәшәге килә!»лә күтәрелгән проблеманың ҡайһы бер һыҙаттары бынан бер нисә йыл элегерәк яҙылған «Уйлат, донъя» тигән шиғырҙа ла һиҙелеп ҡалғайны. Уның лирик геройы, аҡ ҡайындарға, һабантурғайға, аҡ болоттарға, иҫкән елгә, ҡояшҡа мөрәжәғәт итеп, уларҙан «донъя матур», «донъя мине ярата» тип алдатмауҙарын, ялғанламауҙарын үтенә. Ләкин шиғырҙың аҙаҡҡы юлдарында фекер ағышы ҡырҡа үҙгәрә, сөнки алданып йәшәһәң дә, яҡты донъя — барыбер яҡты донъя инде ул:

*Кем йәшәй белмәй?*
*Моғайын, —*
*Кемдәр алдана белмәй.*
*Алдата бир, донъя,*
*Минән*
*Уйлат бөгөн — күҙөмдә:*
*Донъя матур*
*Һәм һөйкөмлө*
*Һөйәкмен, тип, үҙем дә...*

Н.Әминева шиғырҙарында тормоштоң фәлсәфәүи асылы йыш ҡына психологик күҙәтеүҙәр аша һүрәтләнә. Нигеҙендә антитеза алымы ятҡан «Һүҙҙәр» исемле ыҡсым ғына шиғырҙа, мәҫәлән, «йәшәү — үлем», «ҡайғы — шатлыҡ», «рәхәт — ҡыйын» кеүек парлы төшөнсәләргә ғәйәт тәрән мәғәнә һалынған: беҙҙең ғүмер ысынлап та ошо һүҙҙәргә бәйләнгән бит, хатта уларҙың ҡоло хәлендәбеҙ. Шуға ла был һүҙҙәр телдән төшмәй, телдән төшһә лә — күңелдә һаҡлана.

«Минор шиғыр» тип аталған әҫәрҙә лә лирик герой Ерҙә йәшәүҙең мәғәнәһе хаҡында уйлана. «Мәңгелек оҙон да, ник ғүмер бик ҡыҫҡа?..» тип баш вата ул. Һәм, күпме генә фәлсәфә һатһаң да, «һәр ғүмер фажиғә...» тигән һөҙөмтәгә килә. Шағирә өсөн был да — бер асыш.

«Һуңыраҡ кил» һәм «Кисер, Донъя!..» тигән шиғырҙар ҙа психологик күҙәтеүҙәргә бай. Улар икеһе лә үтә лирик әҫәрҙәр. «Һуңыраҡ кил»дең лирик геройы үҙенең холҡон, характер үҙенсәлеген асып һалған. Ул үҙенсәлек иһә — ғүмер баҡый икеләнеп йәшәү: ауыр, алыҫ юлға юлланырға икеләнә; хаҡ хәҡиҡәт телдән осор мәлдә икеләнеп ҡала; уның йәнендә күпме дөрөҫлөктәр бикләнеп ҡалған; ҙур эш башларҙан алда икеләнә. Ә бына әжәл алдында икеләнеп булмаҫ, ти лирик герой. Ғүмере ҡыҫылып барғанды һиҙенеп, ул: «Йәшәнемме, юҡмы, үтәһең бит, әйтсе, һынар ваҡыт?!» тип һорай үҙ-үҙенән. Шиғырҙың атамаһы һәм төп идеяһы уның һуңғы юлдарында асыҡланған:

*... Иртән яныр саҡта*
*һуңлап янам,*
*Янам кискә ҡалып...*
*Һуңлап, тимәйем дә,*
*Һуңыраҡ кил, әжәл,*
*Холҡом иҫкә алып.*

«Кисер, Донъя!..»ның төбөндә психологик кисерештәргә төрөп бирелгән тормош фәлсәфәһе ята: бала саҡта күҙҙән бәреп сыҡҡан йәш, үҫә төшкәс һәм олоғайғас, «тамаҡ төбөнә төйнәлгән төйөр»гә әйләнә. Эске төҙөлөшө буйынса был шиғыр «Һуңыраҡ кил»гә ауаздаш булһа ла, фекер ағышы йәһәтенән улар бер-береһенән күпкә айырыла: тәүгеһендә лирик геройҙың башлыса шәхсән уйхистәре, күңел торошо сағылыш тапҡан булһа, быныһында иһә ул уйхистәр авторҙы ярайһы уҡ етди дөйөмләштереүгә килтергән. Кеше күңелендә яралып, йылдан-йылға тәрәнәйә һәм ауырая барған ошо эске кисерештәрҙең һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә хәрәкәте түбәндәге юлдарҙа асыҡ сағылған:

*Тамаҡ төбөнән шул төйөр*
*Көскә генә йотола.*
*Йылмайыуҙар моңһоулана,*
*Хистәр эскә йотола.*

*Аңлата Донъя:*
*Ул — Әсә.*
*Тик уҫал үгәй әсә.*
*Уйынсыҡты мәңге бирмәй,*
*Бирергә теләмәһә.*

*Шул һаран үгәй әсәлә*
*Бәхет — тәтәй уйынсыҡ...*
*Кисер, Донъя!*
*Һине кем тип*
*Әйттермәҫ был ҡыйын саҡ...*

Н.Әминева ҡайҙа ҡарамаһын, шунда хикмәт таба. Фекерҙе раҫлау өсөн бер-ике миҫал да килтерергә мөмкин. Билдәле булыуынса, фармацевтика өлкәһендә киң генә ҡулланыу тапһа ла, халыҡта бигүк популярлыҡ яуламаған әрем атлы үлән бар. Ул бик күп төрлө була икән. Ләкин, ниндәй генә төрө булмаһын, әрем барыбер әрем инде. Яраға тоҙ һала торған әсе һүҙле әҙәмдәрҙе юҡҡа ғына «әрем тел» тип йөрөтмәйҙәр

бит. Бына ошо йәмһеҙ еҫле әсе үлән Н.Әминеваның да иғтибарын йәлеп иткән, һәм ул «Әрем» тигән шиғыр яҙған. Шиғыр ҙур түгел, әммә, әрем телле булмаһа ла, бик уҫал яңғырай: хатта асфальтты тишеп сыҡҡан әрем тиклем әрем дә ҡала тормошона яйлаша икән, башҡаға ни һан?!

Икенсе миҫал — «Күҙәтһәң...» тигән шиғыр. Был әҫәрендә шағирә аҡһаҡ ҡаҙ бәпкәһе образы аша бик ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та һөҙөмтәгә килә:

*Ҡаҙҙар һәм сәпсектәр,*
*Ҡоштар һәм ҡошсоҡтар, —*
*Күҙәтһәң, нәҡ кеше...*

Сөнки суҡылып-таланып ғүмер иткән аҡһаҡ бәпкә, үҙенән көсһөҙ себеште күргәс, ыҫылдай, бәйләнә башлай — көсһөҙ янында көслөгә әйләнә.

Эшләнеше яғынан ябай ғына күренгән «Туғандар кәмегәндә» тигән шиғырҙың да төбөндә тәрән мәғәнә ята — яҡын туғандар кәмегәндә дуҫтар иҫкә төшә. Ошоға таянып, шағирә был донъяла бөтәбеҙҙең дә ҡәрҙәшлек ебе менән тоташҡанлығыбыҙға ишара яһай:

*Кешелек тора, ниһайәт,*
*Дуҫтарҙың дуҫтарынан.*
*Туғандың туғандарынан*
*Күбәйгәнбеҙ яралып.*
*Туғанлыҡты онотҡанбыҙ*
*Алыҫтарға таралып.*

Быуындар бәйләнеше, йәшәү мәғәнәһе хаҡында уйланыуҙар «Бына ҡасан айырылаһың....», «Маяҡ», «Әй, өләсәй...», «Толом тураһында хикәйәт», «Килешер ине», «Дуҫтарға», «Һуңғы теләк», «Көтөүе рәхәт» тигән шиғырҙарҙа ла иҫтә ҡалырлыҡ образдар һәм сағыу күренештәр аша бирелгән.

«Бына ҡасан айырылаһың....» тәүҙә аҡыл һатыуға оҡшап тора: тыуған ер менән, мөхәббәт менән, балаң менән, мәңгелеккә күскән әсәң менән айырылаһың, ләкин был айырылышыуҙар, йәнәһе, бигүк өмөтһөҙ түгел, сөнки улар менән ҡасан да булһа бер осрашасағыңа ышанып йәшәйһең. Шиғырҙың аҙағында көтөлмәгән боролош яһала: баҡһаң, йәшәү тигән өмөттән һис тә айырылаһы килмәй икән. Йәшәүгә өмөтөң һүнһә — шул булыр ысын айырылышыу, тигән һөҙөмтә сығарып ҡуя автор.

«Көтөүе рәхәт» тигән шиғыр «Бына ҡасан айырылаһың...»дың дауамы шикелле ҡабул ителә. Әҫәр күтәренке рух, яҡты оптимизм менән һуғарылған. Уның нигеҙенә һалынған тормош фәлсәфәһенең асылы шунда: кеше ғүмер буйы бөгөнгө менән генә түгел, тыуаһы көн менән йәшәй. Был фекер шиғырҙа бик асыҡ кәүҙәләндерелгән:

*Һүндермәйһең өмөтөмдө,*
*Тыуаһы көнөм, рәхмәт!*
*Буламы-юҡмы*
*Бәхетте —*
*Көтөп йәшәүе рәхәт!*

Лирик геройҙың йәшәүгә тартылыу көсө «Дуҫтарға» тигән шиғырҙа ла ышандырырлыҡ итеп һүрәтләнгән. Дуҫтарынан ул татлы күстәнәс тә, затлы кейем дә, сәскә лә көтмәй. Уға иң мөһиме — яҡшы һүҙ: «Йәнем өшөгәндә йылытырлыҡ һүҙҙәр генә миңә эҙләгеҙ» ти ул. «Һәм эҙләгеҙ, һүҙҙәрҙең һеҙ миңә өмөт бирерҙәйен эҙләгеҙ. Һүнәм тигән саҡта балҡыйымсы, миңә шулай ғүмер өҫтәгеҙ» тип дауам итә лирик герой дуҫтарына теләген. Шиғырҙың һуңғы юлдарында был теләк уғата ла көслөрәк һәм асығыраҡ яңғырай: «Өҫтәгеҙ һеҙ ғүмер, аһ, ғүмерҙән баш тартмайым, йәшермәйем мин...»

Бөтә халыҡтарға ла, шул иҫәптән уларҙың әҙәбиәттәренә һәм сәнғәттәренә лә хас булған «ололар һәм балалар» тигән сетерекле бер проблема

йәшәп килә. Шағирә генә түгел, педагог та булғанға күрә микән, Н. Әминева ижадында ошо тема ла йыш ҡына сағылып китә. «Һуңғы теләк» тигән шиғырҙа ул ифрат тормошсан, хатта, әйтер инем, тетрәткес итеп кәүҙәләндерелгән. Һүҙ бында конкрет хәл-ваҡиға хаҡында түгел, ә дөйөм, тағы ла шул фәлсәфәүи юҫыҡта бара. «Ололар бала түгел шул, бала ҡарау ҙа ҡыйын...», «Әсә күңеле — балала, бала күңеле — далала» тигән халыҡ һүҙҙәре лә шиғырҙы биҙәй һәм автор әйтергә теләгән фекерҙе тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итә. Шиғырҙың бөтә елеге һуңғы строфала:

*Әҙ ауырыу, анһат үлем*
*Бир, Хоҙай, һәммәбеҙгә,*
*Оҙаҡ ятып, әйләнмәһен*
*Ата-әсә — ҡәҙерһеҙгә,*
*Балалар — бәғерһеҙгә.*

Һирәк-мирәк булһа ла, Н. Әминева шиғриәтендә тәбиғәт күренештәре лә осраштырып ҡуя. «Ҡанатланһаң — икенсе», «Ғорурлығыма тейҙе», «Йәш инем», «Беренсе ҡарҙарҙы күреп...» тигән шиғырҙар — шулар иҫәбендә. Тик улар саф пейзаж лирикаһы түгел. «Йәш инем»гә генә туҡталып китәйек. Кеше менән тәбиғәт араһында йәнәшәлек үткәрелгән унда. Шиғыр һигеҙ һәм ун ике юллыҡ ике строфанан тора. Тәүге строфала болоттан япраҡҡа тамған бер тамсының яҙмышы иҫ киткес матур итеп тасуирланған. Икенсе строфала лирик герой үҙенең яҙмышын шул тамсы менән сағыштыра һәм байтаҡ ҡына оҡшашлыҡтар таба:

*... Бер саҡ шундай саф инем мин,*
*Бөтөн инем, йәш инем.*
*Ҡояшлы көмөш тамсыға*
*Мин дә бит тиңдәш инем.*
*Меңгә бүленде лә йәнем*
*Ҡатмарлы тормошонан,*
*Йә сәселдем, йә һибелдем*
*Йәшәргә тырышыуҙан.*
*Юйылырмын, юҡ булырмын,*
*Һибелермен мең яҡҡа,*
*Һеңермен мең йәнгә, моңға*
*Һәм... һуңынан — тупраҡҡа.*

Н. Әминеваның быуат башындағы шиғриәтенә яһалған был күҙәтеүемде уның «Тик шуныһы» тигән шиғыры менән осламаҡсымын. Был шиғырҙың лирик геройы үҙенең бөтә булмышын ярып һалған. Ул йәш түгел: уның иңендә тормош тәжрибәһе ята. Донъя көткәндә уҫалдарға бирешмәҫ өсөн бер аҙ уҫалланған да ул. Ышаныусһыҙ кешеләргә сер бирмәҫкә лә өйрәнгән. Тормоштоң көйөн яйларға ла күнеккән. Шар асылып, иреп бармаҫҡа, бер аҙ үҙен яҡларға тырышҡан. Йәнендә яҡшылыҡ та бар, етешһеҙлек тә юҡ түгел. Уртаса булмаҫҡа хыялланған. Тормошта яулаған үренә баһа биргәндә лирик герой иҫ киткес тыйнаҡлыҡ күрһәтә:

*Тырыша торғас, ниһайәт,*
*Башҡаларса була алдым.*
*Башҡаларса...*
*Тик шуныһы:*
*Үҙем булалмайса ҡалдым...*

Был аҡыллы, тыйнаҡ һүҙҙәрҙең авторына, ирешкән бейеклектән төшмәйенсә, уҡыусы «Бына, исмаһам, шиғыр!» тип һоҡланырлыҡ әҫәрҙәр ижад итәһе лә итәһе әле.

**Әнғәм ХӘБИРОВ,**
**Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһы профессоры.**

**Ғәли**
**ИБРАҺИМОВ**

# КИНЙӘ

**ТАРИХИ РОМАН***

**III китап**

## БҮГӘСӘҮ БАТША ҺАНАТЫ

**Етенсе бүлек**

### Ир арыҫланы

*Күсе лә бар был илдең,*
*Көсө лә бар был илдең.*
*Күсен ситтәр талаған,*
*Үсе лә бар был илдең.*
*. . . . . . . . . . . . . . . . . . .*
*Тыуған ерен һаҡлаған,*
*Ир намыҫын һатмаған*
*Батыры ла бар был илдең.*

**Байыҡ Айҙар сәсән**

1

Салауат менән Юлай һыбай елдереп килеп сыҡтылар. Юрғалары тау түбәһенә баҫты.

Аттары ярһыу, ярһыуын баҫып булмай. Үҙҙәре нығыраҡ ярһый, әлбиттә. Ләкин батыр йөрәк ярһыуын тыя белә.

Әммә күҙҙәр...

Салауат алға ҡарай. Киң яурынлы, яҫы маңлай, осло яңаҡ, түңәрәк йөҙлө. Үткер ҡараш, йәш. Ләкин һул яҡ сикәһендәгеһе күренеп тора. Яралар күп.

Икәү генә. Атаһы ла улы, Юлай ҙа Салауат...

Юлай ҡошсоһон ҡалдырҙы. Салауат та Баһауына тороп ҡалырға ым яһаны. Ҡошсо үҙе лә аңлай. Аталы-уллы кешеләрҙең серенә инергә ярамай. Ике атаман һөйләшһен.

---

**Башы 3–7-се, 9 -10-сы һандарҙа.*

Салауаттың ҡоралы... Ҡылыс. Еҙ һаплы. Башында арыҫлан һүрәте. Затлы ҡылыс. Атаһына бүләк ҡылыс. Үҙенә атап, Александр Бибиков биргән ҡылыс. Былтыр атаһы Стәрлетамаҡҡа оҙатҡанда, һинең билеңдә булһын, тип биргәндә, Салауат һанға һуҡманы. Атаһы, кәрәге булыр, тигәйне. Кәрәкте, бик кәрәкте. Ошо ҡылыс булмаһамы... Бына әле лә уның йәнен һаҡлар әле. Ҡулдары ғына һау булһын.

Офоҡта — Мәшәк, Көмәрҙәк тауҙары. Ямантауҙан алыҫ түгел. Шунда Ирәмәл... Шунда Йүрүҙән башы. Мейәс башы. Уй һыуы. Әй. Бер ваҡыт шунда барырға теләне Салауат. Бөтәһен ҡарарға.

— Бара алманым, — ти ул хәҙер атаһына.

— Барырһың әле.

— Теге яғы — Ағиҙел.

*Ай, Уралым, Уралым,*
*Күгәреп ятҡан Уралым!*
*Нурға сумған түбәһе*
*Күккә ашҡан Уралым, —*

тип йырлар ине лә, юҡ, ваҡыты әле түгел.

Атаһы:

— Ҡараһам, күңел ярһый.

Салауат:

— Эйе...

*Эҫем буйҡайҙарын баяр баҫты,*
*Йөрәккәйем шуға ла зар һағыш.*

Юлай:

— Төйәк тотҡан урындар, йәйләүҙәр, биләмәләр китте. Зауыт төтәй. Йырларһың әле.

Әлегә... Эйе, әлегә уңдан Михельсон ҡыҫа... Һулда Деколонг менән Йәмәлке батша алыша. Артта ла...

Шул тауҙарға саҡлы һул ҡулды нығытырға ине. Ҡариҙелгә саҡлы уң ҡулды ла. Шунһыҙ нисек йән түҙһен? Михельсон килә бит.

— Унан бармаҫтар. Илсеғол Этҡолов. Ҡошсо олоҫо. Исәкә Садыров старшиналары.

Ә бына Исәт яғы? Унда ла асыҡ түгел... Кәҫле яҡтарында һуң?

— Баҙарғол депутаттың хәбәре бармы, атай?

— Бар. Ул да, Юламан да ныҡ тора.

Шулай ҙа Грязнов, Туманов киткәс, көс аҙайҙы... Белобородов та тегеләй һуғылды, былай һуғылды ла Златоустан олаҡты.

— Атай, һин шул яҡ ҡулды, һулдағыһын ҡара. Батшаға ярҙам кәрәк булыуы бар. Ә мин Михельсонды тотоп торормон, көсөн турарға кәрәк. Батша килеүенә кикереге шиңһен.

— Был яҡты ҡара, — Юлай ҙа кәңәш бирә.

Кемгә... Салауат үҙе лә белә. Ҡариҙел буйында атаһының дуҫы Ҡолой Балтасов бар. Уның бер туғаны — Сәғит.

Күс ярағын байҡайыҡ тип, атаһы китте.

— Йорт-ил тыныс ҡалманы...

Атаһы борсола. Уның урынына Шайтан-Көҙәйгә старшина итеп Хөсәйен Айсинды билдәләне. Илгә аға була алмай; Салауат та, Юлай ҙа уға бик үк юл ҡуймай. Ләкин гел генә йортта тороп булмай. Киттеңме, Хөсәйен бутай башлай. Бына әле май башында 20 кешене Өфөгә ебәргән, Михельсон уларҙы үҙенә ҡушыр, әйтәгүр.

— Мин уға барып киләм. Егерме урынына 100-ҙө йыйып бирер миңә.

Юлай:

– Һарттағы Өмөтәй[1] ҙә ҡойроҡ болғай.

Нишләйһең, ауылда ятып булмай. Урманда көн күрәләр. Икеһенең алайы айырым-айырым. Атаһы үҙенекен алып китер, улы үҙенекен бында алып ҡалып, Михельсонға ҡаршы, уңайлы-уңайлы урынға ҡуйыр. Әлкәйҙән уның янында — шайтан-көҙәйҙәрҙең күбеһе. Ҡыр-көҙәйҙәр ҙә байтаҡ.

Әле бер күскә, әле икенсеһенә йөрөй. Үҙҙәренә, аттарына күҙ һала. Аттарының дағаларын да тикшерә.

Ҡошсоһо Баһау төпсөнә:

— Михельсон ҙурмы, һинме?

— Ә һинеңсә?

— Һиндер...

Береһенең айғыры кешнәй. Ишетә. Хужаһы ҡамсы менән һыҙыра.

— Эсең ярылғыры!

Күс[2] ярағын[3] байҡай. Салауаттың кешеләре ышаныслы. Бына Рәхмәт Сурағол ҡарт улы. Ышаныслы.

Нуҡта һуғылмаған аҫауҙарҙы[4] тотоп эйәрләгәндәр. Һайлам егеттәр.

Тау башы. Тыу ҡаҙағандар. Ылау таштар менән уратып алынған. Йорт-ҡәлғә. Салауат йорто, тиҙәр.

Арыраҡ тау типһәнендә Сағыр быуайыныҡы. Уның улы Истыбай туҙыҡа (Балаҡатайҙан).

Ҡыр-көҙәйҙәр. Тырнаҡлылар. Һарт иләүенән... Күбәләктәрҙән дә бар.

Тикшерҙе. Тәртиптә. Бағауылдар, ҡарауылдар ҡуйылған. Ары-ары шәйләктәр йөрөй. Салауаттың күҙ алыҫтан күрергә тейеш.

Михельсон килә. Ләкин алыҫ әле. Ҡобауҙағы ҡыр-көҙәйҙәр хәбәр итә: алда — Мөхсин (Дыуан-Табын) Ғәбдессәләмов...

Ул килгәнсе артты нығытып килергә кәрәк.

2

(Салауат ауылға ҡайтып килә).

Салауат, ҡошсоһо Баһау, тағы биш дуҫы (нәүкәре). Улар бер ауылдан түгел. Ҡайттыңмы, таралырҙар. Был юлы әллә нисек яҡын был тауҙар. Өҫкәнде лә, Йортбикә лә... Ағастары...

Тәүҙә тегеләргә һабаҡ биреп китеү яҡшы булыр ине, ти. Унан өйгә һуғылыр. Ял итер. Юҡ, ирәм[5] бағыу ваҡыты түгел. Унан... Тегеләр ҡоторонһа, белеп буламы...

Ҡатыны Әминә... Эйе, уны күрер хәҙер. Гөлбәзир... Ләкин башта әсәһенә инде.

— Салауатым!.. Иҫәнһең.

— Үҙең һау бул.

— Атайың?..

— Хоҙайға шөкөр. Ул Һатҡыла, — тип бышылданы.

Ҡыҫҡа-ҡыҫҡа хәл һорашыу.

— Ни хәлдә?

— Беҙ аман, үҙең аман бул.

— Һәй, киттеләр!

— Гел теләйбеҙ һаулыҡ. Уҡ теймәһен, уғы яҙыҡмаһын, һөңгөһө һынмаһын, тибеҙ.

---

[1] *Өмөтәй Уразметов — Себер даруғаһы Һарт олоҫонең старшинаһы, б. к. отряд командиры.*

[2] *Күс — кеше төркөмө, отряд.*

[3] *Ярак — ниҙелер башҡарыу өсөн күрелгән хәстәр.*

[4] *Аҫау — егелмәгән, ҡырағай ат (ярһып торған, уҫал).*

[5] *Ирәм бағыу — күңел асып йөрөү.*

— Ярай, мин оҙаҡҡа түгел.

Ҡайтты. Йүгергеләп һыйланылар. Ваҡыт күп түгел, ашъяулыҡты бер осонан тотоп аҡтарҙы, сеүәтәләр тәгәрәште. Һикенән төшәме? Табындан ҡуҙғаламы?

— Мин китәм.

— Әҙерләй торайым, — әсә сығып китте.

Юл һалығы күп була. Әсә кеше шунһыҙ оҙатамы. Ә ул Аҙнабикә бит әле!

Салауат:

— Кил, ултырығыҙ.

Ашыға бит. Юл алдынан шулай.

Икеһе ике яҡтан ботона терһәктәре менән таяндылар. Әминә — уңдан, Гөлбәзир — һулдан. Балалары кеме яурынға, ҡайһыһы беләккә һырылды.

Ул ике бахырҙың йөрәктәре атылып сығырҙай тибә. Ҡулдары ҡосаҡларға әҙер. Юҡ, килешмәй. Күҙҙәренә йәш атылырға итә, юҡ, ярамай. Балауыҙ һыҡмаға?!

Үҙе Миңлеяза ҡыҙын башын һыйпаны, үҙенә тартты, улы Рамазан мөлдөрәп ҡарай.

Гөлбәзир ҡурай һона. Ҡурай тарта батыр. Бөтә ҡайғы онотола. Иҙерәй, ожмахмы... Был ни?! Бөтә донъя сайҡалған кеүек.

Әсәһе керә. Ултырмай, ҡаршыларында баҫып тора. Әсә — гүйә, илаһиә.

Әкрен генә шул донъяны үҙе таратты, әкрен генә ҡуҙғалды.

Салауат ҡуҙғалды. Йоҡа бүркен кейҙе. Әсәһе килендәргә ҡарап алды. Улар әйтерен әйткән, хәҙер – уның нәүбәте. Осрашҡанда — тәүге һүҙ, оҙатҡанда һуңғы һүҙ – уныҡы. Юл аяғы әйтте:

> *Урал ғына тауҙың, ай, бешәһе*
> *Араһына һис көн төшөрмәҫ.*
> *Был ни ғәжәп, был ни хикмәт икән:*
> *Башҡорт иленән яу — дошман китешмәҫ.*

Улын ҡосаҡланы. Салауат та әйтер ине. Тел осонда торғандары бар. Ләкин әсә әйткән юл аяғынан һуң күп һүҙ килешмәй.

Һәм ул сөсөләнеп тә тора алмай.

Әсә тороп ҡалды, килендәре яҡ-яҡта ике ҡанат, арала балалар.

Алдарынан бөркөт осто.

Тирә-яҡ имен түгел. Йортауай ҡуйған булдылар — Айсин Хөсәйен. Һарт иләүендә лә боларалар. Старшина Өмөтәй. Ләкин Салауат ҡурҡмай. Халыҡ бар.

Унда — Зөләйха, унда — старшина Хөсәйен, унда, ихтимал, Ҡолой ҙа булыр.

Ах, осрашһа, хәҙер тиккә булмаҫ. Ҡоро китәлмәҫ. Ул күҙенән ут сәсер. Салауат та теленән ағыу сәсер... Салауат та, Ҡолой ҙа, ғәҙәт буйынса, ҡулын ҡылыс һабына һалыр. Был юлы инде ҡылыстар ҡыны ла ҡалмаҫ. Генерал-аншеф Бибиков биргән ҡылыстар. Бер-береһенә тейеп, зың-зың килерҙәр.

Юҡ, осрашыу насип булманы.

Был юлы Хөсәйен Айсин. Яңы... Ағас старшина... Улай тимәҫ ине лә, әлеге Ҡолой яғына ятмаһа.

Килде. Йорто ҡаршына туҡталды.

— Салауат полковник килде! Хөсәйен! — Йортауай тип тә әйтмәй, ағай тип ололамай. Ә тегеһе ҡасырға итә. Ҡурҡа. Уратып килтерәләр.

Килде. Шунһыҙ булмай, йортондо үртәп, йәненде алып китер. Яңғыҙ түгел, кешеләре бар. Аҙ ҙа түгел. Яндарына баҫҡандар. Арттараҡ — бисәләр... Ә Зөләйха алғараҡ сыҡты. Салауат та күҙҙәрен алмай. Салауат уға күҙ ҡыҫты.

Һа-ай, бөтә тәнен ҡалтыратты. Йөрәге атылып сығырҙай булды.

Салауат ат өҫтөнән, юғарынан һорау бирҙе:

— Хөсәйен, ниңә Петр батшаға хилафлыҡ ҡылдың?

— Ул, ул... — Фу, шайтан, батша түгел, дәғи, тип әйтмәксе.

Сабырға ине. Юҡ. Сабыр төбө – һары алтын.

Торһон шунда. Исем булып.

Тик эшләргә кәрәк үҙ файҙаһына.

— Ул батша Петр Федрич... Башҡорттарҙың ер-һыуҙарын, тауҙарын, урмандарын ҡайтарып бирә. Беҙгә ирек бирә. Һауала бөркөттәй осорға, ерҙә батыр булырға. Беҙгә ирек... Ә һин һаҫыҡ Михельсон ҡушыуы буйынса бер алай биргәнһең. Батша табиғтәре бит улар, мин, Салауат полковниктың, Себер юлы атаманы Юлай Аҙналының яугирҙары бит улар. Бер алай!

Хөсәйен ҡалтыранды.

— Юҡ, егерме генә...

— Ә ниңә, егерме – бер алай түгелме? Уның менән тау аҡтарып була. Миңә хәҙер үк йый. Хәҙер...

— Әле юҡтар бит.

Зөләйха алға сыҡты. Тегеңә асыулы күҙ һирпене. Салауатҡа баш эйҙе.

— Хәҙер үк барыр инем. Ҡыҙҙар яу сапмай шул.

— Яу сапмаһа, яу ҡырында булыу яҙыҡ түгел.

— Эй, үҙең әйткәнең дә.

Салауат Хөсәйенгә:

— Ҡыҙҙар ғына ҡалдымы илөү тигәнеңдә?

— Егеттәр ни...

— Йый. Миңә йөҙ егет йый. Үҙең илт.

— Мин, мин...

Ҡурҡа. Йөрөмәһен, темһенмәһен. Уның ҡул һелтәүен Зөләйха аңланы.

— Мин әйҙәп алып барам!

Бөтәһе лә ғәжәпһенеп, ҡалтырап ҡараны.

"Һай-ай, ҡыҙый... атлығаһың... Ә теге еҙнәң килеп сыҡһа, ебәрә булырмы..."

Салауат:

— Хөсәйен, бына йыйып бир уға. Алып барыр.

Үҙе, әйҙә, бында воевода алдында иҫәпкә бар, һанға юҡ кеүек йөрөһөн.

Зөләйха килтерҙе.

Уның батыр икәнен, аҫау айғырҙарҙы бороп ҡайтарыуын, мәргән икәнен беләләр. Элек Салауат менән осрашҡылап йөрөүен беләләр.

Егеттәр үҙҙәре:

— Беҙ барабыҙ.

Старшина йыйҙы. Ул йыйғанға иш янына ҡуш итеп Зөләйха үҙе ҡушты.

Алып килде.

— Ҡалам.

— Һинең эш түгел.

Уҫал ҡараны.

— Йә, бер йырла.

Салауат йырлай:

*Зөләйха, һин...*

3

24 апрелдә Михельсон корпусы Өфөнән сығып китте. Себер урамы осона сығып, ҡаланың бөтә халҡы оҙатты ғәскәрҙе.

Поляк конфедераттарына ҡаршы һуғыш геройы. Төрөк һуғышында ла ҡатнашып өлгөрҙө. Алғыр офицер, хәрби һын-килбәт. Өҫтөндә — юлда кейә торған сюртук.

Уға курьер килде. Пакет. Нимә? Рескриптмы?.. Эйе, ул яңы чин хаҡында яҙыу көтә. Яҙыу юҡ.

Ҡала ситендә ятҡан башҡорт, мишәрҙәр байтаҡ. Михельсон ышанмай. Ышана буламы? Уларҙы ҡалала шуға урынлаштырманы.

Ҡариҙел кисеүенә Аҡназар кисеүенән йөрөгәндәр. Һуңыраҡ — Антоша Дудкин кисеүенән... Икеһе лә әле уңайһыҙ. Һыу йәйелгән ваҡыт. Кенәз кисеүе. Унда паромдар яһалған, кәмәләр, һалдар әҙерләнгән. Үҙе лә әҙерлекте тикшерҙе.

Камердинерына:

— Ҡара, онотманыңмы? — Ҡайыш менән урап бәйләнгән сумаҙандар хаҡында әйтә.

Атлы эскадрондар, гренадерҙар полкы. Шунан – Шувалов гаубицалары. Картечь күп.

Ә Михельсон ышанысы – дыуан-табындар Мөхсин менән Ямғур Ғәбдессәләмовтарҙа. Салауатты тотоп бирергә вәғәҙә. Улар янында –подполковниктың үҙ дозоры, сөнки бында ла ышанып бөтмәй.

Боҙ күптән китте. Ташҡын бер аҙ ҡайтты. Өфөлә ял иттерҙе. Ылауҙар әҙерләтте. 60 туп, дары запасы. Аҙыҡ-түлек, фураж тупланды.

Ял иткәндәрме? Үҙе тикшерә. Карабинерҙар. Санкт-Петербург исемен йөрөтәләр. Сәс толомдары үрелгән. Буклялар бөтөрөлгән. Пудра урнына он бөркөгәндәр.

“Быларға ниңә парик, ниңә букля? — тип уйланы. — Юҡ, мәшәҡәт. Һалдатҡа команда бирҙеңме — торһон да сафҡа баҫһын”.

— Пугачевҡа!

Уны Белоретта тиҙәр. Юлын быуырға итә. Бара.

Алда — башҡорттар. Уларҙы йә уландар, йә карабинерҙар күҙәтә.

Ғәбдессәләмов Мөхсиндән хәбәрҙәр:

— Алда — Салауат ғәскәрҙәре.

— Кем?! Ниндәй ғәскәр? — ти ул.

— Салауат...

— Сүп!.. — Шундай көс барлығына нисек ышанһын Михельсон.

***

Салауат Эҫем заводына яҡынлай. Алдағы боҫтормаларҙан урмандан уҡтар яуа. Драгундар ҡолап төштө.

Һөңгө, суҡмар. Ярҙам килеүгә — урман эсенә. Бейек тауҙар араһынан Салауат килеп сыҡҡайны бында. Көтөп ятманы. Ябырылды. Уратып алырға ине. Көс аҙ.

Салауат күҙ һала, өҙәңгегә баҫыңҡырап. Яугир. Бер ҡулда — тире ҡалҡан, унда — һөңгө, теҙген шуға ҡуша тотолған.

Уҡсылар нисек әле?

— Майшайып китмәһен — кереш тартҡанда...

Ныҡ тарта, ҡыҙҙы теге.

— Тартҡанда яны сатнамаһын.

Уҡсының мәргәнлеген маҡтаны батыр.

Михельсон 6/V Эҫем заводында. Ошо көндәрҙә Пугачев Магнит ҡәлғәһен алғайны.

Һуғыш. Аник[1] исемле баш күтәреүселәренең атаманы. 500 кешеһе. Михельсон уны ҡыйрата. Эҫемгә барып инде.

Салауат сигенде.

Артынан ҡыуҙылар. Ат өҫтөндә. Яҡын ебәрмәйҙәр.

— Быларҙы ҡыуып етеүе ҡыйын!

— Элек тә әйтәләр ине. Башҡортто ҡыуып етеп булмай, тип.

Эйе, шулай тигән генерал Кар ҙа, Голицын да. Уларҙан элек тә.

Байтаҡ барғас, кире борола. Үҙҙәрен ҡыуҙылар. Аталар. Йығылды береһе, береһенең – аты, уны эләктереп, менгәштерҙеләр.

[1] *Аник – Ерусланов Аника Д., Воскресен заводының крәҫтиәне, б. к. атаманы.*

— Ах, черт... — тирҙәрен һөртәләр, саҡ-саҡ тын алып, суҡынып алдылар.
— Ҡыуҙыҡ — ҡыйын. Ҡасып ҡотолоу бигерәк ҡыйын.
8/V Ералыла һуғыш.
Салауат Эҫемдән 16 саҡрым ситтә Ералы (Йыралы) ауылына сигенә.
Шунда бер төркөм булырға тейеш. 130 рус крәҫтиәне. Сидор Башин[1] алып килгән. Ләкин Салауатты таба алмай йөрөйҙәр. Башин бер нисә кеше менән урманда эҙләп йөрөй. Михельсон дозорҙары тотоп ала.
Ҡатау-Ивандан ярҙам көтөлә.
Михельсон килә.
Ике төркөмдә, ике яҡтан. Үҙ отряды – уртанан, тураға хәрәкәт итә.
— Бәй, шул Салауат, — ти Михельсон.
Ҡырҙы. Ләкин Салауат сафтарын тағы ойоштора алды. Тағы атака.
Салауат тағы күҙҙән яҙҙы.
— Был юлы ныҡ дөмбәҫләнем, — ти Михельсон. — Үҙе сигенде. Баш ҡалҡыта алмаҫ.
Шулай итеп, баш командующий генерал-поручик Щербатовҡа рапорт та яҙып ебәрҙе.
Маҡтанды подполковник, мәгәр үҙенең дә һалдаты күп үлде ләһә, ете офицерын да юғалтты. Күптәр яралы. Аттар ауып ҡалды, йәҙрәләр кәмей.

***

Салауат алайҙарын урман эсенә күсерҙе. Йүрүҙәнгә табан.
Уйлай. Подполковник ғәскәре оҫта һуғыша. Яҡшы өйрәткәндәр. Үткер салғы кеүек. Унда мылтыҡтар, фузейҙар, туптар. Ә миндә... Батыр үҙенең яугирҙарын байҡап ала. Уҡ-һаҙаҡ, һөңгө, суҡмар... Ә ҡылыс кемдәрҙә генә? Аҙ.
Үҙендә бар. Их, батырға батыр сыҡһын, тиергә.
Бына шунда, алыш бармы, көрәш бармы, тиер ине.
Әүәл булған шундай һуғыштар! Митрәй батша[2] заманында, Алдар батыр Азаҡ ҡәлғәһен алғанда.
Былай көрәш тә йәтеш... Ҡылысҡа ҡылыс, һөңгөгә һөңгө. Бына Салауат фараз-лай: беҙҙең йоланы белмәй Михельсон. Унан бигерәк, шөрләй. Ошо маҡтаулы Михельсонды биленән матҡып алыр ҙа, аймалашып та тормаҫтан, күккә сөйөр ине. Йә ергә һендергәнсе бәрер. Шулай иткәндәр элек. Килеп төшкәс, тибеп ебәргәндәр, өҫтәүенә. Салауат ҡылысын һуҙып торор, уртаға киҫелеп төшөр ине.
Юҡ, Михельсон беҙҙең йоланы үҙ итмәй. Эш ундайға ҡалһа, ул үҙенең артиллерияһына, мылтыҡтарына тотонор.
— Атыш! — тиер.
Ә Салауат:
— Атышың — атаң башына, хәҙер алыш, — тиер.
Юҡ шул, ҡурҡа... Был әкиәт түгел. Һуғыштар улай башланмай хәҙер. Ике яҡ та тимергә тотона, ике яҡ та хәйлә ҡора.
Уның уйлап ҡарап тороуын күреп, яҫауылы:
— Их, туптары бар шул. Беҙҙең ҡорал шәптән түгел, – тине.
— Туп тиһеңме? Ә беҙҙә урман, тау! Беҙҙеке бит.
— Мылтыҡтары ата.
— Мылтыҡ аттымы — тауыш. Шунан беләһең, дошман ҡайҙа... Ә беҙҙең уҡтар... жыйлап килә лә етә. Ҡайҙан? Һиҙмәйҙәр.
Ә үҙе уйлай: ни бары иҫләмәҫтән ябырыл, ҡыр-ҡыр ҙа... кит, яҙҙыр ҙа тағы килеп сыҡ. Шулай шәп! Тик яйлы урынын ғына һайла.

---

[2] *Башин Сидор — Усть-Ҡатау заводының б. к. крәҫтиәндәрҙең атаманы.*
[2] *Митрәй батша — Дмитрий Донской.*

***

Бой алды. Яугирҙар өҙәнге бауҙарын ҡыҫҡарта. Ҡумталар асыла. Унда — көлсә. Батыр асыҡҡан. Юҡ, үҙенә түгел. Атына һындырып-һындырып ҡаптыра. Үҙенең ауыҙ һыуҙары килә. Быны күрә, бой булыр. Ат быны хужаһының күҙҙәренән дә белә. Улар күҙҙәрҙән һиҙә. Ләкин ашай, ирендәре менән устан эләктерә. “Мин уны һыртымда осортоп йөрөтөрмөн, дошман ҡаршы, уның атын күкрәгем менән этермен. Миңә көс кәрәк шул!” — тип уйлай малҡай, гүйә.

***

Салауат ат өҫтөндә. Дошмандарына ҡарай йомолоп елдерә. Михельсон күренмәй. Ул юҡ бында. Ҡайҙандыр әмер биреп тора.

Салауат арҡаһындағы һаҙағынан дүрт уҡ ҡармап алды. Өсөһөн урталай өҙөргә теләгәндәй, ҡуша тешләне. Береһенең киҙеһен ян керешенә кейҙерҙе. Атты ҡолата атты. Уға ҡарап, башҡаларҙың да уҡтары осто. Ана тегендә, ана бында аттар ҡолай, кешеләр ауа, аттар кешнәй, һалдаттар һүгенә, ыңғыраша.

Икенсе уғын теш араһынан алды. Сорғотто...

Тиҙ, бик тиҙ, барып еткәнсе уртына ҡыҫтырған уҡтары атылып бөттө. Салауат ҡылысын һурып алды. Артабан кемдәр – ҡылысын, кемдәр — һөңгөһөн. Ҡалҡандар арҡа яҡҡа шылдырылған.

Эй китте, эй... Эскә барып керҙе. Ике яҡтан ҡыҫалар, штыктар, ҡылыстар ялт-йолт килә. Дошман сафтарының бер яҡ ситен талап, ҡырып ситкә тайпылдылар.

Ҡараңғы төштө. Салауат:

— Бөгөнгә етәр! — тип бойорҙо.

Ул янын бөгә биреп, керешен бушатты. Кәрәк эш! Күнегелгән ғәҙәт. Шунһыҙ ян боҙола.

Яугир ял итмәһә итмәҫ. Аты менән яны ял итергә тейеш. Аттарҙы ҡарайҙар. Шунһыҙ ат саба алмай.

Салауат алышты-алышты ла таралған отрядтарын артҡа, урман эсенә, күсерҙе.

Михельсон, Салаватканы еңдем, тиҙер. Таралып сигенде, әлбиттә. Тар-мар итте, йәнәһе. Сигенмәне.

Шунда уҡ яңы атакаға әҙерлек, аттарын тикшертә. Үҙҙәрен. Төркөмдәрҙән хәбәр алдырта, әмер ебәрә.

Ләкин Михельсон хата уйлауын тиҙ аңланы. Икенсе көндө ҡаршыһында йәнә Салауат пәйҙә булды. Ҡайһы яғына һуғылһа ла, ҡаршыһында — ғәскәр. Ул ҡуҙғала — ҡаршыһына Салауат яугирҙары сыға.

— Юҡ, былай булмай, — ти Михельсон. — Әйҙә, башҡорттар ҙа байраҡтар, тыуҙар күтәреп, үҙ-ара киҫешһен. Үҙ кешеләр булып барығыҙ, — ти.

Эргәһендә Солтанморат Янышев, Шәрип Кейеков[1]. Уларҙы алға һөрҙө.

Унан тағы бер хәйлә: алдап асыҡ ергә сығарыу, шунда атырға туптар ҡуйылған.

Салауатты ҡыуып етә алманы. Ә туптар янына башҡорттар килеп сыҡты. Пушкарҙарға ябырылдылар. Тупты алып китә алмаҫтар, әлбиттә, ә боҙорҙар. Саҡ-саҡ ҡыуалап ебәрҙе, ана бит, ике канонирҙы үлтерҙеләр.

Михельсон туптар янына сапты.

Алдан ябырылалар. Туптарҙан атырға. Ҡасмайҙар, алға киләләр. Был яҡта ҡурҡыныс түгел. Кемдер өйрәткән, тип уйланы Михельсон.

Ҡайҙа барһа ла, ҡаршыһына Салауат килеп сыға. Алға барыр әмәл юҡ.

Михельсонға разведчиктар, завод крәҫтиәндәре йөрөй, ти.

Был ни хәл? Ул башҡортто башҡортҡа һөсләтергә уйлағайны. Ә бында рустар уны эҙләп, ярҙам һорайҙармы? Ә юҡ, улар — ҡот оҫкос нәмә...

[1] *Шәрип Кейеков — Уса даруғаһы Ирәкте олоҫо баш старшинаһы.*

6 майҙа Салауат Эҫем, Ералынан сигенгәс, ишетеү менән үк ярҙамға тип, Ҡатау заводы эшселәре 130 кешелек отряд (Сидор Башин), тағы бер отряд — 100 кеше ебәрә.

— Беҙҙең өсөн алыша ул!

— Салауат — беҙҙеке!

— Ярҙам итәйек!

Ике отряд Салауатты эҙләргә керешә. Михельсон шымсылары таба алмағанды, әлбиттә, былар ҙа Салауаттың эҙен юғалталар,

Бер итеп урман ҡыҙырып эҙләйҙәр. Шулай уҡ таралып бөтөрмө?

Башинды, тағы бер нисәне тотоп килтерә разведчиктар.

10/V Михельсон корпусы Усть-Ҡатауға барып етә. Салауат унда түгел, әлбиттә, эшселәр ҙә тау-урман араһына ҡасҡан.

— Өйрәтермен!.. Һабаҡ булыр!

Михельсон Башинды аҫтырта, бер тотҡон эшсене язалай.

— Миңә Пугачев ҡаршыһына сығырға кәрәк. Ә был... юлымды бүлә, ебәрмәй.

Аптырай, бөтөрҙөм, тиһә, көсө тағы ҙурыраҡ.

Асылда Салауаттың хәле ауыр. Быны белеп, Ҡатау заводынан тағы 100 кеше — ярҙам ебәргәндәр.

10/V Михельсон корпусы Усть-Ҡатау заводына барып инә. Эшселәр юҡ. Урманға, тауҙар араһына ҡасҡандар. Ҡарт-ҡоролар. Ауырыуҙар. Приказчик ялағайҙары.

15/V. Михельсон Ҡаратаулы янында Йүрүҙәнде аша сыға. Һатҡы заводына барып инә.

Бында Юлай. Һуғыш.

— Тағы Салауат Юлаевмы?

— Юҡ, Юлай!..

— Тура злодейға һөжүм яһарға!

Яйыҡ йылғаһы башына юл тота.

Юлын тағы башҡорттар бүлә. Тағы Юлай.

Урман эсендәге Әй йылғаһы башында һуғыш тоҡана.

— Ҡорал һалығыҙ!

— Баш эйегеҙ!

Яуап:

— Баш эйеүгә ҡарағанда үлеү артыҡ!

Күлгә ҡыҫтылар. Икәүһе күлгә төштө. Шуларҙы тотоп алдылар.

Башҡорттар тере көйө бирелмәй.

Заводта эшләнгән кольчуга. Ҡалҡандары бар.

— Рустар яһап биргән, — ти.

***

Михельсон бында эшен бөтөргән төҫлө. Пугачевҡа яҡын, тиҙәр. Юҡ, бында кем ҡалғанын белә хәҙер. Ул Пугачевҡа табан ашыға.

— Туп-тура злодейға!

Юлын тағы башҡорттар бүлде. Уларынан арынып ҡуҙғалһа, икенселәр ябырыла. Көн һайын.

Пугачев яҡын. Деколонг ҡырған, хәҙер минең ҡулға төшәр, ти Михельсон.

## 4

Пугачевтың еңеү тантанаһы Троицкий ҡәлғәһендә оҙон ғүмерле булманы.

Өсөнсө көнөнә, 21 майҙа, Деколонг килеп сыҡты. Көсө күп.

Тышта барҙы һуғыш. Белобородов полкы ныҡ ҡырылды. Икенсе яҡта Әүжән – Белорет полкы ине. Уларға Перфильев баш.

Сигенделəр, һуғыша-һуғыша. Эйе, көрəш ныҡ булды. Был еңеүҙе бушҡа бирергə берəү ҙə телəмəне.

Белобородов полкы ҡапҡа янына йыйылды.

Кинйə оборона ойошторҙо.

Башҡорттар диуарға менде. Крепосты һаҡлай ҙа белəлəр. Өҫтəн хəҙер уҡ яуа. Таштар əҙерлəнде.

Пугачев туптарға ынтылды. Команда:

— Əйҙə, Овчинников! Һин команда бир!

Ул үҙе дошман ябырылған яҡта. Перфильев полкына теге яҡтан былай килергə əмер.

Таштар ташыйҙар, бүрəнəлəр. Деколонг туптарҙан ата баш күтəреүселəргə.

— Ребята, башығыҙҙы эйегеҙ.

— Китмəгеҙ.

Йыйҙылар. Байтаҡ кеше ҡырылды.

Деколонг һалдаттарын атакаға ташлай. Ҡырылалар.

Белобородов бер ҡапҡаға күрһəтə:

— Государь, шунан китəйек.

— Юҡ! — ти Пугачев. — Һаҡлайбыҙ крепосты.

Бер алыштан һуң Овчинников тағы:

— Китергə кəрəк, — тип ныҡышты.

Пугачев:

— Кинзя, нисек? — тип һораны.

— Беҙҙең көс далала.

Эйе... Перфильев та, Иҙеркəй ҙə шулай ти. Атака! Бер юлы ике ҡапҡанан.

Береһенə — Кинйə, икенсеһенə Белобородов етəкселек итте.

Овчинников тышҡа үткəрə.

Ə бында əүжəндəр, белореттар, казактар. Йəн биреп — йəн алып йырып сыҡтылар. Ҡаршылағы дошманды ике яҡлап ҡыҫалар, турайҙар.

Арттан сығалар.

Овчинников ҡотолдо. Саҡ-саҡ.

Күптəрҙе крепоста бүлеп алып ҡалдылар. Артта — бөтə корпус.

Пугачев ситкə тайпыла, һуғыша. Күршелə — башҡорттар. Овчинников казактар алып килде.

Пугачты — бер яҡтан, Кинйəне Алпар икенсе яҡтан айырып, бергə уҡмаштырмаҡсы. Овчинников:

— Государь! Əйҙəгеҙ!

Пугач тыңланы. Тупланып, урманға һыпырттылар, аҙаҡ бер тирəгə йыйылдылар.

Ниндəйҙер башҡорттар ситкə тайпылды. Хыянатмы?

Байтаҡ киткəс, Кинйə:

— Батша, рөхсəт ит, өшкөтəйем.

— Бар.

Кинйə ҡалған башҡорт алайҙарын туплап алды. Артҡа, атакаға! Ҡыуа килеүсе дошман һырт бирҙе.

Артта Троицк. Янғын. Ут даръяһында ҡалды. Лəкин шул утта крепостағы өйҙəр генə янмай. Һуңғы көндəрҙəге еңеү ҙə, шөһрəт тə, дəрт тə дөрлəй һымаҡ.

Бер ай ярым буйы йыйған яңы ғəскəр ҙə ҡыйралды. Бəҫле генə улъя туплап, ылауҙар күбəйтеп, аҙыҡ-түлек тултырып алынғайны. Əсирҙəр дошманда ҡалды. Уларҙы алмаштырып була. Бигерəк тə аманаттар. Шулар менəн Көҫəпҡол, Һайран кеүек старшиналарҙы сиреүҙə тотоп була ине... Улар ҙа юҡ. Хəҙер ул мəлғүн старшиналар үҙҙəре лə ҡойроҡтарын һыртҡа һалырҙар. Деколонг уларын ҡотҡарыу ғына түгел, үҙе бик күптəрҙе əсир итте.

Пугачев сиреүен байҡап алды. Үҙенең атамандарын барлай. Уның бында ун меңлек инеме, ун икеме? Иҫәбе-хисабын да белерлек түгел ине... Бөтә 28 тубы ла яу яланында ҡалды, 4 мең кешеһе үлтерелде. Күптәр әсиргә төштө. Эш шуға ҡалғас, бер төркөм ҡыр-ҡаҙаҡтар яғына сапты. Байтаҡ ҡына башҡорт, ҡалмыҡ яугирҙары бар ине унда.

Кинйә күрҙе уларҙы. Кинйә тау яғына айырылып киткәндәрҙе лә абайлап ҡалды. Башҡорттар ине. Бында Һайран Һәйетовтың алайы ла, Көҫәпҡол Азатбаевтыҡы ла күренмәй. Шулар тайҙы, шулар.

Пугачев тауышы әсе. Кинйә боролоп ҡарай.

— Шундеев ҡайҙа? Ҡалдымы?

Яуап юҡ. Тимәк ҡалған. Бик яҡшы секретары ине бит әле. Пугач тағы ла ярһыбыраҡ:

— Туманов ҡайҙа?

Уның ҡәлғә эсендә алышҡанын күрҙеләр. Кинйә лә шәйләп ҡалды. Ләкин ул башҡорт полктарын прорывҡа алып сыҡҡайны, һуңынан осратманы.

Кинйә яманһыу ғына әйтте:

— Юҡ ул да.

— Ах, минең повытчигым.

Кинйә өсөн повытчик ҡына түгел. Дуҫ, күрше, серҙәш. Бер-береһенә уҡытыусы, бер-береһенә уҡыусы. Кинйә уны башҡортсаға, ә ул Кинйәне руссаға өйрәтте. Бына юҡ шул дуҫы.

***

Тумановтың яҙмышы ҡыл өҫтөндә, уның юлы бик урау-урау буласаҡ.

Туманов бығаулы. Ныҡлы һаҡ аҫтында. Лагерҙан Үрге Яйыҡ ҡәлғәһенә күсергәндә май айы үтәсәк, июндең ике аҙнаһы үтер.

Эйе, ваҡыты еткәс, 15 июндә уны Үрге Яйыҡ дистанцияһы коменданты полковник Ступишин ныҡлы конвой аҫтында, почта отрядына ҡушып, Ырымбурға оҙатты. Ҙур "ҡош", яман "ҡош". Унда тағы һорау алырҙар, тағы тикшерерҙәр, язаһын бирерҙәр. Бындағы яза ҡаты булыр.

Бер нисә көндән Ҡыҙыл ҡәлғәһенә етәләр. Ары үтәләр, Яйыҡ түбәненә. Алда — Уртаҙым, Орск крепостары.

Был көндәрҙә башҡорттан, ҡаҙаҡтан, ҡалмыҡтан 2 меңләп яугир уҡмашып, айырым пикеттарға, форпостарға, юлға сыҡҡан карателдәр отрядтарына ябырыла-ябырыла хәрәкәт итә ине. Бына шуларҙың бер төркөмө июнь айының аҙаҡтарында Гөбөрлө ҡәлғәһенә етәрәк почтаны баҫты. Конвой юҡ ителде, почтаны эләктерҙеләр. Тумановты ҡотҡарҙылар.

— Әйҙә, повытчик, йәһәт кенә атҡа атлан. — Русса әйтте кемдер.

Туманов шатланды, аптыраны.

Ул башҡортса:

— Бәй, һин Кинйә атаман янында инең. Был... ҡалай?

— Беҙ Троицкиҙан крепоста ҡалғайныҡ, ҡайырылдыҡ. Әйҙә, ҡырғыҙҙарға!

Арҙаҡай ине был.

Ике һалдат ҡотола. Губенатор Рейнсдорп ҡоторондо, өҙгөләнде. Шул ғына етмәгән! Ҡыйратып бөтәбеҙ тигәндә, почта баҫалар. Уның өсөн офицерҙар ебәргән күпме мөһим хәбәр, күпме аҡса. Өҫтәүенә, бер яман злодей ҡулдан ысҡынған.

Ул ҡыр-ҡаҙаҡтарға курьерҙар, төрлө яҡҡа нарядтар, отрядтар ебәрегеҙ, тотоп килтерегеҙ, тип тешләнә-тешләнә фармандар бирҙе.

Юҡ, тота алмайҙар. Уның Кинйә менән тағы осрашаһы бар шул әле.

***

Пугачев Сыбаркүлгә, Силәбегә китергә уйлағайны. Унан — заводтан заводҡа... Шунда унын көсө бар икәнен аңлай. Крәҫтиәндәр уны көтә. Унда туптар ҙа, дары ла... Крепостар алыныр.

Артабан Екатеринбург... Унан Мәскәүгә туп-тура...

Бер станицала туҡталдылар. Бында Исәт провинцияһы казактары түш киреп йөрөй. 2-3 көн эсендә 2500 кеше йыйылды.

Ғәскәр йомшаҡ. Шулай ҙа бар.

Нижнеувельск биҫтәһен, Кичигинск, Коельск крепостарын алды.

— Сыбаркүлдә карателдәр күп, — тине атамандарҙан кемдер.

— Ә Силәбелә?

— Унда воевода хакимлыҡ ҡыла. Ғәскәре ҙур.

Башҡортостанға барырға, унда — Салауат! Унда... Михельсон. Уны алдап булыр.

5

Башҡорт ауылдары бер-бер артлы осрай. Байғаҙы ауылы. Ауылға етәрәк өс һыбайлы осраны.

Тәүге башҡорт яугирҙарына килеп, ниҙер ҡарайҙар. Пугач ҡушҡанса, Кинйә елдереп барып етте.

— Кемдәр?

— Беҙ депутаттан...

— Баҙарғолмы? Ҡайҙа? Тағы кемдәр?

— Ул көтә. Белешергә ебәрҙе. Барып әйтәйек.

Кинйә килә. Һөйләп бирә. Депутат Баҙарғол Юнаев. Бәкәтин олоҫонан. Кәҫле заводы яны. Бында хәрәкәт итә. Пугачев беләә.

— Тағы Юламан Ҡушаев — Ҡара-Табын олоҫо старшинаһы, Һары Абдуллин. Көтәләр.

Пугачев йәнләнде.

Осрашыу. Ғәскәр теҙелгән. Юнаевтың төҫө-һыны мөһабәт. Русса һәйбәт белә. Хәрби... Вәт офицер! Секунд-майор, юҡ, премьер-майор.

— Ғәскәрең күпме?

— 500 атлы. Яртыһы ҡушар атлы.

— Ҡоралдарың?

— Мылтыҡ, ҡылыс... Күп ине.

— Алдылармы?

— Юҡ, Кәҫле заводынан алдым. Шунда урыҫтарға тараттым. Ҡоралдары юҡ ине. Уҡҡа, һөңгөгә әллә ни түгелдәр. Ә мылтыҡҡа мәргәндәр. Бирҙем. Ҡоралһыҙ казактар ҙа бар ине.

Пугачев ял итергә ҡуша. Ә быларҙы ҡарай. Ауылда. Берәү мәйете дар ағасында бәүелә.

Пугачев:

— Кем?

Баҙарғол:

— Ҡотҡо тарата. Батшам, һинең хаҡта... Көтөргә булған, тик бөгөн килеренде белмәнем.

— Шулай кәрәк.

Белде Баҙарғол. Үҙе сапҡындар ебәреп, ҡайҙа йүнәлеүен белде. Ҡаршыһына сығып көтөп торҙо. Шулай ҙа аҫтырҙы. Ҡотҡо тараҡан кешеләрҙе, шымсыларҙы, хыянатсыларҙы ғәфү итмәй, уларға ярлыҡау юҡ. Булды аҫҡан-киҫкәне. Әле

яңыраҡ бирәүҙе – Силәбенән ебәрелгән отставкалағы поручик-тәржемәсе Осип Мещеряковскийҙы ла аҫтырғайны.

Юнаев бик оҡшаны Пугачевҡа.

Уға чин бирергә... Ниндәйҙе?.. Полковниктары күп. Ҙурыраҡты.

Ул күптән башҡорттарға ҙурыраҡ чинды биреү хаҡында уйлай ине. Императорҙың бригадирҙары, генералдары була. Хатта фельдмаршалы... Уның Россияла, ғәҙәттә, бер юлы икәү булырға тейешен белә. Береһен Зарубинға биргәйне. Тағы бирер, башҡортҡа. Кинйәгә бирер ине, ул эргәһендә... Көнсөллөк тыуҙырасаҡ. Ситтә булһын. Ә был – ниндәй мөһабәт, үҙе депутат, етмәһә.

Уға фельдмаршал чины бирҙе. Ҡара-Табын старшинаһы Юламан Ҡушаевҡа — генерал.

Полковниктар ҙа күбәйҙе ғәскәрҙә.

6

23 май. Пугачев ҡыйыу бара хәҙер. Кинйәгә оҡшай.

Тәүәккәл, ә тәүәккәлдә тау көсө була.

Көтмәгәндә, Ҡундрау биҫтәһе янында, Михельсондың корпусы менән осраша (Лягушин ауылы яҡында).

Пугачев еңелә. Көсө аҙ. Быны Салауат ишетә. Михельсондың көсөн үҙенә тартырға итә. Күренә-күренә, уны алдатҡан төҫлө. Барып ташланып ҡына еңеп булмай. Еңелһә — бөтәһе һәләк буласаҡ.

Белә ул сиреү хәйләһен. Ундайҙы ҡоштар ҙа белә. Ҡурҡыныс килһә, оянан ситкәрәк күсә. Шунан ҡалҡына. “Сүт-сүт”. Тауыш биреп, үҙенә иғтибарҙы тарта.

Хайуандар ҙа шулай өңөнән ситкә йәлеп итә. Пугачев бала түгел, ләкин ярҙамды ҡайҙан алһын?

Сиреүҙә шулай: ауыр саҡта батша урҙуғаһына йыйылышыу, шуны һаҡлау йә үлеү. Юҡ, үлергә түгел, көрәшергә...

Салауат Йүрүҙәнгә үтә. Сапҡын ебәрә. Ҡыйғыға барабыҙ, тип. Аңларҙар. Сапҡын һөйләр.

Һөйләй, ҡул менән күрһәтә.

— Ҡыйғығамы?

— Эйе, – баш эйҙе.

— Михельсон көсө ҙурмы?

— Оһ, ҙур!

Кинйә һөйләргә өлгөрмәне, Пугачев:

— Ҡыйғыға! — Аңлаған тауыштан хәл итте лә ҡуйҙы.

— Барып етәйек. Бер-беребеҙгә ярҙам, көс бергә булһын!

Шунан тағы Салауат һул яҡ флангынан походҡа сыҡты, батша тынысыраҡ барһын өсөн. Бөрөгә табан бара... Пугачев Красноуфимскиға юллана.

Пугачевтың 2500 кешеһе бар ине. Ләкин Пугачев еңелә. Уның 600 кешеһе үлтерелә. 400 кешеһе әсиргә эләгә. Күптәр тирә-яҡҡа тарала. Ни бары 500 кешеһе ҡалған.

Башҡортостанға!

Ләкин ғәскәр таралып бөтмәне, тағы ҡушылырҙар әле яңы көстәр.

Сыбаркүл, Лугинин заводы. Крәҫтиәндәр яҡшы ҡаршылай. Златоустҡа... Унда сапҡындар. Юлай ебәргән. Үҙе Михельсонды тотоп тора. Гел күҙәтеп. Һатҡыла көттө. Һатҡы заводы ла Лугининдыҡы. Пугачев яндырҙы заводты.

— Ҡыйғыға барабыҙ — юл асыҡ.

Юлай алданыраҡ китте. Тирә-яғында һағауылдар, шәйләктәр. Хәүефһеҙ кеүек юл.

Михельсон, ҡыйраттым, ти. Үҙен күрмәне. Бәлки, ул бында Пугачев барын да

белмәгәндер. Белһә... Ябырылыр ине. Ул бит бында Фрейман менән осрашырға тейеш ине. Юҡ, Салауатты тоторға. Кире боролдо.

Златоустҡа бара. Унда (белә) — Пугачев. Һатҡыға киткән...

Әһә, Салауатҡа киткән. Төнө менән Эҫемгә килә.

Килһә, янған. 23/V заводты Салауат яндырып киткәйне.

Яндырҙы. Уйланды. Завод бит, крәҫтиәндәр ни әйтер? Батша хәҙрәттәре Белореттан уҡ указ ебәрҙе. Заводты яндырырға! Үҙе лә үткән юлда яндыра, дошманға ҡалмаһын тип. Эҫем заводында поп ҡаршылыҡ ойошторҙо. Салауат еңде. Кешеләргә, сығығыҙ, тине. Малдарын алып сыҡтылар. Янды завод.

Михельсондың ғәскәре йонсоно. Аттар ятып ҡалды. Бер атҡа — икешәр кеше. Ат эҙләп торор ваҡыт юҡ.

Әйҙә, Йүрүҙәнгә — Әйгә.

Яңыраҡ Салауат сыҡҡан. Паромдарҙы ватҡан. Теге яҡта нығынған. Михельсон артиллериянан ата. Көлгән һымаҡ, артҡа әйләнеп ҡарайҙар. Ҡул болғайҙар. Аталар. Йыраҡ.

Теге яҡта ҡаты һуғыш. Салауат еңелә. Унда Мөхсинде таный, йәнә Янышттың улдарын төҫмөрләй.

7

Салауат Йүрүҙәнде аша сығып китте. 30/V. Артынан Михельсон төшкән. Ләкин үксәһенә баҫа алманы. Етә лә алмаҫ әле. Күпер һүтек. Пристань янған. Паромдар ватылып аҡты. Кәмәләр юҡ. Йөҙөп сығырға? Туптарҙы арҡан менән һыу төбөнән тартып.

Салауат артта төркөмдәр ҡалдыра. Улар һөжүм итеп, уҡтар яуҙырып саба. Бөтә юл буйы Михельсонға ҡаршылыҡ.

31 майҙа Михельсон – Салауат араһында һуғыш.

Көс аҙая. Салауат әмер яҙҙы. Салауат бында Пугачев килеренә ышана. Осрашырҙар. Шул хаҡта халыҡҡа хәбәр тарата. Ҡоралланып килергә ҡуша. Батшаға ғәскәр йыйырға, ғәскәр...

“Ул олуғ батша хәзрәтләре Петр Федоровичтың әмере илән полковник Салауат Юлай уғлы.

Батша ағзам хәзрәтләренең бойороғон үтәүдә Ҡыйғы юлы илән дошман ғәскәренә ҡаршы сығырға әмер ҡылам. Сотник Ҡадир Ғәбделкәрим уғлына, йәнә Иләтбай Илембай уғлына бар булған суғышҡа яраҡлы халыҡны һәм атларны (йыйығыҙ), батшамыҙ ағзам хәзрәтләре алдына уч мең ғәскәр әҙер булсын. Андағы залим алпауыттардан һуғышҡа яраҡлы булғанын барын да инҡарсыз алырға һәм дә Юлай Аҙналинға, безләргә ярҙамға килеүгә тиз арада хәбәр ебәрергә. Юл айҡанында безләр күп юғалтыуҙарға очрадыҡ. Дошман ғәйәт тә ныҡ ҡаршылыҡ ҡылды.

Полковник Салауат Юлаев ҡул ҡуйдым июнь айының 1-нче көнө 1774-нчы йыл”.

Бындай әмер-ярлыҡтар туҡтаған, форсат тыуған һайын яҙылды.

Тыныс саҡта еләләр, тыныс урында йырлайҙар:

*Салауатҡай килә ғәскәр менән,*
*Ат уйнатып, Үҙән буйлатып,*
*Ҡалҡанҡайы һәлмәк, уғы мәргән,*
*Дошман яуын ҡырҙы шаулатып...*

Ауылда ла йырлап ҡалалар. Бөтә йәйләүҙәргә таралған ошо йыр. Кемдер орлоҡ итеп һипкән тиерһең.

2—3/VI. Ҡыйғы ауылына етәрәк тағы Салауат – Михельсон һуғышы.

Салауат Ҡыйғыға шул көндө (3/VI) барып инде. Ҡәнзәфәр Усаев килеп етте. Аптырай. Дуҫы бит.

— Арҡаңда Михельсон даһа!

— Ә һин нисек үттең?

— Мин уны белгәс, һулға ҡайырылдым. Үттем.

Ашыҡҡан.

— Батшаны күрергә киләм. Миңә указ кәрәк. Китәм тағы.

Эйе, бик кәрәк. Һуңғы ваҡытта карателдәр күп йөрөгәс, халыҡ уға ярҙам итмәй. «Батша указы бармы?» – тиҙәр. Ә унда указ юҡ, үҙенә ышанып биреп ебәргәйне.

Унан үҙе лә ни ҡылырға аныҡын белмәй. Бер юлда хәрәкәт итеү фарыз икәнде аңлай ҙа бит.

Салауат йылмая. Ашыға-саба инде был, ашҡына бара.

— Көт ошонда. Килер ул. Атайым уны ҡаршылай. Ошо тарафҡа йоҫоҡ бирер.

Салауат:

— Бүгәс батыр килә ул.

Усаев һағайҙы:

— Һин...

— Ниңә? Ана, ишетмәйһеңме? Йырлайҙар.

*Эйәрләп атҡа менгән дә,*
*Биленә ҡылыс элгән дә*
*Бүгәсәү тигән шул батыр.*
*Йәмәлкә тигән ҙур батыр...*

— Ул бит яман ауыҙҙар һүҙе. Үҙең дә.

— Шулай шәберәк.

*Йәмәлкә тигән шул батыр,*
*Арыҫландай ажғырып,*
*Юлында ҡойон яндырып,*
*Атҡа атланды шул батыр.*

Ваҡыт тар. Яҙған әмерҙәр буйынса кешеләр байтаҡ килә. Ҡарап, һайлабыраҡ алырға кәрәк. Эшкә тотондолар.

Сапҡындар елде. Атаһынан көс килде.

Иртәгәһенә атаһынан хәбәр алды. Батша былай табан килә.

Юлай килде.

— Кинйә абыҙҙан хат. Киләләр. Кинйә алып килә икән.

Оҙаҡламай Пугачев киләсәк!

Үрге Ҡыйғыла ла теҙелгән ғәскәр менән ҡаршылайҙар. Пугачев — алда. Янында – ярандар. Юлай күптәрен танымай. Кинйә, Баҙарғолдо, Юламанды ғына белә.

Ә Пугачев... Йә алда, йә урталалыр, үҙе күргәне юҡ. Ләкин таныусылар бар. Улы беләлер, Ҡәнзәфәр ҙә таный.

— Шулмы? — Юлай улына ҡарай.

— Батша хәҙрәттәре шул үҙе инде.

Салауат таный. Күпме осраштылар. Һөйләштеләр. Бына тағы үҙ ерендә осрата.

Ул башҡаларын да таный... Тик элекке атамандар аҙ. Овчинников, Перфильев, Творогов... күптәре күренмәй, тимәк...

Юлай:

— Бар, һин танышһың, рапорт бир.

Салауат әҙер. Атын алға атлата. Эстән аҙымдарын һанап, туҡтата. Ҙур ғәскәр башлығы кеүек рапорт бирә. Күҙҙәре янып тора, тауышы көр.

— Бадишам ағзам хәҙрәттәре! Һеҙҙең алда — башҡорт ғәскәре. Бына улар... Һинең яраның палкауник рипурт бирҙе Салауат Юлай улы. Алдығыҙҙа — башҡорт старшиналары. Бына — атаман Юлай Аҙналин. Бына — палкауник Ҡәнзәфәр Усаев. Бына — Миҙәт Миндиәров[1], — ул Дыуан олоҫо старшинаһына күрһәтте.

Пугачев:

— Йәшәгеҙ, балаларым, йәшәгеҙ, батыр башҡорттар!

Геү килделәр һәммәһе лә.

Ул аттан төштө. Салауат ырғып уның ҡаршыһына баҫты. Батша батырҙың яурынынан ҡаҡты. Оһо. Ныҡ. Күреште:

— Молодец, атаман, — Юлай менән дә күреште. Атаһы икәнен белде. Ҡәнзәфәрҙе лә таныны.

— Ял итергә!

Аралашыу. Салауат Пугач ярандары менән таныша. Кинйә Юлай менән бергә. Һүҙ күп. Юлай Ҡәнзәфәрҙе күреп аптыраны.

— Һеләүһен ҡайҙа?

— Ул алайҙар башында ҡалды. Мин фарман алырға килдем.

Пугачев тирә-яҡты һорашты. Ҡәнзәфәрҙән – Өфө яғын, үҙенең отрядын. Унда ла көрәш барыуы бик шатландырҙы, бына бит, фарман һорай. Усаҡтар дөрләй икән, көрәш һүнмәҫ.

Фарман (манифест) бирә. Уҡый.

— Яҡшы, былай булғас...

Хәрби коллегия йыйып алды. Бында Баҙарғол менән Юламан да, Салауат менән Ҡәнзәфәр ҙә ултыра.

Бында Пугачев чиндар таратты. Юлайға — Себер юлы атаманы. Салауатҡа — бригадирлыҡ. Ҡәнзәфәргә — бригадир, Дыуан иләүе старшинаһы Миҙәт Миндиәровҡа полковник дәрәжәһен бирҙе.

Был хәбәр тиҙ таралды. Яугирҙар ауылда. Салауатты беҙҙең янарал[2] тип күккә сөйҙөләр. Йырлап та... Салауат үҙе лә ишетте.

*Аҡ ҡуянҡайҙың балаһы,*
*Ҡолаҡ осҡайында ҡараһы,*
*Булгадир булған шул Салауат –*
*Данлы ғына Юлай балаһы.*

Ә икенсе урында — бүтәнсәрәк:

*Аҡ-күк атын батыр йүгәнләй*
*Яуға китер мәле еткәндә,*
*Дошмандары уны күрә алмай,*
*Бүгәс ғәскәр башы иткәнгә.*

Салауат ишетеп ҡалды ла һорашты:

— Кем? Кем биргән, тинең?

— Пугачев. Бүгәс батша, тинем.

— Кем ул?

— Бәй, ана килде бит үҙебеҙҙең батша Петр Федрич.

Салауат йылмайҙы. Кем ул? Барыбер башҡорттоҡо...

Шатлыҡ шулай ҙа...

Салауатҡа булгадир Юламан килде. Уны янарал иткән. Ә депутат Баҙарғол уҙаманды нисек ҙурлаған: килде маршыл!..

---

[1] *Миҙәт Миндиәров — Дыуан олоҫо старшинаһы, Миндиәр Арҡаевтың улы, б. к. полковнигы.*
[2] *Янарал — генерал, ул саҡта бригадир – полковник менән генерал-майор араһындағы чин.*

— Ҡайһыһы ҙур?

Фельдмаршал ҙур, тимәйҙәр.

— Әлбиттә, булгадир, Салауат батырға биргәне...

5/VII. Күп тә үтмәй, Әй буйында һуғыш тоҡанды.

Хәҙер Пугачев, Салауат бергәләп — Михельсонға.

Бер яҡ та еңә алмай.

Михельсондың кәйефе ҡырылды. Үҙенең хәлен аңлай.

Ул журналына, яраланыусылар араһында Салауат та бар, тип яҙа.

Юҡҡа ҡыуана, Салауат имен-аман даһа.

Оҙаҡ ятып булмай. Аттар ашатылды, ғәскәр һыйланды. Ҡуҙғалырға ваҡыт.

Пугачевтың уйы: тәүҙә Екатеринбургҡа.

Салауат:

— Красноуфимскиҙа тынысыраҡ.

Белобородов:

— Унда Кама.

Пугачев:

— Вот шунда аша сығырбыҙ йылғаны.

Белобородов хәлде анығыраҡ белә.

— Теге яҡта көс күп. Түбәнерәк.

Кинйә (ундағы башҡорт атамандарын белә. Абдулов һ.б.):

— Уса тирәһе.

Күнделәр. Пугачев Красноуфимға ҡуҙғалды. Баҙарғол уң яҡты һаҡлай.

Салауат та Пугачев әмере менән һул яҡтан һаҡлау өсөн ситкә ҡайырылды. Уларҙың арҡа тыныслығын һаҡларға бер алай менән Әй, Йүрүҙән буйҙарында Себер юлы өйәҙенең атаманы Юлай Аҙналы ҡалды.

Ә Михельсон береһе артынан да эйәрә алманы. Уның көсө ҡыйралып бөткәйне. Үлгәндәр, яраланғандар байтаҡ, ауырыуҙар күп. Аттар аҙ. Аҙыҡ-түлек етмәй, фураж юҡ. Дары, йәҙрәләр наҡыҫ. Өфөлә корпусын тәртипкә килтерергә, диспозиция яһарға кәрәк! Ә бит ул бүтәнсә, ретирада яһарға, тип әйтергә тейеш ине, юҡ, сигенергә, тип әйтеүҙе яратмай шул.

Яраланған бүренең алпан-тилпән үҙ өңөнә ыңғайлағаны һымаҡ, Өфөгә табан боролдо карателдәр.

Пугачев барып етте. Мәсәғүттә ҡойроғона баҫа. Һуғыш... Михельсон сығып китә, борола.

8

Красноуфимға яҡынлап барғанда байтаҡ башҡорттар ҡушыла. Ҡошсо ырыуы, һалйоғоттар. Өпәй башҡорттары ла күп. Юлда Оло Аҡа — Бәхтиәр Ҡанҡай ауылы. Үҙе унда юҡ, хәбәр ебәрҙеләр.

Тыныс июнь. Көндәр матур. Юл яҡшы. Аттарға үлән мул. Үҙҙәрен башҡорт ауылдарында ла, мариҙар, сыуаштар ҙа яҡшы ҡаршылай.

Ләкин улай ғына ғәскәр йыйып булмай. Кинйә аманаттар ала. Улы китһә — атаһы, атаһын алһаң, улы бер бәләкәс ҡор туплап килә.

Рус ауылдары күренде. Раскольниктар күп. Ваҡ-ваҡ скит булып йәшәгәндәре лә бар. Ауылдар осрай.

Еретик тип йөрөтәләр, раскольник йә старовер. Башҡорттар өсөн барыбер — рус та. Улар үҙ-ара бүтән, имеш, бер рустан икенсеһе ситләшә.

Пугачев уларҙың ни теләгәнен белә. Үҙенең староверҙар тегеп биргән байрағын алға сығарҙы. Ҡыҙыл буҫтау. Унда һигеҙ тармаҡлы тәре. Һәр алайҙың үҙ байрағы, үҙ тыуы бар.

Байраҡ уларға оҡшай. Мәзлүм крәҫтиәндәр өмөтөн уята, уларға рух бирә. Ул раскольниктар шуның өсөн дә, алпауыттар, дворяндар Аллаһына табынмайынса,

үҙҙәренең мужиктар Аллаһы дөрөҫ, тиҙәр ине. Батшаһын да мужиктар батшаһы итеп күргеләре килә.

Унан килгән кеше етди булыуы ихтимал. Тик казактарҙың бола емерелгән, ут йотоп ҡалыуҙан файҙаланырға уйламаймы?

Кинйә:

— Уның раскольниктар кешеһе булыуы бар. Шулар яҡлы ғына булыр.

— Юҡ, бында хикмәт бүтән. Петр Өсөнсө үҙе...

“Тағы Петр III...” Ысын-ысынлап ышанамы?

— ...Үҙе раскольник түгел... Раскольниктарға һыйына алған. Улар бит яҡшы кешене һаҡлай белә.

Пугачев быларға ҡарап тора. Бөтәһен һаҡал-сәстәрен киҫтереп казак итергә ине лә, юҡ, былар казак булырға бик үк теләмәйҙәр. Былар һөйләнергә, зарланырға ярата, һиңә ҡушылып кемдәрҙелер һүгергә, күп тигәндә йоҙроҡ төйнәргә генә ярата.

Ҡай саҡ бергә, ҡай саҡ һибелеп киң фронт менән.

Кинйә — уртала, уңға Баҙарғол отряды тартыла. Уға таныш яҡтар. Белобородов рус ауылдарына ыңғайланы.

— Ә Салауат хәҙер бик алыҫталыр. Бөрөгә баралар.

Ҡариҙелгә сыҡтылар. Паромда өпәйҙәр эшләй.

— Үҙебеҙҙең йылғала паром эшләмәй ине. Өпә йылғаһы бит.

Ана, үрҙә икән Өпәле. Әле генә Уфалей тиҙәр.

Эйе, бер балыҡ — уларҙың пог-Аллаһы... Шул исем — үҙҙәренә генә түгел, ауылға ла, йылғаға ла. Ихтимал, тау башындағы ҡәлғәле ҙур ҡалаға ла. Хәҙер генә Өфө, Уфа...

Красноуфимға еттеләр. Алдан Белобородов керҙе. Бында бер ваҡыт, ҡыш көнө, Салауат ҡуйған атамандар бар ине. Улар хәҙер юҡ.

Пономарь икән береһе, алдан күреште.

— Безгә фатиха бир.

— Һин кем?

— Пономарь.

— Ҡайҙа батюшка?

— Ул... ул... Ҡасты, — тинеләр.

Фатиха бирергә... Әлбиттә. Күнегелгән.

– Мәскәүгә барам, шунан Катеринаны тәхеттән бәреп төшөрәм. Үҙем ултырам, — тиеүҙән башҡаһы юҡ.

Уның манифесы ла әҙер. Уҡыйҙар. Ер, һыу, жалую волею, крестом и бородою.

Халыҡ шуны теләй, шуны көтә.

Шунан ауыл халҡы, батыр казактар һәм мишәрҙәр, мариҙар — бөтәһе бергә буталыша. Бөтәһе лә батша көткәйне, бөтәһе лә батша тапты.

Элек аралашыу була ине. Үҙ-ара тартыш та. Бындағылары бер-береһенә һағайып баралар ине. Әле дуҫтар.

Ҡыш көнө уны шатланып ҡаршы алдылар, ярҙам иттеләр, туптар бирҙеләр, дары таптылар.

Уның кәңәше, уның рөхсәте менән үҙҙәренә атаман, яҫауыл һайлап ҡуйҙылар. Тынланылар. Шул саҡта уҡ, батша үҙе килә, тигәйне. Ысын әйткән, үҙе генә ҡайҙа?

Таныш башҡорттар Пугачевҡа килә.

— Ҡайҙа беҙҙең полковник Салауатка?

— Салават — мой бригадир!

Пугачевҡа бындай һорау оҡшай. Ул ике йоҙроғон айырым-айырым йомарлап алға һуҙҙы.

— Берәһе — мин, берәһе — Салауат. Беҙ шулай Катерина ғәскәрен ике яҡлап ҡыҫабыҙ. Уның армияһы тегенән бара. — Шунан ул ике йоҙроғон бергә уҡмаштырҙы. — Беҙ бына шулай. Бергә уның менән...

Рустар шат.

— Йәшә, батша! Йәшә, Салауат!

Бында ҡуналар. Кис Пугачев сыға. Уйын-йыр.

*Салават наш был герой,*
*Смело он ходил на бой.*
*Три кольчуги надевал*
*И к Кунгуру подступал.*
*Порох-ядро забирал,*
*Порох-ядро забирал,*
*Сорок пушек заряжал,*
*Сорок пушек заряжал...*

Бер аҙҙан йыр яҡыная.

*Пугачева поздравляли,*
*Салавату руки жали...*

Пугачев:

— Шайтандар, — тине лә инеп китте.

Беләләр. Белмәй булалармы ни... Туҡталып торорға кәрәк ине. Писарҙар эшләй, сапҡын елә, уларҙан килә.

Күрше старшиналарҙы саҡыртырға, кешеләр йыйҙырырға, бер ҙә булмаһа, аманаттар алырға. Һорап, талап иткәс, ҡорал, дары кеүеген табып килтерәләр. Ә тимерселәр туҡтауһыҙ эшләй, ҡорал яһай, уҡ башаҡтары, һөңгө баштары сүкей, малайҙар уҡ һаптары юна, ҡарттар — һөңгө һуйылдары.

Ә Пугачевҡа хөкөм итергә берәүҙе тотоп килтерҙеләр. Мужик хөкүмәт яҡлы, имеш.

— Ниңә һин миңә ҡаршы?

— Ҡатынды ниндәйҙер ситтән килгән яусылар көсләгән. Үҙен-үҙе үлтерҙе. Вәт шуға мин ҡаршы.

— Аҫырға кәрәк уны. Ҡайҙан тоторға?

— Бына — бараһың, шундайҙы табырһың.

— Аҫырбыҙ. Үҙен!

— Бар!.. Ҡатын-ҡыҙҙы алып китеү бар.

Күнде теге.

— Тегендә малды алғандар. Карателдәр ауылды яндырғандар. Бергә көрәшәбеҙ, йәме!

Бәхтиәр Ҡанҡаев килде.

— Ғәскәрең күпме?

— Ике йөҙ... Әмер бирҙем Илсеғолға. Юлайға. Тағы килерҙәр.

Кинйә:

— Ул үҙе лә бирер. Улы ла һуғыша.

Көләп ҡуйҙылар. Был ваҡытта улар бер-берәһенә әмер биреп, батша исеменән указдар тараталар ине. Бәхтиәр ҙә, Юлай ҙа яҙҙы. Нишләйһең, ғәскәр тупларға ҡушылған, фарманды үтәргә кәрәк бит.

Әле яңыраҡ Ҡанҡай улы Бәхтиәр ҙә яҙғайны. Күршелә. Килгәне бар. Улы Салауатҡа әмер бирергә баҙнат итмәһә лә, был ваҡыт Һатҡыла торған атаһына.

Бәхтиәр Ҡанҡаевҡа Пугачев ғәскәр тупларға әмер бирҙе. Ул алдан үҙе белә ине. Һиҙемләп, батша исеменән әмерҙәр ебәреп ятты.

Хатта ул шаштырып та ебәрҙе. Әле батша килер алдынан ул Юлай Аҙналыға ла әмер ебәреп өлгөрҙө. Батшаның унда икәнен белмәй ине. Унһы ярай. Ә

Салауаттың, Юлайҙың унда, тик ятмай, Михельсон менəн өҙлөкһөҙ йəн асыуы менəн алышыуын иҫкə лə алмаған. Батша исеменəн “бер команда илə биш мең ғəскəр илə Ҡатай заводына юл тотам. Беҙлəргə ярҙамға уч мең илə полковник Юлай Аҙналинға килергə əмер бирəм” тип яҙған.

Салауат, Юлайҙа өс меңе бар барын, ə үҙенең биш меңе ҡайҙа?..

Ғəйеп түгел, быңдай яу ваҡытында бер-береһенə əмер биреүҙəр ҙə, фəстереп-бүрттереп ебəреүҙəр ҙə тəбиғи хəл ине.

Был 10 июндə яҙылғайны. Сапҡын əмерҙе алып килде, əлбиттə. Ə иртəгəһенə Пугачев уның үҙен саҡыртты.

Бында заводтар күп. Суҡсын, Йоҡ заводы. Уларҙан килделəр.

Ачиттан бер отряд килеп ҡушылды.

Пугачев теге пономарҙы саҡыртып алды.

Пономарҙар уға элек тə оҡшай ине. Улар ғибəҙəттə попҡа ярҙам итə. Ябай, тотанаҡлы була, эш өсөн йəн бирергə əҙер. Был да кəрəк булыр.

Пугач:

— Будь послушаше як своего отца, — тине.

— Буду.

Уйланып алғас аңланы: алып китə, лəкин ҡарышманы.

Тупландылар.

Был тəңгəлдə Камаға барыу ярамай. Каратель отрядтары күп икəн.

— Бибиков тик ятмай, — тинелəр.

Ҙурыһы, элекке командующий Александр Ильич түгел. Быныһы Василий Федорович, полковник Бибиков. Екатеринбургта 1769 йылдан бирле йəшəй, Уралдағы тау заводтарының дəү башлығы.

Ул бөтə сараһын күрҙе. Екатеринбургты нығытты, яугирҙар яулап алған заводтарҙы яңынан ҡулға төшөрҙө.

Бында — Тулва башҡорттары, Ғəйнə башҡорттары — тулауайҙар. Тол йылғаһы. Тол тауы. Тулва, тиҙəр арҙар. Тулва заводы, тиҙəр.

Ирəктəре башҡорттары. Əбди Абдулов — Усть Тунтар ауылы.

Батырҡай Иткинин. Матвей Мазжерин. Иван Тарасов.

Тонйорап яткан Кама. Боронғолар ҙа, əле лə Сулман тип тə йөрөтəлəр Каманы.

9

Сəрəтəн. Йəм-йəшел. Йылы. Япраҡ һелкенмəй. Мамаҡтаҡ өрпəк болоттар йөҙə. Ҡоштар һайрай. Салауаттар килə.

Бытбылдыҡ. Ләззəтлəнеп тораһыңмы? Кешегə тынғы юҡ. Михельсон күренмəй. Лəкин барырға кəрəк. Бөрөгə.

Аттарҙы ҡыуалар. Һой, һойт.

Урманда əкренерəк. Шунда йыр һуҙалар.

*Салауатҡай менгəн атына,*
*Сығып китте башҡорт иленə.*
*Салауатҡай ҡырҙы дошман яуын,*
*Булат ҡылысы уның билендə.*

Үҙҙəренеке йырлай — бер хəл, улар үткəндə, ауылдарҙа йырлап ҡалалар. Өҫтөнə, башына, атына, ҡылысына ҡарайҙар.

Йырлап ҡалыумы... Өлкəндəр юл буйы. Бала-саға, бер урында ҡыҙ-ҡырҡын, улар артында йəш киленсəктəр оҙата.

Улар ҙа йырлай. Турһыҡ-турһыҡ ҡымыҙ, ҡорот-май, ҡаҙылыҡ алып сығалар. Бер генə эйəрҙең ҡанъяғаһы[1] буш түгел.

Егеттəр үҙҙəре лə аттарын эйəрлəп, ҡорал-яраҡтарын аҫып эйəрə.

Салауат үҙе туҡтағанда ла ғəскəр йыя. Уның батша фарманын атҡарып йөрөүен белəлəр.

[1] *Ҡанъяға — төрлө нəмə бəйлəү өсөн эйəрҙең ҡапталына тағылған ике армытлы ҡайыш бау; торока (русса).*

— Батша хәҙрәттәре имен-аманмы?

Ишеткәндәр. Оҙон ҡолаҡ йәһәт йөрөй.

— Һеҙҙең хәйер-фатихала. Беҙгә ер-һыу, ирек даулап йөрөй. Тәхетен генә ҡайтарып алһын.

— Мораҙына ирешһен, бирһен Хоҙай!

Эйе, Салауат Бөрөгә табан бара. Пугачевтан алдараҡ китә. Икенсе юлға төшөр. Уны ҡыуып барғанда Михельсон ҡойроғона баҫа.

Салауат Әй буйлап Дыуанға табан күп тә барманы, икенсе көндө уға мишәрҙәр — бер алпауыт отряды — ике меңләп кеше ҡушылды.

— Ә, беләбеҙ кем икәнен!

Һуғыш. Еңелеп таралдылар. Шунан тағы бер отряд өҫтәлде. Шулмы? Шул. Салауат ҡыҫты. Быны тотам. Аҫам. Туп-тура үҙенә-үҙен үлтерәм. Атамандары ҡасты. Кешеләре ҡалды.

Салауат уларҙы алманы — ышанып булмай. Өйҙәренә таратты. Үҙенең юғалтыуы күп ине.

Икенсе көн Бәхтиәр Ҡанҡаев. Батша әмере буйынса ғәскәр килтергән. Өс мең.

— Һиңә бирәм.

— Эйе, ҡалһын. Миңә кәрәк былар. Бөрөнө алырға. Ике алыш булды. Үҙең тағы йый, Усаға бар.

— Батшаға рипурт бир.

Яҙҙы тиҙ генә. Алпауыттың исемдәрен атап яҙҙы.

Бөрөгә барғанда Салауат Пугачевҡа рапорт ебәрә.

Бына ул рапорт:

“Сезки бөйөк батшамыҙ Петр Федорович хәзрәтләре бойроғо буйынса батшамыҙ ҡушыуын тыңлап ихтирам ҡылдыҡ. Дошман ҡаршы тороу арҡаһында юғалтыуға осраныҡ. Атаман Алазетдин Әфлән уғлы ике мең халыҡ илә безләргә юлыҡты. Батшаның рәхмәтен әйтдек. Бында ике тапҡыр суғышҡа әйләдек. Әй суы буйында алпауыт Мәсәғүтйән күп ғәскәр илә ҡаршылыҡ ҡылды. Алпауыт Мәсәғүтйән халҡын ташлап йәшеренде. Старшина Бәхтиәр Ҡанҡай уғлы безләргә өс мең халыҡны батшамыҙ хәҙрәттәре алдына килтереп тапшырҙы, юлны дауам ҡыламыҙ. Дыуан юлына табан. Сотник Илембай уғлы юлдашлары илә сезләргә китте. Ихтирам ҡыласызлар”.

Илембай (батшаға), Бәхтиәр тағы ғәскәр йыйырға ҡушты. Ә Салауат Бөрөгә ынтыла. Унан Салауаттан һорашалар.

— Батша ҡайҙа?

— Бында, эргәлә ул.

Аптырайҙар.

— Күрҙеңме?

— Күрҙем.

— Нимә ти?

*Ерһеҙ ҡалған башҡортҡа*
*Ерен ҡайтарам, тип әйтә ул.*
*Һыуһыҙ ҡалған башҡортҡа*
*Һыуын ҡайтарам, тип әйтә ул.*

Халыҡ шатлыҡтан аптырап тора.

*Бығаулының ҡулынан*
*Бығауын йолҡам, тигән ул...*

Оҙаталар. Йырлап:

*Салауатҡай ҡылысын ҡулға алды,*
*Халайыҡтар яуға ҡуҙғалды...*

Кирәмәт туғайы. Ат ашатыу фарыз. Ял итергә. Юҡ, ярамай. Салауат белә: бында тапау түгел, үлән дә, япраҡ та алырға ярамай, ағас та киҫмәйҙәр. Бөтөнөһө изге һанала.

Белепме, белмәйме рустар киҫкәйне, ана, тауыш булды. Әле шуға ситтән урап үттеләр.

Ауылға етәрәк кешеләрҙең шунда килгәне күренде. Аҡ кейемдән, йыуынып-таҙарынып киләләр. Салауат, үҙе айырылып, уларға өндәште:

— Кирәмәтте һаҡларға бараһығыҙмы?

— Эйе. Киамат (большой белый бог) шулай ҡуша. Ә һиңә рәхмәт, беҙҙең йуланы (йола) боҙмайһың, урап үтәһең.

Салауат уны-быны һораша. Юлда мари ауылдары күп. Улар ҙа көҙҙән ҡуҙғалғайны. Салауаттың бәйләнеше бар.

Бурғаш ауылынан Иҙебай Ямбаевҡа, мәҫәлән, чин биргәйне. Полковник чины.

Бер ҡарттайҙан һорай (Ишкина исеме):

— Иҙебай ҡайҙа?

— Әсәһе Саликайҙы күргәйнем. Шул әйтер. Хәбәре бармы? Ана, ҡыҙы. Әй, Мечу? Атайың ҡайҙа?

— Хәбәр, Ишкина.

— Ярар.

Тағы бер ерҙә мариҙар һырып ала. Халыҡ һораша.

Салауат әүәлгесә һамаҡлай.

*Ерһеҙ ҡалған башҡортҡа*
*Ерен ҡайтарам, тигән ул...*

Һүҙҙәр аға. Урғылған шишмә туҡталмай. Батша һыуын да бирә, ирек тә бирә. Башҡорт бөркөт тә була, толпар ҙа була, үҙ иркендә азат йәшәй.

— Көсө етәме?

— Ғәскәре уның бихисап... Бына беҙ! Бөтә иләүҙәр вә көллө халайыҡтар күтәреләбеҙ ҙә барабыҙ!

Иҙебай полковник, Бүләк Якубов, Арыҫлан Оранғолов[1] килделәр.

16 июндә салауатсылар Бөрөнө штурмлай.

Был ҡала Өфө менән бер үк ваҡыттараҡ, ә ҡайһы бер ҡарттар әйтеүенә ҡарағанда, әүәлерәк тә һалынған.

Бөрө йылғаһы (русса Бирь). Дворцовое село Архангельское. Йөҙ йылдан элегерәк яу ваҡытында яндырылғайны. Урынына Бөрө крепосы һалына.

1664 йылда Федор Иванович Сомовҡа ошо урында, Бөрө тамағында, яңы острог төҙөргә, Архангел тирәһенә — ағас ҡойма тоторға, Солеварный городокты нығытырға күрһәтмә бирелде.

Батша Камаға яҡынлап бара.

Һораша. Ҙур отряд күренмәй. Михельсон Өфөгә китеп, көс туплай, яраларын ялай. Ә Яныш[2] балалары баш ҡалҡытырға ҡурҡа. Салауат разведка яһап, ҡоралдар алып, аттар әйҙәп алға барыуын белә.

Салауат крепосты яндырып китә.

Иҙебай Ямбаев үҙ отряды менән бында юлды ҡарарға ҡала. Ике көндән Салауат Усаға барып етте.

---

[1] *Арыҫлан Оранғолов — Себер даруғаһы Танып олоҫо сотнигы, б. к. полковнигы.*
[2] *Солтанморат Янышев.*

10

Ҡазан губернаһында ярлы-ялпы Пугачевты үҙенә азатлыҡ биреүсе изге батыр итеп көтә ине.

Ҡазан ҡалаһы, губерна үҙәге булараҡ, беренселәр булып үҙенә карателдәр килеүенә шаһит булды.

Генерал Кар килде. Еңәм-ҡыйратам тип килде.

Генерал Ларионов, генерал Фрейман, Бибиков. Һәр береһе ғәскәр алып килде.

Өфөгә — Чесноковкаға барҙылар. Ырымбурға күрһәтмә алырға. Көс, аҙыҡ ебәрҙеләр, ярҙам һоранылар. Ебәрелде — Ҡаранай, уның туғаны, йәнә Торнов һ.б.

Минзәлә, Нуғайбәк — өс халыҡҡа ла яҡын. Татар ҙа бар, башҡорт та, рус та...

Октябрь-ноябрь татар ерҙәре уларға ҡаршы күтәрелде.

Бөгөлмәнән көньяҡҡа Муса Мостафин[1] (Ҡандыҙ, Спасск ауылдары).

Декабрҙә ул Пугачевҡа барып ҡайта.

Давыдов Гавриил (керәшен, Свияга өйәҙе Бикәй ауылынан) – депутат. Керәшен Осип Енгалычев[2] — мырҙалар тоҡомонан.

Минзәлә тирәһендә Байсаҡ Биктимер[3] яу саба.

Давыдовҡа Степан ҡарт килеп ҡушылды, Ырымбур яғында йөрөп ҡайтҡас.

Ноябрҙә Арса юлында, Ҡазан янында Мәсәғүт Ғүмәров отряды ҡушыла. Ҙур отряд. Кар ҡыйралып ҡайтҡанын күргәс, бөтөнләй дәртләнеп киттеләр. Ә Ҡазанда — мәхшәр. Алпауыттар ҡурҡыуға төштө.

Отрядтар еңелә, тарала торҙо, яңылары ойоша торҙо. Карателдәр ауылдарҙы яндырҙы, кешеләрҙе аҫты, Ҡазандағы Йәшерен комиссияға хөкөмгә оҙата торҙо.

Яҙға табан яу баҫылды. Яугир крәҫтиәндәр ауылдарына таралды, өйҙәрендә йәшеренде.

Яуҙың төп көстәре ҡыйралды. Унан яҙ етте. Ҡасып китһәң дә сәсеп кит — сәсеүгә төшкәндәр бар.

Карателдәр ҙә күрше губернаға – Ырымбур, Өфө яҡтарына күсте.

Бер килке тымып ҡалған кеүек тә ине. Ләкин бәйләнеш өҙөлмәне. Ырымбурҙа, Өфөлә ни бар? Пугачев ҡайҙа? Салауат, Кинйә, Усаев, Ҡанҡаев ни эшләй – белешеп тора. Уң яҡҡа барҙылар, ул яҡтан килделәр.

Ләкин күренеп тора... Ҡазанға тупланған карателдәр ныҡлап язалау ваҡытын билдәләй, крәҫтиән яугирҙар, теш ҡайрап, уларға ҡаршы сығырға әҙерләнә.

Татарстан ерҙәрендә яҙ көндәрендә лә көрәш туҡтаманы. Түрәләргә буйһонмайҙар, һалым түләмәйҙәр, ылау сапмайҙар. Ауылдарға үҙҙәре хужа. Оҙон ҡолаҡ хәбәрҙәре йөрөй. Батша бында килә, тиҙәр. Пугачевты көтәләр.

Ҡаршы алыу. Воткин, Ижевск заводтары. Носков[4], Шмота[5] отрядтары.

Дауыл алдынан булып ала торған тынлыҡҡа оҡшай ине был.

***

Бигерәк тә Терсә олоҫо тирәләре, ауылдар — Тәвкилевтар ере, сөнки Ҡазан өйәҙендәге крепостной татарҙарҙың яртыһы уларҙыҡы. Ҙур алпауыттар, заводтары бар. Батшаларға электән тоғро хеҙмәт иттеләр.

Себер ханы Күсемдең тоҡомо булыр тәфтиләүҙәр. Бер заман уның ике ейәне — Аблай менән Тәүке — ғәскәр туплап, Өфөгә ябырылды. Һәм шунда ҡыйралдылар.

---

*[1] Муса Мостафин — Бөгөлмә ведомствоһы Шалты ауылы татары, б. к. полковнигы.*
*[2] Енгалычев Осип Федорович — керәшен, Бөгөлмә ведомствоһы Бөтөрмә ауылынан, б. к. отряд командиры.*
*[3] Байсаҡ Биктимеров — Төйсәй ауылының татар сотнигы, б. к. отряд командиры.*
*[4] Носков Андрей Федорович — Воткин заводының писчигы, б. к. полковнигы.*
*[5] Калабин (Шмотин, Шмота) Федор — Ҡазан өйәҙенең крәҫтиәне, б. к. атаманы.*

Батшаға баш һалдылар (христиан диненә күсеп). Аблай башҡорт ерҙәрендә, Саҡмағош тирәһендә, ер алып, ерләште. Ә Тәүке ошо Терсә тирәһенә. Быуындан-быуынға хакимлыҡтары күсте, ә уларҙың Ҡотломөхәммәте башҡорт ерҙәрендә яуҙар баҫтырҙы, кешеләрҙе ҡыра-ҡыра ҡанға батырҙы, ауылдар яндырҙы. Шуға ул Ҡандра һәм Асылы күлдәр яғынан буштан-буш меңәр-меңәр дисәтинә ерҙәр алды, әсир итеп алынған яугирҙарҙы шунда ҡол-крәҫтиән итеп килтертте.

Яурыны алтын уҡаланды, уның яуызлығы хаҡында ҡәһәрле йырҙар ҡалды.

Үҙе юҡ. Улы секунд-майор Осип Тәвкилев Салауат яугирҙары боларғанда Ашҡаҙар буйынан ҡасты, Ҡасҡын Һамаров уны Дим буйында тотоп аҫты.

Бындағы тағы берәүһен Аҡбаш ауылында тотоп аҫтылар.

Терсә тирәһендәге Наз Яр, Шишмә, Балтас, Кибәкшүр ауылдары.

Крәҫтиәндәре буй-буйына көрәште.

1740 йылдар низағ, фетнә оҙаҡ барҙы, ныҡ булды. 1764 —1767 йылдарҙа ла.

— Беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙы ҡол-крәҫтиән итеп алыуығыҙ хаҡында купчийҙы күрһәтегеҙ! — тип талап иттеләр.

Былтыр көҙ ҙә улар ҡулдарына ҡорал алғайнылар. Ебәргән вәкилдәре Минзәлә янына Ҡаранай Моратовҡа, ҡайһы берҙәре хатта Бердаға — Пугачевтың үҙенә барып етте. Халыҡҡа — указ, етәкселәргә чин алып ҡайттылар. Батыр көрәштеләр.

Тәвкилев ерҙәре, бөтә усадьбаһы яугирҙар ҡулына күсте. Байлығын хәләл мал итеп, үҙ-ара бүлештеләр. Ситтәге заводтарын ҡыйраттылар.

Ә бына яңыраҡ, яҙ еткәс, тағы ҡуҙғалдылар. Әбделйәлил Сөләймәнов етәкселегендә. Ул, полковник, бында хужа, власть унда. Былтырҙан бирле көрәште, Ҡаранайға ярҙам итте.

Ә май айында тап ошо юлдан барып, Михельсонға ҡушылырға ҙур команда менән Ҡазандан премьер-майор Дуве юлға сыҡты. Терсә кешеләре уның юлына арҡыры төштө. Олоҫто ҡыйраттырып булмай. Тирә-яҡтан кешеләр йыйҙы. 11/V. Терсә юлында һуғыш. Туптар уҫал. Сөләймән йәшеренде, ләкин бай татарҙар тотоп бирҙе. Яҡын дуҫтары менән Сөләймәновты Ҡазанға Йәшерен комиссияға алып китте. Ауылдарҙы Дуве һалдаттары баҫты. Ҡаты яза бирәләр. Дуве үҙе шул юлын дауам итеп Өфөгә, Михельсонға, ярҙамға китте.

Йәшерен комиссия 6/V ҡарары: Башҡаларға һабаҡ булһын өсөн Әбделйәлил Сөләймәнде Терсәлә аҫырға! Секунд-майор Скрипицын[1] алып килде. Аҫты ла китте. Ә бында — ҡайғы, "Тәүтиләү" йыры ағыла:

*Ҡарлуғасҡай ҡара, муйыны ала,*
*Ҙур нужалар күрә был бала...*

Майор Скрипицын Сарапулда Шитовты[2] аҫырға тейеш... Унан Кама буйына Уса биҫтәһенә китте. Ябырылып алып, шундамы, Өфөләме Михельсон корпусында майор Дуве командаһына ҡушылырға тейеш.

Һуңғы ваҡыттарҙа Уса бер яугирҙарҙа, бер карателдәр ҡулында булды. Яңыраҡ...

Дуве бында юҡ ине. Ул Өфөгә китеп ҡалған, ә Скрипицын китә алманы. Бында яугирҙар күп, биҫтәне ташлап китергә ярамай... Бер яҡтан Пугачев, икенсе яҡтан Салауат килә, тиҙәр. Майор ошонда бикләнеп, Михельсон менән Дуве килгәнен көтәүләргә булды.

---

*[1] Скрипицын Ф. — секунд-майор, Ҡазан гарнизонының начальнигы.*

*[2] Шитов (Иванов) Данила Иванович — Сарапул олоҫо Березовка ауылы священнигы, б. к. атаманы.*

11

Камаға еттеләр. Алҡынып аға икән дәү йылға.

Кинйә оҙаҡ ҡарап торҙо. Борон Сулман, Сулман-Иҙел тигәндәр уны. Бында Иҙелдәр күп. Төрөк ҡағанаты килгәс, Волганы — Оло Иҙел, быныһын Сулман-Иҙел тип йөрөткәндәр. Тап шул дәүерҙә уға көньяҡтан ҡушылған Аҡһыуға Аҡ Иҙел атамаһы ҡушыла. Төньяҡ — ҡара яҡ. Шунан аҡҡанына Ҡара иҙел — Ҡариҙел булып китә.

Шуларҙың бөтәһен аша үтеп киленде. Быныһын кисеп үткәс, Оло Иҙелгә етерҙәр. Унан инде — Мәскәүгә.

Батша шулай ти... Башҡалар ҙа шуға ынтыла. Юлы ғына уң булһын.

Сулманды кисеп сығырға кәрәк. Һәр урында — ҡаршылыҡ. Яҡында ғына, Рождественский заводында, Горы ауылы бар. Шунда, Усала, иң уңайлы урын тинеләр. Ошонан уҙып киткәндә инде... Хөкүмәт ғәскәрҙәре лә юҡ, тиҙәр. Кәмәләр бар, паром (борам) эшләй.

Уса. Ҡәлғә. Уны Уша тигәндәр. Борон-борондан башҡорттарҙың ҙур ҡышлауы, башҡорт ауылы булған... Уша. Элек, XVI быуат аҙағында, Иван Грозный әмере менән Новоникольская слобода тип исемләнә. Башҡорттар элек-кесә Уша ти. Шунан рустар ҙа Уса, Оса тиҙәр. Хәҙер — дворцовая волость. Тирә-йүндә ғәйнә башҡорттары көн итә.

Уса ҙур түгел. Ләкин яу ваҡытында Пугачевҡа ҙур ярҙам алынды. Башҡорттар, татарҙар. Ә хөкүмәт ғәскәренә был ҡәлғә ҙур ҡурҡыныс тыуҙырҙы.

Был тирәлә Йоҡ заводтары. Бер нисә Воткинский заводы. Очерский заводы ла ҡеүәтле генә. Йәнә Нытвинский заводы бар.

Граф Строгановтың, граф Чернышевтың, Демидовтың заводтары, кенәз М. М. Голицындың, кенәз Шаховскийҙың заводтары. Улар яуға ирек бирерҙәрме?

Крәҫтиәндәр, ай-һай, яфа сиккән был тирәлә.

Яйыҡта яу башланғанды ишеттеләр. Өфө янында Петр Федорович батшаның полковниктары ғәскәр туплап тороуын белделәр.

Уларға депутация ебәрелде.

Ҡәнзәфәр Усаев килеп сыҡты. Депутация ҡайтҡас.

Декабрҙә, ғинуарҙа ниндәй хәл? Боларҙылар, еңделәр.

Боласылар ҡулында хәҙер Земская Изба. Дворцовая волость та. Шунда — яу канцелярияһы. Выборный орган. Горы ауылы. Подгородная слобода быға буйһона. Ундай ауылдар унлап.

Бергәләп Яковлев заводын туҙҙырҙылар. Тирә-яҡҡа үҙҙәре хужа.

Мишәр полковнигы Ҡанҡай улы Бәхтиәр (отряд менән). Әбделкәрим Күсәкәйев атаман күкрәк киреп йөрөй.

Яҙ көндәре лә көрәш туҡталманы.

Дошмандары бар. Ҡолой Балтас, туғаны Сәғит[1], Шәрип Кейек. Әхмәр менән Вәлиша[2] Шәриповтар. Килеп осрашалар, өҙөшәләр.

Пугачевсылар Усаны тағы алды.

25 майҙа кенәз Голицындың ауылын алдылар.

Шунан боласылар тағы Усаға яҡынлашты. Башмаков[3] карателдәргә ҡабат ярҙам ебәрә, 600 кеше.

---

*[1] Сәғит Балтас — Себер даруғаһы Ҡара-Табын олоҫо старшинаһы Ҡолой Балтастың ярҙамсыһы.*

*[2] Вәлиша Шәрипов — Мөхәммәтшәрип ауылының тарханы, Ҡазан даруғаһы Ҡаршын олоҫо старшинаһы.*

*[3] Башмаков Михаил Иванович — коллежский асессор, Урал заводтарының идара ағзаһы.*

Әле 15 июндә генә бик ныҡ ябырылдылар.

Шул көндәрҙә Усаны фетнәсе яугирҙар алды тигәндә, Усаға 100 һалдат килеп керә. Секунд-майор Скрипицын Терсәлә, Сарапулда экзекуция эшен бөтөргәс була был хәл.

Рождественский заводынан ярҙам килә. Бөтәһе 1200 кеше йыйылды.

Пугачев саҡ ҡына өлгөрмәй ҡала. Крепость стенаһы артында 1200 кеше бар ине.

Ләкин Пугачевҡа ла шул килгән (18/VI) көндө Рождественский заводынан 100 кеше килеп ҡушылды. 3 туп алып килделәр. Был бик мөһим ине.

Ләкин бында хөкүмәт ғәскәре лә күп. Башҡорттар ҙа бер төрлө түгел. Рудасылар байтаҡ. Ғәйнә олоҫо Ҡуян ауылынан Тасимовтар, мәҫәлән, хөкүмәт яҡлы.

Исмәғил Тасимов Йоҡ заводында тау училищеһы һалырға тип йөрөнө. Аҡсаһы — үҙемдән, тип. Һалдылар. Тик унда түгел, Петербурҙа.

Ҡаҙмаҡтынан Ишбулатовтар бер килке яуҙа ҡатнашып ҡалдылар, бик тиҙ киттеләр. Ҡалтайҙағы Ҡалтаевтарға ла ышаныс юҡ.

Ғәскәр туплана. Урынлаша. Уса ҡәлғәһенә штурм яһала.

Унан ҡаршылар ҙа тик ятмай. Ғәскәр ҡамай. Бер аҙ туптар ата.

Тағы өгөт хаты ебәреп ҡарайҙар.

Бәхтиәр Ҡанҡаев бында. Мишәр старшинаһы Әбделкәрим Күсәкәйев килде. Хәлде таныштыра.

Бөрөнән (18/VI) Салауат килеп етә. Көсө ҙур. Һуңыраҡ һөйләп бирә. Үҙенекеләр күп. Ҡанҡай ебәргән боласылар ҙа байтаҡ.

— Үҙе лә килер, — ти Салауат.

— Ә былар кемдәр?

— Мырҙа Аҡай, улы Әхмәт.

Завод кешеләре, Тулва, Ҡонғор, Ҡалтай башҡорттары килгән.

Көс күп. Ун меңдән ашыу. Әҙерлек (штурмға) башлана.

Хәрби советта ҡарар ителгәнсә, бесән йөктәре, тал сыбыҡ бәйләмдәре өйөлә. Уларға ут төртөүселәр билдәләнә.

Шунда Белобородов йыш күҙгә салына. Аяғы яралы.

Ҡаланы алаһы бар. Каманы сығырға кәрәк.

Тиҙерәк! Бына бит бер команда килеп өлгөргән. Екатерина ғәскәрҙәре килер, юлға арҡыры төшөр.

Белобородов та, башҡалар ҙа был уйҙы яҡлай. Яйыҡ атамандары ла бында оҙаҡ ятыу яғында түгел.

Йөрөп-ҡарап күҙ самаһы алдылар.

19/VI — Пугачев манифест ебәрә. “Ер-һыу, ирек, һалымдарҙан, яһаҡтарҙан ҡотҡарам...”

Ерен алырҙар, түләнмәҫ... Ә мәшәҡәте, бына яу, ылау, аҙыҡ бир... Эйе, тәхеткә ултырғансы булыр.

Тегенән берәү:

— Батшаны күрһәтегеҙ. Мин таныйым уны, — ти.

Пугачев быңдай эшкә ҡаршы.

— Килһен, — бер генә һүҙ әйтте.

Крәҫтиәндәрҙе, яңы казактарҙы килтерҙе. Бер аҙ кешене теҙеп үткәртә. Үҙе шунда баҫҡан.

— Йә... ҡара... — тиҙәр.

Ҡарап үтә, үҙенә еткәс:

— Нимә, оноттоңмо? — ти Пугачев. — Бар, ҡайтып әйт.

# Штурм

(23 июнь.) Кәрзиндәргә, тоҡтарға тупраҡ тултырып, шуның ышығында яҡынлайҙар.

Кешеләрҙе Мырҙа Аҡай, Әхмәт Аҡаев әйҙәй.

Салауат — авангардта... Нык һелкетә.

Салауат яралана. Дүртенсе ҡат яралана.

Белобородов та яра алды.

21-22 июнь ине. Уса ҡәлғәһе алынды, тиҙәр.

Скрипицын бирелде, бөтә командаһы менән. Ай, был Терсәләге, Сарапулдағы аҫыу түгел икән — үҙен аҫырҙар. Ул ҡалтырай. Мотлаҡ аҫырға үҙен!

Бөтә гарнизон геүләй.

12

Кисеү башланды.

Рождественский заводы, Горы ауылы кешеләре ҡайнаша.

Пугачев Белобородовҡа ышаныс менән ҡарай.. Ул бында баш атаман, главный. Аяғы яраланды. Шулай ҙа:

— Алға кешеләр ебәрҙем, — ти батшаға.

— Ҡайҙа, ниңә? — Пугачев ҡыҙыҡһына.

— Арғы яҡта юл әҙерләһендәр. Һаҙлыҡтар бар унда. Ағас түшәргә, күпер һалырға кәрәк.

— Мин шуны әйтергә укталған инем. Үҙең белгәнһең, молодец!

Белобородовҡа эш күп. Паромдар, кәмәләр, һалдар... Бөтә крепость халҡы эштә... Пугачевтың да егерме мең кешеһе булыр.

Аттар менән сығып, теге ярҙа нығынды.

Башҡорттар турһыҡтарға тын тултырҙы, эйәргә ике яҡлап бәйләйҙәр. Атҡа ярҙам был, бик үк батынҡы йөҙҙөрмәҫкә.

Пугачев тағы һораша:

— Ә ылауҙар ҡайҙа?

— Уларына айырым кешеләр тәғәйен, — ти Белобородов. — Был яҡты белгәндәр...

— Эйе, улары кәрәк...

Еңел баржалар. Коломенка тиҙәр. Эргәләге Горы, Неволина, Зобачевка ауылдарында яһалған. Уларға аҙыҡ-түлек тейәлгән.

Арыған аттан төшәләр, борамсыларға ярҙам итәләр. Турһыҡтарға тын тултырып, эйәр өҫтөнә бәйләйҙәр.

Борам. Уға туптар тейәлгән. Бер туптан замок төшөп китә.

Пугачев быны күреп:

— Нимә? — тип ярһый.

— Замок.

– Сыҡ әле бында!

Асыу булыр. Туп бында бөтә нәмәнән ҡиммәт. Һыуға төшөп китеүе бар.

Алпар күреп, сисенә, сума. (Кинйә янында бит.)

— Табып булмай, — Пугачев борсола.

Кинйә:

— Көтәйек.

Алпар оҙаҡлай. Кинйә:

— Хәҙер сығыр, — ти.

Алпар сөмәкәйҙән сығып тын алды. Ике, өс сыға. Бына, ти, һәм замокты ярға бирә.

Пугачев маҡтай үҙен.

Бында Алпар йөҙөп, сумып кинәнә. Тегеһенә ярҙам, быныһына...

Пугачев ҡарап-күреп ала берәүҙе сәсенән өҫтөрәп сығарғанын. Алпар күреп ҡалғас, батҡан артынан соңҡоп сума. Пугач эргәлә ине был саҡ.

Шунан береһенең пистоле төшә. Алпар йәнә ятыуға төшә. Оҙаҡ тора. Пугач Кинйәгә: “Батты бит!”

Юҡ, сыҡты... Пистолде алып:

— Мә...

— Үҙеңә булһын. Һаҡлай белмәгәс...

Алпар йылмая.

— Эх, үҙемә ярҙам итһәң ине. Ай... Тьфу, тьфу, батмаһын.

Шул саҡ, уратып алып, берәүҙе килтерәләр. Поручик Минеев (бер нисә кеше менән) майор Скрипицынды, капитан Смирновты. Күҙәтеп торған икән. Уға кем килә, ҡайҙа китә...

— Шымсы.

— Кем ебәргән?

Поручик этеп (Скрипицынды):

— Бына!

— Аҫырға!

Хәҙер үҙен... Шунда ғына белде Скрипицын аҫыу эшенең ауыр икәнен, хыянат итеүҙең гонаһ икәнен.

Ә Минеевты Белобородовтың ярҙамсыһы итте.

Кисеү эшләй. Йәһәте йәһәт ҡылана.

Бынан китерҙәр. Башҡорттар, бөтөнләйгә хушлашҡан һымаҡ, аръяҡҡа ҡарай. Кинйә үҙе лә ҡаранып алды.

— Ҡайтып, күреп булырмы? – Юл хәлен белеп булмай, тигәндәр. Был юл ғына түгел. Ни хәлдә икән йорт-илдә? Улы ни хәлдә?

Хушлашыу кәрәк ине лә... Юҡ, насип булмағандыр.

Күрешерҙәр. Бик тиҙҙән күрешерҙәр...

***

Полковник Ҡәнзәфәр батшанан указ алырға киткәс, бөтә сиреүгә баш булып ҡалған Һеләүһен мулла ике алайҙы ла Ағиҙел аръяғына күсерҙе.

Аҡташ тауы. Эргәлә Балапан, Талпаҡ.

Ҡәнзәфәр әйләнеп килгәнсе хәрәкәт итмәҫкә килештеләр. Ә бында, Эҫем тамағында, саҡ ҡына эстәрәк, донъялар тыныс кеүек.

Алда — кенәз болондары, тау-урмандары. Ораҡов биләмәһе.

Һеләүһен ҡарап тора. Тау ҡырласында бер һыбай һалдат. Күҙәтсе-шымсылыр. Һеләүһен һаҙағынан ике уҡ ҡармап алды. Береһе лә еткән. Тайшанып китмәҫ. Керешкә ултыртып атты. Теймәне. Ни булды? Ул атҡанда уғы һирәк яҙлыға ине бит. “Ҡулы ҡороһон, тип әйтеп өлгөргәндер”.

Һыбайлы быны шәйләп алды. Ҡуҙғалды, бирегә килә.

Һеләүһен ҡабат атманы, икенсе уғын һаҙаҡҡа тыҡты. Көтөп алды.

— Арыҫланов улы бындамы?

— Үҙем булам!

— Туғаның белешергә ебәрҙе...

Уларҙың (Ораҡовтарҙың) килене ошонан алыҫ түгел. Өфөнән ситтә, ҡыуылып тигәндәй, үҙе генә тиерлек йәшәй.

— Барып әйтәм.

Һеләүһен:

– Мин һиңә ике кеше бирәм, – ти.

Һеләүһен уға дуҫтары Төмтөк менән Әбеште ебәрҙе.

Хәбәр барыу менән Әлиә килеп етте. Йәш атҡа атланған.

Һеләүһен уны эстән йәлләй, ләкин һиҙҙермәй. Туғаны һағынып илап ебәрер, тип уйламай.

— Йә, килденме? Нинә күҙҙәрең ҡоро?

— Илап торорға... Мин Кинйә батыр ҡыҙы түгелме? Һин килде тип кенә...

Улар бәләкәстән — үртәшәләр, үсекләшәләр. Һаман шулай.

— Ни хәлдә йәшәйһең, ҡошонса?[1] — тип әйтмәһә лә була, әйтте.

— Ҡол хәлен һорашмайҙар. Һәй, шул хәлдә. Ҡошонса тип һин генә үсекләп әйтмәһәң.

Эйе, кенәз ҡатыны, тиеүе... Һөйләп бирә. Барыбер йәшәй. Үҙе мал-тыуар ҡарай, тамағы туҡ. Ләкин ире, Ташбулат-Михаил, һанламай, ул ғына түгел, атаһы ла чинынан, титулдан ҡурҡа. Дәғи батшаның уң ҡанаты — Кинйә старшина менән ҡоҙаһың, тиеүҙән ҡурҡа. Бындай ваҡытта, Пугачев һанаты, тиерҙәр. Шуға күрә бында күсерҙеләр. Күҙҙән алыҫта булһын, айырып ебәрелгән, йәнәһе. Шулай ҙа киләләр, ерҙәр мал-тыуар уларҙыҡы... Эшләһен... Битәрләй, һүгә, ярай әле, кенәздең йолаһынса, ҡул күтәргәне юҡ. Ҡайҙа инде, әсәһенә ҡунаҡҡа ебәрмәйҙәр.

Бигерәк тә яу йылында. Һағынған. Илайҙыр. Үҙе генә белә.

Шулай ҙа ағаһын күреүенә шат.

— Ярай, яу баҫылһын, әсәйемде үҙем алып килермен. Йә үҙе...

— Ташбулатмы?

— Эйе.

— Булды, ти... Яу нисек бөтөр әле.

Эйе, ныҡ һиҙенә, төрлөсә уйлай, күрәһең, Әлиә.

...Әлиәне оҙатҡандың икенсе көнөндә Ҡәнзәфәр ҡайтты. Бик ашыҡҡан, күрәһең. Атының ҡорһағынан аҡ күбектәр ағып тора. Эйәр тиреһе, серге аҫты шыбыр тир.

Һеләүһен:

— Ул-был юҡмы?

— Юл имен. Имен ерен табаһың. Ҡайҙа, һыу бир, — ти Ҡәнзәфәр. Һеләүһен ҡымыҙ бирә. Ғәжәпләнеп ҡарап ала бүҫкәртеп ҡуйғанына.

— Күрҙенме? — тип һорай.

— Күрҙем, — яуап бирә Ҡәнзәфәр.

— Молодец, полковник, тинеме?

— Бригадир, тине.

— Оһо!

– Барманың бит.

— Беребеҙгә булһа — етер. Манифест бирҙеме? — Һорай Һеләүһен.

— Бирҙе, — күлдәк иҙеүенән алып, Һеләүһенгә тоттора. Уҡый, яҡшы.

Унынсы тамаҡҡа әҙерләргә. Әлиә килтергән һыйҙы ҡуя.

— Дәстәрханың бай.

Ашай. Дәстәржә (танау ҡулъяулығы) менән битен һөртөп ала.

Тегендәрәк яугирҙар ашап ултыра. Бер аҙҙан, бер көйсә тын алғас, манифесты күсереп яҙа башланылар, Ҡәнзәфәр мишәрсә, Һеләүһен башҡортса һүҙҙәр ҡыҫтыра.

— Батша Мәскәүгә китә.

Һеләүһен уйға ҡалды.

— Беҙ ҙә барып етәйек.

— Етербеҙ.

Улар ҡуҙғалып килгәндә яугирҙар ашап бөткән. Айыт көлдөрөп һөйләп ултыра.

— Ат – иң яҡшы йән эйәһе, — ти.

Ҡәнзәфәр, Һеләүһен туҡталып тыңланылар.

— Уны егәһең, атланып eләһең. Эштә лә ярай, бына яуҙа ла.

— Яуҙа инде иң уңайы...

---

[1] *Ҡошонса — княгиня.*

— Юҡ, урлағанда иң уңайы. Һыйыр, һарыҡты сəлдерһəң, ҡысҡыра башлай. Ə был ат уҙамандың һис тауышы юҡ. Бик тиҙ алып китəһең. Атлан да һыртына бер тапҡыр ҡамсы баҫ. Елдер генə. Үҙе бик күндəм, үсекмəй, дуҫыңа əйлəнə, саҡырыуыңа килə.

Ҡыҙыҡ итеп тыңлайҙар. Ҡəнзəфəр:

— Күп урланыңмы?

— Һəй, һаны-иҫəбе юҡ... Улары булды... Бына, ғүмер үтеп бара, берəй бисə генə урлап булманы.

Берəү:

— Ҡаршыңда — ике мулла. Оялмайһың.

Айыт:

— Шул... оялдым инде, гонаһынан да ҡурҡтым.

— Əллə тағы. — Һелəүһен көлөмһөрəне.

— Ысын əйтəм.

Ҡəнзəфəр:

— Гонаһтан ҡурҡҡас, сауаплы йəн бит һин.

— Ə... Сауапты күп йыйҙым, шөкөр.

Ҡара төндə Ағиҙелде кире сыҡтылар. Теге яҡта күп мəсьəлəлəрҙе хəл итергə кəрəк. Унда ауылдар ҙур. Сиреү тупларға, аттар йыйырға, ылауҙар алып, фураж, аҙыҡ тейəргə, шунан батшаға илтергə кəрəк. Уға хəҙер күп нəмə кəрəк. (Пугачев менəн бергə булырға итəлəр.)

Ə халыҡ хəҙер бирер. Манифест бар.

Бер ауылда йыйылалар. Ҡəнзəфəр үҙе алып ҡайтҡан указды халыҡҡа уҡый. 5 июнь көнө генə яҙҙырып биргəн манифест.

— Бəн бадишам хəҙрəттəренең бригадиры, — указ уҡый. — Батша Петр Салис атап ебəрҙе, — тип ҡарап ала.

“Был указды ҡулға алғас та, уның менəн бергə тапшырылған манифесымды миңə бағынған халҡыма иғлан ит, шулай уҡ əлегə минең ҡул аҫтында булмаусыларға ла иғлан ит, сөнки улар ҙа беҙ бөйөк императорҙың рəхимен белһендəр. Əгəр ҙə Хоҙай ярҙамы илə бөтə Россия тəхетен тағы ла үҙ ҡулыма алырға насип булһа, тəбиғ булғандарҙан йəн башына һалым йыйыуҙы бөтөрəсəкмен, крəҫтиəндəрҙе алпауыттар ҡоллоғонан азат итəсəкмен.

...Ҡаршы булыусы яуыздар килеп сыҡһа, һис аямай ҡырырға...”

Ҡəнзəфəр:

— Йə, аңлашыламы?

— Аңлашыла.

“Тағы ла һиңə шул бойорола: үҙеңə тоғро ғəскəрҙəрҙəн старшиналар, сотниктар, яҫауылдар һайлап ҡуйырға. Улар государға итəғəт иткəн кеүек, һиңə лə тоғро хеҙмəт итһен...”

— Ишеттең?

— Ишеттек, ишеттек, мулла.

— Ə батша бригадир тигəн.

— Эйе, эйе.

— Бəн бригадирға ла, Һелəүһен полковникка ла.

Ҡəнзəфəр, Һелəүһен Димдең һул яғынан баралар. Сəрмəсəн буйы. Яныш ауылы (хəҙерге Благовар районы). Ҡунырға туҡтайҙар.

Бында — урта буйлы, шаҙра битле, ҡаҡса, ҡонғорт сəсе шаҡтай ағарған, бышылдап һөйлəшеүсе алтмыш йəштəрҙəге бер кешене осраталар.

Усай:

— Һин кем?

— Сауҙагəр Иванов мин. Улым Эрбет йəрминкəһенə киткəйне, ҡайтмай. Эҙлəп йөрөйөм.

Шикле. Йөгөн ҡарайҙар. Ҡиммәтле әйберҙәр мул ғына.

— Ниңә алдайһың? Һин — вор!

— Мине Петербургтан Петр Федоровичтың улы Павел ебәрҙе. Атайым Ырымбурҙа, ти. Илсе итеп ебәрҙе. Шуны күрергә ҡуштылар.

Ржев сауҙагәре Астафий Долгополов. Усаев уны үҙе менән алып китә. Хәбәр итеү өсөн Һеләүһенде Пугачевҡа ебәрә.

Ҡәнзәфәр менән Һеләүһен бераууыҡ һөйләшеп алды.

Һеләүһен:

— Батшаға алып барырға кәрәк.

Ҡәнзәфәр:

— Эйе... Өлгөрмәһәк. Беҙҙең ылауҙар бар. Һин хәҙер үк алып кит. Мин арттан төшөрмөн.

— Ярай.

Һеләүһен Айыт ҡасҡынына: “Йыйын!” Төмтөк, Әбеш, Мырым, Бағай, Тайсура эйәрә.

Астафий Долгополовты алып китәләр.

23/VI. Камаға етәләр. Батша сатыры йылға аръяғында. Уны тәүләп Алпар таный. Ул ситтәрәк сейелдәк итте ашыҡ-бошоҡ ашай ине. Ен ташы кеүек атылып килеп етте. Пугачев, Кинйә, тағы кемдәрҙер бар эргәһендә.

Һеләүһен барып инә.

Аптыраушта ҡалалар.

— Бер илсе бар. Шаһзада Павел Петрович – батша улынан.

Саҡырып керетте. Кешеләр йыйылды. Һөйләштеләр. Билдәле.

Астафий 60 йәштәрҙә. Урта буйлы, асҡаҡ йөҙлө. Шаҙра. Ҡара сәс, һаҡауыраҡ. Бик тәғәнәм әҙәм.

— Ҡайҙан килдең?

— Павел Петровичтан, күреп танырға.

— Ни йомош?

— Мин үткән фураж өсөн бурысты алырға. Һоло ташығайным Ориенбаумға.

— Яңылыш килмәнеңме? Таныйһыңмы?

— Таныйым. Ә как же, улың миңә кафтан, бүрек биргәйне.

— Ҡайҙа Павел?

— Царское Селола.

Алдаҡсы. Янғын сыҡҡан ауылда мал йыйып йөрөүсе, уғры кеүек, ваҡытты файҙалана, йәнәһе.

Пугачевҡа шуныһы ғына кәрәк.

Әле генә бер ҡарт гвардеец тура килде. Ул да батша тип таныны. Халыҡҡа шул кәрәк. Үҙе оҙата сыҡты. Быныһын да үҙе түләргә вәғәҙә итте.

Бына шунда Салауат сыҡты. Ул бығаса күрше тирмәлә ине. Бер Долгополовҡа, бер Һеләүһенгә ҡарай батыр.

— Һин алып килдеңме?

— Батша улы мине хәбәр менән ебәрҙе, бүләктәр менән, ти. Бер урынға һаҡ аҫтына ҡуйығыҙ, кеше ебәрмәгеҙ. Ҡасмаһын. Сере бар, әйтер, – ти Һеләүһен.

Салауат сәйерһенеп ҡарап тора.

— Шулай булырмы?..

Тәғәнәле кеүек. Ләкин әллә ни иғтибар итерлек түгел. Был донъяла ниҙәр булмай, уларҙы яҙмыш осраштырыр ҙа, бәлки.

Ул бынан ҡасыр. Бынан үҙе “килтергән” фураж өсөн “бурыс"ын ала алмаҫын күрә хәҙер. Алдағы барып сыҡманы. Ҡасты. Бынан булмаһа, тегенән йүн сығарырға уйлар. Екатеринаға барып етер, уның башына аҡса тәғәйенләнгән бит. Күрҙем, тотоп килтерәм, тиер. Бының өсөн аҡса кәрәк, күп аҡса. Заговор яһайым, ти. Императрица аҡса бирә, үҙенә түгел, бер офицерға, янында —

команда... Шулай ҙа ул теге офицерҙан, бер яйын тура килтереп, алтын аҡсаның бер өлөшөн үҙ ҡулына төшөрөр ҙә ҡасыр. Алдай. Ябай кешеләрҙе генә түгел, батшаны ла... Ләкин алдап күп йөрөп булһа ла, донъяны әйләнеп сығып булмай. Уны тоторҙар. Екатерина уны Рогервик каторгаһына һөрөр һәм шунда Долгополов Салауат менән, үҙен башҡорт ауылы урамында ҡаптырған Ҡәнзәфәр менән дә осрашыр. Төрлө эш, төрлө кешеләр, ләкин аҙаҡ – бер төрлө яҙмыш.

Бер үк каторга икмәге, бер үк ғазап.

(Әле лә өлкән йәштә, шулай ҙа оҙаҡ ҡына йәшәйәсәк әле ул.)

Кинйә улынан хәл-әхүәл һораша.

— Ҡәнзәфәр мулла ни хәлдә?

— Ул үҙе килеп етер.

Эйе, килеп етте.

Көс йыйғандар. Бик яҡшы. Бында ҡалыр. Тауҙан таш артмай. Һораша. Ҡыҙрас, Мерәҫ[1] яу юлында йөрөй. Ҡасҡын тегендә, ә Ҡаранай...

Салауат яралы. Батыр яраһыҙ буламы? Һул ҡолағы аҫтында йөйө бар, уң ҡулына һөңгө ҡаҙанылар. Арҡаһына сәнестеләр. Бына әле уң яҡ ботонда сей яра. Хәле ауыр. Ҡайтып дауалан, тиҙәр. Ләкин өндәшмәй. Ҡайтһа ла, тик ятмаҫ, ләкин бергә булыу хәйерле.

Бында кәңәшмә: Пугачев, Кинйә, Ҡәнзәфәр, Баҙарғол, Һеләүһен (тағы бер нисә старшина), Бәхтиәр Ҡанҡай. Салауат та ауырыумын тип торманы, ул да урынында.

— Ҡазанды алабыҙ!

Батша Мәскәүгә юл тота. Әммә көрәш тынмаһын ине. Тына буламы? Голицын корпусы был яҡҡа ынғайлай. Баш командалаусы үҙенең штабын Ырымбурҙан кире Бөгөлмәгә күсерҙе. Ил-көндө аяуһыҙ хәлдә ҡурғауһыҙ ҡалдырырғамы? Юҡ. Караттар ҡотороnop. Тимашевты онотмайыҡ. Ҡыҙрас, Ҡолой, Яныш... былары ҡоторонор. Бындағы ғәскәрҙе — Голицынды, Михельсонды, Мансуровты — Фрейман етәкләй.

“Эйе, бында еңергә, ил-көндө азат итергә, — Салауат ҡәтғи. — Төрлө урында. Бар атамандарҙы туплағыҙ!” Кинйә ҡомдо тигеҙләп һыпыра.

— Бына — харита[2]... — Беләләр. Ҡараштар төбәлә.

— Бына Исәт яғы...

Бәҙерғол, Юламан икеһе лә бер тауыштан тиерлек:

— Беҙ Исәт өйәҙен тоторбоҙ!

Салауат:

— Беҙ Себер юлын, Өфө янын.

Кинйә:

— Ҡасҡын Һамаров – Бөгөлсән тирәһен, Ҡаранай — Стәрлетамаҡ тирәһен...

— Михельсонды тота алмаҫһығыҙ. Голицын да беҙҙең арттан ынтылыр. Һеләүһен, Ҡәнзәфәр бригадир, — уны ебәрмәгеҙ.

Пугачев:

— Әле бер аҙ халыҡ ҡайтыр. Ҡазанды алғас, башҡорттарҙы ҡайтарырбыҙ.

Ә Салауат:

— Унынсы Өфөнө алырға кәрәк. Беҙ бергә уҡмашып.

Кинйә:

— Әлбиттә, шулай.

Ҡәнзәфәр:

— Мәслихәт.

Батша фарманы буйынса Өфөнө алырға уңай ваҡыт. Көстәр әҙәйгән. Рылеев килә.

---

[1] *Ибраһим Мерәҫов.*

[2] *Харита — карта.*

Салауат аңлай.
— Алырбыҙ, — тине, тешен ҡыҫып
Кинйә:
— Йорт-илде таҙартығыҙ! Мәндей, Солтанморат, Балтастар, Ҡыҙрастар булғанда тыныслыҡ булмаҫ. Усаҡты һүрелтмәгеҙ.
Кинйә уларға ғына төбәп өндәште.
— Был беҙҙең йорт-ил. Батшаның арҡа яғы ныҡ булһын. Ҡорал ҡулдан төшмәһен. Элемтә өҙмәҫкә. Үҙ-ара, төп армия менән дә, кәрәк саҡта — резерв...
Ҡәип Зиәмбәтов[1] та ҡала.
Указдар алынды. Бурыс бирелде. Ваҡыт билдәләнде. Һүҙ ҡуйышылды. Улар илгә йүнәлде.
Һеләүһен менән Айыт Алпар янына бара. Һеләүһен уйлай: Алпар дан егет, алаһы ине. Айыт та:
— Китәһеңме? Әсәйең хитланыр.
— Китәм. Ул хитланмаһын, тим. Ҡыуғы булып йәшәү бөтһөн тип. Еңеп ҡайтһаҡ.
Төп армия Ҡазанға ашҡына.
Кинйә ҡарап ҡала улына...
...Башҡорттарҙың башҡорт ерҙәренә һибелеүен белгәс, Михельсон, Пугачевты ташлап ҡайталар, тип үсәнде. Салауат та үткән, Усаев та. Арыҫланов та киткән.
Бер башҡорт әйтә: Туҡыс оба оранын ишеттем. Был яҡта. Кинйә китте, ти. Ул Һеләүһен булған.
Ләкин уға насар донесениелар яуа. Ул яңылышты. Шулай тип ул баш командалаусы Щербатовҡа йөкмәткеһе яңылыш рапорт ебәрҙе. Ә Кинйә Пугачев менән бергә Ҡазанға юл тотто.

**Һигеҙенсе бүлек**

## Ил батыры

*Алда тау бар — Петр тауы.*
*Петр тауы — Ирек тауы,*
*Ил шаулатып, ер һелкетеп*
*Шунан үткән Ҡазан яҡҡа*
*Туғыҙ тыулы Бүгәс яуы.*

**Халыҡ ижадынан**

### I

Пугачев ҡуҙғалды. Армияһы ҙур. Бында заводтар күп: Ижевск заводы, Носков заводы, Воткинск...
Завод кешеләре ҡушыла. Белобородов уларҙы ғәскәргә ойоштора. Үҙендә лә көс күп. Бер аҙын Овчинниковҡа, бер аҙын Перфильевҡа бирҙе.
Белорет кешеһенең отряды ла ҙур хәҙер. Юлда ҡушылған казактар Иван Творогов сиреүенә өҫтәлде.
Хәҙер аманаттар алып тороу ҙа бөттө.
Башҡорттар Кинйә ғәскәренә ҡушыла. Унда әллә нисә полк хәҙер. Заводтағылар ярҙам итә.
Творогов заводты үртәргә димләй.
Пугачев:
— Ты что?
— Элек яндыра инек.

[1] *Ҡәип Зиәмбәтов — Нуғай даруғаһы Ҡара-Табын олоҫо старшинаһы, б. к. полковнигы.*

— Унда... Ә былар... Ярҙам ит. Үҙҙәре әйткәнсә.

Каманы сығыу был яҡ ялпыһына яңынан ҡуҙғалырға оло оран кеүек булды.

Халыҡ ҡуҙғалды, атҡа атланды. Яңы отрядтар ойошто. Кисеүҙәрҙе баҫып алғандар.

Сарапул, Минзәлә, Алабуға, Зәй ҡалаларын азат иттеләр. Каманың һул яғы ут даръяһы кеүек ҡайнай.

Бәхтиәр Ҡанҡаев Түбәнге Кама ауылына күсеп, әллә нисә команда туплап ебәрҙе. Кама аша сығып, килеп ҡушылалар.

Ҡыш көнө Мәсәғүт Ғүмәров, 3000 кеше йыйып, Ҡазанға ябырылмаҡсы ине. Арсаға, шунан Ҡазанға. Ә әмер — артабан ғәскәрен Минзәлә – Өфөгә ебәрергә!

Ул саҡта көстө таратырға ярамаған. Ул барып, ярҙамға отряд ебәрҙе.

Кама буйлап күсә-күсә, Ҡазанға яҡынланы.

Әбделкәрим Күсәкәйев тә сиреү ебәрҙе. Гаврила Лихачев[1], ана, Ҡазанға яҡынлай.

Ҡуҡмаралағы, Лайыштағы баҡыр иретеү заводтарындағы яугирҙар ҡорал сүкей.

Бындай ваҡытта, Ҡазанға юл асыҡ, тип әйтеп була. Ә бар ҡаршылыҡты иҙеп-тапап баралар. Киң фронт менән. Төп армия уртанан барһа, башҡа отрядтар киң фронт менән яҡ-яҡтан. Йәйелгән ике ҡанат кеүек.

Пугачев килә. Алыҫ түгел — Кинйә. Ул һәр ваҡыт Емельянға яҡыныраҡ хәрәкәт итә.

Кинйәнең атына иғтибар итте батша. Маҡтай. "Холкаһы, — ти (мундаһын әйтә), — ҡалҡыу түгел. Алыҫ юлда эйәр теймәй. Арт аяҡтары тура түгел. Ултырыу уңайлы. Аҙымы йыш, юртыуға һәйбәт". Эргәһендә — Алпар аты. Томшоҡтарын томшоҡҡа тейҙереп, бер-береһенең тын алыштарын тоялар. Улар өсөн шунан да ҙур рәхәтлек юҡ кеүек. Оҙон маршҡа сығып, туҡтауһыҙ барһалар — Аҡъял менән Тумаҡ шулай кинәнә.

Былай бер-береһен юҡһыналар, эҙләгәндәй, өҙөлөп кешнәйҙәр. Яугирҙар, ғәҙәттә, быны яратмай, боҫтормала ятҡанда йә шәйләк булып урмандан барғанда, һиҙҙереп ҡуйырҙар тип, был ғәҙәтте ташлатырға теләп, ҡамсылайҙар. Алпар ҙа яу башында үҙенең "Тумағын" шулай кешнәүҙе ташлаттырырға маташып ҡараны.

Кинйә туҡтатты был эште.

— Тыйма... Бер-береһенең ҡайҙа икәнде белергә теләйҙәр. Шулар арҡаһында беҙ ҙә аңыша алырбыҙ. Кем белә, яу эше бит. Кәрәк саҡта улар бер-береһен ярҙамға саҡырыр. Килербеҙ, эйеме?

Алпарҙың Ҡазанда булғаны юҡ, шуға һорашып бер булды.

— Алыҫмы?

— Юҡ. Етербеҙ. Башҡорттарға яҡын. Борон шунда ирәк[2] булып хеҙмәт иткәндәр, һуңынан аҡ батшаға тип яһаҡ ташығандар. Шунан... Алдар менән Күсем яуында шәһәрҙе баҫып алырға яҡын ғына булғандар. 30 саҡрым ҡалған. Алырҙар ине. Петр батша менән солох төҙөп, Сәүреш ауылында туҡтағандар.

— Ә беҙ алырбыҙмы?

— Алабыҙ, һис шикләнмә.

Әйтергә ине: Йәмәлкә үҙе лә шунда баструкта ултырған, былтыр ошо ваҡыттарҙа ҡасҡан, тип. Юҡ, әйтмәне.

Бер урында туҡтанылар. Ауыл халҡы килде. Баш эйәләр. Йөҙҙәрендә — ихтирам, шатлыҡ. Илайҙар.

---

[1] *Лихачев Гаврила Макарович — Ҡазан өйәҙенең крепостной крәҫтиәне, б. к. яҫауылы, полковнигы.*

[2] *Ирәк – застава, гарнизонная служба.*

Рустары:

— Батюшка... Надежда наша светлая!

Татарҙары:

— Батша хәҙрәттәре... Ғали йәнәптәре...

Сыуаштары:

— Беҙҙең яҡты ҡояшыбыҙ!

— Һеҙ ҡолдарымды йәлләп тыуҙым, йәш ай кеүек, яҡты йондоҙ булып! — Пугачев үҙен батшаларса тота. Тегеләр йәберләнеүен әйткәс, “батша” аҡыл өйрәтте, юҡ, ҡушты:

— Улар һеҙҙе күп таланы. Хәҙер үҙегеҙ... Баринды, генералды ҡырығыҙ. Капитанын да, майорын да... Кем ҡаршы — бөтәһен. Баштарын сабығыҙ, малдарын алығыҙ, байлыҡтарын бүлешегеҙ.

Минеев тигән бер поручик Пугачевҡа баш һалғайны. Ашыҡтыра, хеҙмәт итеп ҡалырға тырышты.

— Ҡазанда әле көс күп түгел. Тиҙерәк Ҡазанға, — тине, ҡулдарын ыуып.

Оҙаҡламанылар. Воткинский заводына йүнәлделәр. Эйе, унда көс әллә ни күп түгел. Быны Ҡазан дворяндары белә. Алпауыттар, байҙар ҡаса, ғаиләләрен арғы губерналарға күсерә. Офицерҙар, чиновниктар хеҙмәт буйынса китә алмаһалар, Ҡазандың Кремленән урын алып ҡалырға тырыша...

Ҡазандағылар ғынамы?.. Нижний Новгород, Рязань дворяндары ла... Яңыраҡ бунт кисергән Мәскәүҙә лә ҡурҡыуға төштөләр. Хатта императрица Екатерина Икенсе үҙе лә Ригаға күсеп китергә ҡырсына.

Ә ябай халыҡ, рус крәҫтиәндәре, татар ялпыһы ҡыуанышып Пугачты көттө, икмәк-тоҙ менән бишкә бөгөлөп ҡаршыланы.

Шәп бармай булмай. Арттан Михельсон төшкән. Ғәскәрен ял иттереп, туплап алған. Корволанты оса ғына. Дөрөҫ, ябырылмай. Ситтәнерәк бара. Пугачев ғәскәр хәрәкәтен тиҙләтте. Йәйәүлеләр ҡала. Долгополов бер аҙна самаһы торғайны. Уны ла ебәрҙе. Уның менән мәшәҡәт сиккәнсе, китергә кәрәк. Ебәрә. Унан теге ҡаса.

Михельсон Кама ярына аяҡ баҫты. Усаны алды. Янында теге премьер-майор Дуве. Скрипицынды әрләйҙәр. Смирновты. Улары язаһын алған. Ә Минеевҡа теш ҡайрайҙар.

Михельсон үҙе алдан юрғалай. Әйтерһең, ул яңы чин алырға, рескрипты алырға ашҡына. Уның атлы эскадрондары, гренадерҙары, карабинерҙары — һәммәһе әҙер, уяу. Кәрәкһә, Шувалов гаубицалары әҙер.

Көсө әллә ни ҙур түгел, 800 кеше шулай ҙа. Өйрәтелгән, ойошҡан. Архангель эскадроны карабинерҙары. Гусарҙар бар. Чугуевск казактары, Санкт-Петербург, Изюм полктарынан. Эргәһендә — майор Харин, майор Дуве.

29/XI Агрызға (Әгерже) еттеләр.

Пугачев Терсәгә ингәс, бөтә крәҫтиәндәре ҡушылды. Шишмә, Нәҙер, Балтас, Кибәкшүр, Мордовина ауылдарынан килделәр.

Бөтәһе яфа сиккән, үҙҙәренең аһ-зарҙарын һөйләй. Әбделйәлил Сөләймәновтың дар ағасына юлыҡтылар.

— Ах, элегерәк килеп булманы.

— Эйе... Хоҙай яҙмағандыр. Дуве майур ҡыйратты, ҡанға батырҙы, тотоп, Ҡазанға алып китте. Скрипицын майур бында алып килеп аҫты.

Ҡайғылары ҙур, әлбиттә.

— Үҙен дә аҫтыҡ.

Ҡыуаныс... Үс алынған.

Унан Омға ауылы — Аҡҡужа — Суҡман. Алабуғаға.

Пугачев бынан бик тиҙ Алабуғаға талпынды. Алабуғала — Кама аръяғынан хәбәрҙәр. Минзәлә, Сарапул, Зәй янында яугирҙар. Халыҡ йыя, көс-ярҙам ебәрә. Кисеүҙәрҙе тота, юлдарға пикеттар ҡуя.

Шәп барһа ла, Пугачев уйлай. Тәүҙә үк шулай йәһәт кенә ҡуҙғалаһы булған. "Ырымбур янында ятып, ваҡыт әрәм иттем. Ҡазанын да алыр инек, Мәскәүен дә. Тиҙ етер инем..." Күптән тәхеттә ултырыр инем, тимәй, ул һүҙ теленә килмәй, ундай уй, нисектер, башына ла инеп сыҡмай.

Ни бары Яйыҡ казактарына һылтай: эх, ебәрмәнеләр шул. "Мин улар ҡулында инем. Юғиһә, Карҙы ҡыйратҡас китһәң дә, арттағы Ырымбур шул көй ҡалыр ине әле".

Михельсон Терсәлә Пугачевтың эҙенә төштө. Алабуғаға саҡлы артынан ҡалманы.

Әле ябырылырға теләмәй. Ҡазанда. Бергәләп.

Шунда Каманы кисте. Пугачевтан көньяҡтараҡ – Алексеевск, Балыҡ биҫтәһе.

Бында бөтә һул яҡ ут эсендә кеүек. Ләкин уға йоғонорға баҙынмайҙар. Үҙе лә Пугачевҡа ташланманы.

2

Каманан ҡайтыу яғына бергә киттеләр. Салауатҡа ла, Ҡәнзәфәр менән Һеләүһенгә лә бер килке юл ыңғайы ине.

Бөрөгә етергә байтаҡ ара. Унда барыу кәрәкмәй. Карателдәр кергәндер.

Бер урында туҡталып, кәңәшләштеләр. Яҡын-ярандарын да ултырттылар. Һүҙҙе Ҡәнзәфәр башланы:

— Батша фарманы бар бит, Өфөнө алырға кәрәк.

Ул башларға тейеш. Өфөнө алырға батша, Салауаттың ҡаты яралы булыуын, Ҡәнзәфәрҙең йәшкә өлкәнерәк булыуын иҫәпкә алып, баш кеше итеп, унын үҙенә ҡушҡайны.

Әмерҙе онотмай, шул хаҡта һүҙ башлауы Салауатҡа ла, Һеләүһенгә лә дәрт өҫтәне.

— Ҡайтабыҙ ҙа алабыҙ!

— Ҡайтып сиреү тупларға кәрәк.

Эйе, әле хөкүмәт ғәскәрҙәренең күбеһе Башҡортостанда. Себерҙәгеләре лә, Ырымбурҙағылары ла был яҡҡа тартыла.

Баш командалаусы Щербатовтың 20 мең ғәскәре бар. 8 боевой генералы — Пугачҡа ҡаршы. Полковниктары, офицерҙары эт тубығынан.

Ғәскәрҙәр башҡорт ерҙәрендә, Уралда. Генерал Фрейман заводтарҙы алып, Ырымбурҙан сыҡты, башҡорт ерҙәре үҙәгенә ынтылды.

Голицын да Ырымбурҙан сығып, Стәрлетамаҡҡа, унан тауҙар аша Пугачевты тоторға тип уҡталды.

Генерал Деколонг иһә Себерҙә хакимлыҡ урынлаштыра. Ә полковник Хорват май аҙағында Бөгөлсәнгә етә генә яҙҙы. Полковник Шепелев иһә Стәрлетамаҡҡа инеп бара.

Эйе, сиреүһеҙ булмай. Үҙ ҡорҙарын Пугачевҡа биреп ебәрҙеләр. Бында йыйып була ла бит. Салауат, Һеләүһен ике бер юлы тиерлек:

— Оҙон-оҙаҡҡа һуҙырға кәрәкмәй.

Һеләүһен:

— Һуҡ тимерҙе ҡыҙыуында!

Салауат:

— Өфө ҡатауын – алыу бер эш. Беҙгә Голицынды, Хорватты тотоп ҡалырға, ҡыйратырға кәрәк. Батша артынан бүре һымаҡ китмәһендәр.

Ҡәнзәфәр:

— Раҫын әйттең, дуҫтым!

Уныһы мәслихәт. Ҡәнзәфәр Салауаттың аяғына ымланы:

— Ә был ни хикмәт?

Аяғы һыҙлай, ләкин Салауат һиҙҙермәй, сирәк алыштырылған.

— Аяҡ түҙер... Йүгерергә түгел. Эйәр өҫтөндә бит. Етәктә ике йә өс ат ҡушарларға тура килер... Ике аҙнанан Оло Ҡатау янында булырбыҙ. Һыбайҙар килеп етер.

Ҡәнзәфәрҙең уйынса, Салауат атаһы Юлай менән көн сығышынан килә. Һеләүһен Ағиҙел аръяғында, Табындан алып Инйәр араһында, яу саба, Өфөгә еткәс, Өфөнөң Нуғай тауы итәгенә — Зарубин һуҡмағына төшә. Ҡәнзәфәр Өршәк, Дим буйҙарынан ғәскәр йыйып, шул ҡамауҙы өҙә.

— Бер-беребеҙҙән яҡын булайыҡ.

Салауат:

— Дөрөҫ! Ҡатауҙа ятмаҫтар улар. Хәйләләп сығарырбыҙ. Сыҡҡас ҡырырбыҙ. Бер ҡайҙа ла китмәҫтәр!

Бөтәһе шулай кешеләр йыйырға кәрәклегенә килешә.

Ҡәнзәфәр:

— Мин бындағы полковник старшиналарҙы йыям. Әмер ҡылам.

— Йыйырбыҙ. Арҡа яҡ ныҡ булһын.

— Расын сүлисең, мулла. Самар уғлы Ҡачҡын Стәрлетамаҡ тирәсендә ҡулларын бәйләп тотсын. Ә Морат уғлы Ҡаранай беҙгә килер. Ә тегенән Деколонгты ҡыҫырбыҙ, — ти Ҡәнзәфәр.

Салауат:

— Уны Баҙарғол фельдмаршал менән Юламан генерал ебәрмәҫ. Ә бына ошо тирәне бындағылар һаҡлар. Мин фарман ебәрермен. Ҡайтышлай уҡ мариҙарға туҡталам. Иҙебай һынатмаҫ, ышанам.

Кемдә ни бар — әйттеләр. Эшләйһе генә ҡалды.

Шунан ҡуҙғалғас, Ҡәнзәфәр менән Һеләүһен Ағиҙел аша сығып китте. Ә Салауат көнсығышҡа йүнәлде... Улар таралып ике көн үтеүгә, Усаға табан подполковник Михельсон корпусы уҙып китте.

***

Бурғаш ауылы. Урманда башҡорт аласығына оҡшаған һунарсы шалашы. Кудо тиҙәр, шунда туҡтайҙар. Салауат мариҙарҙы күрҙе. Һорашып, Иҙебай менән осрашты. Аяғы һыҙлай. Шешенде хатта.

— Өфө юлын ныҡ тот, палкауник Иҙебай!

Буйын турайтты теге. Палкауник! Бәләкәс чин түгел. Бигерәк тә кеше-ғара алдында.

— Һаҡларбыҙ!

— Эйе, үҙ ерҙәребеҙ. Беҙ бөркөт булып осорға, арыҫлан булып сабырға тейеш. Батша шулай ҡуша.

Был һүҙ Салауат үҙе әйткәндәй сыға. Тик һаман батшаға һылтана.

— Ирек бирәм, тине.

— Ай, сакче (алла) кеүек аҡыллы икән.

Һорашалар. Каманан ҡайҙа барыр? Ҡазанға, Мәскәүгә... Һо-о! Күп ҡалманы. “Деүәрәндәрҙе дер һелкетербеҙ, янаралдарҙы ҡырырбыҙ...”

Батыр йырлай:

*Ай Уралым, Уралым...*

Хәле юҡ, һыҙлай. Шунда Салауаттың яраһы елһенде. Батыр яраһыҙ булмай ҙа...

Элек бында, ҡолаҡ аҫтында, ине, һиҙмәне лә. Уң ҡулына ҡаҙанылар. Бик тиҙ уңалды. Арҡаһына ҡаҙанылар. Ауыр булғанмылыр, уныһы ла тиҙ уңалды, онотолдо. Имен әлегә, хуш.

Ә бына бынаһы, уң яҡ ботондағы, ыҙалата ғына.

Иҙебай борсолдо. Иҙебай бер малай ебәрҙе. Атаһы Ишкина, әсәһе Айма. Килделәр им-том итергә. Мари әбейҙәр, аяҡһыҙ ҡалырһың, тинеләр. Эйе, сирәк алмаштырып, әҙерәк ял итеү фарыз.

Шунда хат яҙа йә сапҡын ебәрә. Был тирәлә — Бүләк Яҡубов, Арыҫлан Оранғолов азаматтары. Удмурт Федор Калабин (Шмота тиҙәр), Оска Оскин[1] егеттәре. Бөтәһен ҡошсоһо Баһау ойоштора.

Илсеғол Этҡолов (Ҡошсо старшинаһы) Батырҡай Иткининға хат яҙҙы. Мариҙар аша ебәртте фарман вә сәләмен.

— Палкауник, ышбу хаттарҙы юлыҡтыр.

Усанан ҡайтып баралар. Салауат, ҡошсоһо Баһау янында.

Ҡоро ҙур түгел. Бары ла батша менән китте. Ҡайтҡас булыр. Әле яралар уңалһын. Ҡошсоһо шул хаҡта һораша.

— Ә тегеләрҙә әфисәрҙәр, янаралдар яралымы?

— Уларға уҡ-һөңгө теймәйме? Аҙмы ҡылыстан сабылалар?

— Ә яралаһы нисек шифа ала? Өйҙәме?

— Лазаретта.

— Ә-ә... Кем дауалай уларҙы: әбейме, бабаймы?

— Лекарь, доктор ҙа тиҙәр.

— Ә-ә... Ниңә беҙҙә ундайҙар юҡ?

— Юҡ тиһеңме?.. Беҙҙә лазарет урынына Урал бар, йәйләү бар, лекарь урынына үлән шифаһы, ҡымыҙ бар. Ана бит, һин юл япрағы ябып, сирәк һалдың. Шул үҙе шәп шифа.

Ҡуҙғалдылар. Йырлап ебәрҙе Салауат:

*Уралҡайҙан бейек, ай, тау булмаҫ,*
*Уралҡайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ.*
*Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған*
*Ир-егеттең ғүмере йәл булмаҫ...*

Батыр туҡталды.

Бер аҙ барғас, ҡурай тын ғына ғыжлап барҙы. Моңдо боҙмаҫҡа. Ах, дошманы Балтас тоторға килгән! Ул ҡулын һаҙаҡҡа һуҙҙы. Уҡ ҡармап алырға. Алманы.

Арбанып тыңланы Салауат. Юлда уны Балтас кешеләре күреп ҡалып, хәбәр иткәндәр. Хат яҙған. Артынан сапҡын килеп етеп тапшырҙы.

— Нимә?

— Ҡолой уға хат ебәрҙе.

— Ниңә, ҡунаҡҡа саҡырҙымы? Ҡымыҙы күптер.

— Уныһы барҙыр.

— Эйе, унда булған бар. Ауылын барып баҫтым. Таныптар миңә таныш. Кешеләре ҡушылды. Балтас үҙе генә ошо тирәләрҙә Бүгәсте һағалап, бер меңлек ғәскәр менән тау-урманда боҫоп ята, тиҙәр ине. Бына минең эҙемде аңдый. Тик тотоп алырға баҙынмаған. Хат?.. Ә мин әллә ҡылысын ебәргәнме тип торам. Теге Бибик янарал бүләк иткәнен.

— Юҡ та.

— Ә... булмаһа, ундай шәп ҡылыс үҙемдә лә бар.

Хатты уҡый.

---

[1] *Оска Оскин — мари, Бардым ауылынан, Себер даруғаһы старшинаһы, б. к. сотнигы.*

“Бөйөк Салауат Юлай әфәнде, һеҙгә батша Екатерина Сания тарафынан ҙур үтенесе, бәс шулай булғас, һеҙгә мәғлүме — беренсе алла, икенсе — батша. Батша бойороғон аяҡ аҫтына һалдырмай, бөгөндән башлап бағый Пугач артынан барма. Уға мотлаҡан ҡаршы торорға тип, мин, главный йортауай Ҡолой Балтас, һеҙҙе бик яҡын күреп, кейәү итмәксе буламын. Балдыҙым Зөләйхаға юлдаш булыуығыҙ мотлаҡа ышанып әйләйем. Ҡолой Балтас”.

25/VI-74 й.

Салауат уйлана. Ах, Зөләйха... Кейәү булыу — ожмахҡа кереү. Бәхет!..

Салауат яуап яҙып торманы. Әйтте генә:

— Зөләйхаһын былай ҙа алырмын, Ҡолой үҙе килһен.

— Ҡайҙа?

— Табыр. Ә һин... ҡурайыңды тарт шунда.

3

Салауат ҡайта. Атаһы ауылда тиҙәр.

Һағындырған, ҡарап тора. Өҫкәнде һыуы. Уң яҡта — Йәйләү ҡырлаһы[1]. Бына Йортбикә ҡашлағы. Шуға урынлашҡан инде Юлай ауылы.

Атаһына һөйләй. Атаһы:

— Яу көсәйҙе, — ти.

Эйе, Пугачев китте тип кенә, яу тынманы. Екатеринбург яғы шаулай. Карателдәрҙең Ҡазанға — Пугачев артынан яҫҡыныуы яуҙы көсәйтте генә.

— Баҙарғол ҡайтты.

— Бынан һыҙырға кәрәк, — Салауат быны уйсан, һуҙып әйтте. — Хәҙергә Ҡарауылташҡа китеп торорбоҙ.

Унда торғандары бар. Атаһы беләә. Йүрүҙән буйы. Уңай төбәк.

— Унда һиҙерҙәр.

— Беҙ Өфөгә яҡынраҡ күсербеҙ.

— Эйе ләһә, Ҡобау янына. Унда кешеләребеҙ ҙә күп.

— Тиҙ генә тирә-яҡ менән хәбәрләшеү фарыз. Һағауылдар, бағауылдар ҡуйырға.

Әй буйҙарына сапҡындар елде. Бәләкәй Ыҡ, Ләмәҙ, Ҡаранай, Йыланыш, Мәләкәс, Түрә — шул тарафтарҙа дуҫтары күп.

Атаһы:

— Бына, йәрәхәтең бит әле.

— Төҙәлер.

Салауат үҙе йөрөрлөк түгел. Сотниктарын йыйҙы. Атаһы писарҙарын килтертте, сапҡындар әҙерләп торҙо.

Салауат өндәмә яҙҙы. Бойороҡтар ҙа бирҙе.

“Ул олуғ император бадишаһымыҙ Петр Федорович хәҙрәтәренең указы ҡеүәтенсә ныҡлап бойоралыр бән полковник Салауат старшина Юлай уғлындан ул. Сотник Иләтбай Илембай уғлына: рәхимле батша хәҙрәттәренә ҡаршылыҡ ҡылғусы вурларға (хөкүмәт ғәскәрҙәренә) ҡаршы тороп, үҙ ҡул аҫтындағы командалары илән йән-тән илән, һуғыш итергә тип. Һәр өйҙән хеҙмәткә яраҡлыларҙан — атлыларҙы вә һәм йәйәүлеләрҙе ҡалдырмайынса инҡарҙарына ҡуймайынса батша хеҙмәтенә сығырға тип. Әгәр ҙә хеҙмәткә инҡар итәһе булһалар, ул кемһәнәләрҙе тотоп, рапортың илән беҙҙәргә ебәрергә тип. Вә һәм түбәндә яҙылғусы команда халыҡтары сотник Иләтбай Илембай уғлына ысын тынламаҡта булып хеҙмәт итмәйһеҙҙәр, бадишаһымыҙ ағзам хәҙрәттәренең вә һәм хөкөмөнән ҡурыҡмаҡ өсөн тип, — Салауат туҡталып торҙо. Кем тип ҡуйырға: хәҙерге яңы

[1] *Ҡырла — ҡырлы тау һырты.*

мансаф — яңы чин буйынса бригадир типме, юҡ, күнегелгәнсә... Унан полковник тигәне шәберәк тә... Ул артабан яҙыуын ҡуйҙы: — полковник Салауат старшина Юлай уғлы ҡулын ҡуйҙым вә һәм инанмаҡлыҡ хаҡында печать һалдым. 1774 йылдың сәрәтән[1] айы".

Салауат "печать" тип яҙҙы. Пугачев ҡағыҙҙарынан күрмәксе.

— Ә мөһөр ҡайҙа әле? — тип ҡалтаһын аҡтарҙы аҙаҡ. Атаһының старшиналыҡ мисәтен губернатор Путятин биргәйне элегерәк.

Бындай хаттар бер-бер артлы яҙылды, сапҡындар төрлө тарафҡа, төрлө иләүҙәргә, Салауаттың сотниктарына, ярандарына елде. Ҡағыҙ күп түгел, һүҙҙе былай ҙа аңларлыҡтарына әйтеп кенә ебәрҙе.

Тирмәлә еләҫ. Салауат киң яурынлы, яҫы маңлай, осло яңаҡ, түңәрәк йөҙ, үткер күҙле.

Ҡатындары эргәлә.

– Гөлбәзир, ҡана, ҡурайымды килтер әле.

Әминә лә аңланы, көндәше ҡурай килтергәнсе, уң яғына сыҡты, ләкин ултырманы. Шунан бергә ултырҙылар. Хәҙер таянырға. Гөлбәзир бармаҡ менән ым бирҙе. Эйе, баш менән ымланы. Аңланым, аяғы яралы. Һиҙеп торалар. Икеһе лә таянманы. Ҡурай моңо ағыла, уларға әле ул һөйләрен аңлатҡан кеүек.

Ҡапыл тора. Бото талдымы? Юҡ, ныҡ баҫты һымаҡ.

— Етеп торор. Күләткәлә ҡурай тартып ятыр саҡ түгел.

Аҙ, бик аҙ. Шуныһы ла ҙур бәхет.

Һауыға. Яҙ көндәре ҡояш ҡарағас, ағастар яңынан япраҡ яра, сәскәләр ата, болондар йәшәрә. Әле йәй уртаһы. Бары шулай тойолдо.

Юлай — Ҡобауға.

Салауат та. Ҡыр-көҙәйҙәрҙә Ҡобау ауылы. Өфө яҡын. Ҡор йыя. Был тирәлә 19 старшина. Етеһе үҙе килде, өсөһө ярҙамсыларын ебәргән. Ҡолой килмәй.

Ҡыр-көҙәй, Тырнаҡлы, Ҡошсо, Һарт, Әйле, Дыуан.

Һөйләшеү булды. Хуплайҙар. Оло Ҡыштауҙы алабыҙ, тиҙәр, Оло Ҡатауҙы.

Сиреү кәрәк, туғыҙ туғлыҡ ғәскәр. Тыуҙары күберәк булыр, ҙур сиреүҙе боронғолар шулай тигәндәр.

Тоҡыз туғлығ хан — ҡеүәтле хан.

Был урынды Юлай штабы тип атанылар. Ошонда йыйылып, ошонда башларҙар.

Хәбәрҙәр килә башланы.

"Салауат йорто"на күсте.

Илсеғол Этҡолов (Ҡошсо старшинаһы) хәбәр ебәрҙе. Әҙер. Әмер көтә. Батырҡай Иткининдың сапҡыны ла килеп етте.

4

Отряд килә. Өҫ-баштарына ҡарағанда, яугирҙар ҡоро. Ҡорбаштары уртала, береһе йыуантаҡ, икенсеһе нәҙек. Йыуантағы байтаҡ өлкәнерәк.

Бик әүҙем.

Улар үҙҙәре генә белгән юлдарҙан, һуҡмаҡтарҙан тау битләүҙәре яғалап, урмандар аралап байтаҡ киләләр. Әле Өфө тауын көнбайыштан ситләтеп үттеләр. Ағиҙелдең үле үҙәндәре яһаған киң туғайы айыра...

Юлдары... Салауат менән айырылышҡандан бирле күпме ауыл үтелде. Унда туҡтайҙар, старшиналар, сотниктар, яугирҙар ҡороноң башлыҡтары менән осраштылар.

---

[1] *Сәрәтән — июнь.*

Өфөлә полковник Рылеев ғәскәрҙәре тик ятмай. Ырымбур юлын полковник Шепелев ҡарай. Голицын корпусы ла Стәрлетамаҡтан килеүе бар. Ул Пугач артынан.

Әлеге икәүҙең йәшерәге – Һеләүһен полковник Пугачев указын уҡый, ә өлкәнерәк тигәнебеҙ – Ҡәнзәфәр бригадир батша исеменән әмер бирә.

Ҙур алай туплап, Бәрҫеүән башына килергә ун алтынсы июлгә. Шунан ҡуҙғалырҙар Өфө ҡалаһын алырға, өйәҙ канцелярияһын туҙҙырырға, яуыз Әбей батшаның ҡәһәрле янаралдарын, палкауниктарын ҡырырға. Ундағы бөтә түрәләрҙе, ришүәт йыйып ятыусы мәьмүрҙәрҙе юҡ итергә... Өфө иреклe булырға тейеш.

Әле Һеләүһен менән Ҡәнзәфәрҙең үҙ отрядтары ла шунда — Бәрҫеүән башына бара ине.

Шул көндө кискә табан, Димде кисеп, барып еттеләр.

— Бына ошонда ҡоролтай йыябыҙ! — тине яңы бригадир.

Һеләүһен ышана һалмай.

— Әүәл дә ҡоролтай, йыйын йыйғандар. Фәтеүә булмаған. Тауыш-өн сығармай ғына алайҙар йыйырға ине.

— Тауышһыҙ булмай. Башта көллө старшиналарҙы тыңлатып алырға кәрәк.

— Ҡыҙрасты ламы? Ул карателдәрҙә инде!

Эйе... Ул да килер. Тыңламай ҡараһын.

Ауыр булыр. Халыҡ миктәгән. Аслыҡ. Ҡоролоҡ. Иген уңмағайны. Барынюғын Мәндей Төпәйев ҡурҡытып, алдап йыйҙы. Өфөгә илттеләр. Ырымбурға 3 мең бот илттеләр.

Ун алтынсы июлгә, йома көнгә. Ике аҙнанан артыҡ ваҡыт... Шунда ҡунып, икенсе көндө Өршәккә төшөп киттеләр.

Бында ям юлы. Ям станцияһы. Яҙын борам була, йәй – күпер. Өршәк һыуында – һыу тирмәне, йылғаның ҡылыһында – Амантай ауылы. Бындағы башҡорттарға ышаныс бар. Ә һалдаттары әллә ни түгел...

Шунда йәһәт кенә икмәк йыйып килтерҙеләр. Аҙ-маҙ юл яҫығы кәрәк бит.

Амантайҙы үтеп бер аҙ барғас, юл сатаһы.

Ана шунда Һеләүһен менән Ҡәнзәфәр айырылышырға тейеш. Аҡлы-ҡаралы итеп уралтып буялған саҡрым бағанаһы янында туҡтап торҙолар.

Оҙаҡҡа түгел, бик аҙға.

Һеләүһенгә был айырылышыу әкиәт батырҙарын хәтерләтте.

Әкиәттәр ҙә күп... Бер туған ике батыр бергә бара алмай. Асамай[1] юлда айырылыша. Һүҙ ҡуйыша. Онотмаҫҡа... Берәүһе – уңға, икенсеһе – һулға... Уңға киткәне уңар, һулға киткәне һүнәр, тиелә әкиәттә.

Һеләүһен һулға китергә тейеш.

Әкиәттә ана шул һулға киткән батырҙың юлы хаҡында бәйет итәләр. Уның юлы оҙон, ҡурҡыныс, ауыр көрәш... Ләкин уға ниндәйҙер ҡартмы, ырым башы ҡортҡамы серле Әбелхәйер һыуы эсереп, көс-ҡеүәт өҫтәй... Һеләүһенгә тейешле ҡеүәт бирелгән, атаһы-әсәһе биргәненә, Хоҙай биргәненә шөкөр, ҡалғаны бына халыҡта, үҙ йөрәгендә...

Һеләүһен Иҙел аръяғына сығып, шул яҡтарҙы ҡарар, шунан көс йыйыр.

...Ул туғай юлынан Аҡташ тауына, Балапан, Талпаҡ тауҙарына — Эҫем тамағына.

Бында — киң Кенәз яланы. Кешеләр урманға ҡасҡан. Ораҡовтарға барма, тиҙәр. Ул асыулы, тиҙәр. Хәҙер нисектер, подпоручик булған. Туғанын күрергә, бигерәк тә кейәү балаҡайҙы иҫкәртергә.

---

[1] *Асамай — береһенә икенсе арҡыры.*

Юғиһә... Бында ҡотора башлаған.

Дөрөҫ, Ораҡов кенәздәрҙең дәрәжәләре төшкән, абруйҙары ҡороп бара ине инде. Ҡарт донъя ҡуйҙы. Ҡоҙа — кенәз Иван-Ҡотломөхәммәт менән ошо кейәү Михаил-Ташбулат былтыр Стәрлетамаҡта тамам янып, бөлөп ҡайттылар. Ни саҡлы тырышһалар ҙа, Салауат уларҙың ҡулынан ҙур команданы үҙенә ҡушып, алып китте. Шунан һуң былар воевода алдында абруйҙарын юғалттылар, ышаныс бөттө уларға.

Воевода подпоручик Ораҡовты ла ҙур командаға баш итмәй. Ваҡ-төйәк эш менән йөрөтәләр. Ә Иван Ораҡовҡа бөтөнләй һан юҡ хәҙер. Уныһы, бәлки, ҡайтыр ҙа ине, үҙҙәренең хеҙмәттәш деүәрәндәре күҙ ҙә астырмай, сабаталы кенәз, тип торалар, нуғай, тиҙәр.

Тормоштары шөкөр әле, юғиһә, бөтөнләй бүтәндәр бар, кенәз тип әйтерлек кенә ҡалған. Уларҙа ер ҙә юҡ, мал да юҡ. Ана бит, Осип Енгалычев үҙе яу саба хәҙер. Һеҙҙән мәғәнә юҡ, асыҡ ауыҙҙар, тип кенә торалар. Әле лә, алла һаҡлаһын, ҡоҙаң Кинйә Арыҫлановтың ҡотҡоһона бирелгәнһең, тимәйҙәр. Әйтерҙәр уныһын да, ике һүҙҙең береһендә, мотлаҡ аҡланырға кәрәк, тиҙәр.

Шуның өсөн дә улы ҡайнағаһы Һеләүһенде булһа ла тотоп бирергә тырыша. Ысынлап та, уңай мәл. Был яҡта йыш урала, әйтерһең, төйәк ҡорған.

Һеләүһен туп-тура барып инә. Әлиә, Ташбулат бар. Атаһы ла бында.

Килде Ораҡов. Әлиә ирен ҡыуа:

— Кит.

— Мин уны үлтерәм, — тип зәһәрләнде подпоручик.

— Ҡайнағаң бит ул.

— Уның эше ҡайнаға... Злодей. Вор.

Әлиә:

— Телең ҡорор.

Ҡайнаға тип хурлай бит әле. Була инде, атаһы (Кинйә) ҡайнағаһы Бикбулат менән килешмәне.

Һеләүһен:

— Ташбулат кейәү...

— Мин — Михаил Иванович, подпоручик Ураҡов...

Атаһы тыя.

Михаил Ораҡов һағалай. Бына Һеләүһен менән Михаил осраштылар. Бергә-бер. Артта, ҡайҙалыр, кешеләре бар, әлбиттә. Һеләүһендән нәүкәр егет кеүек дуҫтары — Мырым, Тайсура, Төмтөк, Әбеш күҙ яҙҙырмай.

Михаил хәйләләй:

— Әйҙә ҡунаҡҡа.

— Ҡунаҡҡа тип килдем дә...

— Ниңә минең крәҫтиәндәрҙе ҡотортаһың?

— Көрәш бит...

— Мин — ҡылысҡа...

Һеләүһен ҡул менән үҙ ҡылысына күрһәтә.

— Эштәр ҡылысҡа ҡалдымы? Былай булғас, ҡунаҡҡа йөрөп булмаҫ. Әммә минең туғанымды йәберләмә! Хоҙай һуғыр. Йә ҡыҙыл этәс ебәрә ул, йә йәшендән аттыра. Уның ҡөҙрәте ҙур, теләһән, аяҙ көндө лә йәшен уктары осорта.

Һеләүһен дауам итә:

— Туғаным менән осрашам. Үҙем генә. Һин ҡал, улай-былай уйлаһаң...

Һеләүһен алға китә. Әлиә менән осраштылар. Шулай ҙа был юлы ҡиәфәте бүтән. Бик ғорур. Кенәздәргә бирешерлек түгел. Һеләүһен алдында Әлиә иренә:

— Ағайыма мәкерлек ҡылһаң, бөтә башҡорт ҡәһәре һуғыр, — тине. — Ә ул ҡәһәр беләһеңме?.. Ул бик көслө булыр. Нәҫелеңде ҡоротор, — тине.

Ул ағаһы хаҡында борсола. Ағаһы:
— Ирең ҡаныҡҡан.
— Ҡанығыр, ҡан дошмансы ул.
— Миңә этлек эшләргә маташа.
Әлиә:
— Ҡулы ҡалтыраһын, бармаҡтары тартышһын.
Һеләүһен:
— Һәй, ундайҙар күп. Барыбер ҡулымдан ҡорал һалмаҫҡа тип илгә биргән антым бар.
Әлиә:
— Уҡ атҡанда ҡулың көслө булһын, күҙең үткер булһын.
Үҙе китер, тик бында туғаны ҡала. Нишләйһең, алып ҡайтыу йолаһы юҡ. Ваҡыты ла...
Батыр әле күҙ йәше күрһәтмәне.
— Әсәйемә әйт. Иҫән, тиң. Минең өсөн бер тамсы күҙ йәше түкмәһен, — тине Әлиә.
Унан Һеләүһен Инйәр буйына сыға. Бында ла Ораҡов ерҙәре. Тирә-йүндә ҡумрыҡ башҡорттары. Кем шулай тип атағандыр уларҙы. Дауылда төбө-тамыры менән аҡтарып ташланған йыуан ағасты ҡумрыҡ тиҙәр бит. Әммә әлеге хәлгә тап килә. Юрағанға — юш, тигән төҫлө. Дауыл шул.
Һеләүһен дә шулай Ораҡтарҙың бындағы имениеһынан ҡуптарып, крәҫтиәндәрен — башҡорттарҙы алып китте. Улар байтаҡ ҡына малын да үҙҙәре менән әйҙәне.

***

Уң яҡҡа киткән батыр... Әлбиттә, Ҡәнзәфәр үҙенең тыуған яҡтарында, Боҙаяҙҙа. Унан ары Өршәк буйына, Димгә барып сыға. Бөйөк император ғали йәнәптәре манифесын уҡый. Әлибайҙы күрҙе. Иләҫ-миләҫ кенә:
— Тағы киреләнеңме?
Яҙ ҡайта сапҡайны. Шунан кешеләре китә башлағас, тағы яуға ҡушылды.
— Юҡ, ирек даулайбыҙ, — тине.
Ҡәнзәфәр кешеләре китте Әлшәй, Бишбүләк, Бәләбәй, Туймазы яҡтарына. Уның тағы 400-ләп кешеһе бар ине. Инде йыйынға саҡыра.

***

Уның китеүе булды, Әлибайға Ибраш Уразбахтин, Мәҡсүт Мырҙаҡаев[1], кәңәш һорап, кеше ебәрҙеләр. Ни эшләргә? Батша китте, Кинйә абыҙ китте. Зарубин юҡ, был яҡтарға килеп йөрөй гәйеп, Ҡасҡын Һамаров күренмәй. Ҡәнзәфәр әйтә лә бит, ә Әлибай электән ҙурыраҡ түрә, бер аяғы менән Стәрлетамаҡ яғында, икенсеһе менән Димдә — Әлби ауылында. Нуғай юлында баш старшина булған кеше. Хәҙер ни эшләргә, таралышып бөтөргәме, әллә, Ҡәнзәфәр әйткәнсә, ҡуҙғалырғамы...
Әлибай шул 29 июлдә үк хат яҙып ебәрә.
“Беҙгә хәҙергә тыныс йәшәргә кәрәк. Император хәҙрәттәре Петр Федорович, Ҡазанды алғас, Мәскәү яғына йүнәлде. Был турала минең исемдән полковник әфәнде — бригадир Ҡәнзәфәргә яҙығыҙ. Мин һорайым, Ҡәнзәфәр муллаға туҡтап торорға кәңәш итеп яҙығыҙ. Хәлдең ахырын көтөргә кәрәк. Һуғышҡа сығырға һеҙҙе бер кем дә ҡыҫтамай. Походҡа әҙерләнеүселәр йорттарына ҡайтһын”.
Янғын һүнә, һуғыш тына, йәнәһе. Былай тип Әлибай асыҡтан-асыҡ яҙа алмай.

[1] *Мәҡсүт Мырҙаҡаев — Ҡазан даруғаһы яһаҡ татарҙарының старшинаһы, б. к. полковнигы.*

Уңынан да, һул яғынан да шөрләй. Халыҡ та, хөкүмәт тә бар.

Ә бына күп тә үтмәç, ул асыҡтан-асыҡ карателдәр яғына сығыр.

Усаев сапҡындар ебәрә, Ҡаранайҙы эҙләтә. Ә ул... Былтыр көҙ бөтә Минзәлә яғын тетрәткән. Ҡыш шул яҡта, Нуғайбәктә.

Ә яҙҙан бирле Ашҡаҙар, Күндрәк, Стәрле буйҙарында яҙғы ауыр ваҡытта Ҡаранай менән Торнов Дим буйында солғанышта ҡалды, бирешмәне. Стәрлетамаҡ пристаненә ябырылып торған батыр әле лә тик ятмаç.

Ҡаранай тик ятмай.

Бөгөлмәләге карателдәр башлығы полковник Кожин[1] Ҡаранайҙы тотоу сараһын күрергә тырыша. Ҡара-Табын старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев, унын әмерен үтәп, Ҡаранайҙы тоторға ярһый.

Ә Ҡаранай... Яңғыҙ түгел, 800-ләп яугиры бар. 3 июлдә Стәрлетамаҡ пристанендәге ҙур гарнизонға ябырыла.

Унда — Голицын корпусы. Кенәз Ырымбурҙан Өфөгә ашыға, унан Нуғайбәк, Минзәлә аша Ҡазанға барырға, унда Михельсон менән бергә Пугачевты ҡыйратырға. Ҡомайҙыҡынан ҡоро ҡалғыһы килмәй...

Унын алдағы колоннаһы — бына, Стәрлетамаҡта. 5/VIII уға һөжүм.

Ҡаты алыш. Көн буйы барҙы.

Икенсе колоннаһына курьер сапты. Тиҙерәк ул да бойға индерелә.

Ҡаранай сигенә...

Ә Стәрлетамаҡта старшиналар Көçәпҡол Азатбай, Һайран Һәйетов, Мөхсин Ғәбдессәләм (Әлибай әле ҡатнашмай тора), үҙҙәре әйткәнсә, олуғ бер йәмғиәт яһап, ғәфү үтенеү өсөн Голицын кенәзгә илселәр күндерҙеләр. Бер нисә старшинаны. Ә генерал уларға иғтибар ҙа итмәне. Ул Димгә табан сигенгән. Был хаҡта Ҡәнзәфәр Усаев бой үткәс кенә белде. Көсө бөткән. Ләкин уны табырға кәрәк.

Голицын корпусының 12 июлдә генә Өфөгә еткәнен белде Усаев.

— Һа-ай, егет арыçланы! Петр Федоровичты ҡыуып етә алмаç...

Ә шуны Әлибай белгән бит инде. Ярҙам итмәгән.

Ҡәнзәфәр осратып, уны туҡтата алмай. Көсө байтаҡ ҡына кәмегән. Шунда уҡ Ҡазан яғына елдерҙе. Барыбер Голицынды осратыр. Пугачевҡа кәрәк булыр. Йәһәтерәк Камаға...

Киткән шул...

Голицын 9 августа ғына барып етә. Ә Пугачев...

## Ҡәнзәфәр

Тәүҙә ул үҙенең Боҙаяҙ ауылына ынтылды, унан — Ишлегә, Талбаҙыға. Оло юл буйы. Юлды ҡарап тороу, һаҡлыҡ булдырыу өсөн килтереп ултыртылған мишәрҙәр йәшәй, улар — унын үҙ кешеләре. Бында ул батша указын уҡып, яу хәстәрен күрә, көс туплай.

— Сиреүгә кешеләр бирергә.

— Ҡорт[2] аҡсаһы йыйырға.

Ул иçкесә итеп, ҡорт аҡса, ти. Борон башҡорттарҙа шулай тигәндәр. Әле инде онотолған. Ырыу аҡсаһы — күс ярағы, бер тирәгә тупланып ерләшкәнен иләү тиҙәр.

Ҡәнзәфәр үҙенә күрше ҡорттарҙан, иләүҙәрҙән йыйып, арыраҡ, Ауырғазы һыуы буйлап меркеттәргә сыҡты. Унан Өршәк башына, Миәкәгә, Бишбүләк яғына... Унда башҡорттарға ҡарағанда татарҙар, сыуаштар күберәк. Рустар ҙа бар.

---

[1] *Кожин Николай Н. — полковник, Томск пехота полкының командиры.*

[2] *Ҡорт — ырыу башлығы, шулай уҡ тотош ырыу (автор һүҙлегенән).*

5

Пугачев ғәскәре тиҙ бара. Ә уның хаҡында хәбәр оҙон ҡолаҡ аша алға тарала, шауҡымда үҙенән алда йәйелә. Кешеләр ойоша, ҡуҙғалып Ҡазанға ағыла. Уң беләктәренә зәңгәр таҫма бәйләйҙәр. Батша яҡлы, тимәк.

Ҡазан янында ғына — Надыр Тохтаралин[1] отряды. Алексеевтыҡы[2], Макаров[3] отряды ла ошонда лагерь ҡорған.

Башҡорто килә, татары килә. Бер үк ауылда осрашалар ҙа, кем яҡлы былар тип, бер-береһенә ҡарашып алалар.

— Илмесез, яумысыз?

Тегеләре:

— Ил, ил, — тип яуаплай.

— Ил булһағыҙ, Атайға барығыҙ! (Батшаға.)

— Ә беҙҙекеләр китте. Уға бәйғәт[4] бирҙеләр... Эйе, эйе, ант биргәндәр, Ҡөрьән үпкәндәр.

Күпселек ауылдарҙа, үҙҙәре әйткәнсә, Петр Федоровичтың тәуабиғтары, эйәрсендәре. Ҡазандың үҙенән ҡаршыға килеүселәр ҙә була башланы.

— Ҡазан ни хәлдә?

— Сине көтә.

— Көс күпме?

— Аҙ түгел, әлбиттә. Аҙ булһа, үҙҙәре лә... Унда рогаткалар ултыртҡандар, туптар бар. Тегендә бер батарея, бында бер... Байтаҡ.

— Бына, былай барғанда юл асыҡ...

Арса яғынан көс көтөлә.

Ҡазанды белеүселәр бар. Белобородов булған, поручик Минеев булған. Кинйә белә... Бындағы Ҡазан яғыныҡылар... Арса яғынан барырға ҡарар иттеләр.

6/VII. Мамадыштан сыҡтылар.

9/VII. Арсаға килделәр. Калакул. Шулай халыҡ ағылды. Ғәскәр ҙурайҙы. Байләр, Сабасынан, Зюриҙән кешеләре. Ҡорсан, Ҡазылы, Менгер... Һәр ауылдан.

Бөтә халыҡ Ҡазанға ҡуҙғалды. Үҙҙәрен яфа сиктергән, ыҙалатҡан түрәләрҙән үс алырға, ирек яуларға.

Армия ҙур. 25 мең. Бөтәһенә атаман Овчинников баш. Ғәскәр 10/VII Арсанан сыҡты. Таң һарыһы менән.

10/VII. Ҡаршыға — полковник Толстой Н. В.: 100 карабинер, 100 кеше пәйҙә. Йәйәүле отряд менән. Ҡазандан 12 саҡрым Ямаширмә ауылы янында (Яуширмәнең Ҡазан йылғаһына ҡойған урыны) осраштылар, юл ыңғай уҡ отрядын (йәйәүле һалдаттар) ҡырып-тапап, ҡыйратылды, теләгәне ҡушылды, теләмәгәне... ҡасырға сара тапҡандары китеп ҡотолдо. Полковник Толстой, офицерҙар шунда уҡ донъянан үткәрелде.

11/VII. Төштән һуң Ҡазан күренде. Сиркәү көмбәҙҙәре, мәсет, манаралар... Ҡалҡыуҙа икән Сөйөмбикә манараһы.

Биҫтәләре, йорттар ус төбөндәгеләй күренә.

Троицк тирмәне янында туҡтанылар, Ҡазанға бынан ете саҡрым. Лагерь ҡоролдо.

Бына Ҡазанға етелде. Һәр кемгә үҙенсә шатлыҡ. Яйыҡтан, Иҙелбаштан, Кама

---

[1] *Надыр Тохтаралин — б. к. полковнигы.*
[2] *Алексеев Роман — б. к. полковнигы, Б. Ҡанҡаевтың көрәштәше.*
[3] *Макаров — Лихачев Гаврила Макарович, Ҡазан өйәҙе крепостной крәҫтиәне, пугачевсыларҙың яҫауылы, аҙаҡ полковнигы.*
[4] *Бәйғәт — тоғро булырға бирелгән ант.*

буйынан килеүселәр — ана, ни саҡлы ер үтелде, тиҙәр. Башҡорттар: “Бына ул Ҡазан!” — тип йөрәкһей.

Татарҙарға Ҡазан яҡын да, яуыз да... Үҙ төйәктәре, әммә улар өсөн бөтә яуызлыҡ шунан сыға кеүек. Хәҙер ул ҡәһәр ояһы туҙҙырылыр...

Бигерәк тә Пугачевҡа тәьҫирле Ҡазанға килеү. Булғаны бар. Бында уны өсөнсө йылды конвой аҫтында килтерҙеләр. Оҙатҡанда Малыковкала унын аяҡтарына 35 ҡаҙаҡлы[1] ауыр бығау, ҡулдарына 15 ҡаҙаҡлы әҙәм күтәргеһеҙ ҡулаҡта кейҙерҙеләр. Шул кандал менән килтереп, ошонда бит, ошонда ыҙаланы.

Ярай әле, илдә мәрхәмәтһеҙҙәр бөтөнләй юҡ түгел. Ырғыҙҙа уға фатиха биргән игумен Филарет Ҡазандағы бер сауҙагәр Василий Федорович Щелков йәшәүен әйткәйне. “Беҙҙең старовер, — тигәйне ул. — Ярҙам итер”. Старовер... Ике бармаҡ менән суҡыналар, боронғо тәре өсөн, һаҡал-мыйыҡтарын ҡырмау өсөн көрәшәләр. Улар батшаны, хөкүмәтте танымайҙар. Уларға ҡаршы барыусыларға ярҙам итәләр.

Староверҙар — әүҙем халыҡ. Филареттың һүҙен йыға булалармы? Ул бит – элекке Мәскәү купецы. Икенсе гильдиялы. Хәҙер ул бөтә Волга буйы староверҙарына терәк.

Пугачевҡа ла ярҙам итте. Уға күп-күп хәйерҙәр ебәрҙе. Ҡасырға юл асты.

Пугачев та онотмай. Уларҙың теләктәрен аңлап, үҙенең манифестарында, раскольниктарға һаҡал-мыйыҡ ҡырмай йөрөргә ирек бирәм, боронғоса табынырға юл ҡуям, тип вәғәҙә итә барҙы. Был вәғәҙә улар өсөн бик мөһим ине.

Әле шул Щелков бармылыр... Ярҙам иткәнен һиҙеп, үҙен хөкөмгә тартмағандармы?.. “Шулай ғына уйлап ҡалырғамы? Мин ниндәй батша булам? Ә бында аҙмы?”

12/VII. Төштән һуң, штурм туҡталғас, күмәк кеше араһында извозчик таныны бит үҙен.

— Мин ҡасырҙым, осударь, һине теге юлы. Яза алдым, — тимәһенме.

— Тағы ла миңә хеҙмәт, — тине батша, ирәүән йылмайып.

Эргәлә Грязнов менән Овчинников бара ине. Пугачев уға яҡынлап, арыраҡ Кинйә менән Иҙеркәйҙе саҡыртып алды.

— Халыҡҡа еткерегеҙ... Төрмәләрҙе асырға, тотҡондарҙы азат итергә.

— Эйе, бында күптәрҙер, — ти Кинйә. — Беҙҙекеләрҙе күп яптылар.

— Шулай, бығаса тотолған береһен, атамандарҙы Йәшерен комиссияға оҙата торҙолар. Бында һорау алдылар, язаланылар. Ябып ҡуйҙылар. Бына әле Потемкин ҡулында зиндандар.

Ҡулға алынған яу башлыҡтарын Ырымбурға, Ҡазанға оҙаталар. Иң дәүҙәре, ҡурҡыныслы тигәндәре — ошонда. Ошонда тикшерәләр, хөкөм итәләр, яза бирәләр.

— Ҡотҡарырға!

Овчинников ҡыуана:

— Беҙгә күпме көс өҫтәлә!

Иҙеркәй менән Кинйәгә әйтеүендә хикмәт бар. Улар мосолман. Бындағы халыҡ менән аралашыу еңел. Шулар аша күпте белеп була.

Нисек ҡаршы алырҙар?

Иҙеркәй Троицк тирмәне янында бындағы татар ауылдарынан килгәндәрҙе туплань. Күптәр ине. Кинйә икенсе урындан йыя.

Ҡазан ҡаршыла, күҙ алдында. Уны белергә, разведчиктар ебәрергә. Бындай

---

[1] *14 һәм 6 кг.*

ваҡытта шымсылар ҙа кәрәк. Пугачев бәғзе атамандарҙы ла юл самаһын алырға ебәрҙе.

Үҙ-үҙенә һөйләнеп:

— Һин ниндәй анпиратор? Разведка ебәр, тегендә ниҙәр бар, артиллерияһы ҡайҙа?.. — тип ҡеүәт-дарман өҫтәне.

Пугачевты ҡаршылайҙар. Кешеләр, ярлылар.

Губернатор алдан иҫкәртте, ҡурҡытты. Паника өсөн — “казнь”, постан киткән өсөн — казнь, тыңламағанға — казнь. Юҡ, ҡурҡмайҙар. Киләләр. Ябай халыҡ түгел, ҙурҙары, һиммәтлеләре.

Яуыз Пугачев килгәс, ул калакулдар ҡағып, ҙур набат менән ҡала халҡын күтәрергә ине.. Юҡ... калакулдар ҡаға.. Даң-даң... Әммә халыҡ үҙ батшаһын ҡаршылай. Элек тә Илек ҡаласығында калакулдар ҡағып, Ҡарғалыға татарҙар икмәк-тоҙ менән индерҙе. Һаҡмар биҫтәһендә лә. Тантана менән... О-о... шәп ине! Ә бында бигерәк тә!

Монастырҙарҙың архимандридтары күренә. Собор сиркәүҙәренең протопоптары тәре, хоругвий күтәреп сыҡҡан.

Государь һаулығына тип ғибәҙәт ҡылдылар. Емельян Пугачев ҡабул итә, олпат һөйләшә. Улары ғынамы?.. Хатта Ҡазан архиепископы Вениамин алдағы көндәр хаҡында уның менән йәшертен рәүештә һөйләшә башланы.

Бер әҙәм килде. Серле генә. Арлы-бирле, насар ғына кейенгән. Пугачев уға иғтибар итте. Ҡулдарына. Аҡ ҡулдар...

— Йә, асығын әйт!

Теге сапаны эсенән бер төргәк сығарҙы.

— Бына, государь, һиңә бүләк.

Пугачев ҡарай. Байраҡ. Голштин байрағы...

— Кем ебәрҙе?

— Һорамағыҙ... Аңлайһығыҙ.

Ә бит Павел ебәргәйне. Ул атаһының үлгәненә ышанмай, әсәһен яратмай, ғәйепләй, йәшерен серҙәр ҙә йөрөй. Бына атаһы... ышана. Уның тәхеттә сағындағы таянысы булған полктың байрағы.

— Ҡушҡанды үтәнем. Миңә ҡайтырға ҡуштылар.

— Һин кем?

— Һорамағыҙ.

Пугачев уны оҙатырға ҡуша.

— Оҙатмаһындар.

Үҙе китә. Һуңыраҡ Пугачев байраҡты күрһәтә.

Татарҙар ҡаршылай.

Буҫтау һуғыу, һабын ҡайнатыу, тире иләү заводтары. Байләр керәшендәре — Иноземцев[1], Кобелев[2], сауҙагәрҙәр Усманов[3], Юнысов, Үтәмешев[4], Апанаев[5] һәм башҡалар.

— Әй, беҙҙең батшабыҙ ғали йәнәптәре.

— Ғүмерең оҙон булһын!

— Мәскәүгә етеп, олуғ тәхетеңә ултыр!

— Йәнең тыныс булһын!

— Төшөнкө күңелеңә дарман.

Аяғына ятып, йөҙҙәрен һөрттөләр.

Пугачевты байҙар ҡунаҡҡа саҡырһа, Емельян ихлас ҡына бара.

---

[1] *Иноземцев — Минзәлә өйәҙе Иштирәк ауылынан, сауҙагәр.*
[2] *Кобелев — Ҡазан өйәҙендәге Пыжман ауылынан, сауҙагәр.*
[3] *Усманов Муса — Ҡазан өйәҙе Ҡышҡар ауылында бурҙат (кумач) эшләү заводының хужаһы.*
[4] *Үтәмешев Абдулла — Малмыш өйәҙе Масҡара ауылынан, тире иләү заводының хужаһы.*
[5] *Апанаев Х. — тире иләү заводының хужаһы.*

6

Ошо көндәрҙә генә 8/VII баш командалаусы Федор Щербатов императрица Екатерина указы менән Петербургҡа кире саҡыртып алынды. Уның урынына бөтә карат көстәренә баш итеп генерал-аншеф, граф Петр Иванович Панин тәғәйенләнде.

Уны Екатерина яратмай ине. Улы Павел янында уралды. Шуның ғына тәрбиәһе. Екатеринаға, быныһынан бигерәк, ағаһы граф Никита Иванович Панин дошман. Заговор көттө уларҙан. Күрә алмай. Дворецтан ҡыуҙы, кесеһен ебәреү хаҡында унан үтенеп баш эйеп, күндерергә рөхсәт һорарға тура килде.

Ҡанһыҙ, һис аяу белмәй торған генерал.

Уға китһә, хәҙер бөтә көс — Пугачевҡа, ил эсендә крәҫтиәндәр һуғышына ҡаршы. Уға Екатерина үҙе лә, яңы фавориты Потемкин да. Хәҙер Пугачевҡа ҡаршы тороп, уны ҡыйратыу бик ҙур, иң кәрәк аҙым иҫәпләнелә. Пугачев башына ярлыҡаш — 10 мең һум. Ул, ашыҡтырып, Төркиә менән һуғышты туҡтатыу юлына баҫты. Яңыраҡ фельдмаршал Румянцев ғәскәр идараһына йәлеп ителде. Әле бында хәбәр килеп етмәһә лә, 10/VII солох: Ҡайнарджий солохо. Яңы ғәскәрҙәр Пугачевҡа ҡаршы күсерелә.

Пугачевтың Ҡазанға юл тотоуы бигерәк тә йәтеш. Екатерина үҙе 1767 йылда Ҡазанда, Болғарҙа булғайны. Сембергә етте. Хәҙер үҙен "Ҡазан помещицаһы" тип йөрөткән императрица ундағы дворяндарға мөрәжәғәт итә. Үҙенең яңы фавориты Григорий Александович Потемкин, ул хәҙер генерал-аншеф, граф, ихтилалды күҙ уңынан ебәрмәй. Петербургта булһа ла, Мәскәүгә килһә лә — шул хаҡта, карателдәргә ярҙам ебәрә.

Ә бит бөтәһе яңы Его сиятельство граф ҡулында. Ул хәҙер Россияның Хәрби коллегияһы вице-президенты. Ул (үҙенең племянницы) П. С. Потемкинды[1] Тикшереү комиссияһы начальнигы итеп ебәрҙе.

Панин П. И., губернатор Брант былтыр көҙҙән үк оборона нығытырға башлағайны.

Адмиралтейство бар. Монастырҙар нығытыла. Ҡоймалары таш. Ҡазан ҡәлғәһе үҙе лә. Ҡасандыр хандар торған бит әле. Иван Грозный килгәс тә ауыр саҡтар күп булған. Үҙе Ҡазан батшаһы, уның бер пайтәхете. Ҡәлғә ярҙам иткән, һаҡлаған. Екатерина быны белә. Үҙе күргән. Үҙе Ҡазан алпауыты лаһа.

Ҡаланың тирә-яғына ла ышаныс бар. Рогаткалар[2]. Бөтә дворяндар, хеҙмәткәрҙәр, купецтар, мещандар аяҡҡа баҫтырылған. Ҡарауылдар, юлдарға кәртәләр ҡуйылған.

Пугачев килә башлағас, йылға буйын, юлдарҙы, ауылдарҙы ҡарарға кешеләр, командалар оҙатылды.

Ләкин көс аҙ. Брант быны белә... Пугачевта көс арыу, күп халыҡ уның яғында.

Потемкин күкрәк ҡаға, ҡупая, яуызды яҡын да ебәрмәйем, ти. Һа-ай, губернатор күпме ыҙа сиккәнен белә, ул саҡ ҡурҡыныс алыҫта ине, хәҙер бына ишек төбөндә...

Ҡазанда — регуляр ғәскәр: 1500 кеше. Адмиралтейство, гимназиялар, чиновник мәьмүрҙәр. 9 батарея. Ҡала халҡы тирә-яҡ биҫтәләрҙә ҡайнаша.

Ағас йорттар. Биҫтәләрҙә буҫтау, кирбес һуға торған урындар. Ямсылар урыны. Татар биҫтәләре.

Иҫке татар биҫтәһе үҙен-үҙе ҡарарға тейеш, Уныһы Ҡабан күле артында. Татарҙар урынлашҡан яңы биҫтә — һаҙлыҡ урын, уйһыуҙа.

---

*[1] Потемкин Павел Сергеевич – генерал-майор, Йәшерен комиссия начальнигы.*

*[2] Рогатка – брустарҙан арҡырыға эшләнгән оборона ҡоролмаһы.*

Бында генерал-майор Баннер — Арса яланы, Ҡазан йылғаһы яры, Ҡабан күленә саҡлы. Генерал-майор Ларионов ямсылар яғына хаким. Ә Ҡазан йылғаһына саҡлы полковник Свечин[1] хужа. Ә Потемкин үҙенә отряд алған. Унда Владимир полкының кешеләре, атлы татарҙар.

Екатерина был Пугачев арҡаһында йөҙәп бөттө. Ниндәй мәшәҡәт! Ниндәй һүҙҙәр...

Быйыл май айында бер поляк хәбәр тарата. Йәнәһе, мәрхүм А. И. Бибиков үҙе лә һуңғы көндәрендә бөтә ғәскәре менән Пугачев яғына сығырға маташҡан.

Ниңә Бибиков? Беләләр, ул – яңыраҡ конфедераттарҙың үҙҙәрен туҙҙырып, әсир иткән Бибиков. Был ниҙән?.. Ҡурҡытыуымы, паникамы? Бөтәһе бар, бөтәһен көтөп була был поляк конфедераттарынан, имеш.

Ул танымай, белмәй эшләмәç... Ул Пугачҡа сығырға булған. Ә беҙгә ни һан?

7

Пугачев, Михельсон отрядымы, башҡа берәйһеме килһә тип, юл ыңғайы уҡ пикеттар ҡалдырҙы, Ҡазандың тирә-яғына командалар ебәрҙе. Дербышкала, Дәүләкәйҙә — бөтә тирә-йүндә. Хәбәр итергә әҙерҙәр.

Төн тыныс үтһен. Ял итһендәр.

Указдар яҙылды.

Овчинников китте. Кинйә, Иҙеркәй бөтәһенә лә өлгөр.

Губернаторҙың үҙенә лә ультиматум яҙылды.

Әҙерлек арыу. Йөктәр, һалам тейәлеп, яҡын килтерелә.

Белобородовҡа ярҙамсыһы Минеев кәңәш бирә.

— Ҡараныңмы?

— Тағы барҙым... Беҙ бынан штурм яһамайыҡ. Бында әҙерҙәр. Арттан... Унан урап сығып, флангынан, ярармы? – ти Минеев.

— Ярар.

12 июль. Хәрби совет бара. Теге поручик Минеев ҡәһәтләнә.

— Ғәскәр күп! Алабыҙ Ҡазанды!

Пугачев үҙе лә тәүәккәл. Икеләнеп торһа — ниндәй анпиратор?

Уныһы шулай... Әле сер генә бирмәй... Ғәскәр күп тә. Тегендә лә аҙ түгел. Унда — губернатор. Унда — офицерҙар, һалдаттар.

Хәрби советы ла дәртләндерә.

— Алырбыҙ, — тиҙәр. — Беҙҙең көс — халыҡта.

Пугачев ҡәнәғәт раçлай.

— Эйе. Бынаһы дөрөç.

Ләкин... үҙе күрҙе. Халыҡ әллә ни риза түгел. Нисек ҡаршы алырҙар?

Кинйә:

— Көтәләр. Һине...

Белобородов:

— Гел көрәш. Улар айырылырға ынтыла...

Юҡ, айырылып ҡайҙа барһын... Тик көсләп суҡындырып маҙаларына төштөләр. Ул ғына түгел, халыҡ йөҙәгән. Ярлы. Ерҙәрен ала. Яу башланғандан бирле.

Уныһын бында һәр кем белә. Хәбәрҙәр килә. Бөтә өйәҙ, бөтә олоçтарҙан. Губернатор — янында ғына. Ә ниндәй ҡаршылыҡ. Атамандар... Бердаға килделәр, Өфөгә (Зарубинға). Әле батша үҙе уларға килә.

Хәбәр итергә, күтәрергә. Был эштә Кинйәгә күҙ терәп торалар.

Ул эшләй. Алдан кешеләр ебәрә, хаттар яҙа. Шунда өс йүнәлеш асыҡланды.

Белобородов, Арса яланынан, беренсе колонна башлығы.

---

[1] *Свечин – полковник, Ҡазан адмиралтейство контораһы начальнигы.*

Минеев та тырыш кеше, тоғро поручик булып сыҡты, ул икенсе колонна башлығы.

Өсөнсө колоннала Пугачев үҙе баш. Буҫтау фабрикаһы яғынан һөжүм ҡыласаҡ. Бында — Кинйә.

Дүртенсе йүнәлештә — Овчинников. Татар биҫтәһе. Муса Алиев, Иҙеркәй аша хәрәкәт итәсәк.

Сәғәт 6-ла штурм башлана... Иртән, таң атҡанда. Һәр кем үҙ эшен белә. Пугачевҡа хәбәр килә: Белобородов, Минеев Арса яғынан бәреп үттеләр. Валдан дошманды бәреп төшөрәләр. Йырындан-йырынға кусәләр, түбәләр, ҡалҡыуҙар аша үтелә.

Шул тирәлә гимназистар бер туп менән ҡаршы тора. Гимназистарҙы ҡыуалар.

Белобородов өс яҡлап ҡыҫа Потемкин командаһын. Шунан, йомшаҡ яғын һиҙеп ҡалып, бер флангынан бәргән: Потемкин сигенде. Рогаткалар үтелде. Генерал йән-ял алыша.

Был ваҡытта... Пугачев үҙе Ҡабан күленә, буҫтау фабрикаһы биҫтәһенә уҙҙы. Был – керәшен Дрябловтың[1] биләмәләре, ул һаҡлап маташа.

Бер туптары бар ине. Пугач шуға ата — бер атыуҙа уҡ тынды теге. Тупсыһы менән бергә шартланы. Буҫтау эшендәгеләр, һалдаттар Пугачевҡа баш һалды.

Пугачев үҙ туптарын ҡалҡыуға ҡуйып ата башланы.

Артта ялҡын. Янғын. Төтөн.

Генерал-майор Баннер ҙа ошо яҡта. Уның ғәскәрҙәренә ҡаршы — Кинйә (башҡорттар). Уҡтар яуа, ҡалаға бәреп инделәр. Һалдаттар ҡорал ташлай, ҡул күтәрә. Кинйә береһенә мылтығын алып бирә.

— Әйҙә, ат. Ниңә тик тораһың?

Түбән яҡ алынып бөттө. Пугач Булаҡ буйлап түбәнге яҡтан ҡыуа. Уйпаттарҙан бара ғәскәре. Кремлгә. "Гостиный двор"ҙы алды. Шунда туптар ҡуйҙы. Бына Кремлгә атырға тотондолар. Минеев монастырға батарея ҡуйып, Спасск ҡапҡаһын сәпәй башланы. Теге яҡтараҡ Белобородов алыша.

Бишбалта биҫтәһендә лагерь. Унда әсирҙәр күп ине. Пугачевҡа килтерәләр. Азат ителде байтағы. Төрмәлә ыристандар бик күп. Булаҡ аръяғынан, Татар биҫтәһенән дә киләләр.

Ундағы оборонаны полковник Свечин тота. Йәнә адмиралтейство кешеләре. Ҡаса тегеләр — Волга аръяғына. Ә эшселәр, һалдаттар, татар ярлылары Пугачев яғына сыға.

Азат әсирҙәрҙе алып килделәр. Күптәрен Павел Потемкин үлтерткән. Давыдовтың да үле кәүҙәһен генә таптылар.

Унда кемдәр барлығын белә ине Потемкин. Давыдовтың хатта Екатеринаның яңы закондар комиссияһы депутаты икәнен дә белә ине. Ләкин...

Осрашыу.

— Ҡайҙан, төрмәнәнме?

— Юҡ!

— Идорка, төрмәне ал!

Китәләр.

Дар ағасы. Давыдов өсөн бер әсирҙе аҫырға! — Әсирҙәр етәрлек. Аҫтылар.

— Бына, уның өсөн — Кремлгә!

Атты. Гөрһөлдәп торҙо тирә-яҡ. Шунда эргәлә берәү үрһәләнә. Ҡарай төшкән ергә.

— Һин нимә?

— Унда минең улым... Петр.

Пугачев тағы бойорҙо:

---

[1] *Дряблов — фабрикант (Пугачев яғында һуғыша).*

— Заряжай!
— Бар, улыңды алып сыҡ. Ҡапҡаны асһын.
Ҡарт ҡурҡты. Юғалды.
— Азат итәбеҙ!
Кинйә Сөйөмбикә манараһына төбәп күрһәтә:
— Ул “әсир” булып тора.
Пугачев аңланы:
— Ә... Ханша манараһын... Уны ла азат итәбеҙ.
Ҡыҙҙар монастырынан да шул яҡҡа аттылар.
— Молодец, Минәй!
Тегендә Белобородов алыша, ә Овчинниковтың эштәре хөрт. Пугач уларға ярҙамға. Потемкин Кремлгә кереп бикләнде. Татарҙар, сыуаштар Пугачевҡа бирелә.
Потемкин да, Баннер ҙа Кремль эсенә боҫа.
Ҡала алынды. Кремль ҡамалды.
— Кремлгә!
Бесән йөктәре килтерҙеләр. Ышыҡланып баралар. Таш ҡойма бейек. Ҡапҡалар ябыҡ. Стенанан аталар.
Пугачев:
— Шуларға атырға! Штурмға!
Шул саҡ теге ҡарт:
— Ана, минең улым! Атмағыҙ. Атмаҫҡа ҡуш, государь!
— Ҡапҡаны ас, тип ҡысҡыр...
Үҙе тағы:
— Заряжай!
Ҡәлғә диуарының йошмаҡ, тәпәшерәк урындарына аталар.
Кремлдә паника. Тауыш ишетелә. Баш һалайыҡ, тиҙәр. Боласы яугирҙар ҙа йонсоно.
Крәҫтиәндәр ут төрттө. Ҡала яна. Төтөн. Ҡором...
Кис булып килә. Төтөн баҫты. Өйҙәр, кибеттәр, тотош урамдар яна, дөрләй. Татар биҫтәләре, буҫтаусылар биҫтәһенә генә үрт һалынмаған. Арса яғы тыныс. Ҡазан йылғаһы буйына сыҡтылар.
Михельсон килеүе һәммәһен дә һағайтты. Арттан үксәгә баҫып килеүен беләләр ине.
Шул саҡ Торнов килеп етте.
Бишбалта лагерында әсирҙәр күп. Араларында Пугачевтың яугирҙары байтаҡ. Яйыҡ буйында, Уралда әсир ителгәндәр. Улар яфа сиккән, йонсоған. Әле таныйҙар Емельянды.
Пугачев үҙе әсир иткәндәрҙе лә онотманы. Уға бөтөн полк — Ҡазан татарҙары полкы ҡушылмаҡсы. Шулар килә, баш эйә, рәхмәт әйтәләр.
“Ампиратор” әсир алғандарын да онотманы. Ҡушылғаны — яугир булды, казак булды. Теләмәгәндәрен йыйҙылар. Ситкәрәк, тыныс урынға — Савиново ауылына.
Ғәскәр таралған, йыйырға кәрәк. Атҡа атланам тигәндә... Шуларҙан йырынам тигәндә уға берәү һырылды. Этеп ебәрһенме?
— Атай!
Бәй, улы. 11 йәшлек. Ҡараны уға төбәлеп. Ҡатыны, ҡыҙҙары... Ни эш был?! Ә бит Екатерина, уның юлына әҙерләп ҡуйған кеүек, килтереп ҡуйғайны быларҙы.
Императрица, Пугачев хаҡында белгәс дә, Дон казактарының атаманы полковник Илья Денисовҡа фарман ебәрҙе: һинең казагың, яуап бирергә тура килер, йәнәһе. Эйе, Пугачевтың уға мөнәсәбәте ябай ғына түгел. Походта уның

ординарецы ине элек. Бына шул этлек уйлаған. “Отряд йый”. Йыйҙы, Һамарға ебәрҙе. Ә Святой Дмитрий крепосы коменданты Потаповҡа башҡасараҡ фарман: Пугачевтың өйөн яндырып, урынына тоҙ һибергә!.. Кеше йәшәмәһен, үлән үҫмәһен, ғүмерлек һабаҡ, йәнәһе. Ә өйө... һатылған, икенсе станицаға күсереп алып киткәндәр. Уны һүтеп, ҡабат элекке урынына килтереп һалдылар. Бөтә ҡаралты ҡоролдо, ситән үрелде. Һалдылар ҙа... ут төртөп яндырылды. Көлө күккә осоролдо. Урыны һөрөлдө, тоҙ һибелде. Тирә-яҡтан әйләндереп соҡор ҡаҙылды. Бөтәһе Екатерина теләгәнсә.

Ә ҡатыны Софья Дмитриевна, улы Трофим, ҡыҙҙары Аграфена менән Христинаны Ҡазан төрмәһенә килтереп яптылар. Үҙе ҡасандыр ҡасҡан төрмәгә.

Бик кәрәк ине был Екатерина өсөн.

— Бына ул батша тигәнегеҙҙең ҡатыны, балалары!

Эх, был яҙмыш тигәнең...

Пугачев үҙе килеп азат итте. Ләкин осрашып тороу бөтөнләй ярамай. Ул казак түгел, ул — Петр Өсөнсө, император ҙа баһа...

Ваҡыты ла юҡ... Шуға һылтанып, ул полковнигы Матвеевҡа (Әүжәндән бирле килә) ышана. Бына былар, ти, минең арҡала яфа сигә, атаһы мине ҡотҡарҙы, үҙе юҡ хәҙер. Бер урынға ҡуйығыҙ.

“Анпиратор”ға Ҡазан кешеләре бүләктәр тотторҙо.

Ул яуға әҙерләнә... Ә Михельсон килә.

8

Михельсон шул көндө кис килде. Ҡараңғы ине инде. Бына ул тағы Ҡазанда. Походҡа китешләй ошонда туҡтағайны. Бөгөлмәгә барып, Ҡазан дворяндарын үҙенә ҡушты, бына шуларҙың иҫәндәрен алып килде.

Кисә Ҡазанды алыу менән Пугачев үҙе лә, башҡалар ҙа ҡәнәғәт ине. Ойошҡанлыҡ етте. Бына бит, юҡтан бар итеп, ниндәй ҙур армия йыйып була. Ҡулда тотоп була. Тик өйрәтергә ине.

Батша оҫта... Батша шул саҡлы армияға хужа була белә. Ә бына иртәгә нишләрһең?

Михельсон бик ашҡынды Ҡазанға, бик ашыҡты. Өфөлә көсөн тупланы, өҫтәне.

Уға гел ҡаршылыҡ. Башҡорто башҡорт булып, марийы мари булып уға ҡарыша, өрә-өрә килеп тешләгән эт һымаҡ йолҡҡолайҙар, тотҡарлайҙар.

Камаға етте. Пугач киткән. Ҡыуып етә алмай. Ул ҡыуып етһә лә, бында өҫтөнә ябырылмаҫ ине. Ҡазан янындараҡ. Шулай ҙа артта ҡалмау фарыз. Ә уны алдайҙар, йәнәһе, Пугачев Вяткаға киткән. Яңылышты, эҙ юғалтты. Яңынан эҙенә төшкәнсе ваҡыт үтә. Нәҡ төлкө ҡыуғандағы кеүек. Эттәре ҡыуып еттеме тигәндә... ул ҡапыл борола, ҡойроғо икенсе яҡҡа һелтәнә, тазылар[1] һиҙмәҫтән, шул яҡҡа бәрендерә... Боролғансы, төлкө күпме ырғып алған була.

Ҡазанда байҙар Пугачевты ҡаршылай. Михельсон килеү менән, уға китәләр.

Ә Кремлдә бикләнеп ятҡандар сығып, Михельсонға ҡушылды.

Пугачев ғәскәрен теҙеп, уны Арса яланында ҡаршыланы. Туптар атып, мылтыҡтан шау-шыу ҡуптарып.

Михельсон быны көтмәгәйне, барып етеү менән туҙылырҙар тигәйне.

Пугачев ике колонна менән атака яһаны. Береһе — тура, икенсеһе тылға сығырға тейеш.

Туптары атып тора. Ҡазандан яһауҙы күп алғандарҙыр.

Михельсон тура атака яһап, уртаға ярыр ине. Шул кәрәк. Ә унан... юҡ, үҙе

[1] *Тазы — ау эте.*

теләгәнсә һөжүм яһарға мөмкинлек булманы. Михельсон ғәскәрен бер тирәлә уҡмаштырҙы. Унда — майор Харин. Хәле ауыр, Михельсон килеп етте, ярҙам итте.

Михельсон карабинерҙарын алға ебәргәйне, уның корпусын ҡыҫтылар.

Ул Чугуй казактарын алға ырғылдырҙы.

Төн етте. Ҡараңғы төштө.

Бер тарафта еңеү тойманы. Еңелдем йә еңдем тип тә әйтерлек түгел.

Михельсон тороп ҡала. Ул Кремлдән йыраҡайырға теләмәй.

Ә Пугачев төндә ҡыйралырға теләмәй. Ғәскәрҙең теге яғын тәртипкә килтерергә кәрәк. Байтаҡ кешеһе үлде, байтағы әсирлеккә төштө.

Пугачев ғәскәрен Ҡазан йылғаһы аръяғына алып сыҡты.

***

Иртә менән Михельсон Кремлгә, генералдар менән ҡушылырға ашыҡты. Пугачев көтөп тора. Нишләр? Был подполковник данлы, шайлы[1] офицер.

— Әҙер тороғоҙ, — ти.

Ҡаршы килһә — ҡаршы торор. Ә әле...

Михельсон ҡуҙғалыуы була — ябырыла. Ни бар?

— Әйҙәгеҙ, әйҙә! — Пугачев үҙе алда.

Кинйә лә, башҡалар ҙа полк башында. Ҡушылмаһындар әлегә.

Юҡ, Кремлдә беләләр. Хәбәр ителгән... Потемкин көтөп, күҙәтеп тора.

13/VII — иртән һуғыш. Казанканы сыға, Сухая река ауылына.

Пугачевты ике яҡтан ҡыҫалар. Һуғыш ҡыҙа.

Пугачев тағы Ҡазан йылғаһы аръяғына, Сухая рекаға сигенә.

Уның артынан төшмәнеләр.

14/VII. Пугачев тарҡалған көстәрен йыя. Бөтәһен Кинйә Арыҫланов ебәрә. Тирә-яҡ ауылдарҙан.

Исхаҡ Әхмәтов Алатор юлына баҫа. Ул үҙе ошо яҡтыҡы.

15/VII. Пугачев Ҡазанға тәүәккәл бара. Ни булһа ла була. “Һин ни өсөн анпиратор?” — тип уйлай.

Ҡазанға, Арса яланына, юл тота. Михельсон да бара. Хәҙер көсө күп уның.

Пугачев ғәскәрендә тәүҙә манифест уҡыйҙар. “Мәскәүгә барабыҙ!” — тиҙәр.

7 саҡрым ситтә Царицын ауылы яны. 5 сәғәтлек ауыр һуғыш. Нимә бар — һәнәккә, күҫәккә йәбештеләр.

Пугачев үҙе ат өҫтөндә. Ҡылыс болғай. Кинйә эргәһенә килеп китә. Овчинниковҡа һуғыла. Белобородов, Творогов сафтан сыҡҡан.

Ә Кинйә эләгә яҙҙы. Ғүмере ҡыл өҫтөндә. Яуҙа — ни саҡлы буталыш. Ҡылыс менән өҙөшә-өҙөшә, Кинйә — Алпарҙы, Алпар Кинйәне юғалтты. Аттары ла берен-бере юғалттылар. Ә улар быға күнмәгән.

Тумаҡ бер яҡта күк күкрәгәндәй айғылдап кешнәне. Кинйәнең Аҡъялы ла кешнәне. Тас әкиәт аты кеүек. Һул ҡолағымдан ин, уң ҡолағымдан сыҡ, тигәндәй, уң яҡҡа тайпылды, имеш.

Кешнәп, аттар араһынан йомолоп, шул яҡҡа әллә ырғыны, әллә осто. Кинйә менән Алпар оҙаҡламай бергә ине. Үҙ тирәләренә бер аҙ яугир туплап, батша янына елдерҙеләр. Унан бергәләп ситкә...

Еңеләләр...

Ғәскәр Ҡазандан ситкә китә. Волга буйлап үргә. Баралар, тағы һуғыш. 2000 фетнәсе үлә. Күбеһе татарҙар, башҡорттар бит әле.

Әсиргә — меңәр, меңәр. Туптар, байраҡтар быраҡтырыла.

Яугирҙар армияһы ҡыйралды, армия таралды. Иҫән ҡалған башҡорттар китә.

[1] *Шайлы — бик шәп, яҡшы.*

Улар атлы. Улар йылғыр. Әсиргә күп төшмәнеләр. Улар сигенде.

Һуңғы һуғышта Ҡарғалы атамандары Муса Алиев, Мәхмүтов әсир була.

Поручик Минеев та эләгә. Белобородовты полкы менән аръергардта ҡалдырғайны. Михельсонды тотҡарларға. Ныҡ һуғышты, полкы бөтөнләй ҡыйралды. Тора-бара отряд ҡыйралды, таралды. Белобородов юғалды.

Пугачев уныһын белмәй. Быны белеүсе юҡ. Ә Белобородов бер нисә көн ҡасып йөрөнө. Ҡайҙа ла застава. Ҡазанға килә. Бүтән исем менән үткәреп ебәрерҙәр әле. Ах, берәү таныны.

Был тиклемен үк ҡайҙан белһен Пугачев.

— Ә Матвеев ҡайҙа? — тине ул.

— Обозда ине, һуғышып үлде.

Аңланы. Пугачевтың ғаиләһен яҡлаған. Белгән ул унықы икәнен. Потемкин кешеләре килеп, Матвеевты үлтерҙе.

Пугачев бында ике мең кеше юғалтты. 500 кешеһе генә ҡалды.

Пугачев, еңелгәс, Волга буйлап үргә 100 саҡрым хәрәкәт итте. Нерадово, Сундыр ауылдары янында кисеү.

***

Екатерина ярандарын бүләкләй. Михельсонға — полковник чины, 600 йән крәҫтиән. Башҡаларға ла эләгер. Павел Потемкинға әллә ниҙәр булыр, ул — Григорийҙың туғаны, ә Григорий — фавориты.

Шулай ҙа Екатерина шөрләне. Бына Ҡазанды алдылар. Бәлки, Пугачев берегә килер, тағы ғәскәр йыйыр; Мәскәүен дә алыр, унан тағы... Алла һаҡлаһын!

9

16—17/VII. Ҡазандан алыҫҡа, Волга үренә... Кокшай юлынан. Тиҙ, тиҙ. Арттан Михельсон баҫтыра.

Етеп киләләр ине. Урман эсләп барҙылар. “Алда йыйылырбыҙ”, — тип. Шунда ял итеп тә алдылар.

Кинйәнең Аҡъялы менән Алпарҙың Тумағы тағы йәнәшә, тағы алға йомола.

Алға, алға... Алда ла, артта ла бағауыл, һағауыл төркөмдәре. Ләкин бик һаҡ, һәр ваҡыт әҙер 300 кешеһе.

Яйыҡ казактары, Илек казактары. Аҙмы-күпме башҡорт, татар бар.

Туҡтап тороу юҡ. Мариҙар алмаш ат бирә. Кинйә менән Алпарҙың аттары алмашһыҙ. Уларға ни бары ял эләгә. Етәктәгеһенә ултыралар.

16/VII. Пугачевсылар Кокшайск ҡалаһына килеп инә. Икмәк-тоҙ. Русы урыҫса, марийы мариса, сыуашы сыуашса сәләмләй.

— Патка...

Сундыр. Нерядово ауылы янында лагерь ҡоралар.

17/VII. Кәмәләр, һалдар табыла. Сундырҙан 3 саҡрым түбәндә. Казактар аптырап тормай.

Сыбыҡ-сабыҡтан һал бәйләп, үҙҙәре шуға ултыра, былай атҡа еңел була. Эйәр өҫтөнә нәмәләрен, ҡоралдарын бәйләйҙәр.

Казак һалды атҡа таға, үҙе ат ялына тотона. Кәрәкһә, һалды этеп бара.

Башҡорттарҙың турһыҡтары бар. Ике яҡтан эйәргә һалалар, тын тултырып алалар. Улары булмаһа, казактарса ҡыланалар.

Пугачевҡа ярҙам кәрәкте. Кинйә, Алпар быны яҡшы аңлай.

*(Дауамы бар.)*

## НАСАР ҒӘҘӘТ – ТӨҪ ТҮГЕЛ

*“Беҙ хәҙер 90-сы йылдарға ҡарағанда ла күберәк эсәбеҙ”, – тине РФ Президенты Д. Медведев 30 июндә Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министры Т. Голикова менән осрашыуында. Президент, ҡайһы берәүҙәр кеүек, эскелектең арта барыуын тормоштоң насарайыуы менән бәйләмәй, сөнки бынан 10 – 15 йыл элек көнкүреш тағы ла ауырыраҡ ине. Эскелекте кәметеү өсөн Кремль башлығы Министрлыҡҡа махсус программа әҙерләү бурысын йөкмәтте. Йыл аҙағына был документ Рәсәй парламенты ҡарауына сығарылырға тейеш.*

Йәмғиәтте социаль упҡынға этәргән был ытырғаныслы, зарарлы күренешкә ҡаршы көрәште көсәйтеү хаҡында әйтелгәндән бирле, элекке ЛТП-ларҙы — ...

Йәмғиәтте социаль упҡынға этәргән был ытырғаныслы, зарарлы күренешкә сик ҡуйыу буйынса имеш-мимештәр былтыр Дәүләт Думаһы коридорҙарында ла ишетелә биреп ҡуйғайны. Йәнәһе, депутаттарҙан бер төркөм элекке Советтар Союзында эшләп килгән дауалау-хеҙмәт профилакторийҙарын тергеҙеү буйынса тәҡдимдәр әҙерләй. Әммә был йәһәттән ниндәйҙер ҡуҙғалыш һиҙелмәне, күрәһең, ҡайһы яҡтандыр ҡаршы тороусылар көслөрәк булып сыҡты. Эскелек йән өшөткөс сүрәттәргә инеп, бөгөн ҡорбандарҙы үҫмерҙәр араһынан да таба башланы.

“Известия” гәзитенең быйылғы июль аҙаҡтарында сыҡҡан һанында Бөтә Рәсәй Йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү институты мәғлүмәттәренә таянып хәбәр ителеүенсә, илдә һәр дүртенсе кеше генә айыҡ йәшәүгә өҫтөнлөк бирә. Һуңғы 13 йылда Рәсәйҙә эскеселәр бик аҙ кәмегән. Бәләкәй ҡалаларҙа, йәштәр араһында эскелек нығыраҡ тарала, сөнки баҙар иҡтисады бәләкәй ҡалаларҙа эшһеҙлек проблемаһын көсәйтеп, унда йәшәү шарттары ҡырҡа насарайҙы. Д. Медведевтың ғәҙел билдәләүенсә, фәҡирлек эскелектең киңерәк таралыуына булышлыҡ итә лә инде. Йәштәр менән хәл ҡатмарлыраҡ, улар әле эскелектең ниндәй фажиғәгә килтереү ихтималлығын аңлап еткермәй. Иртә менән Өфөнөң дөйөм транспорт туҡталыштарында һыра шешәһе имеп йөрөүселәрҙе күп осратырға мөмкин: улар – кистән ныҡлы “ҡырын тейәп” баш төҙәтеүселәр. Бер нисә йылдан хроник алкоголиктар сафын тулыландырасаҡтар. Бындай йәштәр – йәмғиәт өсөн юғалтылған быуын.

Эскелектең Рәсәйҙә борон-борондан ныҡлы тамырланыуын күптәр билдәләй. Бынан мең йылдар элек славяндар араһында булып киткән ғәрәп сәйәхәтселәре лә ошо хаҡта яҙып ҡалдырған. Ә күршеңдең насар ғәҙәте бар икән, уның бер заман һиңә лә йоғоуы ихтимал. Хәҙерге ысынбарлыҡ тап шуны күрһәтә. Уҙған йәйҙә миңә Башҡортостан ауылдарының береһендә туйҙа ҡатнашырға тура килгәйне. Унда араҡы тултырылған шешәләрҙең күҙ эйәрмәҫ тиҙлек менән бушатылыуына, бер-бер артлы өҫтәлгә яңылары менеп ҡунаҡлауына айыҡ кеше

хайран ҡалмаслыҡ түгел ине. Ҡунаҡтар шаҡтай иҫереүгә ҡарамаҫтан, ниндәйҙер ныҡышмалылыҡ менән эсеүен дауам итә, әйтерһең дә, кем күберәк эсә ала, тигән ярыш бара! Һуңынан 50-ләп кешенең көн дауамында ике йәшник араҡы һәм шул сама көмөшкәне "төпләүе" асыҡланды. Ғәжәп хәл! Үҙҙәре лә уйламаҫтан, ололар яңы нигеҙ ҡорған йәштәргә нисек донъя көтөргә һабаҡ бирҙе!

Эскелектең тамырҙары үтә тәрәнгә китеүен бәхәсләшмәслек дәлилләгән бер күренеш – байрам, ҡунаҡ, туй, тыуған көн һ.б. Уларҙың береһендә лә өҫтәл йылтырап торған шешәләрһеҙ булмай. 60-сы йылдарҙа ата-бабаларыбыҙ әсе бал менән генә хушланһа, бөгөнгө быуын күпкә ҡеүәтлерәк араҡы, көмөшкә эсә. Тимәк, ныҒыраҡ ағыулана. Был – традиция, уны боҙорға бер кемдең дә батырсылығы етмәй, сөнки эскән кешелә ихтыяр самалы, ә әҙәп-әхлаҡ тураһында улар уйлап та ҡарамай. Ошо яман традициялар ҡолона әүерелеп, күптәр эскелек һаҙлығына бата, ғүмерен аяныслы ослай. Өҫтәл артында ҡунағын иҫергәнсе эсергә ҡыҫтаған берәү ҙә үҙенең ошо тәртибе менән кешене һәләкәтле юлға – алкоголизм сиренә этәреүе тураһында башына ла килтермәй. Кеше хоҡуғын тупаҫ боҙоуҙың ошонан да яман, насарын уйлап табыу мөмкинме?

Саф алкоголь үрҙә әйтелгән 18 литр менән генә сикләнмәй, сөнки быға ҡала-ауылдарҙа мунса, кухняларҙа ҡыуылған көмөшкә инмәгән. Уны иҫәпкә индереү ҙә мөмкин түгел. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, көмөшкә ҡыуыу баҙар иҡтисадының тағы ла бер сифатына әүерелде. Көмөшкә сығарып ауылдаштарын ағыулаусылар хәҙер һәр ҡайҙа бар, уларҙы һәр кем белә. Ғәжәпкә ҡаршы, был күренешкә властар ҙа килешеп ҡарай.

Әлбиттә, әхлаҡ нормалары ихтирам ителгән, граждандар институты әүҙемлек күрһәткән дәүләттә эскелектең ҡотороуына битараф, тыныс күңел менән ҡарау властарға хас сифат түгел. Ҡыҙғаныска ҡаршы, Рәсәйҙең тәүге президенты, үҙе эсергә яратҡас, был хаҡта һүҙ ҡуҙғатырға ла теләмәне. Ә икенсеһе өсөн эскелек проблемаһы, гүйә, бөтөнләй юҡ ине. Тап ошо ике тиҫтә йылда эскелек иң хәүефле социаль күренешкә әүерелде лә инде. Өсөнсө президентта, бәхеткә күрә, айыҡ аҡыл, граждандлыҡ бурысы көслөрәк булып сыҡты. Уның йәмғиәтте тағы ла бер социаль сирҙән арындырырға тырышыуы – күҙ алдында. Кремль етәксеһе тәүге аҙымды коррупцияға ҡаршы эшмәкәрлекте көсәйтеү буйынса яһағайны. Ул да үҙенең йәмғиәткә кире йоғонтоһо буйынса эскелектән бер ҙә ҡалышмай.

Был – Рәсәйҙә эскелеккә ҡаршы күрелгән саралар҃ҙың сираттағыһы. Һуңғыһымы – билдәһеҙ. "Комсомольская правда" гәзите хәбәр итеүенсә, тәүгеһе XV быуат урталарында күҙәтелә: 1448 йылда Иван III спирт етешереү һәм һатыуҙы тулыһынса дәүләт ҡулына алыу тураһында указ сығара. Теүәл ике быуаттан һуң батша Алексей Михайлович был монополияны көсәйтеү буйынса бер нисә сара күрә, 1716 йылда Петр I эскеселәр өсөн ҡатыраҡ яза тәғәйенләргә ҡуша һ.б. 1881 йылда батша хөкүмәте элекке "кабак" урынына ҡолаҡҡа ятышлыраҡ "трактир" төшөнсәһен индерә, эскән урында ҡапҡыларға булырға тейешлеген законлаштыра, араҡыны шешәләргә ҡойоп һатыуҙы индерә. XX быуат башында эскелеккә ҡаршы саралар хөкүмәттең спиртлы эсемлектәргә дәүләт монополияһын көсәйтеү буйынса өҫтәмә аҙымдары менән генә сикләнмәй, бер нисә губернияла "ҡоро закон" да индерелә. 1914 йылда был закон бөтә Рәсәй империяһына таратылып, уны Совет хөкүмәте лә күтәреп ала һәм 1925 йылға тиклем дауам иттерә.

1985 йылда иғлан ителгән "ҡоро закон"дың ыңғай һәм кире эҙемтәләре

йәмғиәт тарафынан әле лә онотолмаған. Ҡайһы бер даирәләрҙә уның тураһында тик кире ҡараштар йәшәүгә ҡарамаҫтан, был закон йәмғиәтте айыҡтырыуҙа һиҙелерлек роль уйнауын тулыһынса инҡар итергә ярамай. Ул йылдарҙа тап эскелек ҡырҡа кәмеү менән бергә үлеү, имгәнеү һирәгәйҙе, ғаиләләрҙә лә ниндәйҙер дәрәжәлә именлек урынлашты. 80-се йылдарҙағы алкоголгә ҡаршы кампания, Т. Голикова һүҙҙәре менән әйткәндә, 1 миллион кешенең ғүмерен һаҡлап ҡалырға булышлыҡ иткән.

12 августа Д. Медведев эскелеккә ҡаршы саралар мәсьәләһенә әйләнеп ҡайтып, Сочи ҡалаһында министрҙар һәм төбәк башлыҡтары менән фекер алышыуға сығарҙы. Илдә эскелек милли һәләкәт кимәленә етте, йән башына иҫәпләгәндә, йылына 18 литр алкоголь эселә. Уның кире эҙемтәләре, аҡса менән иҫәпләгәндә, йөҙҙәрсә миллиард һумға барып баҫа. Быйыл ғинуар – майҙа ғына иҫерек водителдәр арҡаһында 5 мең юл-транспорт фажиғәһендә 8 мең кеше һәләк булған. Тап эскелек арҡаһында янғындар сыға, ғаиләләр тарҡала, балалар ҡараусыһыҙ ҡала. Белгестәр иҫәпләүенсә, көнкүрештә ғәрипләнеүҙең 80 процентында ла эскелек ғәйепле. Был социаль сирҙең артабан артыуы шәхес булараҡ тарҡалыуға килтереүе ихтимал, тип белдерҙе Президент. Дөрөҫ, бер кешегә эселгән саф алкоголь буйынса мәғлүмәттәр төрлө сығанаҡтарҙа төрлөсә: 13 литрҙан 18-гә тиклем күрһәтелә. Ә бына Бөтә Донъя Һаулыҡ һаҡлау ойошмаһының мәғлүмәттәренә ярашлы, йән башына 8 литрҙан күберәк алкоголь эселә икән, йәмғиәттә төҙәтә алмаҫлыҡ күренештәр барлыҡҡа килә. Һигеҙ литрҙан артҡан һәр литр ирҙәр ғүмерен 11, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡын дүрт айға кәметә.

Сочиҙағы осрашыуҙа Медведев төп йүнәлештәрҙе түбәндәгесә билдәләне: йәштәр араһында эсеүҙе ҡырҡа кәметергә, ваҡлап һатыу селтәрендә ҡаты тәртип булдырып, бәлиғ булмағандарға спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйырға, һыра сауҙаһы өсөн дә ҡеүәтле эсемлектәргә ҡарата ҡаралған яуаплылыҡ булдырырға. Йәштәр, үҫмерҙәр араһында эскелектең таралыуына юл ҡуймау киләсәктә был сирҙең социаль базаһын ҡырҡа сикләүгә һәм йәмғиәттең аҡрынлап эскелек һаҙлығынан сығыуына булышлыҡ итәсәк.

Эскелеккә ҡаршы сираттағы көрәш иғлан ителеү менән үҙәк матбуғатта бер нисә материал баҫылып сыҡты. Тәүге һәм төп фекер – эскелектең киң таралыуына юл ҡуймау өсөн системалы һәм оҙайлы көрәшеү талап ителә. Был өлкәлә ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшкән сит илдәр, мәҫәлән, Норвегия һәм Финляндия тәжрибәһе тап ошо хаҡта һөйләй. Үткән быуаттағы Рәсәй миҫалында ла ошоно күрергә мөмкин. Мәҫәлән, хөкүмәт күргән саралар һөҙөмтәһендә 1914 –1917 йылдарҙа йән башына спиртлы эсемлектәр эсеү 3-4 литрға тиклем кәмеп, ул саҡта Рәсәй Европала иң аҙ эскән илдәр араһына ингән.

Әлбиттә, властар эскелеккә ҡаршы көрәште 80-се йылдарҙағы ише магазин кәштәләренән спиртлы эсемлектәрҙе һепереп алыу юлы менән дауам итмәҫ, тип ышанғы килә. Сөнки уның нимәгә килтерәсәге билдәле: көмөшкә ҡыуыу, төрлө алкоголь ҡатнашмалары менән ағыуланыу ҡырҡа артасаҡ. Белгестәр күҙаллауынса, яҡындағы 10 –15 йылда Рәсәйҙең оло быуыны спиртлы эсемлектәрҙән баш тартырға йыйынмай. Д. Медведев фекеренсә, эсеүҙе ташлау – һәр кемдең үҙ ихтыярында һәм рәсми даирәләрҙең был тәңгәлдә тейешле саралар күреүе талап ителә. Әлбиттә, тыйыу менән генә көткән һөҙөмтәләргә өлгәшеп булмаясаҡ. Ҡайһы бер социологтар тәҡдим иткәнсә, айыҡ йәшәүгә өҫтөнлөк биргән кешеләрҙе матди дәртләндереү сараларын да ҡулланырға кәрәк. Т. Голикованың һүҙҙәренә ҡарағанда, быйыл федераль ҡаҙнала сәләмәт тормошто пропагандалау өсөн айырым сығымдар билдәләнгән. 850 миллион һум тәмәке

тартыу һәм эскелекте кәметеү сараларына йүнәлтеләсәк. Быйыл ошо маҡсаттарҙа илдә 500 һаулыҡ үҙәге асыу күҙ уңында тотола. Улар насар ғәҙәттәрҙән баш тартырға теләмәгәндәрҙе һауыҡтырыу менән шөғөлләнәсәк (дауалау-хеҙмәт профилакторийҙарының икенсе төрлө сағылышы түгелме икән?). Алдағы ике йылда ла федераль ҡаҙна ошо маҡсаттарҙа 820 миллион һәм 850 миллион һум бүлмәксе.

Эскелеккә ҡаршы дәүләт тарафынан тәү сиратта күрелергә тейешле сара – спиртлы эсемлектәргә дәүләт монополияһы урынлаштырыу. Урыҫтар әйтмешләй, “иҫерек” статья шул иҫәптән эскелек арҡаһында ауырыуға һабышҡандар йәки ғәриплләнгән кешеләрҙе лә дауаларға бер ярҙам булыр ине. Юғиһә бөгөн дәүләт ҡарамағындағы “Росспиртпром” спирт етештереүҙең 40, араҡының 16 процентын ғына үҙ ҡулында тота. Ә бына акциздарҙан ингән һалым ҡаҙнала ни бары 1 процент тәшкил итә. Былтыр дәүләт ҡаҙнаһына спирт һатыуҙан дәүләт 13 миллиард һум инергә тейеш булып та, яртыһы ғына алынған. “Һул” тауарҙы төнгө сменала хатта дәүләт предприятиелары ла ҡыуа, тигән хәбәр бар. Ғәжәп хәл: спиртлы эсемлектәр һатыуҙа астрономик байлыҡ туплаған “эшҡыуарҙар” үҙ ватандаштарын ағыулауҙа “ең һыҙғанып” ҡатнашыуға ҡарамаҫтан, ҡаҙнаның килем өлөшөн тулыландырыуҙан ситтә ҡала. Ә бит алкоголиктарҙы, эскеселәрҙе дауалау һалым түләүсенән йыйылған ҡаҙнанан финансланған дауаханаларға төшә. Тағы ла бер парадокс: спиртлы эсемлектәргә дәүләт монополияһы индерелеүгә ышанмаусылар ҙа бар.

Тәкәббер ҡиәфәттә тәмәке тоҡандырып торған ҡатын-ҡыҙҙы хәҙер Өфөнөң һәр сауҙа нөктәһендә, сит ил машинаһы руле артында, ресторан-кафе ишектәре алдында һ.б. осратырға мөмкин. Сигарет быҫҡытып тротуарҙан эре ҡиәфәттә атлаған ҡатын-ҡыҙ ҙа хәҙер бер кемде лә шаҡ ҡатырмай. Мәктәп ишек алдынан бер аҙ ситкәрәк китеп һаҫыҡ төтөн һурған балалар, күп ҡатлы өйҙәрҙең мөйөшөнә һыйынған ябыҡ ҡына үҫмерҙәр – былар бөтәһе лә һуңғы йылдарҙа баҙар иҡтисады, кеше хоҡуҡтарының яңыса һынланышына эйәреп килеп ингән ғәҙәттәр. Баш ҡала өсөн былар ябай, ҡәҙимге күренешкә әүерелеп килә.

Сәйәси тел менән әйткәндә, яңы Рәсәйҙе һынландырған әхлаҡһыҙлыҡ күренештәренең бер нисәһе. Йәмғиәттә ныҡлы урын алған тәмәке тартыу-тартмау – һәр кемдең шәхси эше, тигән ҡараш сәләмәт тормошто өҫтөн күргәндәр мәнфәғәтен күҙәтмәй. Ләкин төптәнерәк уйлап ҡарағанда, хәҙерге йәмәғәтселек был киҫкен социаль мәсьәләгә ошондай битараф ҡарашы менән хаталанмаймы икән? Тәмәке тартыусы үҙенән бигерәк тирә-яҡ мөхитте ағыулай, тимәк, башҡалар һаулығына зыян килтерә. Тар, ҡыҫынҡы ғына бүлмәлә яңы ғына тәмәке тартып ингән кеше янында булған, тәмәкеселәр менән даими аралашҡандар улар һулаған һауаның ниндәй дәрәжәлә түҙеп торғоһоҙ икәнлеген яҡшы беләләр. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, йәмғиәт ошо граждандарҙың хоҡуҡтарын яҡлау тураһында – ләм-мим! Август аҙаҡтарында “Комсомольская правда” гәзите Өфөлә быйыл беренсе класҡа төшкән уҡыусыларҙың 15 процентының ғына сәләмәт булыуы хаҡында яҙып сыҡты. Төрлө ауырыуҙар араһында тәүге урынды тын юлдары менән ашҡаҙан-эсәк сирҙәре биләй. Һығымтаны үҙегеҙ яһағыҙ.

Статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, донъяла йәшәгән халыҡтарҙың 28 проценты тәмәке менән мауыға. Беҙҙең илдә иһә ундайҙар күберәк: ирҙәрҙең 60, ҡатын-ҡыҙҙың 25 проценты. 25 июлдә “Рәсәй – тәмәкегә ҡаршы” айлығы иғлан ителеү менән Башҡортостан телевидениеһының яңылыҡтар программаһына саҡырылған баш ҡаланың 49-сы поликлиника табибәһе Р. Буранбаева

килтергән мәғлүмәттәр буйынса, тәмәке тартыу арҡаһында донъяла 6 секунд һайын бер, йылына 5 миллион кеше яҡты донъя менән хушлаша. Үпкә яман шешенең 90 проценты, хроник бронхиттың 75-е туранан-тура тәмәкегә бәйле. Илдә бөгөн һәр икенсе үҫмер матур ҡағыҙҙарға төрөлгән сигареттар менән үҙен-үҙе ағыулағанда был һандарҙың яҡын киләсәктә артасағы шик тыуҙырмай.

– Мин уҡыусы балаларҙан "Ни өсөн тартаһығыҙ?" тип һорағаным бар, – ти Буранбаева. – Улар, хәҙер тәмәке тартыу модала бит, тип яуаплай.

Әхлаҡһыҙлыҡ – быны башҡаса атау мөмкин түгел – мода ысынбарлығына күтәрелгән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әле үҙ аллы тормош юлына баҫып та өлгөрмәгән, ата-әсәһенән алынған аҡсаға көйрәткән йән эйәләре тәмәке тартыуҙың аҡрынлап һаулыҡтарын ҡаҡшатасағына, насар кәйеф тыуҙырасағына, ауыҙынан яман еҫ аңҡытып йөрөйәсәгенә ышанып етмәй, иң мөһиме, күҙ алдына ла килтермәй. Был аңһыҙлыҡ – ысынлап та әҙәм балаһының иң ҙур етешһеҙлектәренең береһе. Тәмәке тоҡандырыр алдынан берәү ҙә үҙенең ҡасан да булһа ошо яман ғәҙәттән ҡотолорға теләге барлыҡҡа киләсәген, әммә быны өсөн ихтыяр көсө етмәйәсәген уйламай. Ысынлап та, үҙ ихтыярың менән тәмәке ҡолона әүерелеү өсөн бер ниндәй ҙә тырышлыҡ кәрәкмәй, ә бына унан арынырға күптәрҙең көсөнән килмәй, һәм улар ғүмеренең ахырына тиклем һаҫыҡ төтөн менән ағыуланырға мәжбүр.

Йәмғиәтте әхлаҡһыҙлыҡ баҫа. Телевидение экрандарында теге йәки был персонаждың ниндәйҙер бер ҡәнәғәтләнеү менән сигарет һөйрәп сығарыуы, зажигалка менән тоҡандырып, ләззәтләнеп һурыуы, ысынлап та, көнөнә бик күп ҡабатлана. АҠШ боевиктарында ла бит ғәйрәтле геройҙарҙың ауыҙында йыуан сигара, ҡулдарында виски һалынған шешә. Алама ғәҙәт йоғошло тигәндәй, ололарға оҡшарға тырышҡан үҫмерҙәр өсөн был – "яҡшы" һабаҡ. Шулай булмаһа, улар, тәмәке тартыу модала, тимәҫ ине.

Илебеҙҙә был яман ғәҙәтте нисек тә булһа сикләү өсөн бер ниндәй ҙә сара күрелмәйме ни, тигән һорау, әлбиттә, тәбиғи. Закон сығарыу йәһәтенән күрелде. Мәҫәлән, 2001 йылдың 10 июлендә РФ Дәүләт Думаһы тарафынан ҡабул ителгән "Тәмәке тартыуҙы сикләү тураһында" федераль закон бар. Унда тәмәке етештереүселәр, һатыусылар һәм тартыусылар өсөн ниндәйҙер дәрәжәлә яуаплылыҡ саралары билдәләнгән. Мәҫәлән, законға ярашлы, сигарет ҡабында ыҫмала, никотиндың күпме икәнлеге һәм тәмәке тартыуҙың зыяны тураһында мәғлүмәт мотлаҡ булырға тейешле. Законда шулай уҡ 18 йәшкә тиклемгеләргә тәмәке һатҡан өсөн административ яуаплылыҡ тураһында ла әйтелгән. Эш урынында, транспортта, ябыҡ спорт залдарында, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, мәҙәниәт учреждениеларында, дәүләт власы органдарында тәмәке тартыу тыйыла. 7-се статья буйынса һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, мәҙәниәт, башҡарма власть органдары вәкилдәре тәмәкенең зарары тураһында ваҡытлы матбуғат аша халыҡты даими иҫкәртеп торорға бурыслы. Телевизион фильм, спектаклдәрҙә, әгәр ҙә был сценарий буйынса ҡаралмаһа, геройҙарҙың тәмәке тартыуына юл ҡуйылмай.

Һанап кителгән талаптар үтәләме һуң? Бәлки, ҡайһы берҙәре үтәләлер ҙә, әммә барыһы ла түгел. Мәҫәлән, пассажирҙар ташыған транспортта водителдәрҙең тәмәке тартыуын һәр кем белә, ләкин береһе лә өндәшмәй. Әллә һаулыҡ һаҡлау учреждениеларында тәмәке тартмайҙармы? Былтыр булһа кәрәк, Рәсәй телевидениеһының I каналында эшләгән күренекле журналист В. Познер АҠШ-та етештерелгән сигарет ҡабын күрһәткәйне. Унда инглиз телендә "тәмәке тартыу үлтерә" тигән яҙыу тәмәке ҡабының яртыһын биләп тора. Ә Рәсәй тәмәке етештереүселәре иһә был яҙыуҙы күҙгә салынып

бармаҫлыҡ итеп урынлаштыра. Йә булмаһа телефильмдарҙа тәмәке тартыусылар юҡҡа сыҡтымы? Юҡ, киреһенсә, арта бара. Ә бит тәмәке тартыуҙы сикләү тураһындағы закон ғәмәлгә ингәндән һуң, прокатҡа сыҡҡан фильмдарҙа тәмәке тартмаған геройҙарҙы, шулай уҡ йәш кенә ҡатын-ҡыҙ араһында ла, табыуы ҡыйын. Был – асыҡтан-асыҡ тәмәке рекламаһы, һәм ул тәмәке индустрияһы вәкилдәре мәнфәғәтен ҡайғырта. Әгәр ҙә тәмәкеселәр арабыҙҙа ошондай тиҙлектә арта барһа, киләсәктә илдә һау кешеләр ҡалырмы? Беҙ, тартмаусылар, ниндәй һауа һуларбыҙ? Ә бит экологик хәлдең көсөргәнешләнеүенә һуңғы йылдарҙа ниндәйҙер изге булмаған ниәт менән алып барылған “автомобилләштереү” процесы ла үҙенең үлсәп бөтөрә алмаҫлыҡ өлөшөн индерә. XXI быуат цивилизацияһы ниндәй һауа менән хушланыр, сәләмәтлеге менән маҡтана алырмы – был һорауҙар хәл иткес дәрәжәлә ул цивилизацияның сифатын билдәләйәсәге менән әһәмиәтле. Үкенескә ҡаршы, был турала йәмәғәтселек тә, дәүләт органдары ла уйланмай. Күрәһең, ниндәйҙер ҡот осҡос ваҡиғаның мәжбүр итеүен көтәләр.

Закон тәмәке тартыуҙы тыймай, тип ҡаршы төшөүселәр ҙә табылыр. Дөрөҫ, тыймай, бәлки, закон сығарыусылар – ә улар араһында тәмәкеселәр ҙә аҙ түгел – теләмәйҙер. Кемдәрелер тәмәке етештереүселәр мәнфәғәтен күҙәтәлер. Шулай уҡ тәмәке тартыуҙы әхлаҡһыҙлыҡ менән тиңләүҙе өнәп еткермәүселәр ҙә булыр. Был йәһәттән бәхәскә урын бар. Мәҫәлән, мосолмандар өсөн изге һаналған Ҡөрьән насар ғәҙәттәрҙе, шул иҫәптән тәмәке тартыуҙы ла тыя. Ә бит мосолман дине бынан мең йылдар элек кешелек цивилизацияһы закон сығарыу кимәленә күтәрелеп етмәгән дәүерҙә үк барлыҡҡа килгән. Ислам диненең башҡаларға ҡарағанда әхлаҡ нормаларына иғтибарлыраҡ булыуы менән айырылып тороуын белгестәр инҡар итмәй. Шуныһы ла билдәле: донъя диндәре тарафынан борон-борондан тыйылған ғәҙәттәр артабан закон төҫө алған. Тимәк, был йәһәттән дин – беренсел, ә закон – икенсел. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, кемдәрҙеңдер әҙәпһеҙ тырышлығы менән православие (ул эсеүҙе тыймай) дәүләт дине дәрәжәһенә күтәрелә, башҡа диндәрҙе баҫа барған илебеҙҙә насар ғәҙәттәргә ҡаршы тороу буйынса саралар етерлек дәрәжәлә күрелмәй.

Баҙар иҡтисады тамырланған, демократия тураһында күп һөйләгән йылдарҙа әхлаҡһыҙлыҡ күренештәре тағы ла күбәйә төштө. Кеше үлтереүселәр, фәхишәләр телевизион сериалдар геройҙарына әүерелде. Бындай тотанаҡһыҙлыҡ үҫмерҙәр, йәштәр психикаһына емергес йоғонто яһай. Улар араһында енәйәтселек бығаса күрелмәгән кимәлгә етеп, уға нисек тә сик ҡуйыу өсөн юғары даирәләге мәхкәмә (суд) эшмәкәрҙәре балалар эштәрен ҡарау буйынса махсус мәхкәмәләр (ул ювеналь юстиция тип атала) ойоштороу хаҡында әүҙем һүҙ ҡуҙғата башланы. Был, билдәле, ҡаҙна сығымдарының артыуына килтерәсәк. Хикмәт, бәлки, сығымдарҙа ла түгелдер, ләкин бәлиғ булмағандар араһында енәйәтселекте ҡырҡа кәметеү буйынса саралар күрелмәһә, юстицияның яңы тармағы бер ни ҙә ҡыра алмаясаҡ.

Урамда тәненең йомро ерҙәрен арлы-бирле ҡаплап йөрөгәндәр хәҙер йәш ҡыҙҙар араһында ғына түгел, хатта олораҡтар араһында ла осрай. Быны дини ҡанундарҙы (исламды ғына түгел, православиены ла) тупаҫ боҙоу тип ҡабул итергә кәрәк. Йәштәрҙе аңларға мөмкин, бәлки, ҡайһылары, шулай егет ҡаратып була, тип өмөтләнә торғандыр. Ә ололар бының менән нимәгә ынтыла икән? Эйе, хәҙер фәхишәлек өсөн элекке кеүек енәйәт яуаплылығы ҡаралмаған. Баҙар иҡтисады өсөн ул, моғайын, табыш, тимәк, йәшәү сығанағылыр. Тән сауҙаһы менән “ирекле” көн итеүселәр өсөн закон күп тигәндә штраф менән сикләнә. Ә бына фәхишәлеккә мәжбүр итеүселәр, йәғни сутенерҙар өсөн РФ

Енәйәт кодексының 240-сы, 241-се статьялары буйынса йөҙҙәрсә мең һум штрафтан 10 йылға тиклем иректән мәхрүм итеү ҡарала. Ләкин “әүҙем” генә эшләгән был баҙар геройҙарына ҡарата ҡуҙғатылған енәйәт эштәре, улар буйынса сығарылған мәхкәмә ҡарарҙары тураһында хәбәрҙәр йәмәғәтселеккә еткереләме һуң? Шунһыҙ был әхлаҡһыҙлыҡҡа нисек йоғонтоло ҡаршы тормаҡ кәрәк. Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, был проблемаға ҡарата Рәсәй закон сығарыусыһы ла, башҡарма власть органдары ла йоғонтоло ҡарашын булдыра алмай. Енси аҙғынлыҡ мәсьәләһе социаль проблеманан бигерәк сәйәси ҡараштар ҡорбаны булып ҡалыуын дауам итә. Уға мөнәсәбәт элекке СССР-ҙағы кеүек “беҙҙә секс юҡ” тигәндән бер яғы менән дә айырылмай кеүек. Ә бит донъя илдәрендә фәхишәлек проблемаһы күптән хәл ителгән. Уны үҙ күҙәтеүе аҫтына алып, дәүләттәр әхлаҡһыҙлыҡ мәсьәләһен дә, йоғошло ауырыуҙар таралыуын иҫкәртеү йәһәтенән дә уңышлы эш итә. Шул уҡ ваҡытта тармаҡтан һалымды ла ҡайырып ала.

Енәйәтселек – 90-сы йылдарҙан һуңғы Рәсәйҙең визит карточкаһына тиңләшерлек социаль күренеш. “Яңы курс” иғлан ителеү менән бәйҙән ысҡынған был социаль күренеште ауыҙлыҡлау өсөн түгелгән ҡаҙна сығымдары хаҡында, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәмәғәтселек бер ни ҙә белмәй. Хәйер, белеп тә ни файҙа? Енәйәтселек ошо мөхиттә ярала бит. БР Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, былтыр республикала 78 меңгә яҡын енәйәт теркәлгән. Дөрөҫ, 2006 йыл менән сағыштырғанда, енәйәт ҡылыу күренештәре бер ни тиклем һирәгәйгән. Ҡәҙимгесә, енәйәтселек статистикаһында беренсе урынды уғрылыҡ биләй. Былтыр шундай 31 меңдән ашыу осраҡ теркәлгән. Белгестәр фекеренсә, кеше мөлкәтенә ҡул һуҙыу иң элек халыҡтың тормош кимәле менән бәйле. Һуңғы өс йылда уғрылыҡ бер аҙ кәмеһә лә, һынылыш һиҙелмәй. Кеше милкен талау (3677 осраҡ) был фекерҙе тағы ла нығыта төшә. Енәйәтселек статистикаһында айырым урын биләгән иҡтисади енәйәт тә артыу өҫтөндә. Уны яңы заман сағылышы тип тә атарға мөмкин, сөнки хәҙер байлыҡтың баһаһы бермә-бер артты. 2003 йылда ошондай 8429 осраҡ теркәлһә, былтыр ул 10830-ға еткән. Йәмәғәт урындарында енәйәтселектең алты йылда дүрт (5356-нан 21597-гә тиклем) тапҡырға артыуы йәмғиәттә әхлаҡтың ниндәй кимәлгә төшөүен асыҡ күрһәтә. Бынан, хоҡуҡҡа ҡаршы эш итеү нормаға әүерелеп бара, тигән һығымта ғына яһарға мөмкин. Иҫерек килеш енәйәт ҡылыусылар (10335), наркотиктар менән законһыҙ сауҙа итеү (5779), юл-транспорт фажиғәләре (5361: 677 кеше үлгән, 6511-е йәрәхәтләнгән) лә йышайыу өҫтөндә. Квартираға төшөү, мал урлау, кешегә ауыр тән йәрәхәте яһау кеүек енәйәттәр ҙә йыш осрай. Иң насары шунда: енәйәт ҡылыусылар йыш ҡына закон көсөнән ҡасып ҡала, байтаҡ енәйәттәр төрлө сәбәптәр арҡаһында асыҡланмай.

Законһыҙлыҡ күренештәрен БР Прокуратураһының быйылғы ғинуар – июль йомғаҡтарынан да табырға мөмкин. Мәҫәлән, эш хаҡын түләп еткермәү йәки бөтөнләй түләмәү кеүек 90-сы йылдарҙа тамыр йәйгән законһыҙ күренеш әле лә дауам итә. Ошо йәһәттән прокуратура тарафынан 450 кеше административ яуаплылыҡҡа тарттырылған, хатта 6 енәйәт эше асылған. Эшҡыуарҙарға һәр төрлө юлдар менән ҡамасаулыҡ итеүҙең 1123 осрағы (2008 йыл менән сағыштырғанда 8 тапҡырға күберәк) теркәлеү ҙә чиновниктарҙың ҡомһоҙлоғо тураһында һөйләй. 260 вазифа дисциплинар, икеһе административ яуаплылыҡҡа тарттырылған, хатта бер осраҡ буйынса прокуратура енәйәт эше ҡуҙғатырға мәжбүр булған.

Федераль мәхкәмәләр тарафынан төрлө енәйәт ҡылған өсөн 2008 йылда

19278 кешегә хөкөм ҡарары сығарылып, шуларҙың һәр өсөнсөһө иркенән мәхрүм ителгән. Хөкөм ҡарары сығарылған енәйәт эштәре кәмеүгә ҡарамаҫтан, иркенән мәхрүм ителгәндәр 135 кешегә артҡан. Хәҙерге закондар буйынса иректән мәхрүм итеүҙең һирәгерәк ҡулланылыуын иҫәпкә алғанда, хөкөм ителеүселәрҙең ҡатыраҡ енәйәт ҡылыуын, мәхкәмә ҡарары буйынса төрмәлә генә төҙәлә (төҙәләме икән?) алырын һиҙемләмәү мөмкин түгел. Административ хоҡуҡ (юл ҡағиҙәләрен, йәмәғәт тәртибен) боҙоусылар ҙа күбәйгән, 3331 кешегә тейешле яза бирелгән.

Солох судьялары тарафынан былтыр 11303 кеше хөкөм, шул иҫәптән һәр унынсы иркенән мәхрүм ителгән. 2007 йыл менән сағыштырғанда 2 мең кешегә күберәк. Солох судьяларының бер йылда 188 меңдән ашыу кешене административ яуаплылыҡҡа тарттырылыуын да ваҡ-төйәк мәсьәләгә һанап булмай. Бәлки, был әхлаҡһыҙлыҡтан бигерәк хоҡуҡи нигилизмға ҡағылалыр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Рәсәйҙә был йәһәттән алға китеш демократия йылдарында ла һиҙелмәй.

Әхлаҡһыҙлыҡ илебеҙҙең социаль нигеҙҙәренә һөжүмен көсәйтә бара. Ул Рәсәйҙә ҡасанға тиклем тантана итер? Был риторик һорау түгел, уның эҙемтәләренең бик ауыр булыуы ихтимал. Бәхеткә күрә, теге йәки был башланғысы менән йөктө урынынан ҡуҙғатырға теләүселәр юҡ түгел. Рәсәй Фәндәр академияһы академигы, абруйлы белгес Лео Бокерия етәкселегендәге төркөм тәмәке тартыуға ҡаршы Рәсәй милли программаһын эшләү, 2010 йылды "Рәсәй – тәмәкегә ҡаршы" йылы тип иғлан итеү, тәмәке рекламаһын тыйыу, бәлиғ булмағандарға тәмәке һатҡан өсөн енәйәт яуаплылығы индереү буйынса ҡултамғалар йыя. Яҡшы башланғыс, тик ул ысынбарлыҡҡа әүерелһен өсөн инициатив төркөмгә бик күп көс һалырға, программа проектын әҙерләргә, Федераль Йыйылыш депутаттарын тәмәке проблемаһын хәл итеүгә ышандырырға тура киләсәк.

Ваҡытлы матбуғат биттәрендә эскелек, тәмәке тартыуға ҡаршы күрелгән саралар тураһында хәбәрҙәр баҫылып тора. Быйыл август урталарында "Башинформ" агентлығы Өфөнөң "Китап" мәҙрәсәһе базаһында наркотиктарҙан яфа сигеүселәр өсөн реабилитация үҙәге асылыу тураһында хәбәр итте. Үҙәктә бер юлы 10 кеше реабилитация үтә ала. Агентлыҡ унда тәртиптең ҡаты буласағы, дини йолаларҙы теүәл үтәргә кәрәклеге хаҡында иҫкәртә. Шулай уҡ Приморье крайының бер ҡалаһында урамда тәмәке тартҡан өсөн штраф һалыу ғәмәле, Иркутскиҙа әгәр автобус водителе тәмәке тарта икән, пассажир юл хаҡын түләмәҫкә хаҡлы, кеүек хәбәрҙәр ысынлап та фәһемле. Һуңғы ҡарар Иркутск ҡалаһы депутаттары түгел, ә автотранспорт предприятиелары ассоциацияһы тарафынан сығарылыуы менән ҡиммәтле. Үкенескә ҡаршы, беҙҙең республикала ошоға оҡшаш миҫалдарҙы осратырға тура килмәй. Әйтергә яраһа, беҙҙә тәмәкеселәргә "йәшел урам" асылған. Тротуарҙарҙа, подьездарҙа тәмәке төпсөктәре, әгәр бер-ике көн йыйыштырылмаһа, тулып китә. Сөнки тәмәке тартыуҙы тыйған саҡырыуҙарҙы бер ерҙә лә күрмәҫһең.

Рәсәй йәмғиәте ауырыу, тигән фекер, минеңсә, күптәрҙе хафаға һалырға, уйландырырға тейеш. Ауырыу, әлбиттә, тура мәғәнәһендә түгел. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙә теге йәки был проблеманы күрмәмешкә һалышыу, уны хәл итеүҙе йәмғиәт елкәһенә һалырға тырышыу көслө. Традиция элекке КПСС замандарынан килә. Маҡсаты тәү ҡарашҡа изге лә кеүек, сөнки йәмәғәтселектән көслөрәк, абруйлыраҡ институт юҡ бит, ләкин конкретһыҙлығы уның бәҫен төшөрә. Йәмәғәтселек – абстракт төшөнсә, уның алдына бурыс ҡуйыу властарҙың сүпте үҙ өҫтөнән осороп ебәреүенә генә тиң. Әхлаҡһыҙлыҡ

күренештәрен сикләү – иң элек депутаттар, башҡарма властар хәстәре. Ләкин кем халыҡ вәкилдәренең атап үтелгән проблемаларҙың хәл ителешен күҙәткән йыйылышын хәтерләй? Улар тәмәке тартыуҙы сикләү тураһында закон сығарҙы ла тынысланды. Дөрөҫ, законда бөтә мәшәҡәт башҡарма власть елкәһенә һалынған. Күренеүенсә, властың был тармағы иһә тейешле ҡарарҙар сығарырға ашыҡмай.

Ҡайһы берәүҙәрҙең, Рәсәйҙә ғүмер баҡый эскәндәр, эсәләр һәм киләсәктә лә эсәсәктәр, тигән фекеренә ҡарамаҫтан, хәл урамда һәр икенсенең иҫерек йөрөүенә, бала-сағаның да тәмәке тарта башлауына етмәҫ элек был яман күренештәрҙе сикләү буйынса саралар күреү мотлаҡ. Йәмғиәттең социаль сәләмәтлеген ҡаҡшатыусыларға ҡаршы эшмәкәрлекте эскесе йәки тәмәкеселәрҙең виртуаль хоҡуҡтарын боҙмау принцибы аҫтында түгел, ә сәләмәт тормош алып барған кешеләрҙең хоҡуҡтарын яҡлау аҫтында ойоштороу маҡсатҡа ярашлы. Ғөмүмән, халыҡ-ара хоҡуҡ нормалары был мәсьәләгә айыҡ күҙлектән сығып ҡарай. Ә принципиаль ныҡышмалылыҡ күрһәтмәй тороп, быға өлгәшеп булмаясаҡ. Дәртләндереү сараларына килгәндә иһә, уларҙы элекке СССР тәжрибәһенән эҙләп ҡарарға кәрәк. Ғөмүмән, программаны әҙерләүселәр өсөн донъя илдәрендә ҡулланылған тәжрибә етерлек: Европала ла, Көнсығыш илдәрендә лә. Ике генә сифат кәрәк: ныҡышмалылыҡ һәм эҙмә-эҙлелек.

Әйткәндәй, эскелеккә ҡаршы иң йоғонтоло агитация – алкоголдең организмға емергес удар яһауын күрһәтеү, ти белгестәр. Уны ҡараған кешеләрҙең күбеһенең айыҡ тормошҡа күсеүе билдәле. Экрандарҙа алкоголгә ҡаршы реклама башланыу менән алкоголле эсемлектәрҙе маҡтаған реклама юҡҡа сығырға тейеш.

Президенттың “фәҡир илдә эскелекте еңеп булмай” тигән фекеренә өҫтәп шуны әйтергә мөмкин: илдә иҡтисади, финанс һәм һалым сәйәсәте әлеге кеүек эре капитал мәнфәғәтен ҡайғыртып, ябай граждандарҙы ситкә этәрһә, фәҡирлекте еңеүгә өмөт бағлау урынһыҙ. Был – бер. Икенсенән, Рәсәй һис кенә лә фәҡир ил түгел. Киреһенсә, тәбиғи байлыҡтары буйынса ул донъяла тәүге урындарҙың береһен биләй. Тик был байлыҡтар менән, РФ Конституцияһында яҙылғанса, ил халҡы түгел, ә айырым ҡатламдар ғына файҙалана. Шул кешеләр миллиондарса һумдарҙы беҙ йөҙләп йәки меңлектәрҙе тотонған кеүек сарыф итә. Улар сит илдәрҙә күсмәҫ милек һатып ала, әммә үҙ Ватаны иҡтисадына һалмай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, РФ Президенты ла, Федераль Йыйылыш депутаттары ла, Федераль Хөкүмәт тә хәлде ябай рәсәйҙәр мәнфәғәтендә үҙгәртергә йыйынмай. Абруйлы белгестәр фекеренсә, килемгә (подоходный) һалымды уның күләменә ҡарата үҫә барыусы шкала ярҙамында билдәләмәй, күсмәҫ милеккә (ә ул Рәсәйҙә һәм сит илдәрҙә бер нисә триллион һумға етә) һалым индермәй тороп, фәҡир рәсәйҙәрҙең хәлен яҡшыртып булмаясаҡ.

Бөтә Рәсәй Йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге мәғлүмәттәре буйынса, ирҙәрҙең 57, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 75 проценты Кремлдең сираттағы башланғысын яҡлай. Тимәк, ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн алшарттар бар. Уларҙы һөҙөмтәле файҙаланырға ғына кәрәк.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

*Башҡорт дәүләт университетына – 100 йыл*

## БЕҘ – БӘХЕТЛЕ ХАЛЫҠ

Ошо йылдың 4 октябрендә Башҡорт дәүләт университетына 100 йыл тулды. Үҙенең оло юбилейын университет коллективы тантаналы рәүештә 4 декабрҙә билдәләргә йыйына.

Был юбилей – студенттар, уҡытыусылар, профессорҙар өсөн генә түгел, бөтә республика һәм ил өсөн әһәмиәтле ваҡиға. Бөгөн уҡыу йортонда 21 мең студент белем ала. 267 фән докторы, 810 фән кандидаты эшләй.

Беҙҙең университет – ысын мәғәнәһендә фән, мәғариф һәм мәҙәниәт үҙәге. Классик университет буларак беҙҙең вуз республиканың төп юғары уҡыу йорто һанала. Үткән 100 йыл эсендә университет баһалап бөткөһөҙ ҡаҙаныштарға иреште. Бик күп күренекле шәхестәр беҙҙең университетты тамамлаған. Хәҙерге көндә ул Рәсәй Федерацияһында иң уңышлы эшләгән классик университеттарҙың береһе һанала, уның абруйы бик юғары.

Билдәле булыуынса, Башҡортостанда юғары белем биреү системаһы XX быуат башында формалаша башлай. 1909 йылдың 4 октябрендә Өфөлә Уҡытыусылар институты асыла. Институтҡа хәҙерге Цюрупа урамындағы 9-сы һанлы бина бирелә. Институттың төп маҡсаты төрлө типтағы ҡала училищелары өсөн уҡытыусылар әҙерләү була. Унда рус теле һәм әҙәбиәте, тарих, педагогика, тәбиғәт фәндәре, йыр һәм сәнғәт уҡытыла һәм өйрәнелә. 1912 йылда беренсе сығарылыш була һәм институтты 24 кеше тамамлай.

1919 йылдың 17 июлендә РСФСР Халыҡ мәғарифы министрлығы ҡарары менән Өфө Уҡытыусылар институты Халыҡ мәғарифы институты (ИНО) итеп үҙгәртелә. 1920 йылда институттың яңы статус нигеҙендә эшмәкәрлеге башлана һәм уға күренекле ғалим К.А.Тимирязев исеме бирелә. Институт етәкселеге башҡорт йәштәрен уҡырға ылыҡтырыу буйынса байтаҡ эштәр башҡара. Улар өсөн әҙерлек курстары асыла. Мәҫәлән, 1924/1925 уҡыу йылында башҡорт студенттарының һаны 25-кә барып етә.

1929 йылдың 9 мартында РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советының ҡарары менән Өфө Халыҡ мәғарифы институты нигеҙендә Башҡорт дәүләт педагогия институты ойошторола. 1930 йылда институтта ҙур үҙгәрештәр була. 1 октябрҙә унда 14 кафедра, шул иҫәптән башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы асыла. Шул уҡ йылда башҡорт бүлеге лә ойошторола. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһының тәүге мөдире итеп Мәскәүҙәге Лазарев исемендәге Көнсығыш телдәре институтын тамамлаған профессор Л.Н.Воробьев тәғәйенләнә. Һуңыраҡ кафедра мөдире вазифаһын күренекле тел ғалимы З.Ш.Шакиров (1881–1970), Ғ.Й.Дәүләтшин (1892–1937) башҡара.

1934 йылда институтта факультеттар барлыҡҡа килә. Тел һәм әҙәбиәт факультетының деканы итеп билдәле ғалим-педагог А.К.Чижов тәғәйенләнә. Башҡорт бүлегендә тәүге сығарылыш 1933 йылда була. Уны тамамлаусылар араһында билдәле шәхестәр: Жан Лоҡман улы Лоҡманов, Абдулла Нәбиулла улы



*Марат Зәйнуллин (уртала) — башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты деканаты хеҙмәткәрҙәре менән.*

Баязитов, Таһир Ғәләм улы Байышев, Әкрәм Вәли, Әмир Иҙрис улы Чанышевтар бар.

1957 йылда педагогия институты Башҡорт дәүләт университеты итеп үҙгәртелә. Башҡорт дәүләт университеты ғилми советының 1990 йылдың 20 мартында ҡабул иткән ҡарары нигеҙендә башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты асыла. Факультеттың тәүге деканы итеп профессор М.В. Зәйнуллин тәғәйенләнә.

Хәҙерге ваҡытта факультетта Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәрендәге юғары уҡыу йорттары һәм урта махсус белем биреү мәктәптәре өсөн һигеҙ специальность буйынса белгестәр әҙерләнә: «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте», «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, рус теле һәм әҙәбиәте», «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, инглиз теле», «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, немец теле», «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, ғәрәп теле», «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, төрөк теле», «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, фарсы теле», «Журналистика».

Факультетта 48 уҡытыусы эшләй. Профессор М.В. Зәйнуллин – Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы, профессорҙар Ғ.Ғ. Сәйетбатталов менән Р.Н. Байымов – Башҡортостан Фәндәр академияһының ағза-корреспонденттары. Ун алты фән докторы, егерме биш фән кандидаты. 8 уҡытыусы – Р.Б.Әхмәҙиев, Р.Н.Байымов, М.Х. Иҙелбаев, Р.Ғ. Аҙнағолов, Т.А. Килмөхәмәтов, Ғ.Д. Ибраһимов, Ғ.С. Ҡунафин, З.Я.Шәрипова – Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы ағзалары. Профессорҙар Р.Н.Байымов, М.В.Зәйнуллин, Т.А. Килмөхәмәтов, Т.Ә.Килдебәкова, Ғ.Ғ.Сәйетбатталов, Б.Ғ.Әхмәтшин һәм Ғ.С. Ҡунафинға фән өлкәһендәге ҙур уңыштары өсөн «Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре», «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре» тигән маҡтаулы исем бирелгән. Күп уҡытыусылар «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре», «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы», «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» исемдәренә лайыҡ булды.

Кафедраларҙың ғилми һәм уҡыу-уҡытыу эшмәкәрлегенең бай тәжрибәһе нигеҙендә факультетта ысын мәғәнәһендә башҡорт һәм рус филологияһы ғилми мәктәптәре формалашты. Был мәктәптең формалашыуына СССР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, РСФСР Педагогика академияһы академигы, башҡорт теленең тәүге фәнни грамматикаһының авторы Н.К.Дмитриев, арҙаҡлы башҡорт ғалимы, Урал-Алтай тел ғилеменең күренекле вәкиле, профессор Ж.Ғ.Кейекбаев, күренекле башҡорт фольклорсыһы Ә.Н.Кирәев һәм әҙәбиәтсе Ә.И.Харисовтар ҙур өлөш индерҙе. Хәҙер уларҙың уҡыусылары Р.Н.Байымов,

М.В.Зәйнуллин, М.Х.Әхтәмов, Ғ.Ғ.Сәйетбатталов, Э.Ф.Ишбирҙин, Т.А.Килмөхәмәтов, Т.Ә.Килдебәкова, Б.Ғ.Әхмәтшин, Ғ.С.Ҡунафин һәм башҡа күп ғалимдар Башҡортостан фәне, башҡорт филологияһы һәм мәғарифы өлкәһендә арымай-талмай хеҙмәт итәләр.

Филология фәненең актуаль проблемалары буйынса ентекле тикшеренеү алып барыу коллективҡа милли ғилми-педагогик кадрҙар әҙерләү мәсьәләһен яңыса хәл итергә мөмкинлек бирә. Факультетта Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының телдәре һәм әҙәбиәттәре буйынса аспирантура һәм докторантура, докторлыҡ һәм кандидатлыҡ диссертациялары яҡлау буйынса совет эшләп килә. Был советта Урал-Волга буйы республикалары һәм өлкәләренән генә түгел, Рәсәйҙең башҡа регионлары: Татарстан, Ҡырғыҙстан, Хакасия, Бүрәт, Яҡут-Саха республикалары, Ҡабарҙы-Балҡар, Дағстан, Таулы Алтай һәм башҡа төбәктәрҙән килгән дәғүәселәрҙең кандидатлыҡ һәм докторлыҡ диссертациялары тикшерелә һәм яҡлана. Шуны әйтергә кәрәк: диссертациялар яҡлау советы 1979 йылдан алып эшләп килә, һәм ошо 30 йыл эсендә 180-дән ашыу диссертация яҡланған.

Факультетта даими рәүештә тюркология, башҡорт һәм рус филологияһы, журналистиканың көнүҙәк мәсьәләләренә арналған республика, региональ һәм халыҡ-ара ғилми конференциялар, исемдәре бөтә донъяға билдәле мәшһүр ғалимдар Н.К. Дмитриев һәм Ж.Ғ. Кейекбаев ғилми мираҫына бағышланған симпозиумдар ойошторола, шулай уҡ халыҡ-ара традицион Зәки Вәлиди уҡыуҙары үткәрелә. Быларҙың бөтәһе лә факультеттың тюркология һәм филология йүнәлештәренең төрлө өлкәләрендә актив ғилми һәм фәнни-методик эҙләнеүҙәр алып барыуы хаҡында һөйләй.

Һуңғы йылдарҙа ғына деканат һәм факультет кафедралары байтаҡ халыҡ-ара, Рәсәй һәм республика кимәлендәге ғилми конференциялар үткәрҙе һәм бындай конференцияларҙы уҙғарыуҙа актив ҡатнашты. Уларҙың бер нисәһен генә атап китәйек: «Россия и Восток: проблемы взаимодействия» (1993), «Тюркология накануне XXI века: достижения, состояние, перспективы» (1997), «Профессор Н.К.Дмитриев һәм башҡорт филологияһы» (1998), «Евразийство: историко-культурное наследие и перспективы развития» (2000),«Закон о языках народов РБ и проблемы двуязычия» (2000), «Урало-Алтаистика: проблемы, состояние, перспективы» (2001), «Язык и литература в межкультурной коммуникации народов Евразии» — халыҡ-ара ғилми конференция (2002) һ.б. Шулай уҡ Ә. Вәлидиҙең фәнни эшмәкәрлегенә бағышланған дүрт халыҡ-ара конференцияны (Вәлиди уҡыуҙары) ойоштороу һәм үткәреү буйынса факультет ҙур эш башҡарҙы.

Бөгөн факультеттың көндөҙгө һәм ситтән тороп уҡыу бүлектәрендә 1000-дән ашыу студент белем ала. Факультет алыҫ һәм яҡын сит илдәрҙең юғары уҡыу йорттары менән дә тығыҙ бәйләнеш тота. Беҙҙең уҡытыусылар һәм тик яҡшы билдәләргә генә уҡыған студенттар Үзбәкстан, Төркиә, Иран, Германия һәм башҡа илдәрҙең юғары уҡыу йорттарында стажировка үтә, шулай уҡ факультеттың төрлө курстарында сит илдән саҡырылған белгестәр дәрестәр үткәрә.

Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының абруйы йылдан-йыл үҫә, бында уҡырға инергә теләүселәр һаны артҡандан-арта бара. Абитуриенттар Рәсәйҙең Ырымбур, Силәбе, Һамар, Пермь, Курган, Төмән, Һарытау өлкәләренән, шулай уҡ башҡа республикаларҙан килә.

Элекке филология факультетының башҡорт-рус бүлеген, хәҙерге башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетын бик күп туған тел һәм әҙәбиәт, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, башҡорт филологияһы буйынса фән докторҙары һәм кандидаттары, яҙыусылар, журналистар, матбуғат, радио, телевидение хеҙмәткәрҙәре, мәҙәниәт, сәнғәт һәм дәүләт эшмәкәрҙәре тамамлаған.

Беҙҙең факультетты тамамлаған яҙыусылар һәм әҙәбиәт белгестәре араһында Республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына һәм Башҡортостандың халыҡ шағиры һәм яҙыусыһы исеменә лайыҡ булған әҙиптәр бар. Беҙ улар менән бик ғорурланабыҙ: Мостай Кәрим, Һәҙиә Дәүләтшина, Сәғит Агиш, Назар Нәжми, Фәрит Исәнғолов, Ким Әхмәтйәнов, Рәшит Солтангәрәев, Ғайса Хөсәйенов, Хәким Ғиләжев, Ғилемдар Рамазанов, Әхнәф Харисов, Нур Зарипов, Александр Филиппов, Мөхтәр Сәғитов, Әхмәт Сөләймәнов, Рауил Бикбаев, Булат Рафиҡов, Абдулхаҡ Игебаев, Ноғман Мусин, Факиһа Туғыҙбаева, Ҡәҙим Аралбаев, Роберт Байымов, Тимер Йосопов, Ирек Кинйәбулатов, Таңсулпан Ғарипова, Дәүләткирәй Мәһәҙиев һ.б.

Беҙҙең факультетты төрлө йылдарҙа күренекле яҙыусылар, әҙәбиәт ғилеме белгестәре тамамлаған. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәктер: беҙҙә уҡып сыҡҡандарҙан 165 кеше Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Яҙыусылар союзы ағзаһы итеп алынған.

Бөйөк Ватан һуғышы алдынан башҡорт бүлегендә танылған яҙыусылар Ғәлимов Сәләм, Мөхәмәтйәров Хәй, Хәниф Кәрим, Мостай Кәрим, Мөхөтдин Тажи, Мәлик Харис, Ҡадир Даян, Жан Лоҡман, Әкрәм Вәли, Кирәй Мәргән, Хөсәйен Ҡунаҡбай, Һәҙиә Дәүләтшина, Сәғит Агиш, Батыр Вәлид һ.б. уҡый.

Советтар Союзы Геройы Зөбәйҙулла Төхвәт улы Үтәғолов (1913 – 1943) башҡорт бүлеген 1939 йылда тамамлай. Бөйөк Ватан һуғышына тиклем башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, мәктәп директоры булып эшләй. 1943 йылдың 15 ғинуарында батырҙарса һәләк була.

Башҡортостандың халыҡ шағиры, Ленин исемендәге премия лауреаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Мостай Кәрим беҙҙең факультетты 1941 йылда тамамлай.

Бөйөк Ватан һуғышынан һуң байтаҡ фронтовиктар филология факультетының башҡорт-рус бүлегенә уҡырға инәләр. Улар араһында буласаҡ күренекле шәхестәр һәм әҙиптәр бар: Мөхәммәт Хәйҙәров, Миҙхәт Гәйнуллин, Ғилемдар Рамазанов, Назар Нәжми, Хәким Ғиләжев, Нур Зарипов һ.б. Һуңыраҡ университетта Абдулхаҡ Игебаев, Әмир Гәрәев, Ноғман Мусин һәм башҡа буласаҡ күренекле шәхестәр уҡый.

Факультетты тамамлаусылар араһында күренекле әҙәбиәт белгестәре һәм тәнҡитселәре бик күп: Жан Лоҡман, Әхнәф Харисов, Ғайса Хөсәйенов, Рауил Бикбаев, Роберт Байымов, Миҙхәт Гәйнуллин, Ким Әхмәтйәнов, Ғилемдар Рамазанов, Ғиниәт Ҡунафин, Тимерғәле Килмөхәмәтов, Вафа Әхмәҙиев, Әнүр Вахитов, Марат Минһажетдинов, Берйән Байымов, Әхәт Вилданов, Зәйтүнә Шәрипова, Мөхтәр Сәғитов, Рәшит Шәкүр, Миңлеғәли Нәҙерғолов, Мирас Иҙелбаев, Гөлфирә Гәрәева, Риф Әхмәҙиев, Илдус Бүләков һ.б.

Факультетты тамамлаусылар араһында тел ғалимдары ла байтаҡ. Мәҫәлән, филология фәндәре докторҙары, БР Фәндәр академияһы академиктары М.В Зәйнуллин, З.Ғ. Ураҡсин, ағза-корреспонденттары Ғ.Ғ.Сәйетбатталов, И.Ғ.Ғәләүетдинов, фән докторҙары Н.Х. Мәҡсүтова, С.Ф.Миржанова, Д.С.Тикеев, Э.Ф.Ишбирҙин, М.Х.Әхтәмов, Т.Ә.Килдебәкова, Р.Ғ.Аҙнағолов, Р.З.Шәкүров, К.Г.Ишбаев, А.А.Камалов, М.Ғ.Усманова, Х.В.Солтанбаева, Р.Ә. Әбүталипова, Ю.В.Псәнчин, филология фәндәре кандидаттары Т.Г.Байышев, Ғ.Ғ.Хисамова, Х.Ғ.Йосопов, У.Ф.Нәҙерғолов, Ә.М.Аҙнабаев, Ф.Ф.Аҙнабаева, М.И.Дилмөхәмәтов, Р.М.Ураҡсина, Р.Ғ.Таһирова, Х.И.Баһауетдинова, Ғ.Ғ.Ҡаһарманов, Т.Х.Күсемова, З.Г.Уразбаева, Р.Ф.Зарипов, В.Ш.Псәнчин, Г.Д.Зәйнуллина, Ш.В.Нафиҡов, Н.С.Суфьянова, Р.А.Сиражетдинов, Г.Р.Хөсәйенова, З.Ф.Шәйхисламова, З.З.Әбсәләмов, Г.Х.Бохарова, В.Ш.Хәкимова, В.З.Толомбаев, Л.Х.Сәмситова,

Х.Д.Ишбулатова, Р.Я.Хөснөтдинова, Ф.Б.Санъяров, Ф.С.Исҡужина, З.И.Сәләхова, В.Ә.Шәйәхмәтов, Ғ.Д.Ибраһимов, Г.Д.Ибраһимова, В.В.Ғәниев, Г.А.Иҫәнғолова, Р.И.Байсурина, Р.Н.Ниғмәтуллина, Р.Ғ.Таһирова, Г.А.Рысаева, З.М.Ғәбитова, Н.Ә.Сөйәрғолов, Г.Ғ.Ҡолһарина һәм башҡа бик күптәр фән юлына ошо факультетты тамамлағандан һуң баҫҡан.

Шуныһы айырыуса ҡыуаныслы: төрлө йылдарҙа беҙҙең факультетты бик күп күренекле яҙыусылар тамамлаған: Сафуан Әлибаев, Әмир Гәрәев, Риф Мифтахов, Агиш Ғирфанов, Мәхмүт Һибәт, Мөслим Әбсәләмов, Рәмил Йәнбәк, Йыһат Солтанов, Рауил Ниғмәтуллин, Самат Ғәбиҙуллин, Барый Ноғоманов, Миәссәр Басиров, Ғәлим Дәүләди, Шакир Биҡҡолов, Аҫылғужа Баһуманов, Рәшит Низамов, Ғәлим Хисамов, Сабир Шәрипов, Ихсан Әхтәмйәнов, Ринат Камал, Ҡол-Дәүләт, Риф Тойғон, Салауат Әбүзәр. Улар араһында гүзәл зат вәкилдәре байтаҡ: Кәтибә Кинйәбулатова, Фәниә Чанышева, Таңсулпан Ғарипова, Һәҙиә Дәүләтшина, Факиһа Туғыҙбаева, Гөлфиә Юнысова, Мәрйәм Бураҡаева, Йомабикә Ильясова, Таңһылыу Ҡарамышева, Лира Яҡшыбаева, Гүзәл Ғәлиева, Нажиә Игеҙйәнова, Гөлнур Яҡупова, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Зөһрә Ҡотлогилдина, Динә Талхина, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Фәниҙә Исхаҡова, Тамара Искәндәрова, Фәрзәнә Аҡбулатова, Зөлфиә Ханнанова, Айһылыу Йәғәфәрова, Гөлназ Ҡотоева, Лариса Абдуллина, Айһылыу Ғарифуллина һ.б.

Факультетты тамамлаусылар араһында күренекле һәм талантлы журналистар ҙа аҙ түгел: Марсель Ҡотлоғәлләмов, Тәлғәт Сәғитов, Мөхтәр Тимербулатов, Марсель Сәлимов, Файыҡ Мөхәмәтйәнов, Сәлимйән Бәҙретдинов, Иғдислам Мырҙабаев, Камил Яйыҡбаев, Шәйхислам Айсыуаҡов, Вячеслав Голов, Ризван Хажиев, Ғәлиә Ғәлимова, Мәхмүт Хужин, Миңниса Баһуманова, Рухия Насипова, Фәрит Рәмов, Сәрүәр Сурина, Мәликә Әминева, Зөһрә Алтынбаева, Зыял Шәйхетдинов, Ләлә Бейешева, Факил Мырҙаҡаев, Рәшиҙә Мәһәҙиева, Батыр Наҙарғолов, Фәүзиә Латипова, Рәшит Кәлимуллин, Гөлсимә Ризуанова, Динә Арыҫланова, Фәрзәнә Аҡбулатова, Флүрә Солтанова, Гәүһәр Батталова, Әхәт Мортазин, Тәнзилә Үлмәҫбаева, Миңйыһан Хәлитова, Ростислав Мырҙағолов һ.б.

Һуңғы йылдарҙа беҙҙең факультетты тамамлаған ҙур бер төркөм журналистар матбуғатта һәм киң информация сараларында уңышлы эшләй: Ғәлим Яҡупов, Радик Байназаров, Азат Ғиззәтуллин, Венера Ситдиҡова, Фәнүр Йәғәфәров, Алик Аллаяров, Рәлис Ураҙғолов, Ғималетдин Яруллин, Сәлмән Ярмуллин, Артур Дәүләтбәков, Мөнир Ҡунафин, Әлфинә Ҡарағужина, Нурия Амангилдина, Әлфиә Шәрипова, Зәйтүнә Ниғмәтйәнова, Луиза Сәйфетдинова, Айһылыу Низамова, Фәүзиә Мөхәмәтшина, Айгөл Әйүпова, Рәшит Зәйнуллин, Сибәғәт Рахманғолов, Ильяс Таҡалов, Вәдүт Исхаҡов, Рәмзит Әбүләев һ.б.

Факультетты тамамлап сығыусылар араһында гәзит һәм журнал мөхәррирҙәре бик күп: Гөлфиә Юнысова «Башҡортостан ҡыҙы» журналының баш мөхәррире булып 20 йыл эшләне. Әле Гөлфиә Янбаева — «Киске Өфө» гәзите, Сәлмән Ярмуллин — «Аманат» журналы, Факиһа Туғыҙбаева — «Аҡбуҙат» журналы, Артур Дәүләтбәков — «Йәшлек» гәзите, Мирсәйет Юнысов — «Йәншишмә» гәзите, Йомабикә Ильясова — «Башҡортостан ҡыҙы» журналы баш мөхәррире һ.б.

Филология факультетын һәм беҙҙең бүлекте тамамлаусыларҙың байтағы ижтимағи фәндәр буйынса докторлыҡ һәм кандидатлыҡ диссертациялары яҡлап, күренекле ғалимдар булып киттеләр. Башҡортостан Фәндәр академияһы ағза-корреспонденты, Президент ҡарамағындағы Башҡортостан Дәүләт хеҙмәте һәм идаралығы академияһы ректоры Мансур Әйүпов, Башҡортостан Фәндәр академияһының академигы Фәнил Фәйзуллин, фән докторҙары Рәшит Ирназаров, Дамир Азаматов, Рауил Нәсибуллин, Әхмәт Дәүләтҡолов, Зөһрә Рәхмәтуллина, фән кандидаттары Ғаяз Фәйзуллин, Рафаил Агишев һәм башҡаларҙың

хеҙмәттәре фән донъяһында киң билдәле. Филология фәндәре докторы, профессор Октябрь Вәлитов БДУ-ның Нефтекама филиалы директоры вазифаһында бик уңышлы эшләй.

Педагогика фәненең дөйөм мәсьәләләре мәктәптә, урта профессиональ һәм юғары уҡыу йорттарында тел һәм әҙәбиәт уҡытыу методикаһының көнүҙәк проблемаларына арналған байтаҡ кандидатлыҡ һәм докторлыҡ диссертациялары беҙҙең факультетта уҡып сыҡҡан белгестәр тарафынан яҙылған. Бына улар: Мәрйәм Ғималова, Фәһимә Бикҡолова, Абдрахман Ғәлләмов, Төхвәт Аслаев, Туғыҙаҡ Йәһүҙин, Хәсән Торомбаев, Фәрүәз Сәйфуллин, Тутыя Бикҡужина, Тимербай Исхаҡов, Булат Ғафаров, Әхмәр Аҙнабаев, Флүрә Аҙнабаева, Сәбилә Сөләймәнова, Миндебай Юлмөхәмәтов, Вәкил Хажин, Фәһимә Исламова, Айһылыу Йәғәфәрова, Рәмзәнә Әбүталипова, Рафаэль Аҙнағолов, Рим Искәндәров һ.б.

Бөтә ғүмерҙәрен йәш быуынды уҡытыуға, тәрбиәләүгә арнаған, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусылары, Социалистик Хеҙмәт Геройы Камалова Лира Шәриф ҡыҙы, Зайлалова Сажидә Хәмәтйәр ҡыҙы, Ғималова Мәрйәм Ғилметдин ҡыҙы, Абдуллина Фәрзәнә Фәйзрахман ҡыҙы, Искәндәров Рим Сәйетбаттал улы, Ишҡыуатов Рәфҡәт Фәтҡулла улы, Санъяров Фәнзил Бүләк улы; шулай уҡ И.А. Шарапов, Ф.Н.Ғәниева, Ғ.С.Мирсәйетов, Х.С.Фәритов, М.А.Нафиҡов, З.Ш.Яппарова, Ф.А.Итбаева, З.З.Әхмәтов, Г.С.Ҡужина, Г.З.Теүәлев, С.У.Ҡолсонбаева, Р.Н.Болғаиров, Б.А.Ҡыуатова, Ф.Х.Ғәлимова, Ф.С.Сафина, З.М.Сәйфуллина, З.З.Ҡалмурзина, Ғ.Ш.Шәйәхмәтов, Р.Исхаков, Г.Н.Йомағолова, Н.А.Илһамова (Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Рәсәйҙең мәғариф алдынғыһы), А.Ғәрифуллина, Ф.К.Заһирова, Н.Ф.Яҡупова, С.М.Бәҙретдинов, Н.А.Аҫылғужина, М.С.Ишбулатов, В.Ф.Мөхәмәтшина, С.Г.Мөхтәруллина, А.Б.Ишемғолова, С.В.Аҙнағолова, Н.Ф.Мифтахов, В.Ш.Бәхтийәров, А.В.Буранбаева, Ғ.К.Кәримов, М.Ф.Ғафаров, С.Х.Рәсүлев, М.З.Яппарова, М.М.Нәбиуллина, М.Б.Әбсәләмов, Б.З.Әбсәләмов, Әхәт һәм Нисфат Азаматовтар, З.Ғ.Төхвәтуллин, Ф.Ғ.Сөләймәнова, М.Ғ.Муллағолов, Р.Б.Ураҡсина, Н.Яҡупова, Ә.В.Мирғәлиев, А.Байһарин, С.С.Өмөтбаева, В.З.Ураҡсина, Ә.М.Ишмөхәмәтова, З.Х.Фәйзуллина, Ф.Зарипов, Л.Бейешева, З.Янбаев, М.Т.Сәлихова, Н.С.Ниязғолова, Ф.Хәбибуллина, Ғ.Ғ.Ғәлина, Р.М.Урманшин, М.Мансурова, Ә. Алдырханова, Т.Ғәлимуллина һәм башҡалар ҙа ошо факультетта уҡыған.

Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусылары М.М.Мәғәсүмов (Әбйәлил районының Байым урта мәктәбе) менән З.А.Бүләкова (Учалы РУНОһы методисы) мәғариф өлкәһендәге ҡаҙаныштары өсөн Н.К.Крупская исемендәге миҙал менән бүләкләнгәндәр.

Башҡортостандың театр һәм музыка сәнғәте эшмәкәрҙәре Азат Айытҡолов, Фәрит Бикбулатов, Риф Ғәбитов, Илһөйәр Ғазетдинова, Фәрит Шәйхетдинов, Резеда Әминева, Ришат Рәхимов, Әҙһәм Исҡужин, Вәлит Илембәтов, күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре Мансур Әйүпов, Рәшиҙә Солтанова, Тәлғәт Сәғитов, Миҙхәт Мәмбәтов, Фәйзулла Шәйхисламов, Фәрит Ғәбитов, Ғәлим Хисамов, Фәнил Ҡоҙаҡаев, Рәмис Дәүләтбаев, Риф Зарипов, Фәрит Усманов, Мөрит Сәлихов, Ансар Нуретдинов, Абдрахман Йосопов һ.б. филология факультетының башҡорт бүлеген тамамлағандар.

Әлбиттә, башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты тарихын БДУның хәҙерге филология факультетынан айырып ҡарау мөмкин түгел. 1990 йылға тиклем филология факультеты составындағы милли мәктәптәр өсөн рус бүлеген һәм башҡорт-рус бүлеген бөгөнгө милли интеллигенцияның күп вәкилдәре тамамлаған: күренекле прозаик һәм драматург, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Ғәзим Шафиҡов, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат

Юлаев исемендәге премия лауреаты Назар Нәжми, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, яҙыусы Булат Рафиҡов, билдәле журналистар Марсель менән Мадриль Ғафуровтар һ.б.

Әлбиттә, факультет коллективы, кафедра уҡытыусылары филология буйынса кадрҙар әҙерләү менән генә сикләнмәй. Кадрҙар әҙерләү эше лә – баһалап бөткөһөҙ хеҙмәт. Беҙҙә уҡып сыҡҡан, кандидат һәм доктор булған фән хеҙмәткәрҙәре республиканың юғары уҡыу йорттарында кафедра мөдирҙәре һәм уҡытыусылары булып эшләй. Кафедралар бик һөҙөмтәле ғилми эш алып бара. Кафедраларҙың актив ғилми эшмәкәрлеге нигеҙендә факультетта ысын мәғәнәһендә башҡорт һәм рус филологияһы буйынса ғилми мәктәптәр формалашты. Профессорҙар М.В.Зәйнуллин, Р.Н.Байымов, Ғ.Ғ.Сәйетбатталов, И.Ғ.Ғәләүетдинов, Э.Ф.Ишбирҙин, Ғ.С.Ҡунафин, Т.Ә.Килмөхәмәтов, Б.Ғ.Әхмәтшин, М.Х. Иҙелбаев башҡорт филологияһы һәм мәғарифы өлкәһендә арымай-талмай хеҙмәт итәләр. Факультет йылдың-йылы университетта ғилми эштәр һөҙөмтәләре буйынса алдынғы урындарҙы биләй. Хәҙерге көндә факультетта әҙерлекле, унған һәм фәнде юғары кимәлдә үҫтерерлек йәштәр эшләй. Риф Әхмәҙиев, Гөлфирә Гәрәева, Рәмилә Хөснөтдинова, Фирүзә Исҡужина, Фәнзил Санъяров, Гөлназ Иҫәнғолова, Ғәлиә Хисамова, Ғәйнислам Ибраһимов, Зәки Арыҫланов, Илшат Янбаев, Флүр Сибәғәтов һ.б. Кафедраларҙың һуңғы 5-6 йыл эсендә фән өлкәһендә ҙур уңыштарға ирешеүен күрһәткән бер нисә миҫал килтерәйек: башҡорт һәм дөйөм тел ғилеме кафедраһы “Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең грамматикаһы” күләмле монография яҙыуҙы тамамланы. Професор М.Х. Әхтәмовтың “Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре һүҙлеге” исемле уникаль хеҙмәте донъя күрҙе (Өфө: “Китап”, 2008), профессор М.В. Зәйнуллиндың “Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология” (Өфө: “Китап”, 2005), профессор Ғ.Ғ.Сәйетбатталовтың стилистика проблемаларына арналған хеҙмәтенең 5-се томы донъя күрҙе (Өфө: “Китап”, 2009), профессор Ғ.С.Ҡунафин XIX – XX быуат башҡорт әҙәбиәте проблемаларын өйрәнеү менән актив шөғөлләнә. Уның “XIX – XX быуат башы башҡорт поэзияһы” (2002) һәм башҡа бик күп ғилми хеҙмәттәре, студенттар өсөн уҡыу ҡулланмалары һәм мәктәп дәреслектәре киң билдәле. Профессор Р.Н.Байымовтың көнсығыш әҙәбиәте буйынса ғилми хеҙмәттәре әҙәбиәт тарихын һәм теорияһын өйрәнеүҙә айырым бер урын тота. “Башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры” һәм “XX быуатҡа тиклемге башҡорт әҙәбиәте” кафедралары 8 томдан торған “Башҡорт әҙәбиәте тарихы”н яҙыуҙа шулай уҡ әүҙем ҡатнаштылар.

Рус филологияһы кафедраһы уҡытыусылары рус һәм башҡорт телдәрен сағыштырып өйрәнеү, рус һәм башҡорт фольклорында һәм әҙәбиәтендә сағылған этник бәйләнештәрҙе тикшереү буйынса ҙур тикшеренеү эштәре алып бара.

Шулай итеп, республикабыҙ тарихында, уның бөгөнгө тормошонда Башҡорт дәүләт университетының тотҡан урыны баһалап бөткөһөҙ. Халыҡ шағиры Мостай Кәрим университеттың халыҡтың цивилизацияға илтеүе хаҡында бик аҡыллы әйткән: “Университеты булмаған халыҡтың киләсәге юҡ”. Беҙ – бәхетле халыҡ, сөнки беҙҙең юғары бейеклектәргә ирешкән университетыбыҙ бар, тимәк, беҙҙең халыҡтың өмөтлө киләсәге лә бар. Факультет коллективы киләсәккә ҙур пландар менән йәшәй һәм уларҙың тормошҡа ашырыласағына ышана.

**Марат ЗӘЙНУЛЛИН,**
**филология фәндәре докторы,**
**БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм**
**журналистика факультеты деканы.**

# УНИВЕРСИТЕТТЫҢ БЕРЕНСЕ ПРОРЕКТОРЫ

Башҡорт дәүләт университетының 100 йыллыҡ юбилейы айҡанлы уның беренсе проректоры, башҡорттарҙан беренсе булып филология фәндәре докторы дәрәжәһенә Мәскәүҙә диссертация яҡлаған, ғилми эштәре менән республиканан ситтә лә киң билдәлелек яулаған ғалим, яҙыусы Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев тураһында һүҙебеҙ. Башҡорт теленең тамырын нығытыусы, уны һаҡлауға, интеллектуаль ҡеүәтен үҫтереүгә ғәйәт ҙур көс һалған ғалим-шәхес ул.

К. А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтын университетҡа әйләндереү тураһындағы ҡарар 1957 йылдың йәйендә ҡабул ителә. Ошо уҡ йылдың 25 октябрендә Жәлил Ғиниәт улын партия Өлкә комитетының бюроһында университеттың уҡыу эштәре буйынса проректоры вазифаһына раҫлайҙар. Шул көндән башлап ул обком номенклатураһындағы кадр булып һанала. Архивта һаҡланған ике йөҙ утыҙынсы шәхси дело уға тап ошо көндө асыла[1].

Жәлил Ғиниәт улының был тынғыһыҙ вазифала нисек эшләүе тураһында Башҡорт дәүләт университетында 30 йыл эшләгән профессор, милләте буйынса немец Генрих Николаевич Классендың «Прочь от клочка земли» (Страницы нашей жизни) тигән китабынан уның Ж. Ғ. Кейекбаев тураһында яҙғандарына мөрәжәғәт итәбеҙ: «50-се йылдар аҙағында – 60-сы йылдар башында Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев Башҡорт дәүләт университеты проректоры булды. Кафедра етәксеһе булараҡ, миңә эш буйынса йыш ҡына уға инергә тура килә ине. Административ эштәрҙә ул бер ниндәй волокитаһыҙ, тиҙ һәм ҡыйыу хәл итер ине. Башҡа етәкселәрҙә булған сират-фәлән уның кабинеты алдында булманы.

– Йә, Генрих, хәлдәр нисек? – тип дуҫтарса һорашыр ине, һәм ҡағыҙымды алып, уҡып та тормайынса ҡултамғаһын ҡуйыр ине. Бер ваҡыт мин унан:

– Жәлил Ғиниәтович, ни эшләп Һеҙ нимә яҙылғанын тикшереп тә тормайынса ҡул ҡуяһығыҙ?– тип һораным.

– Һин бит намыҫлы немец, уңайһыҙ хәлгә ҡалдырмаҫыңды beләм. Кемде тикшерергә, ә кемде тикшермәҫкә икәнен беләм мин,– тигәйне. Кафедра етәкселәренә ул тулы хоҡуҡ бирер ине. Әгәр инде уның ышанысын юғалтһаң – бөттөң. Бындай осраҡтарҙа ул ҡаҡшамаҫ, үҙ һүҙендә ҡаты тороусан ине.

Кейекбаев бер минутын да бушҡа үткәрмәҫ, хатта ғилми совет ултырыштарында ла ғилми эше менән шөғөлләнер ине. Ул ысын ғалим булды. Башҡорт телен фәнни нигеҙҙә тәрән өйрәнеүҙең өлгөһө ине Жәлил Ғиниәт улы. Нисәмә ғалим, хәҙерге профессор, докторҙарҙы тәрбиәләне ул.

Профессор Кейекбаев һәм немец теле – был үҙе бер айырым ҙур тема. Шуны

[1]*ЦГАОО РБ. ф. 122. оп. 141. д.230.*



билдәләп үтәһем килә: ул, немец теленән тыш, инглиз телен дә яҡшы белде, француз телендә лә аралаша ала, герман телдәр төркөмөнөң байтағын аңлай ине. Төрки телдәр тураһында мин әйтеп тә тормайым.

«Немец ғалимдары мине фекерҙәрҙе системалы туплап, аныҡ яҙырға өйрәтте, тюркология өлкәһендә немец ғалимдарының ҙур хеҙмәттәре бар», – тип әйтә торғайны Жәлил Ғиниәт улы. Немец телен ул бөтә камиллығында белә һәм акцентһыҙ һөйләшә ине. Кейекбаев бер туған Гриммдарҙың әкиәттәрен – башҡорт теленә һәм башҡорт әкиәттәрен немец теленә тәржемә итте. Миңә 1990 йылда ГФР-ҙың Касселе ҡалаһында бер туған Гриммдарҙың музейында булырға тура килгәйне, музей каталогында Жәлил Кейекбаев тәржемәһендә башҡорт әкиәттәрен дә таптым.

1936 йылдың йәйендә Өфөлә немец ғалимы, яҙыусы, антифашист Фридрих Вольф (1888 – 1953) ҡунаҡта була. Мәскәүҙең сит телдәр институты студенты Жәлил Кейекбаев уның шәхси тәржемәсеһе булып оҙатып йөрөй. Профессор Кейекбаев Ф. Вольфтың үҙе һәм уның улы, билдәле кинорежиссер Конрад Вольф менән оҙаҡ йылдар хат алыша. (Ф. Вольфтың Ж. Кейекбаевҡа яҙған хатынан: «Мин һинең хатыңды бындағы яҙыусылар Лион Фейхтвангер менән Франс Верфелгә уҡыным. Улар һинең немец телен шул тиклем яҡшы белеүеңә шаҡ ҡаттылар һәм һоҡландылар… Хатың ҡулдан-ҡулға йөрөнө…»– **Р. Б.**) Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа беҙ уның менән һирәгерәк күрештек, һәр ҡайһыбыҙҙың үҙ эше… Мин, әлбиттә, уның менән һирәк осрашҡанға хәҙер бик үкенәм. Донъя шулай бит. Уйҙарымда йыш ҡына бергә булған саҡтарға әйләнеп ҡайтам, беҙ уның менән немец телендә аралаша торғайныҡ, фәнни проблемалар хаҡында әңгәмәләшә инек.

Миңә ул «Майн либер Хайнрих» тип мөрәжәғәт итер ине. Минең күҙ алдында ул әле лә тере кеүек баҫып тора – коллегам һәм дуҫым Жәлил Кейекбаев» [2].

Жәлил Ғиниәт улы ғүмер буйы административ етәксе булыуға ҡарағанда фән менән шөғөлләнеүҙе артығыраҡ күргән. Үҙен был вазифанан азат итеүҙәрен һорап партия Өлкә комитетына, ректор исеменә, хатта Мәскәү түрәләренә яҙылған ғаризалары ғалимдың архивында һаҡлана. БДУ проректоры булып ғалим биш йыл эшләй.

Башҡорт дәүләт университетының беренсе проректоры Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың тормош һәм ғилми ижад юлы үҙенсәлекле лә, ҡатмарлы ла.

Ғафури районының хозур төйәгендә, бәләкәй генә, төпкөл Ҡаранйылға

[2] *Классен Г. Н. Прочь от клочка земли. Березники, 2001. с.214-215.*

ауылында, 1911 йылдың 25 октябрендә донъяға килә ул. Атаһы Ғиниәтулла Заһиҙулла улы ауылдың уҡымышлы, мәртәбәле һәм абруйлы уҙаманы, муллаһы ла була. Оҙон буйлы, мөһабәт кәүҙәле, зәңгәр күҙле, күркәм ҡиәфәтле Ғиниәтулла Кейекбаев әрме хеҙмәтен Алыҫ Көнсығышта үтәй. Ул хеҙмәт иткән артиллерия полкына батша Николай II килә. Ғиниәтулла Заһиҙулла улына батша менән ҡул биреп күрешергә насип була. Ҡаранйылға ауылының Ж. Кейекбаев музейында Ғиниәтулла Кейекбаевтың «отличный артиллерист-бомбардир» булыуы хаҡындағы 1910 йылда бирелгән аттестаты бөгөн дә еленеп тора.

Мәҙрәсәлә белем алған, һалдатта йөрөп, донъя күреп шымарған Ғиниәтулла Кейекбаев аҡыллы, зирәк Жәлил улына төплө белем бирергә, урыҫса ла уҡытырға тырышҡан. Бер аяғы зәғифләнеү сәбәпле, малайға крәҫтиән тормошо менән көн күреү бик ҡыйынға тура киләсәген ул аңлай. (Алға китеп шуны әйтәйек: Мәскәүҙә уҡығанда, ундағы профессорҙарҙан операциялар яһатып, Жәлил Ғиниәт улы аяғын бер аҙ һауыҡтырыуға өлгәшә. Бәләкәй сағында мәҙрәсәлә уҡығанда уға ағас аяғында һикергеләп йөрөргә тура килһә, аҙаҡ, бер нисә операция кисергәндән һуң, ҡултаяҡһыҙ ҙа йөрөй алыуға ирешә).

Тәүҙә ауылда атаһынан, шунан Красноусол урыҫ мәктәбендә, артабан Маҡар ауылы мәктәбендә белем ала буласаҡ ғалим. Ауыл мәктәбен уңышлы тамамлағас, Жәлил Кейекбаев бер дуҫы менән Өфө тарафтарына юллана, теләктәре – Ер үлсәү техникумына инеп уҡыу. Имтихандарҙы уңышлы тапшырһа ла, егетте техникумға алмайҙар. Сәбәбе – аяғы аҡһау. Ул комсомолдың өлкә комитеты аша Башҡорт педагогия техникумына инеп китә. Уны ҡыҙыл дипломға тамамлап, Мәскәүгә, Сит телдәр институтының немец теле бүлегенә, бер генә имтихан биреп уҡырға инә.

Баш ҡала мәҙәни мөхитендә Жәлил Кейекбаев тырышып белем ала. Студент тормошонда ла әүҙем ҡатнаша. Китапханаларҙа ҡаҙыныуға, немец телен бөтә нескәлектәрендә өйрәнеүгә барлыҡ ваҡытын, булмышын бирә ул. Институтта Жәлил Ғиниәт улы рус, инглиз, француз, латин, грек һәм башҡа телдәрҙе лә өйрәнә. Яҡшы уҡығаны өсөн Афзал Таһиров исемендәге стипендияға лайыҡ була.

Илленсе йылдар аҙағында, репрессия ҡорбандарын аҡлау башланғас, Афзал Таһиров исемендәге стипендияны студенттар өсөн ҡайтанан тергеҙеүҙе һорап Ж. Кейекбаев Өлкә комитеттың беренсе секретары исеменә хат та яҙа. Бына уның архивта һаҡланған хаты: «В 1934-1935 годах в связи с 25-летием литературно-общественной деятельности крупнейшего башкирского писателя Афзала Тагирова было учреждено пять стипендий его имени размером по 250 руб. для студентов-отличников вузов Башкирии и других городов. Будучи студентом 1-го Московского педагогического института иностранных языков, одну стипендию получал и я в течение двух лет. После ареста писателя, естественно, были аннулированы и стипендии его имени.

Писатель Афзал Тагиров теперь посмертно реабилитирован и восстановлен во всех правах.

Логически напрашивается: должны быть восстановлены и пять стипендий его имени.

Поэтому прошу Вас поставить вопрос о восстановлении пяти стипендий имени Афзала Тагирова, но не в прежнем размере по 250 руб., а в размере 500 руб./ в старых деньгах/, поскольку общий размер стипендии для студентов

вузов СССР в 1934-1935 годах был в пределах 130–180 руб., т.е. вдвое меньше, чем общий размер вузовской стипендии теперь.

Восстановленные пять стипендий имени Афзала Тагирова прошу распределить пяти вузам Башкирии для студентов-отличников /производственников/, независимо от национальной принадлежности студента-отличника.

Количество стипендий его имени можно довести до семи, соответственно количеству вузов Башкирии.

Дж. Киекбаев, доктор филологических наук, башкирский писатель. 18 мая 1961»[3].

Ләкин унығ был изге теләге «юғары»ла хуплау тапмай, А. Таһиров исемендәге стипендия тергеҙелмәй.

Бөгөн беҙгә был мәсьәләгә яңынан әйләнеп ҡайтырға бер ни ҙә ҡамасауламай.

Уҡытыусыларынан да уңа буласаҡ ғалим: был осорҙа институтта немец милләтенән булған бай тормош һәм фәнни тәжрибәле профессорҙар эшләй.

Институт тамамлағас, бер йыл Мәскәү өлкәһендәге Рошаль ҡалаһының урта мәктәбендә немец теленән уҡыта. Был йылдарҙа (1937) Башҡортостанда интеллигенция өҫтөндә ҡара репрессия ҡойоно хөкөм һөргәндә, Аллаһы Тәғәлә буласаҡ беренсе филология фәндәре докторын, бәлки, шулай ҡурсалап ҡалғандыр, тигән уй ҙа килә башҡа. Уға Башҡортостанға ҡайтмай торорға районндашы, органдарҙа эшләгән яҡташы Шакир Насиров кәңәш иткән була.

Икенсе йыл уны Мәғариф министрлығы республикаға һоратып ала. Өфө сит ил телдәре институты директорының урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләйҙәр. Бөйөк Ватан һуғышы башланғансы Жәлил Ғиниәт улы шунда эшләй. Һуғыш башланғас, институт ябыла. Уның бинаһында эвакуацияланған завод урынлаштырыла.

1942-1943 йылдарҙа Ж. Ғ. Кейекбаев Ғафури районы Сәйетбаба урта мәктәбенә директор итеп ебәрелә. Унда ул немец һәм инглиз телдәрен дә уҡыта. Был йылдарҙа Жәлил Ғиниәт улы очерк, хикәйәләр һәм роман өҫтөндә эшләй, тәржемәләр менән шөғөлләнә. Ауыр һуғыш йылдарында Сәйетбаба урта мәктәбендә ҡулъяҙма журнал да сығара улар. Был журнал хәҙер ғалимдың архивында һаҡлана.

1943 йылда уны Өфөгә саҡырып алып, Башҡортостан китап нәшриәтенең баш мөхәррире вазифаһын йөкмәтәләр.

Һуғыш башланғандан алып Жәлил Ғиниәт улы үҙен фронтҡа тәржемәсе итеп ебәреүҙәрен һорап күп тапҡырҙар мөрәжәғәт итә. Инвалидлығы арҡаһында уны фронтҡа алмайҙар. Был турала Ж. Кейекбаев Башҡорт АССР-нан СССР Верховный Советы депутаты булып һайланған билдәле полярник Э. Кренкелгә хат яҙа. Э.Кренкель Ж. Кейекбаевҡа Юғары дипломатия мәктәбенә уҡырға инергә тәҡдим итә. Был мәктәпкә инеү өсөн мотлаҡ партия ағзаһы булыу талап ителгәнгә күрә, Жәлил Ғиниәт улы 1942 йылда партияға инә. Имтихандарҙы уңышлы тапшырып дипломатия мәктәбенә ҡабул ителгәс, ғаиләһен урынлаштырыу өсөн уға ҡыҫҡа сроклы отпуск бирелә. Ләкин уны ул ваҡыттағы партияның Өлкә комитеты Мәскәүгә ебәрмәй, киләсәктә аспирантураға йүнәлтмә бирәсәкбеҙ, тип вәғәҙәләп, авиация институтына немец телен уҡытырға ебәрәләр, артабан унда сит телдәр кафедраһы мөдире итеп үрләтелә.

---

[3] *ЦГИА РБ. ф.Р-5085. оп.1.д.234. с.56.*

1945-1946 йылдарҙа Мәскәүҙә СССР Фәндәр академияһының Тел белеме институтында аспирантурала уҡый. Авиация институтында эшләгән ваҡытында «Башҡорт теленең орфоэпияһы» тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһы яҙа. 1948 йылдың 22 сентябрендә Мәскәү дәүләт университетының Ғилми советында филология фәндәре кандидатлығына диссертацияһын уңышлы яҡлай [4].

1949 йылда Жәлил Ғиниәт улы К. А. Тимирязов исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтына эшкә күсерелә. Бында ул башта сит ил телдәре факультетының деканы була, немец телен уҡыта, ә һуңыраҡ башҡорт һәм татар телдәре менән әҙәбиәттәренең кафедраһы мөдире итеп һайлана.

Илленсе йылдар уртаһында Ж. Ғ. Кейекбаев СССР Фәндәр академияһының Тел ғилеме институтында докторантурала уҡый һәм был осорҙа «Башҡорт теленең фонетикаһы (сағыштырма-тарихи тикшереүҙең тәжрибәһе)» тигән бик мөһим, үтә лә актуаль темаға докторлыҡ диссертацияһы өҫтөндә эшләй. Докторантураны уңышлы тамамлағас, Башҡорт дәүләт университетының проректоры итеп тәғәйенләнә. Был үтә лә яуаплы, көнө буйы һигеҙ сәғәт эш урынында булыуҙы талап иткән административ вазифаны атҡарыу менән бер рәттән университеттың башҡорт-рус бүлеге өсөн уҡыу планын төҙөй, быға тиклем уҡытылмаған өр-яңы фәндәр: төрки телдәренең сағыштырма грамматикаһын, башҡорт теленең тарихи грамматикаһын, башҡорт әҙәби теленең тарихын, иҫке төрки телен индерә, уларҙың программаларын төҙөй; урал-алтай телдәре буйынса ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара. Иҫке төрки телен уҡытыуҙы уҡыу планына индереүҙе юллап Мәскәү тарафтарына әллә күпме хаттар яҙа.

Бөгөн иҫке төрки телендә яҙылған әҙәбиәт, китаптар халҡыбыҙға ҡайтарылған икән – был профессор Кейекбаевтың фәнни һәм граждანлыҡ ҡаһарманлығы арҡаһында, тип әйтергә хаҡлыбыҙ.

1950 йылға тиклем Башҡорт дәүләт педагогия институтының башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегендә «Башҡорт теленең тарихи грамматикаһы» тигән фән бөтөнләй уҡытылмаған. «Башҡорт теленең тарихы һәм диалектологияһы» тигән 34 сәғәтлек бер курс ҡына уҡытылған була. 1950 йылда башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлеге өсөн уҡыу планы төҙөгәндә башҡорт теленең тарихи грамматикаһын айырым фән итеп уҡытыу мәсьәләһе ҡуйыла. Ләкин ҡайһы бер башҡорт телселәре (Ҡ. Әхмәров һәм З. Шакиров), ул фән әле беҙҙә юҡ һәм ул бөтөнләй эшләнмәгән, тип башҡорт теленең тарихи грамматикаһын айырым фән итеп уҡытыуға ҡаршы төшәләр, һәм ул фән уҡыу планына индерелмәй ҡала. Ж. Ғ. Кейекбаев башҡорт теленең тарихи грамматикаһын тыуҙырырға мөмкинлектәр булыуҙы иҫбат итеп «Әҙәби Башҡортостан» журналында махсус мәҡәлә менән сығыш яһай» [5].

1951/ 1952 уҡыу йылында башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегенең уҡыу планы яңынан ҡаралып, уға үҙгәртмәләр индерелә, һәм шул ваҡытта быға тиклем йәшәп килгән «Башҡорт теленең тарихы һәм диалектологияһы» тигән 34 сәғәтлек курс, икегә бүленеп, уҡыу планына икеһе ике үҙ аллы фән итеп индерелә: «Башҡорт теленең тарихы» (54 сәғәтлек курс) һәм «Башҡорт диалектологияһы» (36 сәғәтлек курс).

Уҡыу планы нигеҙендә «Башҡорт теленең тарихы» тигән курс 1951/1952 уҡыу йылынан алып уҡытыла башлай. 1951 йылдың көҙөндә курстың

[4] ЦГИА РБ. ф.Р-5085. оп.1.д.235. с.50.
[5] «Әҙәби Башҡортостан» журналы. 1951, № 5.

программаһы төҙөлә һәм ул программа РСФСР Мәғариф министрлығы тарафынан раҫлана. Был программаларҙың авторы Ж. Ғ. Кейекбаев була.

«Курсты төҙөү һәм уҡытыу өсөн, академик А. А. Шахматовтың әйтеүе буйынса, иң ышаныслы һәм иң абруйлы сығанаҡ булған хәҙерге йәнле башҡорт һөйләштәренә нигеҙләнергә тура килде,– тип яҙа ғалим.– Ләкин башҡорт теле кафедраһының ҡарамағында башҡорт диалекттары буйынса бер ниндәй ҙә материал (эшләнмәгән сей материал йәки мәҡәлә рәүешендә яҙылған бер әйбер ҙә) юҡ ине. Башҡорт диалекттары һәм фольклоры буйынса булған 16 экспедицияның материалдары ул ваҡыттағы М. Ғафури исемендәге Тел, әҙәбиәт һәм тарих институтында эшләнмәгән көйө һаҡлана ине»[6]. Башҡорт диалектологияһы буйынса ул йылдарҙа айырым китап рәүешендә монография ла баҫылып сыҡмаған була.

Ошо хәлдәрҙе иҫәпкә алып, башҡорт теле кафедраһының алдында хәҙерге йәнле башҡорт халыҡ һөйләштәре буйынса яңы материал туплау мәсьәләһе килеп тыуа. 1951/1952 уҡыу йылында башҡорт диалекттарын киң масштабта өйрәнеүҙе кафедра үҙенең планына индерә.

Быға СССР Юғары мәғлүмәт министрлығының 1951 йылдың 7 августындағы 1332-се һанлы «Тел ғилеме буйынса уҡытыу эштәрен һәм ғилми эштәрҙе артабан яҡшыртыу саралары тураһында» тигән бойороғо ыңғай йоғонто яһай. Был бойороҡта Советтар Союзында милли телдәрҙең тарихи грамматикаларын тыуҙырыу һәм халыҡ һөйләштәренең, уларҙың тарихын өйрәнеүҙе көсәйтеү һ.б. тураһында мәсьәлә бөтә киңлеге менән ҡуйылған була. Ошо бойороҡ нигеҙендә башҡорт теле кафедраһы 1952 йылдың ғинуар-февралендә өлкән курс студенттарынан йәнле башҡорт һөйләштәрен өйрәнеү буйынса беренсе диалектологик экспедиция ойоштора. Ғалим студенттар өсөн башҡорт теленең диалект материалдарын йыйнау өсөн күрһәтмәләр (инструкция) төҙөгән. Йыйылған материалдар бер ни тиклем эшкәртелеп, 10 баҫма табаҡ күләмендә ҡулъяҙма хоҡуғында «Диалектологик журнал» сығарыла [7].

1952 йылдың йәйендә, йәйге каникулдар мәлендә, башҡорт теле кафедраһы киңерәк күләмдә икенсе диалектологик экспедиция ойоштора. Был экспедиция материалдарынан да ҡулъяҙма хоҡуғында йыйынтыҡ төҙөлә. 1954 йылдың йәйендә кафедра өсөнсө диалектологик экспедиция ойоштора, уның материалдарынан да 10 табаҡ күләмендә «Диалектологик йыйынтыҡ» донъя күрә [8].

2-се һәм 3-сө экспедициялар ваҡытында тик бер Башҡорт АССР-ы территорияһындағы йәнле халыҡ һөйләштәре генә түгел, уға сиктәш булған Силәбе һәм Һамар өлкәләрендәге башҡорт һөйләштәре лә өйрәнелә.

Үткәрелгән өс экспедиция ваҡытында Башҡортостан, Силәбе, Ырымбур өлкәләре территорияһындағы 28 башҡорт районындағы йөҙҙән ашыу башҡорт, татар ауылдарының һөйләше өйрәнелә. Диалект материалдары ауылдың һөйләше буйынса студенттарға курс эштәре биреү һәм ситтән тороп уҡыусы студенттарға ауылдарҙың һөйләше буйынса контроль эштәр биреү юлы менән дә йыйнала. Был осорҙа кафедра, башҡорт диалекттарын өйрәнеүҙе юлға һалыу менән бер рәттән, «Башҡорт теленең тарихы» тигән курс өсөн дә, «Башҡорт диалектологияһы» курсы өсөн дә ҡиммәтле яңы материалдар туплау менән шөғөлләнә.

---

[6] *ЦГИА РБ. ф.Р-5085. оп.1.д.120. с.13.*
[7] *ЦГИА РБ. ф.Р-5085. оп.1.д.97.*
[8] *ЦГИА РБ -5085. оп.1.д.98.*

Ж. Ғ. Кейекбаевтың фәнни эшмәкәрлегенә, уның фәнни ҡараштарының формалашыуында исеме бөтә донъяға билдәле булған атаҡлы төрки телдәр белгесе, башҡорт лингвистикаһының нигеҙ таштарын һалыусы, СССР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, профессор Н. К. Дмитриевтың (1898 – 1954) йоғонтоһо ҙур була. Ошо урында Н. К. Дмитриевтың 1948 йылда нәшер ителгән «Башҡорт теле грамматикаһы» тигән китабын башҡорт теленә тәржемә итеүселәрҙең иң төпкә егелеп тартҡаны Ж. Ғ. Кейекбаев булғанын да иҫкә төшөрөп китеү урынлы булыр.

Мәскәүҙә сит телдәр институтында уҡыған сағында ул дөйөм тел ғилеме буйынса күренекле тел белгесе профессор Р. О. Шор һәм башҡа атаҡлы ғалимдарҙың лекцияларын тыңлай. Институт тамамлағас, байтаҡ йылдар мәктәптәрҙә, вуздарҙа немец теле уҡытып йөрөһә лә, башҡорт теле менән шөғөлләнеү уйын һис кенә лә иҫенән сығармай, сөнки ул үҙ туған телендә ижади эш менән шөғөлләнеү процесында башҡорт теленең фәнни дәрәжәлә өйрәнелеүе ни тиклем артта ҡалыуын яҡшы аңлай. Мәскәүҙә сит телдәр институтында уҡығанда 21 йәшлек студент Жәлил Кейекбаев П. И. Чайковский исемендәге Мәскәү дәүләт консерваторияһында яңы ғына асылған башҡорт студияһы студенттарына башҡорт теленән дәрестәр ҙә бирә.

1940 йылдың 18 мартында «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитендә баҫылған «Башҡорт телендәге ҡайһы бер мәсьәләләр тураһында» исемле мәҡәләһендә башҡорт яҙма әҙәби телен артабан үҫтереү, байытыу һәм камиллаштырыу өсөн ниндәй ҡәтғи саралар күрергә кәрәклеге хаҡында яҙа. Мәҡәләлә орфография проекты буйынса гәзит биттәрендә фекер алышыуҙы ойоштороруға тәҡдим итә. Мәҡәләлә ҡайһы бер һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатып, уларҙың ҡулланылышындағы айырмаларын күрһәтә. Башҡорт теленең әйтелеш нормаларын тәртипкә килтереү өсөн махсус комиссия төҙөргә кәрәклеге әйтелә: «Телде артабан байытыу, үҫтереү өсөн дөйөм халыҡ телен, халыҡ ижады әҫәрҙәрен төп нигеҙ итеп алырға кәрәк,– тип тамамлай Ж. Ғ. Кейекбаев үҙенең мәҡәләһен.

1940 йылда яҙылған был мәҡәләһендә ул башҡорт телен өйрәнеү буйынса көнүҙәктә торған мөһим мәсьәләләрҙе күтәреп сыға. Артабан бар ғүмерен башҡорт телен юғары фән дәрәжәһенә күтәреү юлында арымай-талмай хеҙмәт итеүгә бағышлай. Бөгөн мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында башҡорт теленең юғары фән кимәлендә уҡытылыуы, башҡорт теленең дәүләт теле, фән теле дәрәжәһенә күтәрелә барыуы, һис шикһеҙ, Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың фиҙакәр хеҙмәттәренең дә һөҙөмтәһе ул.

Ғалимдың докторлыҡ диссертацияһы – «Башҡорт теленең фонетикаһы (сағыштырма-тарихи тикшереүҙең тәжрибәһе)» – үҙе бер айырым фундаменталь хеҙмәт. Унда ул бай лингвистик материал нигеҙендә башҡорт теленең һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр системаһын бөтән төрки телдәре менән сағыштырып бирә, һуҙынҡылар менән тартынҡыларҙың тарихи үҫеше һәм үҙгәрешен күрһәтә, сингармонизм законын тулы итеп яҡтырта. Ғалимдың был хеҙмәтенә филология фәндәре докторы профессор Н. А. Баскаков, академик В. В. Решетов кеүек атаҡлы тюркологтар бик юғары ғилми баһа бирә.

Ж. Ғ. Кейекбаевтың был фәнни хеҙмәте Рәсәй тюркологтары араһында ғына түгел, хатта сит ил ғалимдары – лингвистары араһында ла ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. «Башҡорт теленең фонетикаһы» төрки телле республикаларҙағы юғары уҡыу йорттары өсөн дәреслек, уҡыу әсбабы булып хеҙмәт итә. Бынан тыш, ғалимдың башҡорт теленең лексикаһына, фразеологияһына, грамматик төҙөлөшөнә, диалектологияһына, стилистикаһына, топонимияһына,

орфографияһына һәм тарихи грамматикаһына арналған ғилми, лингвистик хеҙмәттәре бар. Уларҙы һанап сығыу ғына ла әллә күпме урынды алыр ине.

Жәлил Ғиниәт улы мәғариф эшенә лә ҙур әһәмиәт биргән. Әле кандидатлыҡ диссертацияһын да яҡламаған, Өфө авиация институтында немец телен уҡытып йөрөгән сағында уҡ, 1946 йылдың 17 майында, республиканың мәғариф министры С. Әлибаев исеменә «Башҡорт урта мәктәптәренең 5-се кластары өсөн немец теленән дәреслек төҙөү тураһында» хат яҙа: «Мәктәптәрҙә сит ил телдәрен уҡытыу хәҙер ҙур әһәмиәткә эйә булды. Партия һәм хөкүмәт был эшкә айырыуса ныҡ иғтибар итә. Ошо көндә башҡорт урта мәктәптәренең барыһында ла тиерлек немец теле уҡытыла. Телде уҡытыусыларҙың әҙерлек дәрәжәһе нисек булыуы бында ҡуҙғатылған мәсьәләгә инмәй-инеүен, ләкин, нисек кенә булмаһын, немец телен уҡытыусы ла, немец телен өйрәнеүсе балалар ҙа дәреслекһеҙ йонсойҙар. Немец теленән дәреслектәр юҡ дәрәжәһендә. Ул әле ҡала мәктәптәрендә шулай, ә ауыл мәктәптәре тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. Икенсенән, немец теле дәреслеге (йәшәп килгән стандарт дәреслек) рус балаларына иҫәпләнгән: бөтә уҡыу ҡағиҙәләре, грамматик ҡағиҙәләр рус телендә төшөндөрөлә һәм һүҙҙәр русса бирелгән. Ә бишенсе кластағы башҡорт уҡыусы бала рус телендә насар төшөнә әле йә бөтөнләй белмәй, бигерәк тә ауыл ерендәге урта һәм тулы түгел урта мәктәптәрҙәге 5-се класс уҡыусыһы. Тимәк, сит тел, ят тел башҡорт балаһына ят телдәрҙә яҙылған дәреслек аша уҡытыла, йәғни рус теле аша. Һөҙөмтәлә бала бик ҡыйын хәлдә ҡала.

Унан килеп, уҡытыусылар үҙҙәре лә рус теле аша уҡытырға тырышалар. Сөнки дәреслеге рус теле аша яҙылған. Юғарыла күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бер ни тиклем бөтөрөү өсөн мин үҙ өҫтөмә башҡорт урта мәктәптәренең 5-се кластары өсөн дәреслек төҙөү эшен алдым. Тик был эшкә Һеҙҙең ризалығығыҙ кәрәк. Дәреслекте мин стандарт дәреслеккә нигеҙләп төҙөйөм… Минең хеҙмәт юҡҡа сыҡмаһын өсөн, ышанып эшләү өсөн был эш буйынса нәшриәт менән договор төҙөү кәрәк.

Быларҙың бөтәһе өсөн дә Һеҙҙең тарафтан яҙма ризалыҡ кәрәк. Шул ризалығығыҙҙы биреүегеҙҙе һорайым»[9]. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, йәш ғалимдың был тәҡдиме иғтибарһыҙ ҡала, башҡорт мәктәптәренең бишенсе класс уҡыусылары өсөн Кейекбаев тарафынан яҙылған немец теле дәреслеге донъя күрмәй.

Жәлил Кейекбаев тел фәненең барлыҡ йүнәлешендә лә һөҙөмтәле эшләй. 1966 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә уның «Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы» китабы баҫылып сыға. Жәлил Ғиниәт улының архивында ошо китапҡа бәйле бер документ һаҡлана. Был – китап нәшриәтенең бүлек мөдире 1965 йылдың 11 июнендә ҡултамғаһын ҡуйған расписка. Унда китап нәшриәтенең дәреслектәр бүлеге мөдиренең профессор Ж. Ғ. Кейекбаевтың «Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы» китабының ҡулъяҙмаһын (357 бит), кире ҡайтарып биреү шарты менән, ҡабул итеүе хаҡында яҙылған. Сөнки ошо ҡулъяҙманың 1964 йылдың 4 мартында тапшырылған данаһын нәшриәттә юғалтҡандар икән. Шуға күрә Жәлил Ғиниәт улы был юлы үҙ ҡулы менән расписка яҙып, ҡулъяҙманы ҡабул иткән бүлек мөдиренең ҡултамғаһын алырға мәжбүр була.

Ғалимдың шәкерте, күренекле ғалим, филология фәндәре докторы, академик, БДУ профессоры М. В. Зәйнуллин әйтеүенсә: «…башҡорт теленең һүҙлек

[9] *ЦГИА РБ. ф.Р-5085. оп.1. д.234. с.117.*

составы был хеҙмәткә тиклем монографик планда махсус тикшерелгәне юҡ ине. Ғалим был хеҙмәтендә башҡорт тел ғилемендә тәү тапҡыр лексикологияны айырым бер тармаҡ (бүлек) кимәленә күтәреп, уға яңы теоретик күҙлектән баһа бирә»[10].

Башҡорт дәүләт университеты 2002 йылда ғалимдың был хеҙмәтен, тыуыуына 90 йыл тулыу айҡанлы, профессор М. В. Зәйнуллин редакторлығында ҡайтанан баҫып сығарҙы.

Ғүмеренең һуңғы ун йылында Жәлил Ғиниәт улы ике ҙур монография – «Төрки телдәренең сағыштырма грамматикаһы һәм «Урал-алтай телдәренең тарихи грамматик нигеҙҙәре» өҫтөндә арымай-талмай эшләй. Быларҙың беренсеһен яҙыу өсөн ғалим бөтә төрки телдәрҙең лексикаһы менән морфологик төҙөлөшөн ентекләп тикшерә, был ҡәрҙәш телдәргә хас булған уртаҡ, дөйөм законлылыҡтарҙы асып бирә, шул уҡ ваҡытта һәр бер төрки теленең үҙенсәлеген бай фактик материал нигеҙендә күрһәтә. Ғалимдың икенсе хеҙмәте 1996 йылда, ул ваҡытта филология фәндәре кандидаты, йәш ғалим И. Ғ. Илешевтың фиҙакәр эшмәкәрлеге арҡаһында айырым китап булып нәшер ителә. Шулай итеп, 32 йылдан һуң, ғалим Кейекбаевтың хыялы тормошҡа аша – «Урал-алтай телдәренең тарихи грамматик нигеҙҙәре» китабы донъя күрә. Китаптың «Ҡылым» бүлеге әлегә нәшер ителмәгән, ҡулъяҙма килеш һаҡлана.

Ж. Ғ. Кейекбаевтың ғилми хеҙмәттәрен баҫып сығарыу өсөн күргән михнәттәре тураһында айырым бер китап яҙырлыҡ. Башҡорт тел белеменең киләсәк ғалимдары уны мотлаҡ яҙасаҡ әле.

Профессор Ж. Ғ. Кейекбаев – йөҙҙән ашыу ғилми хеҙмәт авторы, уның монографияларын Башҡортостанда ғына түгел, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Татарстанда, Урта Азияла, Әзербайжанда, Алтайҙа, Якутияла, хатта сит илдәрҙә: Эстонияла, Грузияла, Болгарияла, Венгрияла, Финляндияла, Төркиәлә, Германияла, Американа ла беләләр. Ғалимдың архивында ошо илдәрҙән килгән байтаҡ хаттар һаҡлана.

Бына 1960 йылдың декабрендә Американың Гарвард университетында лекция уҡыған профессор Омельян Pritsekтың хаты: «Уважаемый профессор Дж. Г. Киекбаев! Поздравляю с Рождеством и с Новым годом! Очень жалею, что не имел возможности участвовать на Московском конгрессе ориенталистов и встретиться с Вами.

В текущ. году 1960/1961 (до конца мая 1961) я читаю лекции как гость Harvard University. Прошу не забывать обо мне. Мой адрес на конверте»[11].

Ә бына Американың Калифорния университетынан килгән хат. Ул башҡортса яҙылған. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Жәлил Ғиниәт улына был хатты алып уҡырға насип булмай. Хат 1968 йылдың 23 мартында Өфөгә адресатына килеп етә. Ғалимдың йөрәге 1968 йылдың 19 мартында тибеүҙән туҡтай.

«Лос Ангалас 8.3.1968.

Ҡәҙерле профессор Киекбаев!

25.12.67 даталы хатығыҙҙы алғас шунда уҡ китап һатыусыға кереп Дачи

---

[10] *Зайнуллин М. В. Башҡорт халҡының аҫыл улы. // Профессор ДЖ.Г.Киекбаев и проблемы современной тюркологии. Материалы Всероссийской научной конференции. Уфа: РИО БашГУ, 2006. с.14.*

[11] *ЦГИА РБ. ф .Р-5085. оп.1.д.241. с.14.*

Дюланың[12] әҫәренә заказ биргәнмен. Ике аҙна эсендә китап килгән.

Мин китапты ул көн адресегеҙгә ебәргәнмен. Китап һеҙгә килгән тип өмөтләнәм.

Мин авгусҡа тиклем Лос Англаластағы Калифорния университетында тюркология тағы иранистика өйрәтеүселекен яһаймын. Башҡорт теле дәрестәр ҙә бирәмен. Теге дәрестәрҙә түрт кеше килә. Уларға Башҡортостан менән башҡорт халҡы хаҡында күп һөйләп бирәмен.

Хатығыҙ таҡы Будапештәгә ебәргән китаптарығыҙ өсөн күп рәхмәт.

Күп сәләм менән А. Бадрок Лигети /A. BODROG LGETI/ [13].

(Хат авторы нисек яҙған, шулай бирелде.– **Р.Б.**).

Ж. Ғ. Кейекбаев республикала һәм илебеҙҙә фәнни кадрҙар әҙерләү эшендә лә әүҙем ҡатнаша. Ул ике тиҫтәгә яҡын фән кандидаты һәм докторы әҙерләгән.

Илдең байтаҡ университеттарында: Ҡазанда, Алматыла, Ташкентта, Якутскиҙа, Баҡыла, Эстонияның Тарту университетында, Венгрияның Будапешт университетында лекциялдар уҡыған, башҡорт халҡы, башҡорт телен халыҡара кимәлдә танылыуына булышлыҡ иткән телсе ғалим Ж. Ғ. Кейекбаев.

Ж. Ғ. Кейекбаев уҡытҡан, ғалим менән аралашырға насип булған кешеләр уның тураһында үҙҙәренең иҫтәлектәрендә уның намыҫлылығын, кешелеклелеген, ябайлығын, ярҙамсыллығын һоҡланып хәтергә ала.

«Жәлил ағайҙың тура һүҙлелеге, кәрәк урында сатната әйтә белеүе лә уның уҡыусыларына, коллегаларына билдәле. Ләкин ул бер ваҡытта ла тупаҫ итеп, кешене рәнйетерлек хәбәр һөйләмәне, ғәйепһеҙҙән ғәйеп тапманы. Эш юҫығында ялғанды күрһә, буш хәбәр һөйләгәнде ишетһә, тик тороп та ҡала алманы»,[14] – тип яҙған филология фәндәре докторы, профессор З. Ғ. Ураҡсин.

«Минең иғтибарымды Жәлил Ғиниәтовичтың ябай һәм төҙөк яҙыу стиле ныҡ биләй,– тип яҙа академик Ғ. Б. Хөсәйенов.– Ғилми һәм әҙәби стиле икеһе лә. Был хаҡта уның менән һөйләшкәндәрем дә булды. «Стиль ябайлығы һәм төҙөклөгө – фекер асыҡлығы билдәһе. Ҡатмарлы фәнни фекерҙәрҙе лә ябай һәм асыҡ итеп әйтеп бирә белеү – үҙе бер оҫталыҡ. Халыҡтың үҙен тыңлап ҡара, донъяның ҡатмарлы мәсьәләләре, тормош философияһы хаҡында нисек асыҡ һәм ябай итеп сатнатып әйтеп бирә бит. Ана кемдән өйрәнергә кәрәк беҙгә» – шундайыраҡ һүҙҙәре зиһенемә һеңеп ҡалған»[15].

Бөгөн уның кисәге шәкерттәре һәм коллегалары илебеҙ фәненең абруйлы ғалимдары: филология фәндәре докторы, профессор Ғ. Ғ. Сәйетбатталов, филология фәндәре докторы, БР Фәндәр академияһы академигы, Ж. Ғ. Кейекбаев исемендәге премия лауреаты, БДУ профессоры М. В. Зәйнуллин, филология фәндәре докторы, шағир Р. Шәкүр, филология фәндәре докторы, профессор Ә. М. Сөләймәнов һәм башҡалар. Ғалимдың шәкерттәре араһында билдәле шағирҙар, яҙыусылар, журналистар, фән кандидаттары И. Кинйәбулатов, С. Әлибаев, В. Әхмәҙиев, Р. Хажиев һәм йөҙәрләгән башҡорт теле уҡытыусылары бар. Шағир Рәми Ғарипов үҙенең киң билдәле «Аманат» ҡобайырын: «Жәлил ағай Кейекбаев ҡәберенә бер ус тупрағым»,– тип ғалимдың яҡты иҫтәлегенә арнаған.

Жәлил Ғиниәт улының архивында, билдәле телсе ғалимдарҙың хаттары

---

[12] *Дачи Дюла – венгр ғалимы.*

[13] *ЦГИА РБ. ф.Р-5085. оп.1.д.234. с.93.*

[14] *Жәлил Кейекбаев тураһында иҫтәлектәр. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте. 1989. 45-се бит.*

[15] *Шунда уҡ. 50-се бит.*

менән бер рәттән, уҡытыусылар, студенттар һәм мәктәп уҡыусыларының да хаттары һаҡлана. Бигерәк тә ауылдарҙан, мәктәптәрҙән килгән хаттарға ғалим үҙ ҡулы менән датаһын да ҡуйып, «яуап бирелде» тип яҙып ҡуйған. Был уның кешеләргә ҡарата ниндәй яуаплы мөнәсәбәттә булыуы тураһында һөйләй.

Бөгөн башҡорт тел ғилеме үҙенең ҡаҙаныштары, донъя кимәлендә танылыу табыуы менән Башҡорт дәүләт университетының беренсе проректоры, атаҡлы тел ғалимы, профессор Ж. Ғ. Кейекбаевҡа һәм уның арҙаҡлы уҡыусыларына бурыслы.

Фәнни хеҙмәттәр яҙыу менән бер рәттән, ғалим талантлы яҙыусы ла була, башҡорт әҙәбиәтен байытыуға «Туғандар һәм таныштар» романын яҙып ҙур өлөш индерә. Ж. Ғ. Кейекбаев башҡорт әҙәбиәтендә утыҙынсы йылдарҙан уҡ «Ж. Табын» псевдонимы менән билдәле. Немец яҙыусыларының әҫәрҙәрен туранан-тура башҡорт теленә тәржемә итеүсе берҙән-бер белгес була ул. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ул Советтар Союзы Геройҙары Зөбәй Үтәғолов һәм Александр Матросов тураһында әҫәрҙәр ижад итә.

Уның ҡобайырҙары, әкиәттәре уҡыусылар тарафынан яратып ҡабул ителә. Бына кескәй уҡыусыларҙың ғалим-яҙыусының ижадына битараф булмауҙарының бер миҫалы: «Кейекбаев ағай, мин һинең 1960 йылда яҙылған «Әкиәттәр» тигән китабыңды уҡыным. Ундағы әкиәттәр беҙгә бик оҡшаны. Атайымдарға ҡысҡырып уҡыным. Болон, туғай һәм урманда йөрөгәндә ниндәй генә хайуан күрһәк тә, һинең әкиәтең иҫкә төшөп тора. Һиңә һорауым шул: тағы ла шундай китап яҙһаң, беҙҙең яҡҡа ебәр. Беҙҙең яҡҡа китап һуң килә. Минең адрес: Күгәрсен районы, Мораҡ ауыл Советы, Яҡшембәт ауылы, 3-сө класс уҡыусыһы Ҡалтаева Зәһира М.»[16].

Халҡыбыҙ зыялыларының Башҡорт дәүләт университетына Жәлил Кейекбаев исемен биреү тураһындағы бер нисә тиҫтә йылдар инде төрлө мөрәжәғәттәре ваҡыт-ваҡыт матбуғат биттәрендә күренеп ҡалһа ла, был мәсьәләгә анығ ҡына яуап юҡ бөгөнгө көндә. Бәлки, университеттың йөҙ йыллыҡ юбилейын билдәләгән йылда башҡорт телен фәнни дәрәжәгә күтәреп тикшергән, улай ғына ла түгел, башҡорт телен үҙенең ғилми хеҙмәттәре менән донъя кимәлендә танытыуға ирешкән телсе ғалимдың исемен университетҡа биреү мәсьәләһен уның әле иҫән шәкерттәре лә күтәреп алыр. Бөгөн арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең исемдәрен мәңгеләштереү йәһәтенән Башҡортостаныбыҙҙа күп эштәр эшләнә. Был – илебеҙ етәкселәренең башҡорт мәҙәниәтенә һәм фәненә һаҡсыл ҡарауҙарының һөҙөмтәһе. Ғилми хеҙмәттәре менән башҡорт телен донъя тел фәне даирәһенә алып сыҡҡан һәм унда танылыу яулауға ирешкән профессор Ж. Ғ. Кейекбаевтың исеменә үҙенең йөҙ йыллыҡ юбилейын билдәләгән уҡыу йорто күптән лайыҡ.

**Рәмзиә БИКӘНӘСОВА,**
**Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы**
**Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының**
**ғилми хеҙмәткәре.**

---

[16] *ЦГИА РБ. ф.Р-5085. оп.1.д.232. с.54.*

# ҒАЛИМ. ЕТӘКСЕ. ПЕДАГОГ.

Башҡорт дәүләт университетының бер быуат арауығындағы тарихында тәрән эҙ ҡалдырған шәхестәр бихисап. Шулар араһында Миҙхәт Фазлый улы Ғәйнуллиндың эшмәкәрлеге айырыуса иғтибарға лайыҡ. Уның егерме һигеҙ йыл буйы БДУ-ның уҡыу-уҡытыу буйынса проректоры вазифаһын башҡарыуы ғына ла күп нәмәләр хаҡында һөйләй.

Миҙхәт Фазлый улы Ғәйнуллин 1925 йылдың 13 ноябрендә Башҡортостандың Бүздәк районы Бәләкәй Өстүбә ауылында тыуа. Утыҙынсы йылдар аҙағында ғаиләләре менән күсеп, Ҡыйғы районының Асылғужа ауылында үҫә. 1942 йылда үҙе теләп хәрби училищеға китә. Тәүҙә – Силәбе авиамеханиктар училищеһында, артабан элемтәселәрҙең Ленинград хәрби инженерҙар училищеһында уҡый һәм 2-се Украина фронтында һауа десанты дивизияһында разведчиктар отряды командиры булып һуғышта ҡатнаша. Румыния, Венгрия, Чехословакия, Польша, Германия өсөн барған алыштарҙа өс тапҡыр яралана һәм контузия ала. I дәрәжә Ватан һуғышы, III дәрәжә Дан ордены, миҙалдар менән бүләкләнә. 1946 йылдың аҙағында демобилизациялана. Армиянан ҡайтҡас, Бүздәк райфоһында һәм район хәрби комиссариатында эшләй.

1947 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының филология факультетына уҡырға инә. 1951 йылда институтты уңышлы тамамлағандан һуң, СССР Фәндәр академияһының М. Горький исемендәге Донъя әҙәбиәте институты аспирантураһына уҡырға китә. 1954 йылда аспирантураны уңышлы тамамлап, филология фәндәре кандидатлығына диссертация яҡлай һәм СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалына ғилми хеҙмәткәр булып эшкә ҡайта. 1957 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының яуаплы секретары итеп һайлана.

1958 йылдың башында КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитетының фән, мәҙәниәт һәм мәктәптәр бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. 1961–1989 йылдарҙа БДУ-ның уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса проректоры була. Университетта журналистика бүлеге асылыуы ла Миҙхәт Фазлый улының туранан-тура ярҙамы һәм эшмәкәрлегенә бәйле. 1989 йылда яңы ғына асылған журналистика бүлеген етәкләп, коллектив туплай, ойоштороу эштәрен уңышлы башҡарып сыға. Тап ошо осорҙа М. Ғәйнуллиндың ижади башланғысында булған журналистик эшмәкәрлеге яңы һулыш ала.

Миҙхәт Ғәйнуллин фронт гәзиттәрендә хәбәрсе булып яҙыша башлай. Әҙәби тәнҡит менән ул институтта уҡыған мәлендә ныҡлап ҡыҙыҡһына. Айырыуса ул драматургия жанры проблемалары һәм театр тәнҡите өлкәһендә әүҙем эшләй. Гәзит-журналдарҙа, айырым йыйынтыҡтарҙа сыҡҡан мәҡәләләрҙең, рецензияларҙың, урта мәктәптәр һәм вуздар өсөн дәреслектәр һәм хрестоматияларҙың авторы. Уның тәүге ҙур хеҙмәттәренең береһе – күренекле башҡорт драматургы Сәғит Мифтахов драмаларын ентекле тикшергән монографияһы. Был хеҙмәтендә ул талантлы драматургтың әҫәрҙәрен анализлай, дөйөм башҡорт драматургияһының үҫеш этаптары, театр сәнғәтенең милли ерлектә формалашыуы һәм камиллашыуы тураһында

дәлилле эҙләнеүҙәр уҙғара.



*1917 йылға тиклемге башҡорт әҙәбиәте кафедраһы.*

М. Кәрим, И. Абдуллин, К. Мәргән, Р. Ниғмәти, Н. Нәжми, Ә. Мирзаһитов, Н. Асанбаев, Ә. Атнабаев кеүек драматургтарҙың айырым әҫәрҙәре һәм дөйөм ижады хаҡындағы, Салауат, Сибай, Стәрлетамаҡ театрҙары репертуары тураһындағы тәүге һүҙҙәрҙе ул әйтте һәм даими күҙәтеүҙәр яһаны. Башҡорт әҙәбиәте тарихы очерктарының рус telендә сыҡҡан ике томлығында (Уфа, 1963, 1966) ул башорт драматургияһының тәүге аҙымдарынан алып хәҙерге көндәргәсә үҫеш юлдарын байҡаны, әҙәбиәт тарихында беренсе булып ғилми тикшеренеүҙәр яһаны һәм уларҙы фән юғарылығына күтәрҙе.

Күренекле башҡорт яҙыусыларының әҙәби мираҫын уҡыусыларға еткереү буйынса ла ул күп көс һалды. А. Таһировтың дүрт томлыҡ әҫәрҙәрен башҡорт телендә, бер томлыҡ әҫәрҙәрен Мәскәү һәм Өфөлә рус телендә, С. Мифтахов, Н. Ҡәрип, С. Ханов кеүек яҙыусыларҙың һайланма әҫәрҙәрен, башҡорт драматургияһы буйынса антологияның ике китабын баҫтырыуға күп көс һалды.

Филология фәндәре докторы, профессор Миҙхәт Фазлый улы Ғәйнуллиндың “Ысынбарлыҡ. Конфликт. Характер” тигән монографияһы күләм һәм йөкмәтке йәһәтенән дә бай. Биш бүлектән торған фәнни йыйынтыкта башҡорт драматургияһының үҫеү юлдары һәм проблемалары өйрәнелә, дөйөмләштерелә. Тәүге бүлектә башҡорт драматургияһының инештәре һәм формалашыу юлдарын Ғ. Ниязбаев, А. Таһиров, М. Ғафури, Х. Ғәбитов, М. Буранғолов әҫәрҙәре аша күрһәтә. Ә икенсе бүлектә С. Мифтахов, Ҡ. Даян, Б. Бикбай драмалары тикшереү объекты булараҡ өйрәнелә һәм үҙенсәлекле һығымталар яһала. Ә өсөнсө бүлек Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ижад ителгән сәхнә әҫәрҙәрен тикшереүгә арналған. К. Мәргәндең “Бер ғаиләлә”, “Яу”, Б. Бикбайҙың “Ватан саҡыра”, “Ҡаһым түрә”, А. Мөбәрәковтың “Бисәкәй”, “Һүнмәҫ йөрәктәр”, С. Кулибайҙың “Йондоҙ” һәм һуғышта һәләк булған Н. Ҡәриптең “Алмашсылар” драмаларындағы героик осор анализлана. М. Ғәйнуллин дүртенсе һәм бишенсе бүлектәрҙә М. Кәрим, З. Биишева, Н. Нәжми, И. Абдуллин, Ә. Мирзаһитов, Н. Асанбаев, Б. Бикбай, А. Абдуллиндың классик әҫәрҙәргә әйләнгән драмаларын ентекле тикшерә. Теоретик мәсьәләләргә ныҡлы урын бирә.

М. Ғәйнуллиндың 1985 йылда сыҡҡан “Башҡорт драматургияһының үҫеү юлдары” монографияһы ла фән донъяһында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Хеҙмәтендә ғалим башҡорт драматургияһының үҫеш тенденцияларын күберәк теоретик күҙлектән тикшерә. Уның һығымталары объектив, күп төрлө сағыштырыуҙар менән йәнәш бирелә.

Бер нисә тиҫтәләрсә йылдар инде башҡорт урта мәктәптәренең Х класс уҡыусылары өсөн дәреслек һәм хрестоматиялар авторҙарының береһе булды.

М. Ғәйнуллин, әҙәби тәнҡит, әҙәбиәт фәне буйынса эҙләнеүҙәр үткәреү менән

бергә, художестволы очерктар һәм публицистика буйынса ла актив эшләне. Республиканың йәмәғәт тормошонда актив ҡатнашты. Оҙаҡ йылдар «Ағиҙел» һәм «Пионер» журналдары редколлегия ағзаһы, Союздың әҙәби тәнҡит секцияһы етәксеһе булды. СССР-ҙың сит илдәр менән дуҫлыҡ һәм мәҙәниәт йәмғиәтенең үҙәк советы ағзаһы, СССР һәм ГДР дуҫлыҡ йәмғиәтенең үҙәк идараһы ағзаһы, СССР һәм ГДР дуҫлыҡ йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһе рәйесе, филология фәндәренә кандидатлыҡҡа СССР халыҡтары әҙәбиәте, СССР халыҡтары телдәре буйынса университеттағы махсуслаштырылған ғилми совет рәйесе булараҡ ҙур эштәр башҡарҙы.

Миҙхәт Фазлый улы тормошоноң иң яҡты һәм иң уңышлы йылдары Башҡорт дәүләт университеты менән бәйле. Ул арҙаҡлы белгес, талапсан етәксе, ғәҙел ойоштороусы һәм бик ябай, изге күңелле, ихлас кеше булып танылды. Уның әҙәбиәт тарихы буйынса дәрестәрендә миңә лә булырға, бер коллективта тиҫтә йылдар бергә эшләргә, ул етәкләгән ғилми советта кандидатлыҡ диссертацияһы яҡларға тура килде, ғалимдың атайҙарса ҡарашын, ғәҙел, итәғәтле кеше икәнлеген һәр ваҡыт тойоп һәм күреп йәшәргә яҙҙы.

БДУ-ла журналистика бүлеге асылғас, кафедраның тәүге мөдире булараҡ, бихисап мәсьәләләр сисергә тура килде уға, студенттарға дөрөҫ профессиональ йүнәлеш бирергә ярҙамлашты. Ысынлап та, ошо йылдарҙа олуғ ғалим студенттарҙың иң яҡын кәңәшсеһе лә, олпат уҡытыусыһы ла булып ҡалды. Бөгөнгө көндә Башҡортостан һәм башҡа төбәктәрҙә хеҙмәт итеүсе тиҫтәләгән журналистар, уҡытыусылар Миҙхәт Ғәйнуллиндың дәрестәрен, файҙалы кәңәштәрен хөрмәтләп иҫкә алаларҙыр, сөнки ғалимдың ғилми хеҙмәттәрен, ойоштороу эшендәге башланғыстарын уның уҡыусылары уңышлы дауам итә. Уйлап ҡараһаң, ошонан да оло баһа бармы икән?!

**Зәки ӘЛИБАЕВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

---

# ФӘН ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ЮЛЫНДА

Үҙенең 100 йыллығын билдәләүсе Башҡорт дәүләт университетында бөтә республика һәм илебеҙгә танылған уҡыу йортоноң йөҙөн билдәләүсе ғалим-педагогтар байтаҡ. Башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһы мөдире, филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Фәндәр академияһы ағза-корреспонденты, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Роберт Нурмөхәмәт улы Байымов – шундай олпат шәхестәребеҙҙең береһе. Уны ысын мәғәнәһендә университетыбыҙҙың патриоты, милли мәғариф һәм фән аҡһаҡалы тип атарға мөмкин. Күренекле яҙыусы һәм педагог, әҙәбиәт ғилеме белгесенең бөтә ғүмер юлы әлеге уҡыу йорто менән айырылғыһыҙ бәйләнгән.

Р.Н.Байымов бик күп арҙаҡлы шәхестәр биргән бәрәкәтле Ҡырмыҫҡалы районының Үтәгән ауылында 1937 йылдың 10 ғинуарында донъяға килә. Тыуған ауыл һәм Биш-Уңғар ауыл мәктәптәрендә ете йыллыҡ һәм урта белем алыу, әрме хеҙмәте һәм БДУ-ла уҡыу йылдары, Мәскәү университетында аспирантура үтеү һәм ғилми эшкә тотоноу – уны шәхес һәм ғалим итеп формалаштырыусы мөһим һуҡмаҡтар.

Роберт Байымов студент һәм аспирант йылдарында уҡ әҙәби һәм ғилми ижад менән етди шөғөлләнә башлай, уның айырым проблемалар һәм яҙыусылар ижады буйынса хеҙмәттәре ил кимәлендәге абруйлы баҫмаларҙа донъя күрә. “Литературная

газета", "Литературная Россия" аҙналыҡтарында, "Дружба народов", "Вопросы литературы" һымаҡ журналдарҙа сыҡҡан рецензиялары һәм мәҡәләләре фәнгә төплө фекерле йәш тәнҡитсе килеүен хәбәр итте. "Ижади биҙәктәр" (1977) исемле ғилми йыйынтығы иһә уны киң йәмәғәтселеккә өлгөрөп еткән әҙәбиәт белгесе итеп танытты. Был китапта күренекле башҡорт прозаиктары З.Биишева, Рәйес Низамов, Я.Вәлиев, И.Ғиззәтуллин, Н.Мусин, Ғ.Ибраһимов, В.Исхаҡов, С.Кулибай, А.Ғирфанов әҫәрҙәре, Х.Ғиләжев, Х.Кәрим, Ғ.Рамазанов шиғырҙары анализлана, шулай уҡ осор өсөн актуаль булған темаларға һәм проблемаларға ҡараш ташлана. Артабан Өфө һәм Мәскәү ҡалаларында рус телендә баҫылып сыҡҡан "Шаг в зрелость" (1975), "Башкирский историко-революционный роман" (1980), "Поискам нет конца" (1980), "Судьба жанра" (1984), "Истоки и устья: заметки о башкирской литературе" (1993) кеүек китап-монографиялары ла шул осор әҙәби тәнҡитенең матур ҡаҙаныштары булды.

Үткән быуаттың 90-сы йылдарында Роберт Байымовтың ғилми-ижади һәм ойоштороу эшмәкәрлегенең яңы этабы башланды. Ул етәкләгән кафедра әҙерләгән коллектив хеҙмәттәренең береһе – юғары уҡыу йорттары өсөн «ХХ быуат башҡорт әҙәбиәте» тигән дәреслек әҙәбиәт тарихын яңы ҡараштан баһалау йәһәтенән файҙалы һәм ваҡытлы булып сыҡты. Яңы дәреслек университет һәм уның филиалдарында, педколледж һәм гимназияларҙа белем алған студент-филологтар тарафынан ҙур һорау менән файҙаланылған төп сығанаҡтарҙың береһенә әүерелде.

Роберт Байымов – башҡорт әҙәбиәтен көнсығыш әҙәбиәттәре системаһында өйрәнеү буйынса ла төплө һәм емешле тикшеренеүҙәр алып барыусы ғалим. "Великие лики и литературные памятники Востока" (2005) исемле ҙур күләмле вуз дәреслегенең баҫылып сығыуы ғалимдың был өлкәләге үткән быуаттың 70-се йылдарынан башлаған күп йыллыҡ тәжрибә һәм эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһе ине. Был фундаменталь хеҙмәттә фарсы, ғәрәп, һинд әҙәбиәттәрендә боронғо осорҙарҙа уҡ ныҡынған иң мөһим һәм әһәмиәтле әҙәби күренештәренә ғилми күҙәтеүҙәр яһала, бар донъяға билдәле классик һүҙ оҫталарының ижад үҙенсәлектәре, мәҙәниәт тарихында тотҡан урындары билдәләнә, конкрет әҫәрҙәрҙең жанр-стиль, идея-эстетик йөкмәтке үҙенсәлектәре асыла. Был китап студенттарҙы ғына түгел, ғөмүмән, киң ҡатлам уҡыусыларҙы әҙәбиәт-ара бәйләнештәр, традиция һәм новаторлыҡ, йөкмәтке һәм форма һ.б. поэтика өлкәһенә ҡараған башҡа мәсьәләләр менән таныштыра, башҡорт әҙәби фекеренең шәреҡ әҙәбиәттәре менән туранан-тура мөнәсәбәттә йәшәүен, көнсығыш поэтик традицияларына нигеҙләнеп үҫеүен раҫлай. 2005 йылдың 9 июнендә Башҡорт дәүләт университетында әлеге дәреслектең гуманитар фәндәр өлкәһендә эшләүсе танылған ғалимдар, вуз етәкселеге, студенттар ҡатнашлығында исем туйын үткәреү ваҡиғаһы, уның матбуғатта киң яҡтыртылыуы профессор Р. Н. Байымов ҡуҙғатҡан проблемаларҙың актуаллеген һәм йәмәғәтселектә ҙур ҡыҙыҡһыныу табыуын асыҡ күрһәтте. Беҙҙеңсә, университет кимәлендә генә түгел, көнсығыш мәҙәниәтен өйрәнеүҙә, евразиялылыҡ проблемаларына иғтибарҙың арта барыуында, Башҡортостан Фәндәр академияһында "Проблемы востоковедения" журналы сыға башлауҙа ла Роберт Нурмөхәмәт улының өлөшө ҙур.

Һуңғы йылдарҙа ғалим етәкселегендә «Боронғо һәм урта быуаттарҙа башҡорт әҙәби фекере эволюцияһы» тигән өр-яңы темаға, тикшеренеү йүнәлешенә нигеҙ һалынды. Уның инициативаһы менән БДУ-ла, вуздың Сибай институтында, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһында ошо проблема буйынса бер нисә күсмә семинар, конференция уҙғарылды. Уларҙа республика вуздары уҡытыусылары һәм ғилми-тикшеренеү институттары хеҙмәткәрҙәре башҡорт әҙәбиәтенең боронғо осорҙарынан алып хәҙерге көндәргә тиклемге тарихи үҫеш үҙенсәлектәре, әҙәби-



*Роберт Байымов (уртала) башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһы мөдире.*

художестволы фекерҙе формалаштырыусы факторҙар һәм сығанаҡтар, терминология, рухи ҡомартҡыларҙы өйрәнеү принциптары, фольклор һәм әҙәбиәт бәйләнештәре, боронғо һәм урта быуаттар башҡорт әҙәби фекер эволюцияһы һәм уны айырым осорҙарға бүлеү һ.б. мәсьәләләрҙе күтәреп сыҡты. Әҙәбиәтсе-ғалимдарҙың методологик семинарҙарының эш һөҙөмтәһе буларак, байтаҡ ҡына тематик йыйынтыҡтар баҫыла торҙо, матбуғатта, атап әйткәндә, “Башҡортостан” гәзитендә, радио һәм телевидениела киң яҡтыртылды. Әйтергә кәрәк, 2007 йылдың февралендә әлеге тема буйынса тәүге сара буларак ойошторолған Бөтә Рәсәй ғилми конференцияһында Саха-Яҡут, Бүрәт, Тыва, Татарстан, Сыуашстан республикалары ғалимдары ла әүҙем ҡатнашҡайны. Бөгөн ошо тәжрибәләр нигеҙендә юғары уҡыу йорттары өсөн “Боронғо һәм урта быуаттар башҡорт әҙәбиәте тарихы” исемле дәреслек һәм уның әҙәби текстарҙы эсенә алған хрестоматияһын төҙөү буйынса әүҙем эш алып барыла. Былар, һис шикһеҙ, киләсәктә башҡорт әҙәбиәте тарихын, рухи мәҙәниәтебеҙ инештәрен өйрәнеүҙә яңы бейеклеккә күтәрер ҙур аҙым булырына оло ышаныс тыуҙыра.

Профессор Р.Н.Байымов – милли республика һәм өлкәләргә юғары квалификациялы ғилми кадрҙар әҙерләүгә күп көс һалған, үҙ мәктәбен булдырған абруйлы фән эшмәкәре. Ул – БДУ-ла Рәсәй халыҡтары телдәре һәм әҙәбиәттәре буйынса махсуслашҡан диссертацион советтың иң актив ағзаларының береһе. Уның етәкселегендә бер нисә тиҫтә ғалим докторлыҡ һәм кандидатлыҡ диссертацияларын уңышлы яҡланы. Улар араһында Ғ.С.Ҡунафин, М.Х.Иҙелбаев, З.Я.Шәрипова (БДУ), Р.Ш. Хәсәнов (Бөрө ДСГА), П.В.Сивцева, В.Б.Окорокова (Саха-Якутия), Т.А.Дугаржапова (Бурятия) һымаҡ билдәле фән докторҙары, профессорҙар бар. Хәҙер күптәре әҙәбиәт кафедралары, факультет етәкселәре, ғилми-тикшеренеү институттары директорҙары сифатында милли әҙәбиәттәрҙе үҫтереү юлында фиҙакәрлек менән, эшләп йөрөй. М.Аҡмулла исемендәге БДПУ, З.Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ БДПА-һы, БДУ-ның Сибай институты, Нефтекама, Учалы филиалдары, Силәбе дәүләт университетында хеҙмәт итеүсе ғалим-педагогтарҙың ҙур өлөшө – уның тәрбиәләнеүселәре. Р.Х. Илешева, Ә.М. Муллағолова, Л.Р. Кирәева, Ф.Ф. Ғайсина, З.Әлибаев, Ҡотләхмәтов, А.А. Фәтҡуллин, Г.Н. Ҡасҡынова, Н.Д. Исҡужина, З.Ғ. Мырҙағолова, Р.Д. Мостафина, Ф.Ш. Сибәғәтов, И.К. Янбаев һ.б. фән кандидаттары остаздарының кәңәштәре менән, уның даими иғтибарын тойоп ғилем үрҙәренә ышаныслы атлай. Бөгөн башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһы янындағы аспирантура һәм докторантурала ике тиҫтә самаһы дәғүәсе шөғөлләнә. Уларҙың һәр береһенең ҡыҙыҡһынып өйрәнгән темалары, йүнәлештәре бар; барыһы ла – китап һәм монографиялар, дәреслек һәм программалар авторҙары.

Башҡортостан Фәндәр академияһында тарихта беренсе булған “Йәдкәр” исемле ғилми журналдың (1995 йылдан) ойоштороусыһы һәм баш мөхәррире буларак та Роберт Байымовтың исеме таныулы. Бөгөн ул баҫма “Проблемы востоковедения” исеме аҫтында күләме ике мәртәбә ҙурайып донъя күрә башланы. Ғилми журналдың

республика гуманитар фәндәрен үҫтереүҙә, йәш ғалимдар әҙерләүҙә әһәмиәте ҙур.

Роберт Байымов халыҡҡа талантлы прозаик булараҡ та яҡшы таныш. Ул Башҡортостан һәм Рәсәй Яҙыусылар союзы ағзаһы, байтаҡ йылдар ойошманың проза һәм тәнҡит секцияларын етәкләп килде. Яҙыусының биш хикәйә һәм повестар китабы, өс романы донъя күрҙе. "Сарсау" (1980), "Бикле хазина" (1982), "Ҡайтырбыҙ һалдат булып" (1986), "Яуап бирер көн" (1989), "Төштәр ҡабатланмай" (2007) йыйынтыҡтарына ингән повесть һәм хикәйәләрендә, тәүге романында автор замандың киҫкен проблемаларын күтәреп сыҡты. 1996 йылда әҙиптең "Сыбар шоңҡар" исемле әҙәби-документаль романы республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды. XX быуаттың 90-сы йылдарында илдәге демократик үҙгәрештәр башланыу шарттарында революциянан һуңғы башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәксеһе Ә.Вәлиди эшмәкәрлеге хаҡында дөрөҫ һүҙҙе әйтеүсе тәүге күләмле әҫәр булыуы менән ул әҙәбиәт тарихында абруйлы урын тапты, был йүнәлештәге артабанғы ижади эҙләнеүҙәргә көслө йоғонто яһаны. Халыҡтың дөйөм рухи һәм тарихи аңы күтәрелеше күҙәтелгән осорҙа талапсан уҡыусы зауығын ҡәнәғәтләндерер был әҫәр йәмәғәтселек тарафынан йылы ҡабул ителде.

Әҙиптең "Каруан килә Бағдадтан" исемле һуңғы тарихи-документаль романы ла быйылғы "Ағиҙел" журналында (№1,2) баҫылып сыҡты. Был әҫәр авторҙы Булат Рафиҡов, Әхиәр Хәким, Ғайса Хөсәйенов һымаҡ билдәле тарихи проза оҫталары рәтенә ҡуя. Романды һуңғы йылдар башҡорт прозаһының сираттағы етди ҡаҙанышы тип баһаларға мөмкин, сөнки ул башҡорт тарихына тағы ла тәрәнерәк үтеп инеүе һәм ҙур географик киңлекте иңләүе, яңы проблемалар күтәреүе һәм концептуаль йөкмәткеһе менән әһәмиәтле. Әҫәр сюжетына нигеҙ итеп 922 йылда ислам динен таратыу миссияһы менән Ибн Фаҙлан етәкселегендәге ғәрәп илселегенең Иҙел буйҙарындағы Болғар дәүләтенә һәм Башҡорт иленә сәйәхәт итеү ваҡиғаһы алынған. Әгәр быға тиклем шул осорҙағы башҡорт тарихына ғәрәп сәйәхәтсеһе күҙлегенән ҡараш ташлана килһә, Р.Байымов иһә, киреһенсә, шул дәүер хәл-ваҡиғаларына башҡорт тарафынан сығып баһа бирә. Автор өсөн иң мөһиме, – үҙе әйткәненсә, Ибн Фаҙландың ошо миссияһы, ислам динен таратып йөрөүенең башҡорттарға нисек тәьҫир итеү мәсьәләһе". Роман һыйҙырған хәл-ваҡиғалар сылбыры X быуат менән генә сикләнмәй, ә тағы ла боронғораҡ, исламғаса тиклемге осорҙарҙы үҙ эсенә ала. Ғөмүмән, тарих, этнография һәм философия, дин, әҙәбиәт һәм мәҙәниәт, тел ғилеменә ҡараған ҡыҙыҡлы һәм ҡиммәтле мәғлүмәттәр менән тығыҙландырыуы әҫәрҙе энциклопедик йөкмәткеле итә.

Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Роберт Нурмөхәмәт улы Байымов бөгөн дә яңынан-яңы идеялар, ижади пландар менән янып йәшәй. Ул туған уҡыу йортонда милли мәғариф һәм фән юлында ярты быуатҡа яҡын арымай-талмай хеҙмәт итә. Уның етәкселегендә, уның фатихаһы менән тыуған ғилми башланғыстар хәҙер инде матур йолаға әйләнде. Ә традициялар мотлаҡ дауам ителергә һәм үҫтерелергә тейеш.

**Илшат ЯНБАЕВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

# МОСТАЙ КӘРИМ ИЖАДЫНДА ТӘБИҒӘТ*

“... Мин тәбиғәт менән бергә көләм, бергә илайым...” Тәбиғәт Мостай Кәрим ижадының айырып алғыһыҙ өлөшөн тәшкил итә. Ҙур рәссамдар һәр ваҡытта ла тәбиғәт менән кешенең бәйләнешен, тәбиғәттең рухи байлыҡ сығанағы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алған. Шағир-яҙыусылар, ата балалары кеүек үк, ниндәйҙер кимәлдә тыуған тәбиғәтенә: йә тау-таштарға, йә далаларға, йә ҡарлы киңлектәргә оҡшай.

Мостай Кәримдең тәбиғәткә мөрәжәғәт итеүе ике фактор менән нигеҙләнә: башҡорт халҡының быуаттар буйына килгән тәбиғәткә ҡарата һөйөүе һәм тыуған төйәк гүзәллеге. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: башҡорт халҡы борон-борондан тыуған еренә йәне-тәне менән бәйле булған. Тәбиғәт һәм малсылыҡ башҡорттарҙың характерын формалаштырған.

Тәбиғәт менән бәйләнеш кҫсмә халыҡтың ҡанына, аңына һеңгән, улар өсөн донъя һәм кешене айырып торған сик юҡ, тәбиғәттә үҙенең дауамын, сағылышын күрә ул. Тәбиғәт — фәһем биреүсе изге китап уға.

М. Кәрим ижадына нигеҙендә тәбиғәт һәм кеше берҙәмлеге ятҡан пантеистик ҡараш хас. Кеше үҙен тәбиғәттән айырып түгел, уның бер өлөшө итеп ҡарай. Тәбиғәтте шулай ҡабул итеүҙең тамырҙары мәжүсилек дәүеренә барып тоташа. Мәҫәлән, “Шиғырҙарым, ҡайҙа киттегеҙ?” шиғырындағы юлдарҙы алайыҡ:

*Менгән һайын офоҡ артҡа сикте.*
*Яҡыная барҙым ҡояшҡа.*
*Тыуған ерем ҡосағымда һымаҡ.*
*Уның ҡан тибешен тоймаҫҡа*
*Мөмкин түгел.*

*Һиңә башым һалам,*
*Алтын бишеккәйем, Уралым.*
*Үләндәрең — минең һеңлеләрем,*
*Ағастарың — минең туғаным...*
*Тик ҡайҙа һуң йырлар йырҙарым?*

Д. Хренков тәбиғәт илһамландырған ижадсы тураһында былай тип яҙа: “Мостайҙың рухиәтен китап байытҡан. Ләкин икенсе бер илһам сығанағы ла бар: башҡорт шағирҙарының тәбиғәт менән яҡын мөнәсәбәттә булыуы. Тәбиғәт улар өсөн камертон кеүегерәк. Илһамын шуға ҡарап көйләй улар”.

Шағирҙың тәбиғәткә һөйөүе тураһында артабан былай ти ул: “Юл түбәнгә

---

** Был хеҙмәт Рәсәй Гуманитар фәнни фондының "Башҡорт этнопедагогик мәҙәниәте донъя цивилизацияһы факторы булараҡ" ғилми-тикшеренеү проекты сиктәрендә Рәсәй Гуманитар фәнни фондының финанс ярҙамы менән башҡарылды. Проект 09-06-84601 а/у.*

табан йүгерә. Йорттар күҙҙән юғала. Тик ағастар ғына тау итәген ҡосаҡлаған. Бөтә тауыштар тынған, йылға ғына күңелле сылтырай.

— Һаумы, боронғо дуҫым — шишмә!

Ҡасандыр был шишмәгә Мостайҙы атаһы килтергән. Улар, алтын кеүек ҡомдар араһынан сыҡҡан шишмәгә ҡарап, тын ғына ултырған. Атаһы шишмәгә ҡулбитен йыуып, услап һыу эсә. Мостай ҙа уны ҡабатлай һәм һалҡын шишмәнән тештәре ҡамаша. Атаһы бер ни ҙә әйтмәй уға, ләкин Мостай өсөн ошо шишмә һыуы сафлыҡ үлсәме булып ҡала.

Иртәгә Мостай был шишмәгә улы Илгизде алып киләсәк. Аҙаҡ уның һыуын дуҫтары татыясаҡ. Дуҫтары был шишмә хаҡында бик күп шиғырҙар яҙасаҡ, әгәр уларҙы бергә йыйһаң, ҡалын бер китап булыр ине...

Дуҫтарының шишмә тураһындағы шиғырҙары һуңынан буласаҡ. Ә әлегә Мостай был шишмәлә ҡул-битен сайып, теш ҡамаштырғыс һыуын уртланы.

Был яҡтарҙың һыуы ғәжәп үҙенсәлеккә эйә! Арыған юлсыға дарман бирә ул!"

Мостай Кәрим өсөн тәбиғәт — ул донъяның мәңгелек матурлығы һәм гармонияһы. Тәбиғәт бер нindәй тышҡы баҫымһыҙ, наҙ һәм хәстәрлек менән кеше күңелдәрен дауалай. Беҙ шағирҙың тыуған тәбиғәт тураһындағы шиғырҙарын нәҡ шулай ҡабул итәбеҙ, улар беҙгә нәҡ шулай тәьҫир итә. “Тәбиғәт менән килешеп йәшәйем”, — тип әйтәсәк шағир үҙе 1986 йылды оҙатҡанда.

Шағир барыбыҙға ла былай тип өндәшә кеүек: бер мәлгә генә туҡталып, донъя мәшәҡәттәренән арынып, тирә-яҡҡа, беҙҙе уратып алған гүзәллеккә ҡарағыҙ, үләндәр шытҡанын, ел йырын, йылға тулҡындарын тыңлағыҙ, яңы көндөң тыуыуын хәбәр иткән таңға, төнгө йондоҙло күккә бағығыҙ... М. Кәрим шиғырҙарында тәбиғәттең йәнле картинаһы тәбиғәтте һөйөргә, һаҡларға ғына өйрәтмәй, улар, тәбиғәттең үҙе кеүек үк, донъяға ҡарашыбыҙҙы формалаштыра, характерыбыҙҙың әхлаҡи нигеҙе булып тора. Шағирҙың “Яҙғы тауыштар”, “Ләйсән”, “Төшлөктә яуып үткән ямғыр”, “Ҡыш уртаһында иҫкән ел”, “Торналар ҡайтҡан саҡта”, “Тауҙар”, “Саҡырмағыҙ, тауҙар...”, “Көҙгө Дим ярында”, “Һоро турғай”, “Ямғыр үтте”, “Таштар ғына илай”, “Бейек ҡояш аҫтында”, “Тау һуҡмағы буйлап” кеүек киң билдәле шиғырҙары шулар рәтенә керә.

Кеше менән тәбиғәт, әйткәнебеҙсә, М. Кәрим әҫәрҙәрендә бер бөтөн. Шиғырҙарҙағы хистәр ташҡыны һәм фекерҙәр оһоллоғо, әхлаҡи юғарылыҡ шунан килә. М. Ломунова раҫлауынса, “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” әҫәрендә яҙыусының тыуған төйәгенә мөхәббәте эҙмә-эҙлекле һүрәтләнә. Ул уҡыусыны тыуған ер тарихына ҡағылышлы легенда-риүәйәттәр менән таныштыра. “Әйткәндәй, — тип дауам итә М. Ломунова, — түбәндәге юлдарҙы үҙегеҙ уҡып ҡарағыҙ:

“Кескәй генә ямғыр тамсылары, әйтерһең дә, күктә аҙашып ҡалған, һирәкләп ергә тамды. Бәлки, был тамсылар ямғыр балаларылыр, улар уйынға мәшғүл булып, эре тамсылар менән бергә таммай ҡалғандыр, ни тиһәң дә, балалар, уйынға мәшғүл булһалар, донъяһын оноталар”.

Тағы ла: “Был тамсылар шундай йылылар, шундай наҙлылар. Ҡулыңды һуҙһаң, усыңа төшөп емелдәшәләр, усыңа йомарланыңмы, бармаҡтар араһына инеп ҡасалар”.

Был повеста көнкүрештең төрлө яҡтары сағылыш таба — өҫтәл янында ултырырға, икмәкте нисек ашарға (икмәкте баҫып ашарға ярамай — ҙур гонаһ), бигерәк тә рухи хәрәкәт әҫәр геройҙарында тәбиғәткә бәйле ассоциация тыуҙыра. Кешенең тәбиғәт менән берҙәмлеге бала саҡтан уҡ һалына һәм аҙаҡ, бигерәк тә тормоштоң трагик мәлдәрендә, көслө сағылыш таба.

“Өс таған” повесы яҙыусының Бөркөтлө ауылы тураһында әңгәмәһе менән башлана. “Һеҙҙең Бөркөтләлә булғанығыҙ бармы? Юҡмы ни?! Донъялағы иң матур

ауылды күрмәй нисек йәшәйһегеҙ икән? Ҡыйындыр һеҙгә, әлбиттә... Ә бит ауылды күреү генә түгел, унда тыуған кешеләр бар. Бына улар бәхетле, исмаһам! Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: тыуҙыңмы, рәхим ит — Бөркөтлө! Шулай ҙа аңламаҫһың кешене. Бөркөтлөләр араһында ла бар ундай сәйер кешеләр, үҙ теләктәре менән ер аяғы-ер башы алыҫ-алыҫ тарафтарға, күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән яҡтарға сығып китәләр. Йөрөйҙәр-йөрөйҙәр ҙә, тыуған ауылдарына ҡайтып, төрлө ғәжәп хәлдәр, мәҙәк тарихтар тураһында һөйләйҙәр. Мин һуғыш тураһында әйтмәйем, һуғышта беҙҙән күптәр булған. Ә бына тыныс ваҡытта ҡарттар ҙа, йәш бөркөттәр кеүек бөтә донъяға осоп китә алмаһалар ҙа, апельсин һәм лимон үҫкән алыҫ ерҙәр, төпһөҙ диңгеҙҙәр, ҡыш булмаған, төндәре көн кеүек аҡ илдәр тураһында хыяллана...

"Эх, уларҙың барыһын да үҙ күҙҙәрең менән күрергә ине!" — тиҙәр күптәр. Ә бына ни өсөндөр: "Эх, Бөркөтлөнө барып күрергә ине!" — тигән кешене осратырға насип булманы".

Мостай Кәрим хаҡлы: бер ни ҙә үҙенән-үҙе генә тыумай, һәм ул күлдәрҙең барлыҡҡа килеүе тураһында легенда һөйләй. "Йәнәһе, борон замандарҙа Уралды сит баҫҡынсыларҙан һаҡлағанда бер батырға уҡ ҡаҙала, — тип уҡыйбыҙ. — Батыр ергә ауа, һәм уң ҡулына тотҡан ҡылысы — бер яҡҡа, һул ҡулындағы ҡалҡаны икенсе яҡҡа барып төшә. Ҡылыс төшкән ерҙә — һалҡын күл, ҡалҡан төшкән урында йылы күл хасил була. Әгәр, ни өсөн күлдәрҙең һыуы төрлө булған һуң, тип һораһағыҙ, шул уҡ Шәрифулла яуап бирер һеҙгә: "Сөнки ҡылыс — яуызлыҡ ҡоралы, кеше үлтерер өсөн яратылған, ә ҡалҡан — изге ҡорал, ул кешеләрҙе һаҡлай".

Артабан был күлдәрҙе һутлы тел менән һүрәтләү башлана: "Тәрән һәм матур был күлдәр. Ләкин Бөркөтлө ауылының гүзәллеге унда ғына түгел. Уларҙы уратып, ҡыуышлы уйнаған кеүек, ҙур-ҙур тауҙар күккә олғашҡан. Тауҙар араһында, сағыу төҫтәр менән сигелгән йәшел бәрхәт менән ҡапланғандай, ялан һәм болондар йәйрәп ята. Күңелле сылтырап саф шишмә аға; ҡаянан-ҡаяға һикереп ҡоралайҙар йүгерешә; яҙғы һыуҙар ташҡандан алып көҙгә һалҡындарға тиклем арыу белмәй ҡоштар һайрай. Яҙғы күкрәүҙәр мәлендә тауҙарҙа шаңдау яңғырап тора, гүйә, тауҙар, зәңгәр болоттарға таянып, күктәрҙе шатырлатып йырта. Ә йәй көндәрендә урмандарҙа беләк йыуанлыҡ ҡаҡы үҫә, битләүҙәрҙә турғай башы ҙурлыҡ ер еләге бешә... Ә кеше аяғы баҫмаған тауҙар түбәһендә бөркөттәр бала сығара. Улар ояларынан осоп сығалар ҙа ауыл өҫтөндә әйләнәләр. Бына ошо бөркөттәр ауылыбыҙға "Бөркөтлө" исемен биргәндәр ҙә инде".

Ошо уҡ повеста беҙ тағы ла бер матур тәбиғәт күренешен һүрәтләүгә юлығабыҙ, ләкин уға әллә ни әһәмиәт биреп бөтмәйбеҙ. Ошо күренештәргә арналған юлдарҙы уҡығандан һуң яҙыусының беҙгә нимә әйтергә теләүе тураһында уҡыусының уйланмауы мөмкин түгел: "Ваҡ етеҙ тулҡындар йә ярҙарынан ҡасып, йә уларға һыйынып көнө буйына ел менән уйнанылар ҙа кискә табан тынып ҡалдылар, гүйә, арынылар. Бәлки, уйын башлығы шаян ел уларҙы ял иттерергә булғандыр, ә үҙе тауҙағы ҡуйы шыршылар араһына ҡасҡандыр. Елгә һәр ерҙә лә эш табыла инде ул.

Ә бына ҡоштар һәр саҡ ваҡытын белеп һайрай. Томра төшләктә һайрарға бик үк яратмай улар, әммә энерҙә, һалҡынса елаҫ ел ер өҫтөнән йүгереп үткәс, Ҡылыс буйының һәр ҡыуағы үҙ йырын һуҙа. Ултыр ҙа тыңла ғына!"

Мостай Кәрим ижадын юғарыла талпыныуысы ҡош менән сағыштырған Рауил Бикбаевтың һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар: "Уралда тыуған кеше Ағиҙел гүзәллеге, күкрәгендә ғәжәп хазиналар һаҡлаған боронғо тауҙар теҙмәһе, дала киңлектәре менән ғорурлана. Башҡортостандың ошондай аҫылташтары араһында тағы ла бер ғорурлығы бар — Мостай Кәрим ижады. Уның ижады тыуған ер ҡуйынынан сыҡҡан Ағиҙел кеүек тулы, сал Урал кеүек мәғрур, далаларыбыҙ кеүек киң һулышлы

һәм тәрән тамырҙары тормош менән бәйләнгән. Уның ижади донъяһы ғорур бөркөт саңҡыуын, һандуғастарҙың илһамлы йырын бергә туплаған. Был ғәжәп донъяның һуҡмаҡтары миңә күптән таныш һәм яҡын.

Ошо донъя юғарылығынан алыҫ офоҡтарға күпме тапҡыр ҡарап торҙом мин, йылға һәм күл буйҙарында уйланып торҙом, күктәренә баҡтым".

Әхиәр Хәкимов 1967 йылда "Литературная газета"ла баҫылған мәҡәләһен тәрән мәғәнә менән "Ғүмер йылғаһы – шиғриәт йылғаһы" ("Река жизни, река поэзии") тип атай: "Ҡарт һәм уйсан талдар араһынан берсә күбекләнеп, берсә ярһып гүзәл Дим йылғаһы ашыға. Матурлығына Аксаков хайран ҡалған, Толстой һәм Чехов күпереп торған ҡымыҙ эсеп, ярҙарында күпме кистәрҙе үткәргән Дим ул.

Ағын һыуҙар төрлө уйға һала. Ҡайҙарға ашыға был тынғыһыҙ, мәңге тере ағым? Кеше ғүмерен хәтерләтмәйме ул? – тип уйлана яҙыусы. – Дим ағышына ҡарап шулай уйланғандыр йәш шағир".

Мостай Кәрим геройҙарының тәбиғәт менән уҡмашыуына Ғәзим Шафиҡов та баҫым яһай: "Шағир кешелекте тәбиғәттән тыш күҙ алдына килтерә алмай, сөнки кеше – тәбиғәт балаһы. Яҙғы ләйсән ямғыры, саф аҡ ҡайындар, ялан сәскәләре, йылға тулҡындары, бер һүҙ менән әйткәндә, тыуған еребеҙ нимә менән йәнле – барыһы ла шағирҙың ижадында сағыла".

Д. Хренков фекеренсә, Мостай Кәрим геройҙарының ҡайҙа йәшәүе тураһында уйлап уҡыусыға баш ватаһы түгел, шағир уларҙың географик адресын аныҡ һүрәтләп бирә.

М. Кәрим ижады хаҡында уйланып, Д. Павлычко шуға иғтибар итә: шағир кешенең көнкүрешен һүрәтләгәндә лә тәбиғәткә әйләнеп ҡайта. "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесында Мостай Кәрим рус һәм украин халҡының мәжүсилек осоронан ҡалған ырымын хәтерләткән юлдарҙы яҙа, – ти Д. Павлычко: "Беҙҙең баҡсабыҙҙа сәтләүек ағасы үҫә. Тылсымлы ағас ул. Әгәр төн уртаһында, сәтләүек сәскә атҡан мәлдә, уның сәскәһен өҙөп өлгөрһәң, усыңды үткер бәке менән телеп, тире аҫтына шул сәскәне ҡуйһаң – әҙәм күҙенә салынмаҫ булаһың. Нимә теләйһең, шуны эшлә әйҙә, – берәү ҙә һине тотоп тора алмай. Атайымдың үткер бәкеһен тотоп нисәмә төндәр үткәрҙем икән мин сәтләүек төбөндә".

Мостай Кәримдең тәбиғәт үҙәктә торған әҫәрҙәрендә фекер һәм хис диапазоны ғәйәт киң. Уның мәңге үҙгәреп тороусы донъялағы төҫтәрҙе, тәбиғәт күренештәрен һүрәтләүенә һоҡланып бөтә алмайһың. Шағирҙың тәбиғәт серҙәрен күрә белеүе уның тәбиғәт менән даими аралашыуынан килә. Әҙип әйткәнсә, үҙен тәбиғәттең бер өлөшө итеп тойор өсөн, кеше тәбиғәт менән даими мөнәсәбәттә булырға тейеш.

Мостай Кәрим Давид Кугультинов ижадына арналған мәҡәләһендә бер ваҡиғаны хәтерләй: "... Бер саҡ Давид яҙғы баҫыу буйлап һыбай бара һәм уның ҡулына дерелдәп торған ҡошсоҡ килеп ултыра. Ҡошсоҡтоң тәйләгәндән ҡасып, яҡлау һәм ышыҡ эҙләгәнен уйламай шағир, уны ҡабат күккә сөйә. Кескәй ҡошсоҡ вайымһыҙ һыбайлыға әйләнеп килмәй һәм төйләгән тырнағына эләгә. Берәү булһа, был ваҡиғаны күптән онотор ине, ә уның ахмаҡлыҡ арҡаһында ҡошсоҡто ҡотҡара алмауына, донъяның бер йырсынан мәхрүм ҡалыуына күңеле һыҙлай. Әгәр белгән булһа..."

Мостай Кәрим тәбиғәте бәхет тураһында ла һөйләй: "Шул көндән алып Усман аҡланы минең аңымда бәхет аҡланы булып ҡалды. Һәр саҡ, болонлоҡто үткән һайын, теге ереклеккә боролоп, оҙаҡ ҡарап торам. Унан һәнәгеен иңенә һалған Мәрәһим менән тырма тотҡан Аҡйондоҙ килеп сығыр кеүек. Улар әле лә йәш, әле лә бәхетле. Ә ереклек,ҡуйырғандан-ҡуйырып, урманға әйләнде. Аҙаҡ уларҙы ҡырҡтылар. Был урында яңы үҫентеләр ҡалҡты, йылдан-йыл нығындылар,

юғары үрләнеләр. Күпме япраҡтар ҡойолдо! Уларҙы йәнәш күрермен, тигән өмөт һүрелмәгән әле миндә”.

Шаулап үҫкән, аҙаҡ ҡырҡылған урман һуғыш быуынын хәтерләтә. Әҫәрҙәге төп геройҙың бик күп тиҫтерҙәре яуҙа башын һалған. Мәрәһим дә әйләнеп ҡайтмай. Ләкин уның исемен йөрөткән ейәне – оло йәштәге Аҡйондоҙҙоң йыуанысы. Автор бында ла ерек образына мөрәжәғәт итә: “Малай һуйған да ҡаплаған олатаһы. Бына шулай Усман урманындағы түңгәктәрҙән сыҡҡан үҫентеләр ҙә элекке ҡарт ағастарға оҡшаш”.

Тыуған яҡ тәбиғәте шағирҙың мөхәббәт шиғырҙарында ла киң ҡулланыла:

*Әгәр уттар үткән минең йөрәк*
*Мөмкин икән ташҡа әйләнеү,*
*Һиңә булған мөхәббәтем минең –*
*Ташта үҫкән гөлдәр бәйләме.*

Мөхәббәт һәм тәбиғәт Мостай Кәримдең тәүге әҫәрҙәрендә үк сағылыш тапты. Был темаға яҙылған шиғырҙарында уның таланты тулыраҡ асылды, шулай ҙа был тема көн дә барып булмаған ҡурсаулыҡ кеүегерәк ине. Ул уҡыусы менән асыҡтан-асыҡ һөйләшергә ынтылды, улар менән тормоштоң һәр шатлығын уртаҡлашырға ашыҡты. Мостай Кәрим ҡатнашҡан йә шаһит булған күп ваҡиғалар тәбиғәт төҫтәре аша сағылыш табып, уның тормошондағы төрлө осор кәйефен бирә.

Яҡын дуҫтарының береһе А. Твардовский ҡаты ауырып киткәс, Мостай Кәрим йылғаға иғтибар итә һәм көтөлмәгән асыш яһай: “Өфөнән Мәскәүгә осоп килгәс, Домодедово аэропортынан киткән саҡта Пахра йылғаһы аша сығабыҙ. Ул ҡуйы ағастар араһынан беленер-беленмәҫ ағып ята. 1971 йылдың декабренә тиклем мин йылғаға иғтибар итмәнем. Йылға – йылға инде, аҡҡан һыу. Күперҙән үтәһең дә онотаһың. Ә хәҙер, миңә ҡалһа, уның аша үтеү хоҡуғым кәмегәндән-кәмей һымаҡ. “Пахра йылғаһы” тигән яҙыуҙы күреү менән йөрәгем һиҫкәнеп ҡуя. Сәнсеп-сәнсеп ала.”

Мостай Кәрим ҡоштар һәм шағирҙар араһында ғәжәп оҡшашлыҡтар таба: “Сейә ағасына ҡунған ҡоштарҙы күҙәтәм. Ботаҡтан-ботаҡҡа һикерәләр, нимәлер серләшәләр, көләшәләр, ҡайһы саҡта, беҙҙең иғтибарҙы тойоп, ҡупырая башлайҙар. Бушты һөйләйем. Уларҙың беҙҙә эше юҡ. Тырышалар, ем эҙләйҙәр. Бары тик уларҙы ҡурҡытырға ярамай. Шағир ҙа шулай. Ул аңлы рәүештә үҙенә иғтибар йәлеп итергә, үҙ шәхесенә һоҡланыу тыуҙырырға тырышмай. Үҙе донъяға һоҡлана, шатлана, ҡайғыра, уйлана... Үҙенә ситтән ҡарамай, үҙ-үҙенә һоҡланмай, ошо ҡоштар кеүек, үҙ донъяһы менән йәшәй. Уны өркөтөргә генә ярамай”. Шағирҙың һүҙ уйнатыуына, ихласлығына һоҡланмау мөмкин түгел.

Тәбиғәт күренештәре менән кешенең рухи донъяһы араһында параллель үткәреү – шағирҙың иң яратҡан алымдарының береһе. Бына уның бер хәтирәһе: “...РСФСР Юғары Советы сессияһының ултырышынан һуң мин Кремль ҡапҡаһынан сыҡтым һәм ғәҙәт буйынса миләш ағасы янында туҡтаным.

– Һаумы, иптәш!.. Тәүге тапҡыр тулҡынланып ошо ҡапҡанан үтеүемде һин хәтерләйһең, әлбиттә. Бына шул саҡта ғорур шыршылар эргәһендә һине күрҙем мин, ябай урман ағасы, һәм мин ошо мәғрур стеналар янында үҙемдең ауылдашымды осратҡандай булдым”.

Шағир ошондай уҡ тойғолар кисереүе хаҡында бер әңгәмәһендә лә телгә ала: “КПСС-тың XIX съезы барған саҡ. Көҙ. Япраҡтар ҡойола. Кремль стенаһы буйында – миләш. Миләш ағасын үҙемдең тыуған ауылым Келәш эргәһендәге

урманда ғына күреп ғәҙәтләнгәнмен. Ә был Кремль янындағы миләш мине ғәжәпләндерҙе. Уны бында урмандан килтергәндәр бит. Алыҫ Башҡортостандан килгән үҙемде уның менән сағыштырҙым, шулай “Миләш” шиғыры тыуҙы”.

Әҙип үҙенең публицистик әҫәрҙәрендә яҙ образына йыш әйләнеп ҡайта. Яҙ кешене ергә яҡынайта, һағышын белдерә кеүек. Быны күреп, кеше баҫыуға ашыға. Ул дымлы, һалҡынса, ләкин терелеп өлгөргән тупраҡты усына алып еҫкәй, ҡамыр һымаҡ ыуа. Аҙаҡ, ауыр хеҙмәт көнөнән һуң, ул һөрөлгән, мамыҡтай йомшаҡ ергә ята. Икеһе лә тәрән, ҡыҫҡа йоҡоға сума – ер һәм кеше ҡосаҡлашып.

Яҙ кешеләргә шатлыҡ һәм хәстәрлек алып килә. Ҙур хәстәрлек. Буласаҡ һәр башаҡ, һутланып бешәсәк һәр алма ҡояш нурҙары менән ямғыр тамсыларына ғына түгел, кеше түккән тиргә лә мохтаж.

Шағир фекеренсә, яҙғы шатлыҡ, өмөттәр кеше менән ерҙе генә түгел, халыҡтарҙы ла яҡынайта.

Бөйөк аҡыл эйәһе Пифагор үҙенең ете планета тураһындағы тәғлимәтен музыкалағы ете нота, йәйғорҙың ете төҫө менән сағыштырған, тиҙәр. Ә Мостай Кәримдең шиғриәтендә яҙҙың бөтә төҫөн күрергә, барлыҡ моңон ишетергә мөмкин.

Мостай Кәрим М. Ю. Лермонтов ижады тураһында уйланып, ҡыҙыҡлы һығымтаға килә: “Ҡайһы саҡта миңә шулай тойола: кешеләр йәшәгән урынына ғына түгел, осорона ла теркәлгәндәй. Минең уйымса, Лермонтов яҙға теркәлгән”.

Мостай Кәрим өсөн тәбиғәт – илһам сығанағы һәм шиғри төҫтәр гөлләмәһе генә түгел, тулы бер шиғри донъя. Бигерәк тә яҙғы тәбиғәт картиналары. Шулай ҙа шағир яҙ тураһында күп һәм йылы яҙыуына ҡарамаҫтан, уның яратҡан миҙгеле – ҡыш. Был хаҡта үҙе бына нимә ти: “Минең яратҡан миҙгелем – ҡыш. Эш осором, ҡышын эшләйем мин”. Уның тәүге шиғырҙарының береһе “Ҡыш килде” тип аталыуы ла юҡҡа түгелдер.

Тәбиғәткә ғашиҡ Мостай Кәрим хайуандарҙы ла кешелек сифаттары менән биҙәй. Мәҫәлән,“Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесында Аҡйондоҙ хаҡында һөйләгәндә ул ошолай яҙа: “Беҙҙең Серсә урамы башта Аҡйондоҙҙоң сибәрлегенә, һылыулығына һоҡланды, тора-бара уның уңғанлығына, булдыҡлылығына, илгәҙәклелегенә хайран ҡалды. Ғәлләм килене иләгән еп, һуҡҡан киндер ебәккә алыштырғыһыҙ, киҫкән туҡмасы ҡылдан нескә, кейем текһә, ҡойоп ҡуя, тип һөйләйҙәр. Быға тиклем дүрт аяғын тышаҫаҡ ҡына һауҙыра торған ала һыйырҙары, хәҙер көтөүҙән ҡайтҡас та, килен артынан үҙе эйәреп йөрөй. Уныһы хаҡ. Көн дә үҙебеҙ күреп торабыҙ. Ғәлләмдең сығынсы ерән бейәһе лә Хоҙай мәхлүгенә әйләнде – бер тапҡыр ире менән утынға барғанда, Аҡйондоҙ, дилбегәне үҙ ҡулына алып: “Әйҙә, малҡай, әйҙә, аҡыллым, әйҙә, күндәмем!” – тип кенә әйткән, имеш. Ошо һүҙҙәрҙе ишеткән ерән бейә әйләнеп ҡараған да ике тапҡыр баш ҡаҡҡан, йәнәһе, төшөндөм, бынан ары һин әйткәнсә булырмын”.

Мостай Кәрим “Грей” исемле хикәйәтендә лә тәьҫирле ваҡиғаны һөйләй. Уның ижадында аттар кешенең ғорур, намыҫлы дуҫы булып һынлана.

Башҡорт халҡын атһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмай. Аттар һаны мал башы менән түгел, өйөрҙәр менән иҫәпләнгән. Тарихтан мәғлүм булыуынса, хәлле башҡорт тиҫтәләгән өйөр тотҡан, ә эре байҙарҙың өйөрҙәре йөҙәрләп иҫәпләнгән. Хатта ярлыларҙың да бер нисә баш аты булғаны билдәле. Аттар йыл әйләнәһенә тибендә йөрөгән, бесән әҙерләү, ҡура эшләү талап ителмәгән.

Мостай Кәрим ижадында ат ир ғорурлығы һәм намыҫы булып тора.

Башҡорттар атты кәрәк булған өсөн генә тотмаған, улар өсөн ат – изге хайуан. Мостай Кәрим дә түбәндәге юлдарҙы юҡҡа яҙмағандыр:

*Аҡбуҙымды мин төшөмдә күрҙем:*
*Тарһынып ул ҡырҙар киңлеген,*

*Ярһынып ул, башын сайҡай-сайҡай,*
*Асып инде бүлмәм ишеген.*

М. Кәрим, аттар ятраҡан кеше булараҡ, “Ярлыҡау” повесында Любомир Зухтың олатаһы Пантелеймондың төрөктәр менән алышҡан саҡта ат өҫтөндә үҙен нисек тотоуын, ат, ялтанып, уны бер нисә тапҡыр үлемдән ҡотҡарып ҡалыуын һоҡланып һүрәтләй.

Хәтирәләрендә шағир дуҫы Арыҫлан Мөбәрәковтың һүҙҙәрен килтерә: “Егет менән ат ҡомарының бергә уҡмашыуы иҫ киткес бит ул – беләм, үҙем татыным!”

Әҙиптең һуғыш осорондағы әҫәрҙәрендә ат образының йыш осрауы юҡҡа түгел, әлбиттә.

Шағирҙың украин дуҫы Дмитро Павлычко былай нимә тип яҙа: “Мостай Кәрим әҫәрҙәрендә ат образы төрлө функциялар башҡара. Тиҫтәләгән ассоциатив һыҙаттар ат образынан башлана. Шул уҡ ваҡытта был образдың изгелеге бер урында ла кәмһетелмәй, ихтирам кәмемәй”. Әйткәндәрҙе раҫлар өсөн М. Кәримдең үҙ һүҙҙәренә мөрәжәғәт итәйек: “Мине Нерехтала төҙөлөп ятҡан атлылар артиллерияһына элемтә начальнигы итеп ебәрҙеләр. “Атлы” тигәнде ишетеп, бик шатландым. Ләкин, үкенескә ҡаршы, полк төҙөлмәне.”

Сергей Михалков тураһында хәтирәләрендә Мостай Кәрим атҡа булған һөйөүен асыҡтан-асыҡ әйтә: “Уға ҡарап (С. Михалковҡа) мин ирекһеҙҙән бәйгеләрҙә иҫ киткес еңеүҙәр һәм үкенесле еңелеүҙәр татыған, ләкин әле лә көрәштән төңөлмәгән арғымаҡты күҙ алдына килтерҙем. Ат образы минең өсөн изге – әле лә ошо сағыштырыуҙан тыйыла алманым.”

“Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!” шиғырында башҡорттоң тоғро дуҫы ошолай һүрәтләнә:

*Эйәрләне атай, ялын үреп,*
*Аҡбуҙаттың ярһыу, ап-ағын.*
*Әсәм һуҙа дәһшәт ҡылысының*
*Ҙур яуҙарҙа еңеп ҡайтҡанын.*
*Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!*

Башҡорт шағиры өсөн ат ижадында ғына түгел, тормошонда ла ҙур әһәмиәткә эйә, ат ҡыуаныс та, йыуаныс та уға: “Рәсүл Ғамзатов минең тормошома дауахана палатаһының тәҙрәһе аша килеп инде, ишектән үткәрмәгәндәр. Был хәл һуғыштан һуң өс йыл үткәс, Мәскәүҙә, мин һуғыш яраларын дауалатып ятҡанда булды. Быға тиклем йәш яҙыусыларҙың Бөтә Союз кәңәшмәһендә генә яҙа-йоҙа күрештек, ә уның шиғырҙары миңә оҡшай ине. Рәсүл, минең түшәктә ятыуымды күреп, йыуатманы. Бары тик: “Тор, егет! Һине эйәрле ат көтә”, – тине. Ул шундай ышаныслы әйтте, мин шундуҡ ышандым: ҡапҡа алдында минең һуғыш атым көтөп тора, гүйә, Рәсүл үҙе менән алып килгән атты ҡалдырып китте. Бына 35 йыл инде уның мине байрамдарға елдереп еткерергә, бәләләрҙән алып ҡасырға әҙер ышаныслы толпары янымда тора”.

“Ауыл адвокаттары” әҫәрендә лә ат образына юлығабыҙ: “Минеке ат өшәнгән, арыҡ, ҡарт, – тине сыуаш ҡарты, бышылдап. – Күҙ ҙә иларлыҡ, күңел дә һыҙларлыҡ түгел, тик йән эйәһе булғанға ғына йәлкә. Сбруйы ла утыҙ сөйлө, ҡырҡ ялғаулы. Яҡшы атты мин егеүе менән үҙебеҙҙең ауыл янындағы шырлыҡҡа йыйыштырҙым. Малай һаҡлай. Һинеке, Шәймика, атың дөлдөл, күк дөлдөл, ҡамытдуғаң – баярҙыҡы, арбаң – кулистыҡы. Өйҙә малың ишле түгелдер, уйлап эш ит.

– Баш нисәү? Ишлеме? – тип ҡырт һораны Шәйми.

– Баш ни, раҫ, берәүҙеке лә ике түгел.

– Баш һау булһа, мал табылыр, тибеҙ беҙ, башҡорттар”.

“Ярлыҡау” повесында ла автор кеше менән ат мөнәсәбәте тураһында ҡыҙыҡлы фекергә килә: “Ерән айғыр ине. Ерән зат күбеһенсә тиҫкәре, тиле була ул. Ҡола мал — тыңсыл, сабыр, ҡара тоҡом — хәйләкәр, аҫтыртын, ә бына аҡ ат нескә хисле, һиҙгер күңелле була. Бигерәк тә бейә малы. Ерле юҡҡа ғына боронғо батырҙар аҡбуҙ атта йөрөгән тиһеңме ни?”

Мостай Кәрим үҙенең атҡа булған мөнәсәбәтен былай һүрәтләй: “Мин бына ошо Аҡсалдың һыртында ун ике йәшемә тиклем йөрөнөм, йәғни көн иттем. Тәненә сыбыртҡы-ҡамсы тейҙертмәне ул. Ғәрсел булды. Бер саҡ туғайға ҡуна барышлай малайҙар менән уҙышҡанда, тышау һелтәп, абайламаҫтан атымдың осаһына тейҙерҙем. Теге, ҡапыл ситкә тайпылып, мине ергә ҡолатты. Өҫтөмдә ҡалын көпө ине. Имгәнмәнем. Шулай ҙа һыным ҡатып, бер аҙ яттым. Аҡсал кире боролоп минең эргәмә килгән дә башын сайҡап тора, әйтерһең, битәрләй: “Миңә шулай ҡул тейҙереүеңде көтмәгәйнем. Рәнйеттең”, — ти. Минең дә уға хәтерем ҡалды. Ныҡлап ҡалды. Һуғам тип һелтәмәнем дә инде. Яңылыш ҡына тейҙе. Хәл кергәс тә, күҙҙәремде йомоп, байтаҡ заман ҡуҙғалмай яттым. Әйҙә, мине ни көнгә төшөргәнен күреп үкенһен, эсе әрнеһен әле, тим. Бер мәл мороно менән мине төрткөләргә тотонмаҫмы теге. Мин ҡымшанмайым да. Аптырағас, атым көпөмдән тешләп тартҡылай башланы. Шунан ғына аяҡ үрә баҫтым. Аҡсал минең яурыныма матур ҡаҡ башын һалды. Мин уның маңлайынан һыйпаным. Малҡайымдың моңһоу ике күҙенән ике бөртөк йәш тәгәрәне. Ат күҙендә йәш күреп мин ҡойолоп төштөм...”

“Ауыл адвокаттары”нда беҙ авторҙың ат тураһында фәлсәфәүи уйланыуҙарын осратабыҙ: “Башҡа һыймаҫлыҡ мөғжизә бит был. Кәшфуллаһы, ярай, әҙәм балаһы. Иҫән йөрөгәс, ер-һыу тартып, бер ҡайтмаһа, бер ҡайтыр ине. Ә бына күк айғырҙың хужа ҡаршыһына үҙе килеп баҫыуы өндә түгел, төштә лә мең йылға бер генә була торған хәл. Икеһе бер юлы күренде лә күҙҙән юғалды. Әллә был тылсымлы тамашаны Нурислам үҙе генә уйлап сығарҙымы?

... Нурислам атын туғарып, ағас араһына үлән утларға ебәрҙе. Ямғырҙар булмағас, үлән наҡыҫ быйыл, асыҡ ерҙә салғыға ла эләкмәй. Ҡара алаша эшкә лә, ашҡа ла йығылып ятмай. Тәүҙә ул оҙаҡ итеп кәкре ҡайынға ҡаҡ ҡабырғаһын ышҡып торҙо, унан һуң бышҡырып ебәрҙе, төшкө ашҡа әҙерлек йолаһын урман яңғыратып тын сығарыу менән тамамланы. Шунан ғына көйшәргә кереште.

... Ҡарынды һыуытып, һыуһынды баҫып алғас, Нурисламға эшлекле аҡыл, крәҫтиән иҫәпселлеге әйләнеп ҡайтты. “Дисәтинәнең бер сите генә тороп ҡалған да баһа. Ана, юлға етеп киләм бит. Бөтөрөргә лә ҡайтырға кәрәк. Кис бит мине туй көтмәй”, — тип уйланы ул. Йүгерә-атлай барып атының йүгәнен кейҙерҙе. “Ни ҡыланыуың был? Шаяртма әле...” — тигәндәй, тегенеһе иренеп кенә башын тайшандырҙы, әммә нығытып ҡарышырға дәрте лә, ниәте лә юҡ ине. Хужаһының былай ҡабалан, дыуамал ҡыланыуына хайран ҡалды. “Әллә бая елдереп киткән әшнәм күк айғыр артынан барабыҙмы икән? Улай итһәк, дан булыр ине, — тип фекер йөрөттө хайуан, хатта бер аҙ йәнләнеп китте. — Мин кемдән кәм? Дүрт аяғым, дүрт аяғымда дүрт тояғым бар, ҡойроҡ-ялым бар, эсемдә йәнем бар. Заманында хатта мин айғыр ҙа булғанмын әле...” — Ул, башын сайҡап, дарманланып бер-ике аҙым да яһап ҡуйҙы. Тырмаға табан йүнәлгәс, уның ғәйрәте ҡайтты, ҡамыт кейҙергәс, бөтөнләй өмөтө һүнде”.

Мостай Кәрим аттарҙың ҡылығын төрлө ваҡытта төрлөсә һүрәтләй. Түбәндәге юлдарға иғтибар итәйек: “Аҡсалды мин ниндәй генә хәлдәрҙә күрмәнем. Һоро алаша менән икеһен егеп һабан һөргәндә, тырыша торғас, был күлемгәсә аҡ күбеккә, киске яҡҡа ҡара тиргә бата, теге ялҡау ыжламай ҙа. Миңрәү булһа ла, хәйләкәр. Ағайым һабан һабы тота, мин ат әйҙәйем. Ләкин, күпме тырышһам да,

оло башты рәтләп тыңлата алмайым, һайтлауға ла ҡолаҡ һалмай, сыбыртҡыға ла иҫе китмәй, баҫайыммы-баҫмайыммы тигәндәй, бураҙнанан саҡ атлай. Ҡайтҡанда, ағайым менгән Аҡсал ваҡ-ваҡ баҫып бейергә керешә, минең алашам, бышҡырып, ике тарафтан да тын сығара-сығара арттан һөйрәлә. Уның һыртында ултырыу – оят белгән кеше өсөн үҙе бер мәсхәрә.

Тыумышы менән Аҡсал тикәй көндә эш аты, байрам көндө байрам толпары ине. Йонсоу оҙон юлдарҙа арыу-талыу белдермәне, ҡаты бурандарҙа эҙҙән яҙманы, күпме йөк тейәһәләр, шуны тартты, күпме ныҡ ҡыуһалар, шул тиклем йылдамыраҡ барҙы. Йәне ярылып сығыр саҡтарҙа ла һынатманы. Йәнәһе, уның ни бары тире генә атылып сыҡҡан...

Ә байрамдарҙы ул нисектер алдан һиҙә ине. Бына мин күтәрмәлә баҫып торам. Мортаза ағайым Аҡсалдың ап-аҡ итеп йыуылған, таҙартылған, йылҡылдап торған һыртына дүрткә ҡатланған семәрле балаҫ йәйҙе, балаҫ өҫтөнә еҙ тәңкәләр менән биҙәлгән күн эйәр һалды, айылдарын тартты. Баянан бирле, дәртенә сыҙай алмай, башын сайҡап торған айғыр, һыртына эйәр тейгәс, оторо ирегеп китте, ер тырнарға кереште. Әсе кешнәп ебәрҙе. Ағайымдың осоп эйәргә ҡуныуы булды, Аҡсал үҙе генә белгән таҡмаҡҡа бейей ҙә башланы. Бейер ҙә шул. Ҡара Яҡуп һабантуйына китәләр бит улар. Ағайым менән икәүһе."

Яҙыусы кешенең дүрт тояҡлы дуҫтары ҡатнашлығындағы башҡа мәҙәк хәлдәргә лә туҡтала: "Ә Кәлимулланың ат алып ҡайтыуы теге саҡта бөтә урам өсөн бер мәрәкә булды, – тип уҡыйбыҙ "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәрендә. – Ҡыҫҡа тороҡло йөнтәҫ ерән алашаны хужа, алып ҡайтҡас та, аҙбарына япманы. Уны урам яҡ кәртәгә бәйләп ҡуйҙы. Туйғансы күреп ҡалһындар әйҙә! Ҡасырға тартым был хайуан, оло башын кәртәгә һалып, кискә тиклем тамашасылар ҡабул итте. Әммә теләһә кем алдында баш эйеп, эйелеп-һығылып барманы. Дәрәжәһен юғары тотто. Ат эргәһенә халыҡ иң күп йыйылған мәлдә генә ҡураға ниндәйҙер бер һөмһөҙ берәҙәк эт килеп инде. Минең апайым, оҙон сыбыҡ тотоп, этте ҡыуырға кереште. Эт тиҙ генә буйһонманы. Аҙбар яғына ынтылды. Кәлимулланың кәртәгә атланып ултырған кесе малайы Зәһидулла ҡапыл һөрәнләп ебәрҙе:

– Әсәй, әсәй, тим! Ат менән ҡыу этте! Ат менеп! Йәйәү йөрөү етер инде!!!

Беҙҙең еҙнә тейешле кешебеҙ бына ошо дан арғымаҡты үҙ ҡулдары менән колхозға илтеп тапшырырға ҡарар ҡылды һәм тапшырыр ҙа."

Мостай Кәримдең яратҡан аты Аҡсалды ла колхозға тапшыралар: "1931 йылда беҙ айырылыштыҡ. Тәндәребеҙ түгел, йәндәребеҙ айырылышты. Атайым Аҡсалды колхоз көтөүенә илтеп ҡушты. Тәүге мәлдәрҙә бик күптәрҙең аттары кире ҡайтып ыҙаланы. Былтыр башҡа сыҡҡанда Мортаза ағайыма тейгән һоро алаша көндөң көнө ҡаса ла килә. Иртә тимәй, кис тимәй. Аҡсал иһә ете йыл ғүмер иткән төйәгенә әйләнеп тә ҡараманы, өйөбөҙ тирәһенән үтергә тура килгәндә, башын хатта ситкә борҙо. Үҙ аттарына һыныҡ-мыныҡ ҡаптырырға йөрөгән малайҙарға эйәреп, аттар аҙбарына мин дә бер тапҡыр барҙым. Усымдағы ризыҡты хайуаным теләр-теләмәҫ кенә алды. Тамаҡ ялғар өсөн түгел, әҙәп һаҡлап ҡына эшләне булыр быны. Сөнки рәхмәт белдереүҙең әҫәрен дә һиҙмәнем. Ә бит әүәл бәләкәс кенә бер һыныҡ өсөн ҡыуанып, ҡулды ялай-ялай биш төрлө рәхмәт яуҙыра ине. Ә хәҙер..

Йортонан айырғаныбыҙ өсөн беҙгә үтә үпкәләне, үтә рәнйене булыр Аҡсал. Беҙҙән күҙе биҙҙе, күңеле ҡайтты. Нескә күңелле ғорур зат хыянатты ғәфү итмәне. Былай ҡарағанда артыҡ бойоғоп, мәлйерәп төшмәне. Сер бирмәне. Әммә беҙҙән ваз кисте. Мин үҙем дә уның күҙенә күренергә тартына, ояла башланым. Аҡсалдың ҡылығы тураһында Оло инәйемә һөйләгәйнем, ул былай тине: "Бөтәбеҙ ҙә бер тәңре мәхлүктәре, тере йән эйәләребеҙ. Рәнйеүе лә ихтимал, хоҙа әшкәртһә..."

“Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесында М. Кәрим Аҡбуҙат тураһында мауыҡтырғыс риүәйәткә туҡтала. Ул риүәйәтте һөйләп кенә ҡалмай, уны тәрбиәүи эш менән бәйләй: “Ҡара Йомағол йәнә эшенә тотондо, ә мин шул уҡ түмәр башына менеп ҡунаҡланым. Арҡаны уның хәҙер, һуҙһаң, моғайын, мәсет айына етер ине. Күп иште.

– Ә шул тиклем оҙон арҡанды һин нимә эшләтәһең?

– Хәбибулланың ун етеһе тулғансы, ул ошо келәттә һаҡланасаҡ. Ун етеһе тулғас, уға тапшырасаҡмын.

– Ә ун етеһе тулғас, ниңә уға арҡан кәрәк?

– Ниңә тиһеңме? Улайһа, тыңла...”

Ҡара Йомағол Аҡбуҙат тураһында риүәйәт һөйләй. Мостай Кәрим геройҙары ҡайһы саҡта кеше шәхесен уның атына ҡарап баһалай. Мәҫәлән, “Йәйәүле Мәхмүт” повесының геройы Мәҙинә былай ти: “Йә, һау бул, Йәйәүле Мәхмүт, һин бер ваҡытта ла арғымаҡҡа эйәр һала алмаясаҡһың!”

“Әҙәбиәт урап үтә алмаҫтай тағы бер мәсьәлә бар. Кешенең аңһыҙ рәүештә тәбиғәткә һөжүм итеүе ул. Ҡайһы саҡта шомланып ҡуям: бөтә донъя асфальт менән ҡапланыр һымаҡ. Был хәүеф бөтәһенә лә янай, шуға күрә уға бөтәбеҙ ҙә ҡаршы торорға тейеш”, – тип яҙҙы бер саҡ М. Кәрим. Был һүҙҙәр бөгөн бигерәк тә ҙур әһәмиәткә эйә. Мостай Кәримдең әҫәрҙәрендә лә тәбиғәттең яҡты һыны менән бергә уның ҡыйырһытылған, мәсхәрә ителгән образы сағылыш таба: аҡ ҡайындарҙың бәке менән телгеләнгән тәне, ботаҡтары һындырылған ағастар, бысратылған һыу...

Башҡорттар борон-борондан тәбиғәткә һаҡсыл ҡараған. Улар һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ кеүек шөғөлдәрен сикләп, тәбиғәт балансын һаҡларға тырышҡан. Ерҙе яраларға ярамай, тип иҫәпләгәндәр. Улар үҙҙәрен тәбиғәт балаһы һәм тәбиғәтте тере йән итеп тойған. Тәбиғәткә килтергән зыян бер саҡ үҙҙәренә икеләтә әйләнеп ҡайтасағын яҡшы аңлаған улар.

С. Рыбаковтың “Урал буйлап, башҡорттар араһында” тигән юлъяҙмаһында шундай ғәжәп юлдар бар: “Көтмәгәндә атыу тауыштары яңғыраны, һәм шаңдау тауҙар буйлап йүгерҙе. “Ни булды?” – тип һорайбыҙ башҡорттарҙан. “Бүреләрҙе өркөтәбеҙ, улар төнөн йөрөй, һарыҡтарҙы боғаҙлай. Бына уларҙы өркөтөр өсөн атабыҙ, – тип аңлатты старшина. – Кисә бүреләр минең быҙауҙы алып китте”.

“Быҙауҙы ҡотҡарып булманымы ни?” – тип ҡыҙыҡһынабыҙ. “Урманда бүрене тоторһоң”, – тип кенә ҡуйҙы ул. “Быҙау йәл булғандыр инде?” “Нимәһе йәл: Хоҙай бирҙе, Хоҙай алды. Бер ҙә йәл түгел, бүреләр ашарға теләгән,” – тип яуапланы старшина.”

Үрҙә килтерелгән әңгәмә Мостай Кәримдең “Беҙҙең өйҙөң йәме” повесындағы түбәндәге юлдар менән ауаздаш, миңә ҡалһа: “Беҙ йәшел үләндән йүгерәбеҙ. Сәскәләр юҡ инде – ҡойолғандар һәм күбәләктәр ҙә күренмәй. Кәбән өҫтөндә ниндәйҙер ҙур һоро ҡош ултыра.

– Кеш-ш! Кеш-ш-ш!.. – тип ҡысҡырам мин, ҡош ҡымшанмай ҙа.

– Ҡурҡытма уны, Йәмил, бәлки, уның йоҡоһо киләлер, – ти Оксана.

– Ни өсөн был ҡош бер үҙе генә, балалары ҡайҙа икән?

– Уның балалары, бәлки, ҡунаҡҡа киткәндер...”

“М. Кәрим шағир, яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре генә түгел, – тип яҙа биология фәндәре докторы, профессор Ф. Хажиев, – ул тәбиғәт һаҡсыһы ла. 1989 йылда КПСС Өлкә комитетында “Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау – бөгөнгө көн бурысы” тигән темаға пленум ултырышы булды. Унда Мостай Кәримдең сығышы барыбыҙҙы ла хайран итте. Уның фекеренсә, “рух эрозияһы тупраҡ эрозияһына килтерә". Шуға күрә милләттең рухи сәләмәтлеген тирә-яҡ мөхит сәләмәтлеге менән бәйләй.

Бер сығышында Мостай Кәрим, кешенең тәбиғәткә һалҡын мөнәсәбәтенә йәне әсеп, былай тигәйне: “Бынан бер нисә йыл элек балаларҙың һауыҡтырыу учреждениелары селтәрен (ах, был “селтәрҙәр”) киңәйтеү мәсьәләләрен ҡараған ултырышта сығыш яһап, артабан эштәр әлеге кеүек барһа, Башҡортостанда бындай учреждениеларға ихтыяж ҡалмаясағын, сөнки беҙ химиянан буйраҡланған йылға-күлдәребеҙ, баш осондағы һоро болоттарыбыҙ менән бергә ҙур бер газ камераһына инеп барабыҙ, тигәйнем. Ә газ камераһында лазареттар кәрәкмәй”.

Шағир һүҙҙәре буйынса, “ер һәр саҡ ҡурсалаусыға мохтаж”. “Кешеләр тәбиғәткә фәхшиҙәрсә мөнәсәбәттә булып, үҙҙәренең ғүмеренә хәүеф тыуҙыра”, – тип үкенес белдерә ул.

М. Кәримдең “Айгөл иле” пьесаһы геройы Йәғәфәр XX быуаттың 60-сы йылдарында уҡ: “Урманға мылтыҡ шартлатып түгел, сәләм биреп кер”, – тип оран һала.

Уның түбәндәге һүҙҙәрендә лә әсенеү һәм ғазап ярылып ята: “Барыһын да үҙебеҙ ҡоротабыҙ! Ҡыйратабыҙ! Үлтерәбеҙ! Ҡош күрһәк, мылтыҡҡа йәбешәбеҙ. Урман күрһәк, төбө-тамыры менән йолҡабыҙ. Сәскәгә тап булһаҡ, өҙәбеҙ! Кәрәккәндә лә, кәрәкмәгәндә лә. Урман – бүрәнә, айыу – ит, сәскә – биҙәк... Ерҙе әсә тибеҙ, ә күпме ҡаза кисерә ул үҙ балаларынан”.

Мостай Кәрим “Дудин миңә әйткәйне...” мәҡәләһендә бер колхоз рәйесенең шишмәне һәләк итеүе тураһында бәйән итә: “Изге сығанаҡҡа килгән һайын һәр саҡ шағирҙың ошо юлдары иҫкә төшә:

*Звенела над клевером пчелка,*
*К воде подошла перепелка*
*И долго по капле пила.*

Был хаҡ. Ҡоштар һыуҙы ҡабаланмай эсә. Ләкин колхоз хужаһы шишмәне торба аша фермаға, баҡсаларға ҡыуҙы. Беҙ боролоп ҡарарға ла өлгөрмәнек. Ул икенсе ауыл кешеһе һәм был сығанаҡ уның йөрәгенән урғылмай ине. Иҫтәлек булып Михаил Дудиндың “Шишмә” тигән шиғыры ғына ҡалды.”

М. Кәрим шуны яҡшы тоя: кешенең тәбиғәттән ваз кисеүе, бигерәк тә унын менән конфликтҡа кереүе йәмғиәткә төҙәтеп булмаҫлыҡ әхлаҡи һәм матди зыян килтерә. Шуға күрә лә шағир әҫәрҙәрендә асыҡтан-асыҡ тәбиғәт һаҡсыһы булып сығыш яһай. Рәми Ғариповҡа яҙған хатында ла яҙыусының тәбиғәт балаһы булыуына баҫым яһай: “Һинең шиғырҙарыңда кешеләр донъяһы менән бергә икенсе бер донъя – тәбиғәт йәшәй. Һинең геройың аҡ ҡайындар менән бер тамырҙан, йомшаҡ ҡаҙ сепейҙәре менән бер ояла үҫкән. Мин шуға ышандым: тәбиғәт менән бер-берендә аңлайһығыҙ. Тәбиғәт менән бергә уҡмашыу – ижадыңдың көслө яғы. Был тойғоно һаҡла һәм үҫтер.”

Эйе, бөтә яҙыусылар ҙа тиерлек тәбиғәткә мөрәжәғәт итә. Ләкин унын менән йылы мөнәсәбәт һәр кемдә лә килеп сыҡмай. Мостай Кәримдең ижады иһә, башта әйткәнсә, тәбиғәт менән бергә береккән.

**Ильяс ВӘЛИЕВ,**
**педагогия фәндәре докторы, профессор.**

***

Быйылғы октябрь ике оло, яҡты әҙәби-мәҙәни байрам менән истә ҡалды: Башҡортостан Яҙыусылар союзы ойошторолоуына – 75, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл…

**22 октябрь.** Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейында Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған «Ҡоштар осорам» исемле күсмә күргәҙмә асылды. Унда БР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев, Рәсәй Яҙыусылар союзы идараһы рәйесенең беренсе урынбаҫары Геннадий Иванов, Татарстандың халыҡ шағиры Ренат Харис, Дағстандың халыҡ шағиры Магомед Ахмедов, Сыуаштандың халыҡ шағиры Валерий Турғай, тәржемәсе Илгиз Кәримов, бик күп әҙәбиәт һөйөүселәр ҡатнашты.

Бай йыһазландырылған күргәҙмә халыҡ шағирының тормош һәм ижад юлын киң сағылдыра. Шул уҡ көндө Мосолман зыяратында М. Кәрим ҡәберенә сәскәләр һалынды, М. Кәрим урамындағы халыҡ шағиры йәшәгән йортҡа, йәнә шағир һуңғы осор йәшәгән, уның барельефы эленгән Энгельс урамындағы 5-се йортҡа сәфәр ҡылынды. Артабан мәртәбәле ҡунаҡтар Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһына юлланды. Бында «Мостай Кәрим шәжәрәһе» байрамы уҙғарылды.

БР Милли музейының тарихи конференц-залында Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар союзы секретариаты күсмә ултырыш ойошторҙо.

Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрының беренсе урынбаҫары Ольга Ижбулдина сарала ҡатнашыусыларға Премьер-министр урынбаҫары Илдус Ғөбәйҙулла улы Илешевтың тәбрикләүен еткерҙе. «Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәте: үҫеш юлдары һәм ижади бәйләнештәр» тип аталған «түңәрәк өҫтәл»дәге фекер алышыуҙа Мәскәү ҡунаҡтары Геннадий Иванов, Йәмил Мостафин, Татарстан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Илфаҡ Ибраһимов, Татарстандың халыҡ шағиры Ренат Харис, Дағстан вәкиле Магомед Ахмедов, Марий-Эл Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Василий Крылов, Башҡортостандың халыҡ шағиры Александр Филиппов, БР мәғариф министры урынбаҫары Артур Сурин, «Китап» нәшриәте директоры Зөфәр Тимербулатов, Ырымбурҙан әҙәби альманах мөхәррире Наталья Кожевникова, «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире Әмир Әминев ҡатнашты.

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған хәтер һәм ҡәҙер кисәһендә БР Президенты аппаратының дәүләт кәңәшсеһе Сергей Лаврентьев республика етәкселегенең ҡотлауын еткерһә, РФ Яҙыусылар союзы идараһы рәйестәше, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев аһәңле телмәр тотто. Ҡунаҡтар, ведомстволар һәм йәмәғәтселек вәкилдәре, шулай уҡ башҡорт әҙиптәре – халыҡ яҙыусыһы Нәжиб Асанбаев, халыҡ шағиры Тимер Йосопов, шағир Рамазан Шәғәлиев (Силәбе ҡалаһы) йөрәк һүҙҙәрен белдерҙе, Мостай Кәрим ижадының тотош ил һәм төрки әҙәбиәте мөхитендә маяҡ булып ҡалыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

**23 октябрь.** Яҙыусылар союзы идараһының яңыртылған бинаһын түйлау ҙа илһамлы уҙҙы. Һуңынан Башҡортостан Яҙыусылар союзы юбилейы айҡанлы махсус нәшер ителгән «Ил яҙмышы – заман һулышы», йәнә Мостай Кәрим әҫәрҙәре тупланмаһының I томы сығыу айҡанлы әңгәмә уҙҙы. Ҡунаҡтарҙың, Союз идараһы етәкселәренең, идара ағзаларының, шулай уҡ төбәк яҙыусылар ойошмалары етәкселәре Кәбир Аҡбашев (Стәрлетамаҡ), Хәйҙәр Тапаҡов (Сибай), Фәрит Хәсәнов (Учалы) һ.б. сығыштарында Башҡортостан

яҙыусыларына ҡарата матди һәм рухи ярҙам ҡулы һуҙып торғаны өсөн республика етәкселегенә оло рәхмәт белдерелде. Быйыл көҙ Яҙыусылар союзы сафына ҡабул ителгән биш әҙәбиәтсегә ағзалыҡ билеттары тапшырылды.

Байрамда ҡатнашыусы әҙиптәр, ике төркөмгә бүленеп, Башҡорт дәүләт университеты һәм Башҡорт дәүләт аграр университеты студенттары һәм уҡытыусылары менән бик тә ихлас әҙәби осрашыуҙар уҙғарҙы.

**24 октябрь.** Конгресс-холда Башҡортостан Яҙыусылар союзының 75 йыллығы айҡанлы әҙәби-музыкаль кисә гөрләп уҙҙы. Тантанала БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Илдус Илешев байрамда ҡатнашыусыларға Президентыбыҙ Мортаза Рәхимовтың ҡотлау хатын еткерҙе. Идара рәйесе Рауил Бикбаевтың докладынан һуң микрофонға бер-бер артлы ҡунаҡтар сыҡты. Артабан Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин, халыҡ шағиры Марат Кәримов, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары Абдулхаҡ Игебаев, Ирек Кинйәбулатов, Ҡәҙим Аралбай, Факиһа Туғыҙбаева, Хәсән Назар, йәшерәк быуындан Ғ. Сәләм исемендәге премия лауреаты Хисмәт Юлдашев, Ш.Бабич исемендәге премия лауреаттары Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Зөлфиә Ханнанова, Лариса Абдуллина, шулай уҡ Салауат Әбүзәр йылы иҫтәлектәре менән уртаҡлашты, шиғырҙарын уҡыны.

Байрамда ҡатнашыусыларҙың оло төркөмө Шишмә районының Келәш ауылына барып ҡайтты. Келәштәр менән әҙәби осрашыу, Ҡыҙҙар тауына күтәрелеү, Мостай усағын тоҡандырыу ҙа һәммәһенең хәтеренә уйылды.

***

Яҙыусылар союзы ойошторолоуға 75 йыл тулыу айҡанлы Башҡорт әҙәбиәт көндәре Нефтекама ҡалаһында ла уҙҙы.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев етәкселегендәге делегация составында Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов, Хәсән Назар, Гөлфиә Юнысова, Лариса Абдуллина, Рәмил Йәнбәк бар ине. Бында уларға Фәрит Суфияров менән Эдуард Әғзәми ҡушылды. Ҡунаҡтар башта БДУ филиалы менән танышты, студенттар менән аралашты һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейын, китапхананы ҡараны.

Филармонияла уҙғарылған әҙәби кисәне ҡала администрацияһы башлығы О.А. Руденко асты. Әҙиптәрҙең сығыштары концерт номерҙары менән үрелеп барҙы. Яҙыусылар ҡала башлығына, БДУ-ның Нефтекама филиалы директоры О.К. Вәлитовҡа һ.б. автографлы китаптарын бүләк итте.

***

Башҡорт дәүләт педагогия университетының ҙур залында республика көнөнә арналған шиғриәт кисәһе уҙғарылды. Әҙәбиәт һөйөүселәрҙе тәүҙә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты, БР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев ҡотланы. Артабан Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары Абдулхаҡ Игебаев, Ирек Кинйәбулатов, Ҡәҙим Аралбай, Хәсән Назар, халыҡ шағиры Марат Кәримов, шулай уҡ Рәшит Шәкүр, Тамара Ғәниева, Риф Мифтахов, Дилә Булгакова, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Йомабикә Ильясова, Радик Хәкимйән, Мөхәммәт Закиров, Николай Грахов, Тамара Искәндәриә, Хисмәт Юлдашев, Салауат Әбүзәр, Лариса Абдуллина, Мөнир Ҡунафин һәм йәш авторҙар сығыш яһаны.

Кисәне шағирҙар Тәнзилә Дәүләтбирҙина менән Рәмил Йәнбәк алып барҙы.

***

М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте ойошторолоуға 90 йыл тулыуға арналған әҙәби-музыкаль кисә уҙҙы. Премьер-министр урынбаҫары Илдус Илешевтың республика етәкселеге исеменән ҡотлауынан һуң, нәшриәт директоры Зөфәр Тимербулатов, ведомстволар һәм йәмәғәтселек вәкилдәре, матбуғат органдары хеҙмәткәрҙәре тәбрик әйтеп, коллективҡа иҫтәлекле бүләктәрен тапшырҙы. «Китап»тың күп кенә хеҙмәткәрҙәренең өлгөлө эше Маҡтау грамоталары менән баһаланды.

***

Сентябрь айында Силәбе өлкәһенең Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәһе ағзалары Ҡоншаҡта сәфәрҙә булып ҡайтты. Уның эшендә секция һәм район берекмә етәкселәре, әҙәби консультанттар ҡатнашты. Әҙәбиәтте үҫтереүгә арналған саралар Ҡадир Даян исемендәге район китапханаһында уҙҙы.

Ҡунаҡсыл Ҡоншаҡ ере рухиәт илселәрен ихлас ҡаршыланы. Китапханаға уҡытыусылар, китапханасылар, һәүәҫкәр шағирҙар йыйылғайны. Силәбе өлкәһенең Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәһе ағзалары менән ижади осрашыу һәм күсмә ултырыш билдәләнгәйне.

Район хакимиәтендә әҙиптәрҙе социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫар Рәүеф Хужин ҡабул итте, ә китапханала ҡунаҡтарҙы райондың мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Рәмилә Байрамова, китапхана директоры Дамира Нәжметдинова ҡаршыланы.

Әҙиптәр менән осрашыу халыҡтың йәне булған йыр-моң менән башланды. Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә етәксеһе Ҡамса Мортазин өлкәлә әҙәбиәтте үҫтереү эштәре тураһында һөйләне, матбуғатҡа әүҙем яҙылыуға саҡырҙы. Шағирә Алевтина Вәлиева Мифтахетдин Аҡмулла, Ҡадир Даян, Кәтибә Кинйәбулатова шиғырҙарын, үҙенең әҫәрҙәрен уҡыны, Арғаяш районы әҙәби берекмәһе етәксеһе Айҙар Ишбирҙин ҡобайыр башҡарҙы. Татар секцияһы етәксеһе Луиза Закирйәнова хәҙерге татар әҙәбиәте торошо һәм секция эше менән таныштырҙы. Осрашыу аҙағында китапханаға яңы әҙәби китаптар бүләк ителде.

Берекмәнең күсмә ултырышы көн тәртибенә райондың һәүәҫкәр авторҙар ижадын тикшереү мәсьәләһе ҡуйылғайны. Венера Нуретдинова, Рим Рәхимов, Жанфиҙә Ваһапова, Нәфисә Шакирова, Мәғрифә Сирбаева кеүек район әҙәби түңәрәге ағзалары ҡатнашты. Уларҙың башланғыс ижады тикшерелде. Венера Нуретдинованың ижады ыңғай баһаланды. Районды үҙешмәкәр авторҙар ижадын үҫтереү маҡсатында берекмә ағзаларының уңышлы әҫәрҙәренән йыйынтыҡ тупларға, тигән ҡарар ҡабул ителде.

**Ҡотлайбыҙ!**

Күгәрсен районы Хоҙайбирҙин ауылында Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге республика журналистар премияһын тапшырыуҙа БР Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры И.Ғ. Илешев, БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ начальнигы Э.В. Юлдашев ҡатнашты.

Премия буйынса комиссия рәйесе И. Ғ. Илешев сараның абруйы йылдан-йыл күтәрелә барыуын билдәләне, БР Президенты һәм Хөкүмәте исеменән йыйылыусыларҙы оло байрам менән ҡотланы. Быйыл Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премияға Юрий Ергин, Флүрә Солтанова, Таһир Ишкинин лайыҡ булды.

***

Мәсетле районында яҙыусы һәм журналист, әҙәбиәт белгесе Ризван Хажиевтың 70 йәшенә арналған сараларҙа Өфөнән Заһир Исмәғилев исемендәге Сәнғәт академияһы ректоры, профессор Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов, БР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары, шағир Ҡәҙим Аралбай, «Китап» нәшриәтенән яҙыусы Ринат Камалов, «Ағиҙел» журналы редакцияһы хеҙмәткәре, яҙыусы Сабир Шәрипов ҡатнашты.

***

М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында күренекле яҙыусы, шағир, драматург һәм йәмәғәт эшмәкәре, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәзим Шафиҡовтың (1939 – 2009) тыуыуына 70 йыл тулыуға арналған хәтер һәм ҡәҙер кисәһе уҙғарылды. Унда Республика Хөкүмәте исеменән мәғариф министры Зиннәт Аллаяров, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе урынбаҫары Рафаэль Зиннуров, Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың комитет рәйесе, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, халыҡ шағиры Рауил Бикбаев сығыш яһаны.

Ғ. Шафиҡовтың ҡәләмдәш дуҫтары, шағирҙар Ирек Кинйәбулатов менән Георгий Кацерик иҫтәлектәр һөйләне, уға арналған шиғырҙарын уҡыны. Ауырғазы, Хәйбулла райондары вәкилдәренең сығышы ла яҙыусы ижадының һәр кемгә яҡынлығын раҫланы.

Республика театрҙары Ғ. Шафиҡовтың «Урал батыр», «Һәҙиә», «Ҡара юрға», «Сәсән йыры» пьесалары буйынса ҡуйылған спектаклдәрҙән өҙөктәр күрһәтте. Халыҡ артистары Гөлли Мөбәрәкова, Нурия Ирсаева, ҡурайсы Азат Биксурин, йырсы Алһыу Бәхтиева һәм башҡа сәнғәт оҫталарының сығышы тамашасылар күңеленә хуш килде. Халыҡ артистары Сара Буранбаева менән Илдар Ғүмәров кисәне тулҡынландырғыс һәм йәнле итеп алып барҙы.